

Тәлғәт Шаһманов

# ШӘҒӘЛЕ ШАҺМАН НӘҪЕЛЕ

63.5(2Рос-Баш)
Ш 17

Тәлғәт ШАҺМАНОВ

# ШӘҒӘЛЕ ШАҺМАН НӘҪЕЛЕ

Городская ЦБ
г. Кумертау

52349 - 19229 н/о

ЦБ

Күмертау - 2007 й.

ББК – 63.5(2Рос=Баш)
Ш – 16

Шаһманов Т. Ғ.
Шәғәле Шаһман нәҫеле.-Күмертау: ҡала нәшриәте, 2007, 264 бит, ил.

РФ һәм БР Журналистар союзы ағзаһы Тәлғәт Шаһмановтың фәнни-популяр характерҙағы был хеҙмәте, күп йыллыҡ ғилми эҙләнеүҙәренең асыҡ һөҙөмтәһе булараҡ, Тамъян ырыуы бейе һәм башҡорт кенәзе Шәғәле Шаһмандың, уның нәҫел-нәсәбенең тарихын өйрәнеүгә арнала. Автор уларҙың үткәндәге, бөгөнгө тормошон дөйөм халыҡ тарихы менән тығыҙ бәйләнештә ҡарарға ынтыла.

Китап тарих менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәғәйенләнә.

ISBN 978-5-901834-35-0

© Тәлғәт Шаһманов, 2007 г.



Шәғәле Шаһман нәҫеленән булыуым менән һәр саҡ ғорурланам һәм ғорурланасаҡмын. Балаларымды ла шундай рухта тәрбиәләргә ынтылам. Минең төп йәшәү маҡсатым - бынан 450 йыл элек Рәсәйгә үҙ ирке менән ингән ата-бабаларыбыҙҙың изге эшен яңы шарттарҙа яңыса һәм уңышлы дауам иттереү. Бигерәк тә, интеллигенция вәкиле булараҡ, республикабыҙ халыҡтары дуҫлығын нығытыуға үҙ өлөшөмдө индереү, уларға иминлек һәм дә күркәм тормош тәьмин итешеү.



# ИНЕШ

**Ағас тамыры ер үҙәге аша үтә,**
**Әҙәм тамыры ир үҙәге аша үтә.**
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*

Нәҫел – бер бабанан килә торған кешеләр быуыны. Төп баба - нәҫелдең башы. Нәҫел-ырыуҙың кемдән башланып, нисек тармаҡланып китеүен күрһәткән схема йә быуындар нәҫел ағасы - **шәжәрә** тип атала. Ул ғәҙәттә ағас һүрәтендә яҙылып, кешенең ата - бабаһы - ағастың олоно, яҡын туғандары - ботағы, туғандарының туғандары - һабаҡтары, япраҡтары формаһында тармаҡланып төҙөлгән була.

Халҡыбыҙҙың борон-борондан килгән һәр кем ете быуынын биш бармағы кеүек белергә тейеш тигән изге йолаһын XX быуатта, бигерәк тә, Советтар Союзы дәүләте осоронда, онотторорға тырыштылар. Тарихсы һәм филолог ғалимдар араһында шәжәрәләргә тарихи ҡульяҙма ҡомартҡы ғына итеп ҡарау өҫтөнлөк алып килде. Ә уның башҡорт халҡының тормошонда тотҡан урыны, әһәмиәте күҙ уңынан ситтә ҡалды, сөнки Октябрь түңкәрелешенән һуң халҡыбыҙ күрәләтә аҫабалыҡ хоҡуғынан мәхрүм ителде, етмәһә, тарихи, этногенетик тамырҙарыбыҙға балта сабыу маҡсатында, төрлө милләт вәкилдәренән боламыҡ яһап, ҡатнаш никахтарҙан торған ғаиләләрҙе шапыртып маҡтап, «совет халҡы» тигән урыҫ телле бер генә «милләт» барлыҡҡа килтереү идеяһы алға һөрөлдө. Бына шул сәбәптәр арҡаһында ата-бабаларҙан ҡалған мираҫҡа - шәжәрәләргә, тарихҡа битараф бер нисә манҡорт, мөртәт быуын күҙ алдыбыҙҙа үҫте. Туғандары күп булған кешене, ғәҙәттә, нәҫелнәсәпле кеше тиҙәр. Нәҫел-ырыуын ишәйтмәүсе, киреһенсә, тарҡатыусы, бөтөрөүсе бәндәләрҙе халҡыбыҙ борон-борондан *«нәҫел ҡороҡос»* тип әйтер булған. Күренекле ғалимыбыҙ Әкрәм Бейеш тә был хаҡта шулай борсолоп яҙҙы: *«Һәр кеше үҙенең ете быуынын, шунан*



*ары ауылының, халҡының тарихын белергә тейеш»,* - *тигән беҙҙең ата-бабалар. Ләкин хәҙерге заманда ата-бабаның ул алтын һүҙе онотолоп уҡ бөтмәһә лә, бик ныҡ көсөн юғалтҡан, изге йоланы тотҡан кеше әҙәйгән, хатта ҡартатаһының атаһын да белмәгән, белергә теләмәгән кеше күбәйгән. Ни өсөн тигәндә, совет дәүерендә кешенең аңын тарҡатыуға, нәҫел-нәсәбен онотторауға, ваҡ милләттәрҙе таратып, төрлөһөн аралаштырып, милли тойғоһон һүндереүгә, тотош урыҫлаштырыуға күп көс һалдылар, атаһы улын, инәһе ҡыҙын белмәгән донъя ҡорҙолар. Шул донъя буталышында үҙ телен кәм күргән, үҙ милләтен танымаған манҡорттар үҫеп сыҡты.*

*Нәҫелеңде белеү ҡыҙыҡ өсөн түгел, үҙ урыныңды табыу өсөн кәрәк. Тәрән тамырҙарын белгән кеше генә үҙенең өҙөлмәҫ туғанлыҡ ептәре менән милләтенә бәйле икәнен аңлап, үҙ ереңдә, үҙ илеңдә ныҡ баҫып тора. Кешене сәләмәт рухлы, бай күңелле иткән милли тойғо шунан башлана»* (1,3)*.

XX быуат аҙағында Советтар Союзы дәүләте юҡҡа сыҡҡас, һәм һуңғы бер нисә тиҫтә йылда милләтебеҙҙең үҙ аңы үҫеп, яңы кимәлгә күтәрелгәс, гүйә, ғәфләт йоҡоһонан уянып, тарихи тамырҙары, нәҫел-нәсәбе, шәжәрәһе, ҡайһы ҡәбилә, ырыу, ара (аймаҡ) вәкиле булыуы менән ҡыҙыҡһына башланы. Шуларға бәйле шәжәрә бөгөнгө тормошобоҙға яңынан әйләнеп ҡайта, үҙенсәлекле яңырыу осоро кисерә. Күп кенә тарихсылар, тыуған яҡты өйрәнеүселәр уларҙы, ғилми күҙлектән өйрәнеү менән генә сикләнеп ҡалмайынса, яңыртып төҙөп, милләттәштәренә кире ҡайтарып биреү хәстәрлеген дә күрә.

* (1,3) Йәйә эсендәге һандарҙың тәүгеһе китаптың артында бирелгән әҙәбиәт, архив документтары исемлегендәге сығанаҡтың рәт һанын, өтөрҙән һуңғыһы кәрәкле тексттың рәт һанын (номерын) йә битен күрһәтә.

Без ҙә генеалогиябыҙ менән ҡыҙыҡһына, күп кенә материалдар туплап, уларҙы ентекле өйрәнә, анализлай башланыҡ, һәм, шунын һөҙөмтәһе булараҡ, әлеге фәнни-популяр хеҙмәт донъяға тыуҙы. Унда Тамъян ҡәбиләһе башҡорттарының айырылғыһыҙ бер өлөшөн тәшкил итеүсе XVI быуатта йәшәгән ырыу башлығы, бей һәм кенәз Шәғәле Шаһман, унын нәҫел-нәсәбе тарихы тураһында бәйән ителә. Ул башҡорт халҡынын дөйөм тарихы менән тығыҙ бәйләнештә ҡарала.



# I бүлек. ШӘҒӘЛЕ ШАҺМАН НӘҪЕЛЕ

## 1. ШӘҒӘЛЕ ШАҺМАН НӘҪЕЛЕНӘ ҠАҒЫЛЫШЛЫ СЫҒАНАҠТАР ҺӘМ ИСТОРИОГРАФИЯ

Шәғәле Шаһман нәҫеленә ҡағылышлы яҙма сығанаҡтарҙы тел ягынан иҫке төрки, башҡорт һәм урыҫ телдәрендәгегә бүлеп ҡарарға мөмкин. Шуларҙан бигерәк тә һуңғылары, урыҫ телендәгеләре, ҡиммәтле сығанаҡ булып тора. Шундай төрҙәге документтарҙың ҡайһы берҙәре Өфө, Ырымбур, Мәскәү, Санкт-Петербург дәүләт архивтарында һаҡлана. Уларҙа беҙ өйрәнгән мәсьәләгә ҡарата төрлө йәһәттән, мәҫәлән, Шәғәле Шаһман нәҫеле генеалогияһына, унын күренекле вәкилдәренең тормошо һәм эшмәкәрлегенә, хатта айырым шәхестәрҙең башҡорт халҡы тарихында тотҡан урынына, шулай уҡ был нәҫел кешеләре нигеҙләгән ауылдар тарихына ҡағылышлы мәғлүмәттәрҙе күпләп осрата алабыҙ.

Сығанаҡтарға күсер алдынан тәүҙә был тарихи шәхестең исем-атына бәйле мәсьәләгә асыҡлыҡ индереп китеүҙе урынлылыр, тип иҫәпләйбеҙ.

Тарихсы, этнограф ғалимдар уны, башлыса, «Шағәле Шаҡман», «Шәғәли Шаҡман» тип, ә «Йәшлек» гәзите «Шәғәле Шаһман» тип яҙа.

**Шаһман** фарсы телендә «шаһ кешеһе, шаһҡа яҡын кеше» тигәнде анлата. *Шаҡман* иһә - шул уҡ һүҙҙең диалекталь варианты йәғни төп (тулы) исемде ҡулланышта үҙгәртеп ҡулланыуҙың асыҡ бер сағылышы. Беҙ башҡорт кенәзенең төп йәғни тулы исемен ҡулланыуҙы хуп күрҙек. Ә ҡайһы бер фәнни хеҙмәт, мәҡәлә, халыҡ ижады әҫәрҙәренән өҙөктәр килтергәндә, уларға һылтанмалар эшләгәндә был тарихи шәхестең исем-аты диалекталь вариантта бирелгәнсә йәғни оригиналдағыса ҡалдырылды.

Сығанаҡтарға килгәндә, иң беренсе сиратта беҙҙе иҫке төрки телендә яҙылған шәжәрәләр ҡыҙыҡһындыра, сөнки уларһыҙ Шәғәле Шаһман нәҫеле тураһында тө-

шәнсә-мәғлүмәттәр туплау уғата ла ҡыйын булыр ине. Бөгөн был нәҫелгә ҡағылышлы тиҫтәнән ашыу шәжәрә билдәле. Шуларҙың дүртәүһе академик Раил Ғүмәр улы Кузеев төҙөп, баҫтырып сығарған «Башкирские шежере» (Уфа, 1960 г.) тигән китапта донъя күргән. Улар түбәндәгеләр: 1. **«Сытырман һәм Моҡас ауылдары башҡорттары шәжәрәһе»**; 2. **«Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән һәм Тамъян ҡәбиләләре шәжәрәһе»** (1-се вариант); 3. **«Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән һәм Тамъян ҡәбиләләре шәжәрәһе»** (2-се вариант); 4. **«Тамъян ҡәбиләһе шәжәрәһе»** (2; 36-49, 71-80, 145-154).

Был ҡулъяҙма ҡомартҡыларҙың тәүгеһе Шәғәле Шаһман нәҫеленең 4-се быуыны, тыуаһы, Моҡас Теләүкәевтың улдары тураһындағы мәғлүмәттәрҙе асыҡларға ярҙам итешә.

Икенсе, өсөнсө шәжәрәләр башҡорт ҡәбиләләре етәкселәренең Рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыу сәбәптәрен, шуға бәйле ваҡиғаларҙы, уларҙың халҡыбыҙ яҙмышына яһаған ыңғай йоғонтоһон аңларға, шулай уҡ XVI быуат уртаһындағы ырыуҙарҙың тормошон тойомларға мөмкинлек бирә.

Дүртенсе ҡулъяҙма, «Тамъян ҡәбиләһе шәжәрәһе» тип аталһа ла, башлыса, Шәғәле Шаһман нәҫеленең Бураш, Буралы исемле улдарынан таралған айырым быуындарын сағылдыра. Тик йыйынтыҡты төҙөүсе ғалим Р. Ғ. Кузеев ҡайһы бер һуңғы быуындарҙағы исемдәрҙе уларҙың ул, ейән, бүләләренә, йәғни вариҫтарына совет етәкселәре яғынан нахаҡ яла яғырға юл ҡуймау маҡсатында төшөрөп ҡалдырған. Был шәжәрә тәү башлап 1745 йылда төҙөлгән, һәм, «шаһиналиҡ дәфтәренә» беркетелеп, 1798 йылдың 15 июнендә уны Ноғай юлының Тамъян олоҫо башҡорттары Өфө өйәҙенең архивынан эҙләп алынған «выданной указ» менән иҫке грамота нигеҙендә 1820 йылдың 22 мартында яңыртып яҙып ҡалдырған.

2002 йылда академик Р. Ғ. Кузеев етәкселегендә ғалимдар Р. М. Булгаков, М. Х. Нәҙерғолов төҙөп, баҫты-



рып сығарған башҡорт шәжәрәләренең яңы йыйынтығында **«Тамъян ҡәбиләһе шәжәрәһе»**нең тулы килеш донъя күреүе беҙҙең тарафтан өйрәнелеүсе мәсьәләне күҙ алдына тулыраҡ баҫтырырға мөмкинлек бирә (3, 121-128).

Был баҫмаға ингән **«Стәрлетамаҡ өйәҙенең 9-сы кантонындағы Тамъян олоҫо башҡорттары менән Боғороҫлан өйәҙенең Мөъмин ауылы башҡорттарының ҡанҡәрҙәшлеге тураһында Дәүләтхужа улы Әлимғужа тарафынан яҙылған, имам Ғабдулҡадирҙың улы Ғабдулхаҡ тарафынан күсереп алынған хат»** тигән ҡулъяҙма ҡомартҡы Шәғәле Шаһман нәҫеленең быға саҡлы билдәле булмаған тармаҡтарын аса (3, 129-134). Ул шуның менән ифрат ҡиммәтле лә.

Юғарыла телгә алынған дүрт шәжәрәнән тыш, тарих фәндәре докторы профессор Әнүәр Закир улы Әсфәндиәров тарафынан Көйөргәҙе районы Йомағужа ауылында табылып, тәү тапҡыр ғилми ҡулланылышҡа индерелгән тағы бер шәжәрә бар. Ул - *Усман Мөхәмәтғариф улы Әбүбәкеровтың* 1929 йылда яҙған Йомағужа ауылы тарихы һәм шуға бәйле яңыртып төҙөгән Шәғәле Шаһман нәҫеле шәжәрәһе (4, 19-20). Унан беҙ был тарихи шәхестең 6 быуыны (*Таман бей - Балун бей - Тамъян бей - Уразай бей - Мотай бей - Ҡырай бей - Шәғәле Шаһман*) һәм, **Бураш** менән **Буралынан** тыш, **Сеүә** исемле тағы ла бер улы булғанлығын, унан таралыусы нәҫел араһын белә алабыҙ. У. Әбүбәкеров яңыртып төҙөгән шәжәрә быға тиклем билдәле булған Тамъян ырыуы шәжәрәләрендәге Шәғәле Шаһман нәҫеленең күп кенә исемдәр, быуындар теҙмәһен бер-береһенә аныҡыраҡ, дөрөҫөрәк тоташтырырға, уларҙы XIX быуаттағы рәүиз ҡағыҙҙары менән сағыштырып ҡарарға ярҙам итә. Усман Әбүбәкеров был шәжәрәне төҙөгәндә Күлләр ауылы муллаһы Шафиҡтан өс вариантта күсереп алған Шәғәле Шаһман нәҫеле шәжәрәләрен дә ҡулланған.

Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының шәжәрәләр фондында һаҡланыусы **«Шәғәле Шаһман тоҡомо шәжәрәһе»** бигерәк тә ҙур әһәмиәткә эйә. (Беҙгә был шәжәрәнең күсермәһен журналист һәм яҙыусы Фәнис Фәтих улы Янышев бирҙе.) Уны ғалим-диалектолог Таһир Ғәлләм улы Байышев Миәкә районы Ҡолтай-Ҡаран ауылында йәшәүсе *Әсфәндиәр Сәғҙи улы Янышевтың* шәхси архивынан күсереп алған. Был шәжәрә Шәғәле Шаһмандың ике улынан: **Бураш** менән **Буралынан** таралған ир-ат йыныһы быуындарынан тора.

«Шәжәрәне төҙөүсе йәки беҙҙең ҡулдағы нөсхәгә күсереп яҙыусы кеше аҙ грамоталы кеше булған, элекке ғәрәп алфавиты орфографияһын насар белгән, - тип яҙа Таһир Ғәлләм улы баш һүҙендә. - Шунын өҫтөнә ул кеше тарафынан төп нөсхәләге ҡайһы бер исемдәр танымаҫлыҡ рәүештә боҙоп яҙылған.

Беҙ тейешле урында (аңламаған урында) байтаҡ исемдәрҙе дөрөҫләп яҙҙыҡ. Таный, төшөнә алмаған исемдәрҙе оригиналдағыса ҡалдырҙыҡ, һәр хәлдә, мөмкин тиклем нөсхәнән ситкә сыҡманыҡ: аңлашылғанын төҙәттек, аңлашылмағанын шул килеш ҡалдырҙыҡ. Ғәрәп алфавиты орфографияһын хәҙерге алфавит орфографияһына мөмкин тиклем дөрөҫ күсерергә тырыштыҡ.

Шәжәрәнен бер яҡ ситендәге дауамы юғалған, тимәк, һуңғы бер нисә быуындың исемдәре шәжәрәлә юҡ. Шулай уҡ, ҡайһы бер кешенең нисә улы булғанлығы оригиналда һыҙыҡ менән күрһәтелгәйне. Ундай быуындарға беҙ буш шаҡмаҡтар ҡуйып киттек. Хәҙерге йәш быуындар ул шаҡмаҡтарҙы тултырырға һәм артабан дауам иттерергә тейеш булыр.»

Шәғәле Шаһман нәҫеле тарихын өйрәнеү барышында беҙгә шул нәҫел вәкилдәренең ҡулдарында йәғни шәхси архивтарында һаҡланған, әммә быға саҡлы киң йәмәғәтселеккә билдәле булмаған яңы шәжәрәләр менән танышып, уларҙың күсермәләрен алырға яҙҙы. Бигерәк тә, **Әхтәм Тимерғәле улы Хисаметдинов** (1932 йылғы) менән **Сәғитйән Зәйнәғәбтдин улы Ғәйнуллинда** (1940 йылғы) Мәләүез районының Оло Моҡас, **Тимербай Тимербулат улы Шәйәхмәтовта** (1947 йылғы) Иҫке Муса, **Ғәтиәт Солтанмәзит улы Ҡаҙаҡбаев** (1895 йылғы), **Ғәфүр Һиҙиәт улы Ҡаҙаҡбаев** (1932 йылғы) һәм **Мирғәлим Мирхәйҙәр улы Ишмөхәмәтовта** (1928 йылғы) Күйөргәҙе районының Түкән, **Ғәбделхаҡ Фәтҡулла улы Әхтәмовта** (1926 йылғы) Илкәнәй, журналист һәм яҙыусы **Фәнис Фәтих улы Янышевта** (1950 йылғы) Миәкә районының Тамъян-Таймаҫ, Ерекле-Күл, Ҡолтай-Ҡаран, журналист һәм яҙыусы **Гөлшат Фәйзелғаян ҡыҙы Әхмәткужинала** (*Гөлгизәр Фәйзи*) (1951 йылғы) Әбйәлил районының Юлдаш ауылдарында йәшәгән һәм йәшәүсе Шәғәле Шаһман нәҫеленә ҡағылышлы һаҡланған ҡулъяҙма шәжәрәләр ғайәт ҙур әһәмиәткә эйә.

Бөтә был шәжәрәләр ҙә автор тарафынан сағыштырып өйрәнелеп, тулыландырылып, төҙәтелеп, информаторҙарҙан яҙып алынған һуңғы 4-5, 5-6, 6-7 быуындар өҫтәлеп, Шәғәле Шаһман нәҫеле вәкилдәре нигеҙләгән ауылдар буйынса ҡайтанан яңыртып төҙәлдә. Улар дүрткелдәр эсенә кеше исемдәре яҙылған схемалар рәүешендә түгел, ә, Европа халыҡтары тәжрибәһен иҫәпкә алып, бағаналап бирелде. Беренсе бағаналағы һан шәжәрәләге кеше исемдәренең быуындар буйынса тәртип һанын белдерһә, икенсе бағаналағы һан унын атаһынын исеменә бәйле һанды аңлата. Өсөнсө бағаналағы кеше исемдәре тәүге бағаналағы, дүтенсе бағаналағы кеше исемдәре һәм бишенсе бағаналағы туғанлыҡ термины (*улы*) икенсе бағаналағы һандарға тап килә. Быуындар рим цифрҙары һәм *«дәрәжә»* тигән һүҙ менән айырып бирелә. Мәҫәлән:

1 Таман бей

*I дәрәжә*

2:1 Балун бей

*II дәрәжә*

3:2 Тамъян бей.

һеҙ шәжәрәләр менән әлеге хеҙмәттең аҙағында бирелеүсе ҡушымталарҙан ентекле таныша алаһығыҙ. Шулай ҙа БР Үҙәк дәүләт архивындағы 1816, 1834, 1859, 1917 йылдарҙағы рәүиз ҡағыҙҙары менән танышыу, эшләү өсөн юл ябыҡ булыу сәбәпле, беҙҙең тарафтан төҙөлгәншәжәрәләр камил, улар юғары кимәлдә төҙөлгән, тип әйтеп булмай. Ҡайһы бер исемдәрҙең төрлө сәбәптәр арҡаһында шәжәрәләргә инмәй ҡалыуы ла ихтимал. Ундай осраҡта китаптың авторына был турала хәбәр итергә йә яҙып бирергә кәрәк. Шулай уҡ яңы тыуған бала-ларҙың исем-атын да авторға даими рәүештә еткереп тороуҙы онотторға ярамай. Ҡыҫҡаһы, был йәһәттән Шәғәле Шаһман нәҫеленә ҡараған вәкилдәр менән берлектә киләсәктә күп эштәр башҡараһы бар. Шуға ҡарамаҫтан әлеге китапта тәҡдим ителеүсе шәжәрәләр яңы социаль-ижтимағи шарттарҙа өр-яңы функция башҡарыуға, беҙҙең рухи тормошобоҙҙа ыңғай роль уйнауға һәләтле, тип шикләнмәй әйтә алабыҙ.

Шәжәрәләрҙән тыш Шәғәле Шаһман нәҫеленә бәйләнешле күп кенә фольклор материалдары ла һаҡланған.

Был нәҫел вәкилдәре хаҡындағы төрлө һыҡтау, легенда-риүәйәттәр фольклорсылар, тыуған яҡты өйрәнеүселәр тарафынан төрлө ваҡытта төрлө информаторҙарҙан яҙып алынып, күп томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» серияларының 1-се, 2-се баҫмаларында, шулай уҡ матбуғат баҫмалары биттәрендә донъя күргән. Әлеге хеҙмәттә автор уларҙы урынлы һәм ентекле файҙаланырға тырышты.

Шәғәле Шаһман кенәз хаҡындағы тәүге төплө һүҙҙе әйтеүсе филология фәндәре кандидаты *Мөхтәр Мофазал улы Сәғитов* (1933-1986) булды. Уның **«Шағәле Шаҡман иләндә»** тигән ҡулъяҙмаһы бөгөн дә актуаль булып ҡала (5, 71-78). Фольклорсы-ғалим беҙгә Тамъян ырыуы башлығының ҡайҙа ерләнгәнлеген хәбәр итә, уның биографияһына, шәхесенә ҡағылышлы информа-



торҙарҙан яҙып алынған байтаҡ ҡына мәғлүмәттәрҙе еткерә, шуларға бәйле үҙ уй-фекерҙәре менән дә уртаҡлаша.

Филология фәндәре докторы *Рәшит Закир улы Шәкуров* **«Тарих һөйләй ил ҡарттары»** тигән мәҡәләһендә, Миәкә районы Тамъян-Таймаҫ ауылы аҡһаҡалдары менән булған әңгәмәһенән сығып, шул ауылда бөгөн дә йәшәүсе Шәғәле Шаһман нәҫеленең бер тармағы хаҡында мауыҡтырғыс итеп яҙа, информаторҙар ауыҙынан ишеткән мәғлүмәттәрҙе үрҙә телгә алынған «Тамъян ҡәбиләһе шәжәрәһе»ндәге быуындар теҙмәһе менән йәнәшә ҡуйып, сағыштырып ҡарай (6, 364-372). Ғалимдың был мәҡәләһе Шәғәле Шаһман нәҫеле генеалогияһын ғилми яҡтан асыҡлау, өйрәнеүҙәге тәүге аҙымдарҙың береһе булды.

Академик *Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов* Шәғәле Шаһман шәхесенә һәм уның нәҫеленә ҡағылышлы фольклор материалдары туплауҙа, уларҙы баҫтырып сығарыуҙа ҙур эш башҡарҙы. Уның 1985 йылғы боронғоно өйрәнеү буйынса экспедицияла Белорет районы Ҡаһарман ауылында Ҡ. Ғ. Ғиниәтуллиндан **«Тамъян ырыуы»** легендаһын яҙып алыуы, аҙаҡ был ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыһының күп томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» серияһының икенсе баҫмаһында донъя күреүе – беҙҙең тарафтан өйрәнелеүсе темаға туранан-тура ҡағылышлы булыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә (7, 121). Ғалимдың Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ҡулъяҙмалар һәм боронғо баҫма китаптар фондындағы фольклор һәм археографик экспедиция материалдарынан аралап алып *(«Ҡиссалар. Шиғырҙар. Фольклор яҙмалары» тигән туплама, шифры: I-а 113)* «Ватандаш» журналында баҫтырып сығарған **«Шәғәле Шаҡманға һыҡтау»** халыҡ ауыҙ-тел ижады был тарихи шәхестең образын күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итешә (8, 164). Ғайса Хөсәйеновтың **«Башҡорт халҡының рухи донъяһы»** китабына ингән «Башҡорт бейҙәре һәм әмирҙәре», «Башҡорт абыҙҙары

һәм батырҙары» (9, 42-68), Башҡортостандың үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылыуының 450 йыллығына бәйле матбуғат баҫмаларында донъя күргән «Иҙеүкәй әмир» (10, 42-63), «Илсе бейҙәр» (11, 131-137) тигән мәҡәләләре XV – XVI быуаттарҙағы Башҡортостандың сәйәси, социаль-иҡтисади хәл-торошо тураһында күп мәғлүмәттәр бирә.

Ғалимдың Шәғәле Шаһмандың 9-сы быуын вариҫы, XVIII быуаттағы иң билдәле башҡорт яуҙарының береһен етәкләгән Аҡай Күсемов хаҡындағы **«Аҡай яуы»** тарихи хикәйәтен табып, уға айырым мәҡәлә бағышлап, «Ватандаш» журналында баҫтырып сығарыуы ла оло әһәмиәткә эйә (12, 62-73). Был тарихи хикәйәттең йөкмәткеһенә, уға бәйле тарихи ваҡиғаларға икенсе бер күренекле әҙибебеҙ *Йыһат Солтанов* та **«Ауылым. Ырыуым. Шәжәрәм»** тигән тәүәрихында ентекле туҡтала (13, 149-161). Унда Шәғәле Шаһман нәҫеленән, Аҡай Күсемовтан тыш, тағы ла бер нисә исемде осратабыҙ.

Башҡортостан һәм башҡорт халыҡ тарихына бәйле историографияла ла Шәғәле Шаһман нәҫеленә ҡағылышлы факт-мәғлүмәттәр етерлек. Улар күп йәһәттән шәжәрә һәм фольклор материалдары менән тығыҙ үрелеп, бер-береһен тулыландырып килә. Башҡорт тарихсыларынан был темаға туранан-тура бәйле йә башҡа мәсьәләләрҙе ғилми яҡтан яҡтыртҡанда уларға ҡағылышлы бик күп материал-мәғлүмәттәрҙе тарих фәндәре докторы профессор *Әнүәр Закир улы Әсфәндиәровтың* **«Олатайҙарҙың бар тарихы»** (Өфө, «Китап», 1997 й.), **«Башкирские тарханы»** (Уфа, «Китап», 2006 г.), **«История башкирских сел и деревень. Книга первая.»** (Уфа, 1997 г.) тигән ғилми хеҙмәттәрендә осрата алабыҙ. Тарих фәндәре докторы *Әбүбәкер Нуриан улы Усмановтың* **«Добровольное присоединение Башкирии к Русскому государству»** (Уфа, 1982 г.), тарих фәндәре докторы профессор *Ирек Ғайса улы Аҡмановтың* «XVII – XVIII быуат башында башҡорт күтәрелештәре» (Өфө, «Китап», 1998 й.) исемле монографиялары ла Шәғәле



Шаһман нәҫеле тарихын өйрәнеүҙә ныҡлы ғилми таяныс булып хеҙмәт итә. Бынан тыш Ирек Ғайса улының **«Ҡазан юлы башҡорттарынан XVII-XVIII быуаттарҙағы ихтилалдарҙың юлбашсылары»** тигән мәҡәләһе Шәғәле Шаһман нәҫеленең бер тармағынан сыҡҡан XVII-XVIII быуаттарҙағы башҡорт ихтилалдары етәкселәренең (*Шәғәле Шаһман - Буралы - Туҡмайрыҡ - Аҡһары - Жилкәй - Шыугәрәй - Бикшауай - Туләкәй - Күсем - Аҡай - Абдулла*) тормошон һәм эшмәкәрлеген тарихи документтар ерлегендә төплө лә, нигеҙле лә яҡтыртыуы менән диҡҡәтте тарта.

Тамъян ырыуына, Шәғәле Шаһман нәҫеленә ҡағылышлы ҡайһы бер ҡиммәтле мәғлүмәттәрҙе бөйөк башҡорт ғалимы Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың **«Башҡорттарҙың тарихы»** (Өфө, «Китап», 1994 й.), тарих фәндәре докторы Рим Зәйнәғәбитдин улы Янғужиндың **«Башҡорт ҡәбиләләре тарихынан»** (Өфө, 1995 й.), филология фәндәре докторы профессор Азат Әхмәҙулла улы Камалов менән Фирүзә Үлмәҫ ҡыҙы Камалованың **«Атайсал»** (Өфө, «Китап», 2001 й.) тигән ғилми китаптарынан табырға мөмкин.

Шәғәле Шаһман нәҫеле тарихын ғилми күҙлектән тикшереүгә тыуған яҡ тарихын өйрәнеүселәр ҙә үҙ өлөшөн индермәй ҡалманы. Был йәһәттән бигерәк тә «Көнгәк» гәзитенең баш мөхәррире Сәйфулла Һаҙый улы Әмировтың (1956 йылғы) **«Йомағужам - минең ғорурлығым»** (Мәләүез - 2004 й.) исемле китабы, **«Тыуған яҡ тарихына ҡарата»** («Шоңҡар» журналы, 1997 й., 5-се һан, 31-35-се биттәр) тигән күләмле мәҡәләһе был йәһәттән уңышлы булды.

Миәкә районы Тамъян-Таймаҫ урта мәктәбенең тарих уҡытыусыһы Салауат Вәлиуллин да, Әсфәндиәр Сәғҙи улы Янышев төҙөгән шәжәрәгә яңы быуындарҙы өҫтәп, уны яңыртып төҙөнө һәм Шәғәле Шаһман нәҫеле йәшәгән ауылдың тарихы хаҡында район гәзитендә шулай уҡ ҙур күләмле мәҡәлә яҙып баҫтырҙы. Мөғәллимдең был фиҙакәр эшмәкәрлеген Башҡортостандың ха-

лыҡ шағиры Рауил Бикбаев юғары баһаланы. «Йөҙҙән ашыу уҡыусыһы булған Тамъян-Таймаҫ урта мәктәбе районда иң яҡшыларҙан һанала. Уҡыу бүлмәләре яҡты, улар һәйбәт йыһазландырылған. Үҙҙәре әйтеүенсә, бында Шәғәле Шаһмандың вариҫтары йәшәй. Мәктәп менән танышып йөрөгәндә бында ҡуйылған бик бай тармаҡлы, бик боронғо шәжәрәләргә иғтибар иттем. Ун алты-ун ете быуынға еткәндәре бар, байтаҡтары Шәғәле Шаһман олаталарына барып тоташа. Ырыу сылбырын ошондай тәрән тарих ҡатламдарынан барлай алғандарға мин һәр ваҡыт оло ихтирам менән ҡарайым. Үҙемдең ете быуынымды хәтеремдә йөрөтә алыуым, сйәндәремә ялғанып, шәжәрәмдең инде унынсы быуынға етеүе минең өсөн ҙур ҡыуаныс. Ә бына күңелендә ун ете быуын атай-олатайҙарҙың исем-шәрифтәрен хөрмәтләп һаҡлаған кешеләргә нисек һоҡланмайһың!» - тип яҙҙы ул (14, «Башҡортостан», 2003 йыл, 28-се һан).

Башҡортостандың Рәсәй дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуының 450 йыллығын билдәләү сиктәрендә матбуғат баҫмаларында беҙҙе ҡыҙыҡһындырған мәсьәләгә туранан-тура йә ситләтеп ҡағылышлы байтаҡ мәҡәләләр донъя күрҙе. Шуларҙан бигерәк тә йәш журналист Рәмилә Мусинаның «Йәшлек» гәзитендә баҫылған **«Байрамға әҙерлек баш ҡала менән генә сикләнмәһен ине йәки данлы Шәғәле Шаһман бей ерләнгән ауыл ниндәй хәлдә?»** тигән мәҡәләһе көнүҙәк мәсьәлә - Тамъян ырыуы башлығы ерләнгән ауылдың социаль-иҡтисади хәл-торошон күтәреүе менән әһәмиәтле (15, 2006 йыл, 4-се һан).

Яҙыусы Сабир Шәриповтың «Ағиҙел» журналында донъя күргән **«Аҡ шоңҡарҙай ир инең...»** тигән мәҡәләһе, үҙе әйтмешләй, «халыҡ хәтеренә һәм матбуғат һүҙенә таянып» Шәғәле Шаһман уҙамандың булмышын һәм уның нәҫеленең тарихын өйрәнеүгә ынғай булышлыҡ итерлек яңы мәғлүмәттәргә бай булыуы менән иғтибарҙы тарта. Автор унда юғарыла һүҙ алып барылған



фольклорсы-ғалим М. М. Сәғитовтың «Шағәле Шаҡман илендә» тигән мәҡәләһе менән бер рәттән, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, өлкән журналист, атаҡлы нәшер-мөхәррир Ғәли Ишбулатовтың (1926-1986) «Шағәле Шаҡман тоҡомдары» тигән мәҡәләһен дә килтерә (16, 138-152).

Яҙыусыларҙан Гөлшат Әхмәтҡужинаның **«Ил ағаларының аҡ батшаға сәфәре»** («Башҡортостан ҡыҙы» журналы, 2006 йыл, 6-сы һан, 6-7-се биттәр; 7-се һан, 6-7-се биттәр), Әнисә Янбаеваның **«По следам великого тархана»** («Республика Башкортостан», 2006 йыл, 151-се һан) тигән мәҡәләләрендә Шәғәле Шаһман нәҫеленә ҡағылышлы яңы мәғлүмәттәр менән таныша алабыҙ.

Ҡайһы бер һәүәҫкәр тарихсылар, журналистар тарафынан был данлыҡлы нәҫелдең тарихын өйрәнеүҙә яңылышлыҡтарға ла юл ҡуйылды. Бигерәк тә, матбуғат биттәрендә Баһаүетдин Фәхретдин улы Зәйнетдиновтың **«Йүрүҙән һәм Әй буйҙары - батырҙар төйәге»** («Башҡортостан» гәзите, 1996 йыл, 151-152, 156-158-се һандар), «Салауат Юлаев - Шәғәле Шаһмандың ун икенсе быуыны» («Йәшлек» гәзите, 2004 й., 72-се һан) тигән мәҡәләләре ҡыҙыу бәхәстәр уятты.

Б. Зәйнетдинов версияһы буйынса башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаев Шәғәле Шаһмандың ун икенсе быуыны булып сыға. Ул быны тарихи документтарҙан бигерәк риүәйәттәргә таянып нигеҙләргә тырыша. «Аҡай батыр Күсемов төньяҡ һәм көньяҡ, көнсығыш һәм көнбайыш башҡорттарын берләштереү өсөн ғүмер буйына көрәшә. Уларҙы берләштереп, ул башҡорттарҙы колонизаторҙарға ҡаршы ҡеүәтле көскә әүерелдерергә тырышҡан. Бына ҡайҙа уның бөйөклөгө! Бына ошо бөйөк шәхес хаҡында мин тарихта билдәле булмаған материалдарҙы таптым. Шулай әйтергә мөмкин: башҡорттар Салауат Юлаевтың әсәһе буйынса олатаһы кем икәнлеген белмәйҙәр булып сыға. Шуны әйтергә теләйем: был мәғлүмәттәр архив материалдарынан

Городская ЦБ
г. Кумертау

алынмаған, ә халыҡ хәтерендә һаҡланған» (17, 151-се һан).

Б. Зәйнетдиновтың был версияһын яҡташтары С. Мәрйенголова менән Р. Вахитов кире ҡағып сыҡты.

«Беҙ Б. Зәйнетдиновты яҡшы беләбеҙ, ихтирамға лайыҡ кеше, райондың патриоты, шиғырҙарын, йырҙарын ишеткәнебеҙ бар. Ләкин ул тарихсы ғалимдарҙың китаптарын, әҫәрҙәрен уҡымайынса, архив материалдарын уҡымайынса тороп, ауылдаштар араһында яңылыш фекер тарата, үҙе лә хаталана», - тип яҙа С. Мәрйенғолова «Тарихи дөрөҫлөккә нигеҙләнәйек» тигән мәҡәләһендә. Автор артабан шундай һығымта яһай: «Түләкәй, Күсем, Аҡай Күсемовтар - Нуғай даруғаһы феодалдары - Ҡаҙан даруғаһындағы ерҙәре өсөн көрәшкән, улар беҙҙең Себер юлыныҡы (тимәк, Мәсетле районыныҡы) түгел» (18, 217-се һан).

Радик Вахитовтың «Иләк йондоҙ ни әйтер?» («Ағиҙел» журналы, 2000 й., 6-сы һан, 110-122-се биттәр) исемле мәҡәләһендәге түбәндәге фекерҙәре лә С. Мәрйенғолованыҡына ауаздаш: «Үкенескә ҡаршы, ун һигеҙенсе быуатта баш күтәргән башҡорттар араһында тарҡау отрядтарҙы берләштерерлек көскә эйә булған бындай шәхес табылмаған. Башҡорттарҙың ул ваҡыттағы милли-азатлыҡ көрәшендә еңелеүҙәренең төп сәбәбе шуға ҡайтып ҡалалыр. Аҡай Күсемов та дөйөм юлбашсы ролен үтәй алмаған. Тарихи документтарға ҡараһаң, уның яу юлын күрһәтеүе ҡыйын түгел. Ул етәкселек иткән отрядтар Башҡортостандың бәләкәй генә бер өлөшөндә хәрәкәт иткән. Мәҫәлән, Аҡай Күсемовтың Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышындағы Әй һәм Йүрүҙән буйҙарында, шулай уҡ тотош алғанда, Себер даруғаһындағы хәрәкәттәре бер генә тапҡыр ҙа билдәләп кителмәгән. Әйе, баш күтәргән башҡорттарҙың билдәле юлбашсыларының береһе булған ул. Бары тик шул ғына. Б. Зәйнетдиновтың фаразы бөтөнләй буш һүҙ. Шул уҡ ваҡытта, Аҡай Күсемовты Әй буйында йәшәгән, ошо ерҙә тыуған, тип әйтеү дөрөҫ түгел. Халыҡ хәтеренә таяныуы яғына кил-



гәндә инде, Б. Зәйнетдиновҡа түбәндәгеләрҙе әйтергә мөмкин.

Беренсенән, халыҡ риүәйәттәре конкрет кешеләр тарафынан тапшырыла һәм, риүәйәткә нигеҙләнеү менән бергә, мәғлүмәт биреүсенең исемен күрһәтеү мотлаҡ. Юғиһә, төрлө уйҙырмалар булыуы ихтимал. Б. Зәйнетдинов ошо ваҡиғаларҙы хәбәр иткән ҡатын үҙенең исемен атамауҙы һораған, тип яҙа. Риүәйәтте иғлан иткәндә автор дөрөҫлөк яуаплылығын мәғлүмәт сығанағына ла япһарырға тейеш. Юғиһә, күрһәтелгән факттарҙың ысынлығы өсөн автор яуаплы булып ҡала.

Б. Зәйнетдиновҡа саҡлым был турала яҙған журналистар Йәүһәриә Ҡазыеваға һылтанды. Ләкин ул, ҡабатлап әйтәм, беҙҙең әңгәмәбеҙҙә асыҡланыуынса, бер ҡасан да, бер кемгә лә Аҡай Күсемовтың был яҡтарҙа йәшәгәнлеген һөйләмәгән, ул турала һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел. Ул «Аҡа ишан» тип һөйләне, ләкин уның фамилияһы билдәле түгел икәнлеген әйтте.

Икенсенән, һәр төрлө риүәйәттәрҙе бүтән мәғлүмәттәр, архив материалдары, халыҡ йырҙары, эпос, географик атамалар һәм башҡалар менән сағыштырып ҡарау кәрәк. Бары тик шул сағында ғына риүәйәт ғәмәлгә аша һәм тейешле һөҙөмтәне бирә. Б. Зәйнетдинов Аҡайҙың унда йәшеренеп йәшәгәнлеген генә әйтә, уның төрмәнән сыҡҡандан аҙаҡ нимә менән шөғөлләнгәнлеге тураһында бер ниндәй мәғлүмәттең дә булыуы мөмкин түгел, тип яҙа.

Әйтеүе еңел, ләкин ғәмәлдә улай булмай. Йәшерен, серле эштәр барыбер иртәме-һуңмы асыҡлана. Болала ҡатнашып ҡулға алынған кешеләрҙең һөйләгәндәре, карателдәрҙең рапорттары, шулай уҡ һәр төрлө һалым йыйыусыларҙан алынған мәғлүмәттәр бушҡан-буш ятып ҡалмай бит. Хатта ер һатыуға бәйле боронғо хәбәрҙәр, баш күтәргән башҡорттарҙың һәм уларҙың юлбашсыларының хәрәкәттәренә бәйле һүҙҙәр билдәле. Б. Зәйнетдинов «Башҡорт АССР-ы тарихы материалдары» тигән биш томлыҡты аҙ-маҙ булһа ла ҡарап сығырға тейеш

ине бит. Унда Аҡай Күсемовтың исеме йыш осрай. Башҡорт яуҙары буйынса булған әҙәбиәтте уҡырға, тарихсылар менән һөйләшергә, йәғни шул ихтилалдарҙы өйрәнгән кешеләрҙән белешергә кәрәк ине. Ул сағында: «Бына мин тарихта билдәле булмаған ошо бөйөк шәхескә бәйле материалдар таптым», - тип яҙа алмаç ине. Һүҙ ҙә юк, Б. Зәйнетдинов мәҡәләһендә ҡыҙыҡлы ғына мәғлүмәттәр ҙә бар. Аҡай батырҙы Аҡа ишан тип атағандар был яҡта. Уныһын дөрөç билдәләгән ул. Мин иçәпһеҙ күп архив материалдарын ҡарап сыҡтым. Аҡай Күсемовтың яҙмышын асыҡлау өсөн ҙур тырышлыҡ күрһәткәнем хаҡ. Ләкин ул материалдарҙа Аҡай Күсемов бер генә тапҡыр ҙа Аҡа мулла йәки ишан итеп телгә алынмай. Уның дини эшмәкәрлеге хаҡында ла бер ни ҙә тапмаçһың. Киреһенсә, Аҡа Ҡамаҡаев документтарҙа йыш ҡына Аҡа мулла тип аталыуы, уның улы Ҡарағужаның Аҡаев тип түгел, ә Аҡаҡов фамилияһын йөрөткәнлеге билдәле.

Б. Зәйнетдинов, Юлай аҡһаҡал Салауаттың әсәһенә 1750 йылда өйләнгән, тип яҙа, дүрт йыл буйына уларҙың балаһы булмаған, шунан Салауат тыуған, ти. Салауаттың 1754 йылда тыуғанлығын хәҙер ҡағиҙә итеп алғандар икән, артабан икенсе яғын да ҡарарға кәрәк. Әгәр ҙә ул элегерәк тыуған булһа? Хәҙергә ул һорауҙы яуапһыҙ ҡалдырып торайыҡ. Был мәсьәләгә артабан әйләнеп килермен. Хәтерҙә бары тик шуныһын ғына һаҡлайыҡ: халыҡ риүәйәттәрендә атаһы Салауаттың әсәһенә 1750 йылда өйләнгәнлеге әйтелгән. Салауаттың әсәһе өс йыл буйына бала тапмаған икән. Әгәр ҙә шулай булмаһа, тәүге балаларының 1751 йылдан да һуңламай тыуғанлығы хаҡ булырға тейеш.

Минә Б. Зәйнетдиновтың үҙенең тыуған төйәгенә ҡарата патриотизм хистәре аңлашыла. Өçтәүенә, мин үҙем дә шул тирәнән бит. Йүрүҙән буйында тыуғанмын. XVIII быуатта Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында башҡорт ихтилалдарының иң ҡыҙыу усағы булған. Бик күп батырҙар һәләк булған был яуҙарҙа. Тап бына беҙҙең яҡта, Әй буйында, йыйылған королтайҙың башҡорт ханы Ҡараһаҡалды юлбашсы тип иғлан итеүе осраҡлы түгел. Был йәһәттән шулай уҡ Төлкөсура, Аллаҙыянғол, Бәпәнә, Аҡа, Юлай, Салауат һәм башҡалар дан ҡаҙанған. Уларҙың бик күптәрен халҡыбыҙға кире ҡайтарыу тора әле алда. Улар бит бөтөнләй онотолған. Дөрөçөрәге, коммунизм идеологтары уларҙы юҡҡа сығарып, милләтсе ярлығы таҡҡандарын да онотмайыҡ.

Ләкин Аҡай Күсемовтың Әй һәм Йүрүҙән йылғаларына ҡағылышы юк. Әйҙә, ул үҙенең яҡташтары - Тамъян башҡорттары араһында ҡалһын. Ул бит - уларҙың ғорурлығы, уларҙың ҡаһарманы. Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында монголдар ябырылған мәлдән үк бик күп башҡорт ҡәбиләләренең төркөмдәре таралып ултырған. Тамъян ҡәбиләһе лә төньяҡ-көнсығышта булған. Тарихи эҙҙәре ярылып ята. Мәсәғүттәр ырыуынан барлыҡҡа килгән Мәсәғүт ауылын ғына алайыҡ. Ләкин был Б. Зәйнетдиновҡа Тамъян башҡорттары Аҡай Күсемов һәм уның олаталары Күсем, Түләкәй һәм башҡаларҙың Әй һәм Йүрүҙән ярҙарында тыуып үçкәнлеген раçларға нигеҙ бирмәй» (19, 114-115).

Тарих фәндәре докторы Әнүәр Закир улы Әсфәндиәров та Баһауетдин Зәйнетдиновтың был «фәнни асышын» кире ҡағып сыҡты. «Газетные публикации отдельных авторов вводят в заблуждение читателей. В частности Б. Зайнетдинов, не считаясь с источниками, Акая Кусемова, Кусыма Тулекеева и деда Тулекея, видных предводителей и участников башкирских восстаний конца XVII - первой трети XVIII в. из Тамъянской (Старо-Тамъянской) волости Казанской дороги (район их вотчины около Нагайбацкой крепости, левобережье Ика, озеро Акаево и др.) абсолютно необоснованно привязывает к Кущинской волости Сибирской дороги. Как будто Кущинский Акай - это тамъянский Акай. Теперь на ложные предположения того автора ссылаются другие, приняв их за достоверные. Вот так делается у нас история отдельными авторами», - тип яҙҙы ул (20, 249).

Советтар Союзы дәүерендәге ҡайһы бер башҡорт яҙыусыларының ижадында Шәғәле Шаһман нәҫеленә ҡарата ғәҙел булмаған ҡараш сағылыш тапты. Был бигерәк тә Баязит Бикбайҙың «Аҡселән ташҡанда» романында асыҡ күренде.

Әҫәрҙә Ҡайынлы ауылында, йәнәһе, колхоз төҙөлгәнгә тиклем биш: Шаҡман, Ҡыпсаҡ, Бөрйән, Ҡыръян, Бүре аралары үҙ-ара ыҙғышып йәшәй була. Шуларҙан ауылдың иң ишле, берҙәм араһы итеп автор үҙенең ырыуын - ҡыпсаҡтарҙы алға ҡуя. Улар үҙҙәрен генә аҫаба иҫәпләй. Ҡунаҡсыл, киң күңелле, шаян булыуҙары менән дә башҡа араларҙан айырылып торалар, йәнәһе. Ә Шаҡман араһы йәғни тамъяндар кешегә юл ҡуймаусан, һәр ваҡыт әләгешеп барыусан һәм һаранлыҡтары менән дандары сыҡҡан бер ара итеп бирелә романда. Ҡыръяндар - сая һунарсы, төрлө шау-шыуҙан ирмәк таба торған халыҡ. Улар шаҡман менән ҡыпсаҡтарҙы бер-береһенә ҡаршы ҡотортоп ирмәк таба. Әйтәйек, ауылдың Муйыллы йылғаһына күпер һалғанда, Илсеғол тигән ҡыпсаҡтың шаярыуынан шаҡмандар менән ҡыпсаҡтар араһында һуғыш сыға. Халыҡ иртәгәһен, бәйге урынына, ике мәйет ерләй.

«Аҡселән ташҡанда» романының конфликтын барлыҡҡа килтереүҙә төп фигураларҙың береһе булараҡ Гәрәй Шаҡманов образы сығыш яһай. Яҙыусы уға шундай зәһәр портрет-характеристика бирә: «Гәрәй Шаҡманов шаҡман араһының иң һуңғы олпатлы байҙарының береһе инде. Емерек ҡашлы, йыртҡыстарса хәйләкәр, төпкә батҡан күҙле, һәр ҡаты киҫәкте сәйнәп йоторға һәләтле ныҡ яңаҡ һөйәкле, урта йәштәрҙәге был кеше донъяны бик белеп көтә, заманға оҫта ҡулайлаша ала. Шаҡмандар, ғөмүмән, аралары менән хәлле халыҡ. Ә Гәрәй уларҙың барыһынан да айырылып тора» (21, 162). Автор был образды кире яҡтан һүрәтләү өсөн ҡара буяуҙарҙы бер ҙә йәлләмәй. Баҡтың иһән, йәнәһе, «Ҡайынлы ауылын дер һелкетеп тотҡан» Гәрәйҙең шәжәрәһе лә ғибрәтле икән. Ул урыҫ батшаһына баш һа-



лырға барған Шәғәле Шаһманға барып тоташа. Гәрәйҙең «олатаһы Яҙар ҡарт Ҡайынлының серегән байы булған. Хатта ул үҙ малдарының иҫәбен дә белмәгән», ә уның улы Мисбах Гәрәйенә бөлгән донъя ҡалдырған. Әммә Гәрәй Ырымбурҙа атаһының дуҫы миллионер Әхмәровта эшкә өйрәнеп ҡайта ла «атаһының емерелеп бөткән донъяһын үҙенең ҡаты ҡулына ала» һәм «яңы үҙәнгә йүнәлтә». Ә бына Гәрәйҙең улы Барый әҫәрҙә торғаны бер һантый итеп күҙ алдына баҫтырыла.

Ҡыҫҡаһы, яҙыусы, совет идеологияһына яраҡлашырға тырышып, Шәғәле Шаһман нәҫеленең тик кире яҡтарын ғына күрһәтә. Әгәр ул бөгөнгәсә йәшәһә, был донъяла ниҙәр барғанын үҙ күҙҙәре менән күрһә, нимә әйтер ине икән? Гәрәй Шаҡмановтың характер сифаттарына хәҙерге ир-егеттәребеҙ эйә булһа, баҙар шарттарында һис тә эстәрен тишмәҫ ине. Тап бына ундағы кеүек уңғанлыҡ, йылғырлыҡ, хәйләкәрлек, ауырлыҡтар алдында баш эймәү, үҙен хужа итеп тота белеү етешмәй шул егеттәребеҙгә.

Яҙыусының заманындағы шундай ҡараштары өсөн беҙ ғәйепләргә йыйынмайбыҙ, сөнки был - уның ғәйебе түгел, ә бәләһе.

Шул уҡ коммунистик идеология шауҡымы ғалим һәм яҙыусы Кирәй Мәргәндең «Бөркөт ҡанаты» исемле тарихи романында ла сағылыш тапмай ҡалмаған: Шәғәле Шаһман мең бәлә менән әсирлектән ҡотолоп, кәнизәк ҡыҙын алып ҡайтып, шуға өйләнә.

Йомғаҡлап әйткәндә, историография фәнендә, фольклорҙа, матбуғат баҫмаларында Шәғәле Шаһман нәҫеленә ҡағылышлы яңынан-яңы мәғлүмәт-факттар, тарихи документтар табылып тора. Тимәк, тарихсыларыбыҙға, тыуған яҡты өйрәнеүселәребеҙгә, журналистарыбыҙға һәм яҙыусыларыбыҙға киләсәктә уларҙы ла ғилми әйләнешкә индереп, тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ, уҡымлыраҡ фәнни, фәнни-популяр хеҙмәттәр яҙыу, художестволы әҫәрҙәре ижад итеү мөмкинлеге тыуа.

## 2. ТАМЪЯН ҠӘБИЛӘҺЕ

*- Тыуған ерең ни?*
*- Башҡортостан.*
*- Милләтең кем?*
*- Башҡорт.*
*- Телең ниндәй?*
*- Башҡорт теле.*
*- Ырыуың ниндәй?*
*- Тамъян.*
*- Ҡошоң ниндәй?*
*- Ҡарға.*
*- Ағасың ниндәй?*
*- Тирәк.*
*- Тамғаң ниндәй?*
*- Ырғаҡ.*
*- Ораның ниндәй?*
*- Тутыя.*

Тамъян ҡәбиләһе - башҡорт халҡының ҡәбилә-ырыу структураһында әһәмиәтле урын биләгән, уның милләт булып формалашыуына ҡиммәтле өлөш индергән боронғо, ифрат бай тарихлы, үҙенсәлекле ҡәбиләләрҙең береһе.

Тамъяндар бөгөн, башлыса, Башҡортостан Республикаһында, дөрөҫөрәге, уның көньяҡ-көнсығышында: Ағиҙел йылғаһы үренде һәм Урал аръяғында (Бөрйән, Әбйәлил, Белорет райондары); көньяҡ-көнбайышта (Миәкә, Йәрмәкәй, Туймазы, Шаран райондары); көньяҡта (Мәләүез, Көйөргәҙе райондары), шулай уҡ Ырымбур өлкәһендә йәшәй.

Тамъяндар - Алтай-Саян тауҙарында йәшәп, аҙаҡ төркиләшкән боронғо монгол ҡәбиләләренең береһе. Бөйөк башҡорт ғалимы Әхмәтзәки Вәлиди Туған: «Тамъян» һүҙе «тама»нан килә...», - тип иҫәпләй (22, 97). Монгол телендә «тама» һүҙе *«һарап»* тигәнде аңлата.



Профессор Р. З. Янғужин: «Тамъян ырыуының боронғо монголдарҙан сығыуын әле лә көньяҡ-көнсығыш Башҡортостан тамъяндары араһында тума формаһының йәшәүе лә раҫлай», - тип яҙа (23, 59).

Йылъяҙмасы Рәшитдин тума ҡәбиләһенең Енисей йылғаһының үр яғында, ҡайҙалыр «ҡырғыҙ иле биләмәләрендә» урынлашыуы хаҡында яҙа. Ысынлап та, хәҙерге ҡырғыҙ этносының төп формалашҡан ере – Енисей, Иртыш буйҙары. Шулай булғас, Рәшитдин яҙмалары шик тыуҙырмай. Башҡорт ҡәбилә-ырыу составындағы Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары шәжәрәһендәге тәүге быуындар менән Миәкә районы Ҡолтай-Ҡаран ауылында йәшәгән Әсфәндиәр Янышевтан яҙып алынған Шәғәле Шаһман нәҫеленә ҡағылышлы шәжәрәләге тәүге быуындарҙың бер-береһенә оҡшашлығы, яҡынлығы быны иҫбатлай кеүек. Уларҙың тәүгеһе һул, икенсеһе уң бағанала бирелә:

| | |
|---|---|
| *Ҡандар бей* | *Киндар бей* |
| *Әхмәт бей* | *Нахмәт бей* |
| *Мөхәммәт* | *Басман хан* |
| *Йанба* | *Айҡын бей* |
| *Ҡушыҡ* | *Айҙаралы бей* |

Төрки халыҡтарҙың тарихын яҡшы белгән Н. Аристовтың иҫәпләүенсә, тамъян башҡорттары этник яҡтан ҡаҙаҡтарҙың тама ырыуына яҡын тора. Башҡорттарҙа **тамъян** иҫәпләнһә, ҡаҙаҡтарҙа - **тама**. Был ҡәбилә вәкилдәре бер башҡорт, ҡаҙаҡ этностарын ғына түгел, ә башҡа төрки халыҡтарын да формалаштырыуҙа әүҙем ҡатнашҡан. Мәҫәлән, үзбәктәрҙә, ҡараҡалпаҡтарҙа шулай уҡ *тама*, ҡырғыҙҙарҙа - *ҡара тума, аҡ тума*, алтайҙарҙа *ҡара тумма* ырыуҙарының барлығы быға асыҡ дәлил.

Тамъян этнонимының икенсе яртыһына - «ъян»ға килгәндә, был йәһәттән башҡорт ғалимдары араһында иғтибарҙы йәлеп итерлек фекер-фараздар бар. Мәҫәлән, тарих фәндәре докторы **Әлим Барый улы Зарипов**: «Телеләр араһында «янь-мянь» (ҡытайса шулай яҙылған)

исемле ҡәбилә лә була. Уның Балхаш күленән көнсығышта көн иткәнлеге билдәле. Ошо урында: «Ҡытай йылъяҙмалары башҡорт ырыуы «тамъянды» иҫкә алманы микән?» - тигән һорау тыуа», - тип яҙа «Эй Яйыҡ йорт, Яйыҡ йорт» тигән китабында (24, 22).

Р. Б. Әхмәров иһә «Башҡортостан тарихында «Янъ-Ян» легендаһы» тигән мәҡәләһендә был мәсьәләгә ентеклерәк туҡтала: «Илебеҙҙең мәшһүр ғалимы О. П. Толстов үҙенең «Хорезм» тигән хеҙмәтендә, боронғо Ҡытай яҙмаларынан сығып, беҙҙең эраның баштарында Көньяҡ Урал урмандарында «Янъ-Ян» исемле ҡәбиләләрҙең йәшәүен раҫлай. Улар аландар һәм Урта Азия халыҡтары менән яҡын бәйләнештә булған һәм йәнлек тиреләре менән яһаҡ түләгән. Шул уҡ фекерҙе күренекле тел ғалимы С. Г. Кляшторный үҙенең боронғо төрки яҙмаларына арналған әҫәрҙәрендә ҡабатлап китә.

Әлбиттә, Көньяҡ Урал урмандарында йәшәгән «Янъ-Ян» ырыуҙарының кем булыуы тураһында һорау килеп тыуа.

Был һорауға күренекле башҡорт ғалимы Ж. Кейекбаев тейешле яуап һәм аңлатма биргәйне инде. Уның фекеренсә, Баръян, Тамъян ырыуҙары бер-береһенә күрше булып, хәҙерге Бөрйән, Баймаҡ, Әбйәлил райондарында йәшәгән. Улар, О. П. Толстов әйткәнсә, беҙҙең эраның баштарында Көньяҡ Уралда йәшәүсе Кангюй (Хорезм) дәүләтенә йәнлек тиреләре менән яһаҡ түләүсе «Янъ-Ян» ырыуҙары булырға тейеш» (25, 3).

Ә башҡа ҡайһы бер тарихи сығанаҡтар буйынса беҙҙең эраға тиклем I һәм II меңйыллыҡтарҙа йәғни төрки ҡағанаттары дәүерендә тамъяндарҙың атай-олатайҙары, башҡа күсмә халыҡтар менән бергә, тәүҙә Урта Азияға, Етеһыу буйына, һуңынан Ҡара диңгеҙҙең төньяғына эләгә, IX быуатта - Волганан көнбайышҡа, унан Урал яғына, Дим һәм Ыҡ йылғалары буйына күсенәләр. Аҙаҡ көньяҡтағы Ағиҙел - Нөгөш бассейнын һәм Урал арьяғын биләп, шунда ныҡлы төпләнәләр.



Урта быуаттарҙа тамъяндар иң көслө ҡәбиләләрҙең береһе иҫәпләнә. Көнгөр бургомистры Юхневтың мәғлүмәттәре буйынса, улар яҡынса 21 мең кешегә еткән. «Яу тиһәң, тамъяндан һора, дау (*йәғни низағ, ғауға*) тиһәң, һарайлынан һора», - тигән боронғо тапҡыр һүҙҙәр ҙә шул ваҡыттарҙан ҡалған.

«XVII-XVIII быуаттарҙа тамъяндар көньяҡҡа һәм төньяҡҡа бүленеп йәшәгән, - тип яҙа профессор Рим Янғужин. – Көньяҡта улар Ағиҙелдең урта ағымында һәм Нөгөш тамағында төпләнһә, төньяҡта Ағиҙелдең үрге ағымында һәм Урал арьяғында көн күргән. XVI - XVII быуаттарҙа уларҙың ерҙәре ярайһы уҡ киң булған. Ошо хаҡта Тамъян волосының хатта Ыҡ буйында булыуы һөйләй. Тамъяндарҙың мөлөт, ҡуян, мәсәғүт ырыуҙарына бүленеүе хаҡында мәғлүмәттәр бар. Уларҙың төп тамғалары булып даға, сыбыҡ, һәм ирәк иҫәпләнгән. Ирәк - мөйөш билдәһенә оҡшаған тамға. Даға тамғаһы тамъяндарға ғына хас, бик боронғоларҙан иҫәпләнә. Сыбыҡ иһә ҡара-ҡыпсаҡтарҙыҡына оҡшаған һәм ҡаңлы ырыуыныҡына яҡын. Ирәк тамғаһы бөрйәндәрҙеке һымаҡ» (23, 57).

Башҡорт ерҙәре борон ҡәбиләләрҙең биләмәләренән сығып олоҫтарға бүленгән. Тамъяндарҙы ике Тамъян олоҫона бүлеп йөрөткәндәр. Беренсеһе - Верхнеурал өйәҙенә, икенсеһе Стәрле өйәҙенә ҡараған. XIX быуат урталарында һуңғыһы Арыҫлан олоҫо исемен алған. Ә Верхнеурал өйәҙендәгеһе Тамъян-Түңгәүер олоҫо тип йөрөтөлә башлаған. «Тарихи документтарҙан күренеүенсә, тамъяндар барыһы ла тиерлек Көньяҡ Уралда, Урал һыртының көнсығышында ла, көнбайышында ла, ҡалын-ҡалын урмандар, текә тауҙар араһында ла, ҡола яланда ла, Ағиҙел, Нөгөш, Мәләүез, Ҡурғашлы, Ҡотҡор, Ҡағы, Мәйгәште, Үҙән, Ҡыҙыл, Әүнәш, Яйыҡ һәм башҡа йылғалар буйында, Үләнде, Ҡарабалыҡты, Мауыҙҙы, Сыбарҡүл, Атауҙы һәм башҡа күлдәр әйләнәһен дә йәшәгән» (26, 6-7).

Шулай итеп, тарихи юлын бик боронғо осорҙан башлаған Тамъян ырыуы бөгөнгәсә иҫән-аман килеп еткән һәм башҡорт этносы составында йәшәүен дауам итә.

## 3. БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ҮҘ ИРКЕ МЕНӘН РӘСӘЙГӘ ҠУШЫЛЫУЫ

### РУС ДӘҮЛӘТЕНӘ ҠУШЫЛЫУ СӘБӘПТӘРЕ ҺӘМ БАРЫШЫ

XV быуат уртаһында Алтын Урҙа дәүләте тарҡала. Уның территорияһында бәләкәйерәк дәүләттәр: Нуғай Урҙаһы, Ҡаҙан, Себер һәм Әстрхан ханлыҡтары барлыҡҡа килә.

Бөрйән, Ҡыпсаҡ һәм Тамъян ҡәбиләһе башҡорттары Нуғай ханлығы эсенә инә. Был дәүләткә, башлыса, XV быуат баштарында нуғайлы **Иҙеүкәй батыр** (*Идеге*) нигеҙ һала. Ул - Сыңғыҙ хан ғәскәре менән Монголиянан күсеп килгән манғыт ырыуынан. Был тарихи шәхес хаҡында тулы биографик мәғлүмәттәр һаҡланмаған. Һаҡланғандары ла йә үтә ҡаршылыҡлы, йә легендар характерҙа. Хәрби эшмәкәр булараҡ та ул – үтә ҡаршылыҡлы шәхес. Башта Туҡтамыш хан менән килешеп, уға хеҙмәт итә. 1380 йылдарҙа иһә Аҡһаҡ Тимергә ҡасып, 1391 йыл башында уның менән бергә Туҡтамышҡа ҡаршы яуға күтәрелә. Һәр ике яҡтан икешәр йөҙ мең самаһы ғәскәр хәҙерге Һамар ҡалаһынан үрҙәрәк Волгаға етмәҫ борон төньяҡ-көнсығыштан Сок йылғаһына килеп ҡушылған Ҡондорса буйында бәрелешә. Был ҡаты алышта Туҡтамыш ғәскәре еңелеп, хан үҙе ҡасып ҡотола.

Ошо һуғыштан һуң Иҙеүкәй Аҡһаҡ Тимергә буйһонорға, кәрәк саҡта уға ярҙамға ашығырға һүҙ биреп, уның ярлығы менән үҙ төбәгендә (манғыт ырыуы йәшәгән Яйыҡ буйында) тороп ҡалһа ла, Урта Азия әмиренә лә әллә ни тоғролоҡ күрһәтмәй. Шулай уҡ Аҡһаҡ Тимер ярҙамында Туҡтамыш тәхетенә менеп ултырған Тимер Ҡотлоҡ ханды уға буйһонмаҫҡа этәрә. Үҙе иһә уларҙың ғәскәр башлығы ғына түгел, ә ғәмәлдә ил өҫтөнән хакимлыҡ итеүсе баш бей (йәки баш әмир, «бәктәр бәге») дәрәжәһенәсә күтәрелә, Яйыҡ буйында манғыттарҙың үҙ аллы урҙаһын төҙөй.

XIV быуат ахырында Ворскла йылғаһы буйында Тимер Ҡотлоҡ менән уның «бәктәр бәге» Иҙеүкәйҙең Литва кенәзе Витов ғәскәрен тар-мар итеп, Киевҡа барып етеүҙәре, 1408 йыл Булат солтан заманында баш әмирҙең Мәскәү кенәзлегенә яу менән барып, байтаҡ ҡалаларҙы яндырып, талап ҡайтыуы тарихта шулай уҡ киң билдәле.

Тап бына ошо факттар арҡаһында Иҙеүкәй рус йылъяҙмаларында Алтын Урҙаның иң яуыз хакимдәренең береһе булып һүрәтләнә лә инде. Башҡа тарихи сығанаҡтарҙа уның үҙ һүҙендә тормаған мәкерле кеше булыуы әйтелә.

Иҙеүкәй 1419 йылда Туҡтамыш хандың улы Ҡадирбирҙе тарафынан үлтерелә.

**Иҙеүкәй төҙөгән урҙа XV быуаттың икенсе яртыһында «Нуғай урҙаһы» тип йөрөтөлә башлай.**

Шулай итеп, Иҙеүкәй Туҡтамыш ханға ҡаршы сығып, Алтын Урҙаны эстән тарҡатыуҙа билдәле роль уйнай һәм аҙаҡ сиктә үҙ ырыуына сәйәси үҙаллылыҡ яулай.

Кемдәр һуң ул нуғайҙар? Нуғайҙар, икенсе төрлө әйткәндә, манғыттар - монголдар менән килгән, төрки телдәренең береһендә һөйләшкән бик көслө ҡәбилә. Нуғайҙар (манғыттар) башҡорт иленә, башҡорт еренә ауыл-ауыл булып күсенеп килеп ултыра. Был ултыраҡ нуғай ырыуҙары башҡорт ҡәбиләләрен иҙеүҙә Нуғай мырҙаларының төп таянысы була.

Нуғай Урҙаһы Волганан алып Тубыл (Тобол) йылғаһынаса, ҙур территорияла йәйелеп, уның сос-

тавында, башҡорт, нуғайҙарҙан тыш, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ ырыуҙары ла ҙур өлөш алып тора.

Иҙеүкәйҙән һуң Нуғай Урҙаһы тәхетенә улы **Нуретдин хан** ултыра, һәм артабан был йоланы уның вариҫтары дауам итә. Нуретдин ханды башҡорттар күберәген Мораҙым исеме менән белә. Тыуған йылы билдәле түгел. 1426 йылдан башлап, йәғни Алтын Урҙа тамам емерелгәс, Нуғай Урҙаһына әмир булып ултыра. Хакимлыҡ өсөн көрәштә ҡон йолаһы буйынса 1440 йылда үлтерелә.

Уның ейәне **Муса** шулай уҡ күренекле түрә була. Ул Ирәмәл, Яйыҡ башы тирәһендә, ҡарурманлы, таулы төбәктә йәйләп йөрөй. Шул хаҡта уның улы **Шых Мамай** тарафынан әйтелгән ҡобайыр юлдары ла һаҡланған халыҡта:

*Иҙел башы Ирәмәл тау -*
*Минең атам Мусаның*
*Иле ҡунған ере ине;*
*Яйыҡ башы ҡара урман -*
*Минең атам Мусаның*
*Йәй йәйләгән ере ине;*
*Ҡыҙыл, Ойсоҡ, Биштамаҡ -*
*Минең атам Мусаның*
*Ҡыш ҡышлаған ере ине.*
*Табаны аҫты тарлан буҙ -*
*Минең атам Муса хан*
*Менеп йөрөр ат ине.*
*Даусы менән даулашыр,*
*Даулашыр ҙа яу асыр -*
*Минең атам Муса хан*
*Шундай дана зат ине.*
*Иле илегеп ҡараған ер,*
*Ҡышын ҡышлап торған ер,*
*Йәйҙәрен йәйләгән ер...*
*Бары ла ҡалған ата-бабанан,*
*Бары ла ҡала хәҙер Мамайҙан* (27, 182).



Бөйөк башҡорт ғалимы Әхмәтзәки Вәлиди Туған «Башҡорттарҙың тарихы» китабында шулай тип яҙҙы: «Ҡыште Яйыҡтың ҡойған урынында, йәйҙе Яйыҡ һәм Аҡ Иҙелдең юғары тарафтарында йәшәү йолаһын тотҡан нуғай мырҙалары башҡорттарҙың «Дүртъюл башҡорттары» тип аталған үҙәгендә хөкөмдарлыҡ иткән... XVII быуаттың башына ҡәҙәр нуғай мырҙаларының исеме иҫкә алынған Муса мырҙаның улдары Сайдаҡ мырҙа (1540 йылға тиклем), Шихмамай (1540-1548), Йософ мырҙа (1548-1555), Исмәғил мырҙа (1555-1563), һуңынан Исмәғилдең улы Тиңәхмәт мырҙа (1563-1580), Тиңәхмәттең улы Ормәмбәт мырҙа (1580-1601) билдәлеләр» (22, 26-27).

Нуғай урҙаһындағы башҡорт феодалдары үҙ аллылыҡҡа ынтылып, был юлда ваҡыт-ваҡыт нуғай мырҙалары менән берләшеп йә айырымланып, халыҡ массаһын үҙ ҡулдарына алырға тырыша. Һөҙөмтәлә, башҡорт хеҙмәтсән халҡы икеләтә феодаль иҙеүгә дусар ителә, хан, мырҙа, тархан, бейҙәрҙең власть, биләм өсөн тартыштарынан яфа сигә. Бигерәк тә, нуғай мырҙаһы **Бурсай** менән **Аҡтолош** туҡтауһыҙ барымта яһауҙары, түҙгеһеҙ йәберләүҙәре менән бөрйән, ҡыпсаҡ, үҫәргән һәм тамъяндарҙың тәҡәтен ҡорота. Бурсай менән Аҡтолош үҙҙәренең әшәке теләктәрен ҡәнәғәтләндереү өсөн затлы нәҫелдән булған сибәр ҡыҙҙарҙы, кешеләрҙең яҡшы аттарын, мал-мөлкәтен тартып алыр булған.

Башҡорттар бер нисә быуат дауамында шул нуғай хандары хакимлығы аҫтында ҡала. Нуғай Урҙаһында ла башҡа хакимлыҡтарҙағы кеүек тотороҡло власть булмай. Төрлө феодалдар бер-береһе менән ыҙғышып тора. Был көрәшкә башҡорттарҙы ла йәлеп итәләр. Бынан тыш Алтын Урҙа дәүләте емереклектәре өҫтөндә барлыҡҡа килгән Ҡаҙан, Себер, Әстрхан ханлыҡтары һәм дә Нуғай Урҙаһы хакимдары бөтә Башҡортостанға эйә булыу өсөн үҙ-ара һуғыштар алып бара. Был иһә башҡорттарҙың хәлен тағы ла ныҒыраҡ ауыр-

лаштыра, шуға ла улар Нуғай Урҙаһы, Ҡаҙан, Себер һәм Әстрхан хандары менән феодалдарының иҙеүенә ҡаршы сыға. Ләкин улар үҙҙәренең көсө менән генә сит ил баҫҡынсыларының хакимлығынан ҡотола һәм үҙ аллы дәүләт төҙөй алмай. Яҙыусы Ғәзим Шафиҡов яҙғанса: «Әлбиттә, иге-сиге булмаған далалары, урмандары, тауҙары, йылғалары йәйрәп ятҡан башҡорт еренә был ханлыҡтар, майлы ҡалъяға ынтылғандай, тамшанып йәшәгән. Бер туҡтауһыҙ теге яҡтан да, был яҡтан да башҡорт еренә һөжүм иткәндәр. Башҡорттар ғүмер-ғүмергә уларға ҡаршы һуғышҡан. Тап шундай мәлдә Рус дәүләтенә ҡушылыу идеяһы тыуған да инде» (28, 16-сы һан). Бигерәк тә, нуғай хан - мырҙалары бөрйән, үҫәргән, тамъян һәм ҡыпсаҡтар йәшәгән Көньяҡ Уралдың кейеккә бай урмандарына, йылға-күлдәренә, туғайҙарына, һутлы көтөүлекле иркен яландарына бөтөнләйгә хужа булып алырға ныҡлап ынтылған. Ә башҡорттар үҙ ерҙәрен килмешәктәргә бирмәҫ өсөн йыш даулашып та, яулашып та торған. Академик Ғайса Хөсәйенов «Илсе бейҙәр» тигән мәҡәләһендә XVI быуат башындағы Нуғай Урҙаһы менән Ҡаҙан ханлығы араһындағы сәйәси мөнәсәбәттәрҙе түбәндәгесә һүрәтләне: «...XVI быуат уртаһында нуғай хан һәм кенәздәре араһында ике көслө төркөм ойоша. Йософ кенәз тирәһенә ойошҡан төркөм Ҡаҙан ханлығы менән тығыҙ бәйләнеш тотоп, ошо тарафтар мәнфәғәттәрен яҡлай. Ҡустыһы Исмәғил кенәз тирәһенә тупланғаны күберәк Рәсәй дәүләтенә йүнәлеш тота, шул тәңгәлдә тығыҙ сауҙа, ил-ара мөнәсәбәттәр урынлаштыра.

Билгәлән ерҙәре Оло Иҙел буйлап Ҡаҙан ханлығы сигенә еткән Йософ кенәз хан хоҡуғында Ҡаҙан хандары менән үҙен тиң күреп һөйләшә. Өҫтәүенә, хандар менән туғанлыҡ, дуҫлыҡ ептәрен нығыта. Кәрәк икән, йөҙ меңлек ғәскәр туплап, ҡаҙанлыларҙы яҡлап яуға инергә лә әҙер була.



Йософ олуғ кенәз Ҡаҙан ханы Йәнғәлигә үҙенең һөйөклө сибәр ҡыҙы Сөйөмбикәне кейәүгә биреп, хан менән баш ҡоҙалаш булып та алалар. Был йәш хан үҙенә бигүк оҡшамай башлағас, уны үлтертеп, урынына Ҡырымдан килтерелгән хан нәҫеле Сафагәрәйҙе Ҡаҙан ханы итеп ултырта. Сөйөмбикәһен уға өйләндереп, үҙ йоғонтоһон тағы нығыраҡ көсәйтеүгә ирешә. Был баш ҡоҙалыҡ Ҡырым ханлығы менән бәйләнеште лә нығыта. Ләкин Ҡаҙан ханлығының үҙендә Ҡырым яҡлылар менән Мәскәү яҡлылар араһында күпмелер йәшертен, ҡай саҡ асыҡтан-асыҡ эске көрәш бара. Шуға күрә хандары ла алышынып, алыштырылып тора.

Мәскәү яҡлылар 1546 йылда көслөк менән Сафагәрәйҙе тәхеттән бәреп төшөрөп, үҙҙәренең таянысы Шаһғәлиҙе хан итеп күтәргәс, Сафагәрәй хан башы ҡоҙаһы Йософ кенәз ҡанаты аҫтына ҡаса. Йософ тиҙ арала атлы ғәскәр туплай ҙа Ҡаҙан ҡалаһына яу менән ябырыла. Ҡото осҡан Шаһғәли хан тәхетен дә, ханлығын да ташлап ҡасып китә. Ҡаҙанлылар уның урынына үҙҙәренең икенсе бер хан нәҫелен ултыртырға маташып, Йософто Ҡаҙанға индермәҫкә тырышып ҡараһалар ҙа, ул ҡаланы ҡамап, аслыҡҡа интектереп, барыбер ҡапҡаларын астырып, Сафагәрәйҙе яңынан тәхеткә ултырта. Үҙе Ҡаҙан тирәһенән яңы биләмәләр яулап ала, татарҙарҙы нуғайҙарға яһаҡ түләргә мәжбүр итә.

Оҙаҡламай, ни сәбәптәндер, Сафагәрәй хан вафат булғас, Ҡырым яҡлылар Йософ кенәз булышлығында Сафагәрәйҙең Сөйөмбикәнән тыуған улы, әле бала ғына Үтәмешгәрәйҙе хан итеп билдәләйҙәр, ә тейешле йәшенә еткәнсе ханлыҡ вазифаһын әсәһе Сөйөмбикә ханшаға тапшыралар.

Был осорҙа Ҡаҙан ханлығы, тәхете тирәһендә ваҡиғалар, интригалар ҡуйырғандан-ҡуйыра бара. Мәскәү яҡлылар менән Ҡырым яҡлыларҙың алышы Рәсәй дәүләте менән Ҡаҙан ханлығының, Нуғай Урҙаһының үҙ-ара хәтәр һуғышына әйләнеп китер саҡтары сарпыла. Мәскәү баҫымы көсәйә.

Сөйөмбикә ханша менән бәлиғ булмаған улы Үтәмешгәрәй ханды Мәскәү ҡалаһына Иван батша ҡарамағына әсир тотҡон хәлендәге аманат итеп тапшырыу ҙа ҡаҙанлыларға бер ниндәй тыныслыҡ килтерә алмай» (11, 133-134).

XVI быуат уртаһында Урта Волга буйында етди үҙгәрештәр була: Рус дәүләте Ҡаҙан ханлығына ҡаршы һуғыш башлай. 1552 йылдың 2 октябрендә урыҫ ғәскәрҙәре Ҡаҙанды ала. Шул саҡта Ҡаҙан ханы үҙенең ҡустыһы тарафынан хыянатсыл рәүештә үлтерелә. Уның нуғайҙарҙан килен булып төшкән Сөйөмбикә исемле ҡатыны тол ҡала. Ҡаланы яулағас, Иван IV Сөйөмбикәне үҙенә ҡатынлыҡҡа алырға ниәтләй. Ә Сөйөмбикә, икенсе дин кешеһенә кейәүгә сыҡмаҫ өсөн, ваҡытты һуҙыу маҡсатында батшаға манара төҙәргә ҡуша. Манараны дүрт йыл буйы төҙөйҙәр. Иван батша Сөйөмбикәне манара күрһәтергә алып бара. Дүртенсе ҡатҡа күтәрелгәс, Сөйөмбикә манаранан ташланып үлә. Ошо ваҡиғанан һуң татарҙарҙың ханбикә өсөн үс алыуынан ҡурҡып, батша Мәскәүгә ҡайтып китә һала.

Урыҫ ғәскәрҙәре Ҡаҙанды яулап алған көндән бирле ханлыҡ йәшәүҙән туҡтай.

Нуғай ханлығы ла үҙ-ара эске ыҙғыштарҙан ҡаҡшай. Рус дәүләте көсәйә һәм киңәйә башлағас, нуғайҙар хафаға төшә. Улар урыҫтарҙан мөмкин тиклем алыҫлашырға уйлай һәм үҙҙәре менән башҡорттарҙы ла алып китергә ҡыҫтай. Иң беренсе булып Башҡортостан ерен Түрә хан ҡалдырып китә. Нуғайҙарҙың ҡалған мырҙалары үҙ-ара тартҡылашыуын дауам итә, улар башҡорттарҙы үҙҙәре менән бергә китергә өндәй. Башҡорттар араһында ла икеләнеүселәр табыла.

Нуғай ханлығы инде билдәле дәрәжәлә Рус дәүләтенә бойондороҡло була. Шулай ҙа уның хандары менән феодалдары башҡорттар өҫтөнән хакимлыҡ итеүҙән баш тартмай. Улай ғына ла түгел, Себер ханының Ҡаҙан һәм Нуғай башҡорттарына дәғүә итеүе хәлде тағы ла нығыраҡ ҡатмарлаштыра.



Ошо ауыр хәлдән сығыу өсөн, башҡорттар ниндәй ҙә булһа көслөрәк дәүләт ҡанаты аҫтына инергә һәм улар ярҙамында ҡәһәрле Нуғай, Себер хандары менән феодалдарының властынан ҡотолорға тейеш була. Башҡорттар Рус дәүләтенә күҙ терәй. Тап бына Рус дәүләтенең Ҡаҙан ханлығын ҡыйратыуы, Нуғай ханын һәм феодалдарын - башҡорттарҙы быуаттар буйына иҙеп килеүселәрҙе ҡаҡшатыуы уларҙың ошо аҙымды һайлауында ҙур әһәмиәткә эйә була. Ҡаҙанды ҡолатҡандан һуң, рус батшаһының тыныс тышҡы сәйәсәте лә ныҡ тәьҫир итә: тирә-яҡтағы халыҡтарҙы буйһондороу маҡсатында хәрби яу ойоштороу урынына был халыҡтарға үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылырға саҡырып мөрәжәғәттәр ебәрә, уларға тыныс тормош вәғәҙә итә. Ҡаҙан ханлығын яулаған саҡта Рус батшалығы башҡорттарҙың хәрби ғәйрәтенә таң ҡала.

Урыҫ дәүләте илселәре башҡорттарға килеп, уларҙы батша грамотаһы менән таныштыра. Мәскәү илселәрен Башҡорт ере лә бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ һәм ихлас ҡабул итә, уларҙы ҙурлап ҡунаҡ итеп оҙата.

Грамоталарҙа Рус дәүләтенә ирекле ҡушылған өсөн биреләсәк ташламалар ҙа күрһәтелә. Ләкин башҡорттарға яңы дәүләтте ирекле таныу еңел генә бирелмәй. Бер яҡтан, башҡорт йәмғиәте эсендәге ҡапма-ҡаршылыҡтар менән көрәш берҙәм фекергә килеүгә ҡамасаулай, икенсе яҡтан, нуғай һәм себер хакимдарына ҡаршы көсөргәнешле көрәш алып барыу ҙа ҡулды тота, ваҡытты һуҙа. Етмәһә, XVI быуаттың 50-се йылдарында тәбиғәт тә кешеләрҙе көйһөҙлөгө менән көйөндөрә. Шул саҡтағы бер йылъяҙмасы Нуғай Урҙаһындағы хәлдәрҙе түбәндәгесә һүрәтләй: «...ҡыштар үтә лә һыуыҡ, аяуһыҙ килде, бөтә мал-тыуар ҡырылды, йылҡы ла, башҡа мал да ҡалманы, ә йәйгә кешеләр ҙә үлде». Һуңғы өс-дүрт йылда ҡыштарҙың үтә лә һалҡын килеп, ялан-ҡырҙарға, шулай уҡ тибенлектәргә ҡалын ҡар ятып, мал-тыуарҙың күпләп ҡырылыуы башҡорттарҙың хәлен тағы ла нығыраҡ мөшкөлләндерә. Был ауыр хәл башҡорттар

менән нуғайҙарҙың араһындағы мөнәсәбәттәрҙе киҫкенләштерә генә төшә. Өҫтәүенә, бәлә өҫтөнә бәлә тигәндәй, халыҡ араһында йоғошло сирҙәр тарала, һәм аслыҡ башлана.

Рус батшаһы Иван Грозныйҙың башҡорттарға ҡарата яһаған ыңғай аҙымы хаҡындағы мәғлүмәттәр рус йылъяҙмаларында ла, башҡорт шәжәрәләрендә лә һаҡланған. Рус хөкүмәте вәкилдәре йәғни рус илселәре башҡорттарҙы үҙ теләктәре менән рус подданныйлығын ҡабул итергә саҡырып яҙылған ярлыҡаш (грамота) менән таныштыра. Был хаҡта, мәҫәлән, Юрматы ырыуы шәжәрәһендә шулай яҙылған: «...бөтә ерҙәргә лә грамоталар менән илселәр ебәрелгәс, улар былай тип хәбәр итте: бер кем дә ҡасып китмәһен, һәр кем үҙ динендә ҡалһын, үҙ йолаһын һаҡлаһын» (2, 29). Көнбайыш һәм Үҙәк Башҡортостан башҡорттары менән бер рәттән, Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән һәм Тамъян ырыуҙары шәжәрәләрендә лә был турала мәғлүмәттәр бар. (Был ырыуҙар Башҡортостандың хәҙерге Баймаҡ, Бөрйән, Белорет, Көйөргәҙе, Мәләүез, Әбйәлил, Йылайыр, Күгәрсен, Ейәнсура, Хәйбулла, Ырымбур өлкәһенең Төйләгән, Һарыҡташ, Ҡыуандыҡ, Гай районлары биләмәләрендә йәшәй.) Шулай итеп, рус хөкүмәте вәкилдәре Башҡортостандың көнбайыш төбәктәрендә генә түгел, ә уның үҙәк һәм көньяҡ районларында ла булып китә. Рус батшаһы ебәргән ярлыҡаштың эстәлеге башҡорттар араһында арыу уҡ киң билдәле була. Юғары ҡатлам вәкилдәренең генә түгел, ябай халыҡтың да Рус дәүләте составына инергә теләк белдереүе һис тә осраҡлы түгел.

Башҡорт ырыуҙары Рус дәүләтенә бер үк ваҡытта дәррәү инмәй. Ин тәүҙә Ҡаҙан ханлығы бойондороҡлоғонда булған көнбайыш, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары 1554 йылдың ҡышында рус подданныйлығын ҡабул итә.

1554-1556 йылдарҙа Рус дәүләтенә ҡушылыу өсөн хәрәкәт Башҡортостандың үҙәк, көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш төбәктәрендә йәшәгән ырыуҙар араһында ла



йәйелә (улар был ваҡытта Нуғай Урҙаһына буйһонған була). Тап ошо осорҙа был яҡтарҙа йәшәүсе башҡорт ырыуҙары бер-бер артлы үҙҙәрен Рәсәй ҡул аҫтына алыуҙы үтенеп, Ҡаҙанға, Иван IV батшаның ышаныслы кешеһенә, илселәрен ебәрә.

Риүәйәт-легендалар буйынса, ырыу-ҡәбиләләрҙең юғары ҡатлам феодалдарынан торған илселәр, үҙҙәре менән бай бүләктәр: Урал кештәре, һыуҙар, төлкө тиреләре, бал һәм башҡа нәмәләр алып, юл булмағанлыҡтан алыҫ сәфәргә ҡышҡыһын саңғыларҙа сыҡҡан. «Был да башҡорттарҙың көнкүрешенең ауыр булыуына ишаралай, – тип яҙа тыуған яҡты өйрәнеүсе Рәйес Ҡорбанғәлиев. - Тимәк, уларҙың Ҡаҙанға барып етерлек хәлле аттары булмаған тигән һығымта яһарға була» (29, 189-сы бит).

Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән һәм Тамъян ҡәбиләләре илселәренең батшаның ышаныслы кешеһенә урыҫ подданныйлығына алыуҙы һорап барыуы тураһында шул ырыуҙарҙың шәжәрәләре бик асыҡ бәйән итә. Мәҫәлән, «...башҡорт исемләнеш дүрт ырыуҙан, йәғни Үҫәргәндән Биҡбау кенәз, Ҡыпсаҡтан Мешәүле Ҡарағужаҡ кенәз, Бөрйәндән Иҫкебай кенәз, Тамъяндан Шәғәле Шаһман... мәшһүр дүрт ырыуҙан оло кенәз Иван Васильевичҡа Ҡаҙан шәһәренә саҡырылып барып, Русиә шаһына тоғро булыуыбыҙҙы белдерҙек... Һәм беҙ ырыунәсәптәребеҙ менән ихлас хеҙмәт ҡылмаҡ өсөн, указнамәләр төҙәнөк...» (2, 75-76).

1556-1557 йылдарҙа башҡорт вәкилдәренең Мәскәүгә барыуы Башҡортостандың Рус дәүләте составына инеүенең һуңғы этабы була, шул ваҡытта улар Мәскәүҙә был актты рәсми рәүештә теркәп ҡайта. Башҡорт илселәрен Иван Грозный батша ҡабул итә һәм уларға ҡушылыу шарттары теркәлгән ярлыҡаштар (жалованный грамоталар) бирә. Был хаҡта Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһендә шулай тиелә: *«Тарих туғыҙ йөҙ илле туғыҙға еткәс, (1552 й.) Сыҡсан йылында, рәкрәб йондоҙонон икенсе көнөндә Аҡ батша Ҡаҙан ҡалаһын алды. Булгарин ал-*

*ды. Тәуарих (яулап) алғандан һуң һәр тарафҡа хөкөмләрин (илселәрен) йөрәттө. «Һис кем ирсә нуғай халҡы кеуек йортон ташлап, ере һалып ҡасмаһын, һәр кем үҙ динен тотһон, үҙе йолаһын ҡылһын», - тип илселәр йөрәттө һәм хөкөмдарын йөрәткәндән һуң, тарих туғыҙ йөҙ алтмыш берҙә (1554 й.) Бабсаҡ уғлы Ҡусәкби үҙ иленән өс олуғ ағаларын алып, йәғни Бикбау һәм Мишәүле Ҡараҡужаҡ һәм Шәғәле Шаһман, өс кенәҙҙәрен алуб, беренсе юлдаштары илә баруб, Аҡ би батшаға баш һалдылар һәм ярлыҡаштар (грамоталар) алдылар, атлас кармазин тундар кейҙеләр. Ҡаҙанға батшаға мәғлүм булдылар, бусуп (ҡасып) киткән нуғай халҡының ерҙәрен алдылар»* (2, 111).

Шулай итеп, башҡорттарҙың күпселеге Рус дәүләте составына 1554-1557 йылдарҙа инә. «Ете ырыу» ҡобайырының легенда өлөшөндә был хәл-ваҡиғалар түбәндәгесә бәйән ителә: «Борон заманда, иген сәсмәгән, бесән сапмаған, олатайҙар малына гел сәскә утлатып, үреш, ҡышлыҡ тибен эҙләп, ырыу-ырыу эркелешеп, ер-һыу өсөн бер ырыу икенсе ырыуға көйөҫ-көйөҫ яу асып, бер-береһенең йәйләүен баҫып, мал-тыуарын, бала-саға, ҡатын-ҡыҙын талап йәшәгән саҡта, аранан аҡыллылар сығып, яусылар араһында һүҙ асҡандар: «Аҙаматтар, ырыу башҡа булһа ла, бауыр бер бит. Ошо яңъяллашып яулашыуҙы туҡтатҡанда ла арыу булмаҫмы икән?» - тигәндәр, ти.

Яусылар һөңгөһөн ергә сәнсеп, һөйләүсене ауыҙы менән йоторҙай булып, керпек ҡаҡмай тыңлап торғандар. Ҡайһылары ауыҙына үлән ҡабып, башын түбән эйеп, уйлап ултырғандар, ти. Һөйләүсенән һүҙ сыҡҡан, һүҙгә эйәреп һүҙ киткән. Бары ла аҡыллы һүҙен хуп күреп, яулашыуҙы ташлар булғас, үҙе баш, үҙе түш булып йөрөгән аҡһаҡалдар араһында шау-шыу киткән; үҙара даулашып, һәр ҡайһы аҡһаҡал үҙе морон төрткән ханына барып кәңәш-төңәш иткән, ярҙам һораған, ти. Хандар ашыҡмаған, элеккесә йәшәй биргән. Аҡһаҡалдарҙын эше был яҡ менән дә сыҡмағас, аптырағандар.



Һаман көслө ырыу көсһөҙ ырыуҙы талап, былай тороу ярамаҫ, бер ҙә булмаһа Мәскәү батшаһына барып ҡарайыҡ, тип һүҙ берләштергәндәр, ти.

Ерле-ерендә кәңәш итеп, тағы ла ырыу аҡһаҡалдары бер ергә йыйылып һөйләшкәндәр. Аҙаҡ сиктә бөтә ырыу аҡһаҡалдары араһынан бөрйәндең Иҫке бей, ҡыпсаҡтың Ҡужаҡ, тамъяндың Шәғәле тигән кешеләрен батшаға ебәрергә булғандар, ти. Был кешеләр Мәскәүгә барғас, батша, бик ҙур ҡунаҡтар килгән, тип ҡаршы алған, ти. Бөтә һанат, янаралдарын йыйған, аш-һыу әҙерләп, ҡунаҡ иткән. Бары ла былардан һорашҡан, былар илдең әйткән йомоштарын энәһенән-ебенә саҡлы һөйләгәс, батша:

- Берүтала минә баш һалығыҙ, һеҙҙең ер-һыуығыҙҙы үҙ арағыҙға бүлеп бирҙерермен; тирә-яҡ хандар һеҙҙең ергә килеп аяҡ баҫа алмаҫ, - тигәс, аҡһаҡалдар үҙ-ара аҡыллашҡандар, ти. «Тимә бер ханға тырым-тырағай яһаҡ-маҙар ташып йөрөгәнсе, бер ерҙә булыр. Илкеһалҡы уйлап тормайыҡ, баш һалайыҡ», - тип һөйләшкәндәр ҙә, батшаға инеп, үҙ теләктәрен әйткәндәр. Батша быларҙың үҙҙәрен ант иттереп, бөтә илде баш һалдырырға һүҙ бирҙереп, ҙур туй яһаған; бөтә һарайҙарын күрһәткән, бер нисә көн ҡунаҡ итеп, барына ла ҙур бүләк, тарханлыҡ биргән. Ер-һыу сиктәрен билдәләп, ырыу ыҙғыштарын бөтөрөргә кеше ебәрмәк булған. Шунан илселәр ҡайтып киткән.

Илселәр ҡайтып, ип-һап итеп, халыҡ менән һөйләшеп бөтөүгә, батша кешеләре лә килеп еткән, ти. Батша ебәргән нәсәлниктәр килгәс, ат-хат еткән ерҙән ете ырыу халҡын Тарауыл аҡланына йыйғандар, ҙур туй яһағандар. Туйҙа ырыу-ырыу яҡлашып, батырҙар көрәшкән, сәсәндәр әйтем әйтешеп, ҡурайсылар ҡурай уйнаған, йырсылар йырлаған. Аҡһаҡалдар, байҙар ат саптырған, һунарсылар ат өҫтөндә уйнап, сәпкә атышҡан. Бөтәһе белгәненсә, уйын-көлкө яһап, көн уҙғарғандар, ти. Йыйынға килгән ете ырыу эсендә быгаса Уралды

күрмәгән, буйына аяҡ баҫмаған ырыуҙар ҙа булған» (30, 149-150).

Ҡобайырҙан был өҙөктә ни сәбәптәндер Үҫәргән ырыуы башлығы Бикбау бей телгә алынмаған. Әммә башҡорт халҡының ошо уҡ жанрҙағы икенсе бер поэтик ауыҙ-тел ижады әҫәрендә: «Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне» ҡобайырында уның образына ла ҙур урын бүленә. Бикбау бей тәүҙә Ҡарағөләмбәт хан яҡлы булып, Ҡобағош бей-сәсәнгә ҡаршы көрәш алып бара, аҙаҡ унан еңелә. Ҡобайырҙа әйтелгәнсә: «Бара-бара халыҡ, Бикбау бей менән ханды берәм-берәм ташлап, Ҡобағошҡа ыҡлаған. Хан түҙмәгән ҡасҡан. Бикбау ҡалған. Ҡобағошҡа буй биргән. Ҡарағөләмбәт, бүтән хандарҙан көс алып, ил өҫтөнә килерҙе ишеткәс, Ҡобағош, ат саптырып, ил йыйған.

- Был хандан ҡотолоп булмаҫ, аҡ батшанан ярҙам һорайыҡ, беҙгә ярҙам бирһен. Арала ыҙғыш бөтһөн, ырыу-ырыуға ерҙе бүлеп бирһен, - тип, үҫәргәндән Бикбау бейҙең үҙен, бөрйәндән Иҫке бейҙе, ҡыпсаҡтан Ҡара Ҡужаҡты, тамъяндан Шаҡманды аҡ батшаға ебәргән, ти» (30, 137).

Көньяҡ-көнсығыш башҡорт ырыуҙарының йәғни ҡыпсаҡ, бөрйән, тамъяндарҙың Рус дәүләтенә ҡушылыуын фольклор әҫәрҙәренән тыш яҙма сығанаҡтар ҙа йәғни шәжәрәләр ҙә раҫлай. Шуларҙан, мәҫәлән, «Бөрйән, Ҡыпсаҡ Үҫәргән һәм Тамъян ҡәбиләләре шәжәрәһе» тигән ҡулъяҙма ҡомартҡының түбәндәге юлдарына күҙ һалайыҡ: «*1547 йылдан башлап олуғ шаһыбыҙ Иван Васильевич Грозный Рәсәй йәмәғәттәре менән Ҡаҙан ҡалаһын алырға килеп, күп тапҡырҙар һуғыш асҡандан һуң, татар хандарынан Йәдкәр хан заманында, 1552 йылдың 2 октябрендә уны тамам үҙ ҡулына алды. Һәм шул Ҡаҙан ҡалаһында күп йорттарында ҡылдылар. Бынан һуң башҡорттар Ҡаҙандың көнсығыш яғындағы дүрт ырыу бер хисаптағы яҡшы кешеләрен Иван батшаға ебәрҙеләр. Уларҙың янына килеүҙәрен батша үҙе лә талап иткәйне. Үрҙә әйтелгәндәрҙән Бикбау кенәз, Бөр-*



*йән ырыуынан Иҫкебей кенәз, Ҡыпсаҡ ырыуынан Мешәүле Ҡарағужаҡ кенәз, Тамъяндан Шәғәле Шаҡман кенәз.*

*Билдәле, әле исемдәре үрҙә телгә алынған дүрт бей, Ҡаҙан ҡалаһына барып, Иван Грозныйға мәғлүм булдылар. Башҡорттарҙың ихлас хеҙмәт итеүҙәре менән ҡабул итеп, бер ил кешеләре, крәҫтиәндәр итеп танығандан һуң, хөрмәт йөҙөнән тарханлыҡ дәрәжәләре биреп, үҙҙәренә нағрад итеп, грамота менән ерҙәрен һәм һыуҙарын үлсәтеп, үҙҙәренең бирелеү үтенесе менән ғариза ҡылдылар»* (2, 71).

Көньяҡ-көнсығыш башҡорт ҡәбиләләре Рус дәүләте составына үҙ теләге менән ингәс, нуғайҙар 1558 йылдан башлап Башҡортостанды ҡалдырып, Кубанға, Ҡырымға күсенә башлай. 1558 йылда Иҙел буйындағы ҙур аслыҡ һөҙөмтәһендә Исмәғил мырҙаның ҡулы аҫтында Башҡортостанда йәшәгәндәре урыҫ подданныйлығын ҡабул итә. 1600 йылғы аслыҡ, низағтар арҡаһында, өҫтәүенә, ул саҡта Оло Нуғайҙың һуңғы бөйөк бейе Ормәмбәт мырҙа ла вафат булғанлыҡтан, ҡалған нуғайҙар ҙа Башҡортостанды бөтөнләйгә ҡалдыра. Аслыҡ һәм ыҙғыш-тартыштарҙан бер миллионға яҡын нуғай ҡырыла.

Шулай итеп, Көньяҡ-көнсығыш Башҡортостандан Бөрйән, Тамъян, Үҫәргән, Ҡыпсаҡ ырыуҙарының Рәсәйгә берҙәм ҡушылыуы бөтә башҡорт иле өсөн мөһим ваҡиғаға әүерелә. Был хаҡта тарихсы Әбүбәкер Нуриан улы Усманов былай тип яҙҙы: «**Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының Рәсәйгә ҡушылыуы һөҙөмтәһендә нуғайҙар Башҡортостандың эске райондарына үтеп инеүҙең мөһим мөмкинлектәрен бөтөнләйгә юғалта; улар йәйләү өсөн яҡшы көтөүлектәренән мәхрүм булып ҡына ҡалмай, бәлки, Башҡортостандың был яғы халҡы өҫтөнән хакимлыҡтарын да юғалта. Былар барыһы ла Нуғай Урҙаһының артабан көсһеҙләнеүенә һәм тарҡалыуына алып килә**» (31, 150-151).

* * *

Илселәрҙең үтенесе буйынса Башҡортостанға Мәскәүҙән перепесчиктар килә. Улар дала ерҙәрен дә, Уралдағы аҫаба ерҙәрҙе лә, һыуҙарҙы ла бүлә. Күпме яһаҡ түләргә икәнлеген билдәләй. Был хаҡта «Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән һәм Тамъян ырыуҙары шәжәрәһе»ндә шулай тиелә: *«Уларҙың (илселәрҙең - Т. Ш.) үтенесе буйынса олуг батша Иван Грозный фарманы менән билдәле ерҙәрҙе үлсәтеү йәғни сик ҡуйыу өсөн, Нуғай һәм Себер юлдарына бойорокло яҙыуҙар ебәреп, ҡайһылыр яҙыуға ҡарап, ырыуҙарҙың биләй торған ерҙәрен, мәҫәлән, сәхрәләрен, урманлыҡтарын: кәңәшләшеп, ете ырыу халыҡ, йәғни «семьрод» исемендә, килешеп, ерҙәрҙе үлсәттеләр. Һәм дә 1564 йылдарҙа яһаҡ түләүгә лә ризалаштылар.*

*Грозный тарафынан билдәләнгән мәжбүри яһаҡ: аттар һәм һыуһар, һәм төлкө, вә ғәйре төрлө яһаҡтар, ҡайһылыр кәңәшләшеп бүлеп алып үлсәтелмеш ерҙәрҙең түбәндә бер нисәһе бәйән ҡылына: элек Яйыҡ һыуы буйлап түбәнге сиге Һарымһаҡтан, үрге сиге Боҙсауылдан, Ҡыҙыл, Һаҡмар һәм Йылайыр һыуҙары башынан тамағынаса һәр тауҙары менән ике Һурәм башынан тамағынаса саҡлы һәм тауҙары менән, һәм Һайылмыш башынан, Аяҡ, Меңү йылғалары башынан, Кера - үҙенең таш кисеүенән, Меңү йылғаһынан Яңғыҙ өйәңкегәсә, һәм Нуғай кисеүенән, үтә Иртөбәктән Үксерә түбәһенәсә, һәм Сулаҡ мәрүәшенән, Үткәш ҡарағайҙан, Миәҙәк тауынан, Ҡалмаҡ һәм Бишазиларҙың башынан һыуҙары, һәр тауҙары, һәм Айын болон яланынан, Әлемсат тамағынан, Һаҡмарҙың Алты Тора ташынан Лайымбирҙе түбәһенәсә, һәм Таналыҡ һыуының таш кисеүенән ҡамыштарын да ҡушып, түбәнән, ваҡ тауҙан, Четум һыуынаса түбәнге тарафы - Түнгәк менән Үҫәргән ырыуы башҡорттарының биләй торған ере булды. Унан сәхрә тарафы түбәнге сиге мәҙкүр Һарымһаҡтан өс Үҙән менән Чезми һәм Кәмәлек һыуҙары башынан аяғына саҡлы барса тауҙары менән, Үрге сиге тәрән*



*күлгәсә, мәҫәлән, Дүрт күл, Бөрйән ырыуының особенный биләй торған ерҙәре булды.*

*Үҫәргәндән Бикбау кенәз, Тамъяндан Шағәле Шаҡман кенәз, Бөрйәндең Иҫкебей кенәз, Ҡыпсаҡтың Мешәүле Ҡарағужаҡ кенәз менән барса ырыуҙарҙың биләй торған ерҙәре булды.*

*Ҡайһы ерҙәрҙе мәшүрәт итеп, үлсәтеп бүлеп алмыш ерҙәре мәҙкүр Ҡаҙан шәһәрендә кенәгәлә яҙылмыш.*

*Мәғлүм төлкө яғаһынан түләмәктәрендә төлкө таба алмағанда баҡырлата ун тиндән, илле тиндән һәм 55 тингәсә хисап ителеүҙер. Ошоно раҫлап олуг бадишаһ олуғ һәнаттары менән ҡулдарын ҡуйҙы. Иван Бобров тип, Степан Соколов тип, Алмавир Степан Белагушин тип, писарь катиб Михаил Белинский тип»* (2, 71-72).

## ПОДДАННЫЙЛЫҠТЫ ҠАБУЛ ИТЕҮ ШАРТТАРЫ ҺӘМ ҠУШЫЛЫУҘЫҢ ТАРИХИ ӘҺӘМИӘТЕ

Башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылыу шарттары ниндәй булған һуң? Башҡорттарҙың вәкилдәре башта батшаның Ҡаҙандағы наместнигы менән һөйләшеүҙәр алып бара. Аҙаҡ был хаҡта һүҙ Мәскәүҙә дауам иттерелә, бының өсөн унда илселәр ебәрелә. Батша Иван Грозный тарафынан уларға бирелгән ярлыҡаштар ҡушылыу шарттары яҙылған килешеү булып торған.

Рус дәүләте башҡорттарға, барыһынан элек, тыныс тормош вәғәҙә итә, уларҙың элекке хужаларының дәғүәләренән дә, тышҡы дошмандарҙың баҫып инеүенән дә ҡурсаларға һүҙ бирә. Ер мәсьәләһендә ташлама яһау бигерәк тә мөһим була.

Шулай итеп, хөкүмәт башҡорттарҙың үҙ ерҙәренә үҙҙәре хужа булыу хоҡуғын яҡлай һәм уларҙың ергә аҫабалығын таный.

Ул замандарҙа кешеләр тормошонда дин бик ҙур роль уйнаған. Башҡорт илселәре батшанан дингә теймәүҙе һораған. Батша уларҙың һорауын ҡәнәғәтләндергән.

Хөкүмәттең урындарҙа власты башҡорт феодалдары - бейҙәр, кенәздәр ҡулында һаҡлап ҡалдырыуы ла ҙур әһәмиәткә эйә булған, ул ерле халыҡтың эске тормошона ҡыҫылмаҫҡа һүҙ биргән.

Шулай ҙа Рус дәүләте бер яҡлы ғына ташламалар яһаған икән, тип уйларға ярамай. Башҡорттар ҙа өҫтәренә ҡайһы бер йөкләмәләр ала. Улар ергә һалым - яһаҡ та түләргә тейеш була. Юрматылар шәжәрәһендә шундай юлдар бар: «Яһаҡҡа һуҫар түләмәк булып вәғәҙә бирҙек». Артабан киләһе йылына: «...йөҙ һуҫарҙы... Мәскәүгә алып барҙылар һәм батшаға түләнеләр», - тиелә. Шәжәрәлә яһаҡтың ниҙән торғаны һанап кителә. Унан яһаҡтың ер өсөн түләнеүе асыҡ итеп әйтелә. «Ерҙәребеҙҙә булған кәсептәребеҙҙән, йәғни бал, һуҫар һәм бәғзеләребеҙ ҡама, ҡондоҙ тиреһен яһаҡ итеп бирҙек» (2, 29-31). Бөрйәндәрҙең шәжәрәһендә лә ошо фекер сағылдырыла.

Шуныһы ла бик мөһим булған: Башҡортостандың ҡушылыуы Рәсәй ерҙәрен байтаҡҡа киңәйткән. Көньяҡ-көнсығышта уның сиктәре Яйыҡ, Тубыл йылғаларына тиклем барып еткән. Күренеүенсә, яңы ерҙәр ҡушыу Рус дәүләтенең мәнфәғәттәренә лә яуап биргән.

Башҡортостандың үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылыуы тәрән прогрессив әһәмиәткә эйә була. Ошо ваҡыттан алып башҡорт халҡы тарихында яңы дәүер башлана.

Башҡортостанда феодалдар араһында һуғыштар туҡтап тора. Башҡорттар тыныс йәшәргә һәм донъя көтөргә мөмкинлек ала.

Рус дәүләте составына инеү башҡорттарҙың сәйәси һәм территориаль тарҡаулығына сик ҡуя, был иһә уларҙың халыҡ булып тамам ойошоуына ыңғай булышлыҡ итә. Башҡорттар рус крәҫтиәндәренән игенселек менән һөнәрселек күнекмәләре ала, ә рустар башҡорттарҙан малсылыҡ һәм умартасылыҡ серҙәренә өйрәнә. Был Башҡортостан хужалығын үҫтереүгә ыңғай йоғонто



яһай. Башҡорттар, рустар, бүтән халыҡтар төбәктең тәбиғәт байлыҡтарын бергәләп үҙләштерә.

Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы илебеҙҙең рус һәм башҡа халыҡтары мәнфәғәттәренә лә яуап бирә. Феодаль-крепостнойлыҡ иҙеүенән ҡасып, Рәсәйҙең үҙәк төбәктәренән рус һәм рус булмаған милләт крәҫтиәндәре Башҡортостанға ағыла, бында төпләнеп, хужалыҡ алып барыу мөмкинлеге ала, ошонда икенсе ватанын таба. Илдең территорияһы нығ киңәйеп, халҡы ла шаҡтай нығ арта.

Шулай ҙа Рәсәйгә ҡушылыу ябай кешеләрҙе феодаль иҙеүҙән ҡотҡармаған. Ярлы башҡорттар үҙ байҙары менән тархандары иҙеүенән генә түгел, Рус дәүләтенең феодаль, милли-колониаль иҙеүенән дә, рус дворяндарының ҡыҫымынан да яфа сиккән. Шуға күрә улар иҙеүгә, мәсхәрәләүгә түҙмәйенсә, әленән-әле азатлыҡ яуына күтәрелеп торған.

Профессор Ә. З. Әсфәндиәров Башҡортостандың Рәсәй дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуына шундай ыңғай баһа бирҙе: «Иван IV менән төҙөлгән килешеүҙә башҡорттар ер өсөн яһаҡ түләү, батша подданныйҙары булараҡ, уға тоғро булырға һәм хәрби хеҙмәт үтәргә йөкләмә алғандар. Улар анттарына һәр саҡ тоғро булған.

Һүҙ ыңғайында әйтеп үтәйек: әгәр батшалар килешеү шарттарын йыш ҡына боҙорға ынтылһа, башҡорттар уның дөрөҫ үтәлеүен талап итеп, уға ҡаршылыҡ күрһәткән, баш күтәргән. Ләкин Рәсәйҙән сығыу мәсьәләһен, бер-ике осраҡты ғына иҫәпләмәгәндә, улар көн тәртибенә һис тә ҡуймаған. ...Иван IV менән төҙөлгән килешеүгә беҙҙең ата-бабалар тоғро булып ҡалған, тип нығлап әйтеп була. Был башҡорт халҡының законға ярашлы эш итеүе, ата-бабалар ҡул ҡуйған килешеүҙе саманан тыш ихтирам итеүе, бөгөн шул традицияны дауам итеп, үҙ республикаһының Рәсәй менән, Башҡортостанда йәшәгән башҡа халыҡтар менән хоҡуҡи мөнә-

сәбәттәр урынлаштырырға ынтылыуында ла тойола һәм күренә.

Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыу рәүешен башҡорттарҙың үҙҙәрендә һаҡланған башҡа тарихи сығанаҡтарҙа ла күҙәтергә мөмкин. Был бигерәк тә батша тарафынан ике яҡтың килешеү шарттарын боҙоу һәм уға ҡаршы башҡорттарҙың мөнәсәбәтен күрһәткән ҡағыҙҙарҙа асыҡ сағыла» (32, 9).

Ошо үрҙә яҙылғандарҙы тыуған яҡты өйрәнеүсе Маһинур Мозафарова һүҙҙәре менән дөйөмләштереп әйткәндә: «Башҡортостандың Рус дәүләтенә ирекле ҡушылыуы ике яҡ өсөн дә отошло була. Беренсенән, был акция уларҙы һуғыштан, ҡан ҡойоштан һаҡлап ҡала, икенсенән, Рус дәүләтенә көньяҡҡа табан - Нуғай Урҙаһы ерҙәренә һәм көнсығышҡа табан Себер ханлығы ерҙәренә юл асыла; өсөнсөнән, Рус дәүләте башҡорт ерҙәре иҫәбенә ҙурая, дүртенсенән, башҡорттарҙы өс - Нуғай, Ҡаҙан, Себер ханлыҡтары составында йотолоп, этнос булараҡ юҡҡа сығыуҙан һаҡлап ҡала...» (33, 158-се һан).

Башҡорт яҙыусыһы Ғәзим Шафиҡов та башҡорттарҙың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуында ата-олатайҙарыбыҙҙың ғәйәт зирәклеген күрә. Бөгөнгө Рәсәй Федерализмына ла тап ошо ҡушылыу-берләшеү арҡаһында нигеҙ һалынғанлығын иҫкә төшөрһәк, әҙип менән килешмәү мөмкин түгел: «XVI быуатта Рус дәүләтенә ҡушылырҙан алда беҙҙең уратыуҙа йәшәүсе нуғай, ҡырым, себер ҡәүемдәре Рус дәүләте тарафынан яулана, һәм был саҡта инде батшалыҡ башҡорттарға ғәскәри көс буларак таяна. Алдараҡ Ҡаҙан ханлығы яулана. Татарҙарҙан тыш, нуғайҙар, ҡырымдар һәм себерҙәр һунынан халыҡ һәм милләт буларак үҫешә алмай, бер нисә өлөшкә бүленеп, башҡа ҡәүемдәр, дәүләттәр тарафынан йотола. Заманында ханлыҡтары, дәүләтселектәре булған был ҡәүемдәрҙе беҙ бөгөн айырым халыҡ тип белмәйбеҙ. Ошо урында атай-олатайҙарҙың тағы бер зирәклеген билдәләү кәрәктер. Үҙ иркең менән ҡушылыу һәм



яуланыу араһында айырма ҙур шул. Яулаусы, баҫып алыусы һәр саҡ яуланған яҡҡа үҙенең дине, тел һәм ер буйынса ҡәтғи шарттарын ҡуя һәм уларҙың мотлаҡ үтәлешен талап итә. Йәғни яуланған территория, халыҡ тулыһынса яулаусының мөлкәт-даирәһенә әүерелә. Ошо урында башҡорттарҙың үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылыуының тағы бер тарихи сәбәбен асыҡларға булалыр, минеңсә. Монгол-татарҙарҙы, даланың башҡа бәшәнәк ҡеүек ҙур ғына ҡәүемдәрен юҡ иткән урыҫтарҙың яҡын йылдарҙа ҡеүәтле дәүләт булып аяҡҡа баҫасағын һәм хәрби машинаһын Уралға, Себергә табан йүнәлтерен алдан белгәндер ата-олатайҙар» (28, 16-сы һан).

## 4. ШӘҒӘЛЕ ШАҺМАН - ТАМЪЯН ЫРЫУЫ БАШЛЫҒЫ ҺӘМ КЕНӘЗЕ

Кем һуң ул **Шәғәле Шаһман**? Беренсенән, XVI быуаттағы Тамъян ҡәбиләһенең алдынғы ҡарашлы башлығы, йәғни бейе, икенсенән, оло ҡәүҙәле, ҙур физик көскә эйә баһадир, бәһлеүән, өсөнсөнән, Башҡортостандың Рәсәй дәүләтселегенә үҙ ирке менән ҡушылыуында әүҙем эш алып барған башҡорт илселәренең береһе.

Халыҡ хәтерендә һаҡланған мәғлүмәттәр буйынса ул бик аҡыллы, төптән уйлап эш итеүсе, үткер ҡарашлы шәхес булған. Шәғәлене, батырҙарҙың да батыры, тип йөрөткәндәр. Уның һаҙағы (йәйәһе) буйволдың - һыу һыйырының мөгөҙөнән бөгөп эшләнгән булған, тиҙәр. Был ҡоралды Шәғәле Шаһман бары тик үҙе генә тартып ата алған. Үлер алдынан кенәз һаҙағын оло улына биргән дә: «Кем минең уҡ, һаҙағымды тартып ата ала, шул башҡорт халҡын данға күмер», - тигән. Был ҡомартҡыны башҡорттар бик ҡәҙерләп һаҡлаған, һәм бына бер заман уны ун дүрт йәшлек Салауат Юлаев ҡулына алып, һауалағы бөркөттө атып төшөргән. Был

ваҡиға рус яҙыусыһы Степан Злобиндың «Салауат Юлаев» тарихи романында ла һүрәтләнә.

Шәғәле Шаһмандың ҡайҙа тыуыуын теүәл генә белеүсе йә аныҡ ҡына документтар юҡ. Усман Әбүбәкеров уны: «Хәҙерге Бөрйән районының Брәтәк ауылында тыуған булырға тейеш», - тип иҫәпләй. Бындай ихтималлыҡ бар, сөнки: «Оло Нөгөш буйына ултырған Брәтәк ауылы Бөрйән районына ҡарай, ә уның халҡының күпселеген Тамъян ҡәбиләһе башҡорттары тәшкил итә» (5, 71). Был тарихи шәхестең ҡайҙа ерләнеүе иһә яҡшы билдәле - хәҙерге Белорет районының Ҡаһарман ауылы зыяратында. Филология фәндәре кандидаты Мөхтәр Мофазал улы Сәғитов XX быуаттың 70-се йылдарында донъя күргән «Шағәле Шаҡман иләндә» исемле юлъяҙмаһында ул хаҡта бына нисек яҙа: «*Зыярат, оло юл менән ауыл аралығында булып, кәртәләп алынған. Эргәһендә генә ҙур солоҡ ҡарағай бөтә тирә-яҡҡа йәм биреп ултыра. Аҡ ҡайынлыҡтар эсендәге зыяратта боронғо ҡәберлектәр ҙә, яңылары ла байтаҡ. Атаулла ағай, оҙон булып үҫкән үләндәрҙе - ҡаҙаяҡтарҙы айыра баҫып, беҙҙе туп-тура таш буралы иҫке ҡәбер янына алып килеп:*

*- Бына ошо инде Шағәле Шаҡман кенәз ҡәбере. Уның ҡәбере икәнен ауылдың байтаҡ ир заты белә. Бынһы, - тине ул, бер үк ҙурлыҡтағы икенсе иҫке ҡәбергә ымлап, - Шағәле Шаҡмандың бик яҡын кешеһе ҡәбере, тик мин уның исемен, ниндәйерәк кеше булыуын әйтә алмайым. Мин, сама менән булһа ла, ҡәберҙе үлсәргә тотондом. Ҡәбер тупрағы ер менән тигеҙләнгән. Атаулла ағайҙың әйтеүенә ҡарағанда, ҡәбер өҫтөндә элек ағас бура булған, әммә ул сереп бөткән. Әлбиттә, хәҙер быны раҫларҙай дәлилдәр юҡ. Башҡорттарҙа ҡәбер бураһын яңыртыу ғәҙәте булмау сәбәпле, тәүге ағас бураның һаҡланмауы ғәжәп түгел. Шул уҡ ваҡытта уның бөтөнләй булмауы ла ихтимал. Ни өсөн тиһәң, ергә һеңеп бөтөп барған таш бура бар. Ҡырлы таштарҙан һалынған бураның оҙонлоғо алты метр, киңлеге -*



*өс метр. Бура ерҙән 30 см. бейеклектә, ә ҡалынлығы - 40 см. самаһы. Ҡәберҙең төньяҡҡа ҡараған өлөшөндә ҙур булмаған дүрткел таш ултыртылған. Ул таш ерҙән 50 см. самаһы сығып тора. Ташта яҙыуҙар күренмәне»* (5, 75).

Шәғәле Шаһмандың тап бына шунда, Белорет районының Ҡаһарман ауылында, ерләнеүенең үҙенә күрә сәбәбе бар. Был ауылдың тирә-яғы уның ырыуы биләмәләренә ингән. Башҡорт кенәзе улдарының береһенә ҡунаҡҡа килгән ваҡытта ҡапыл ҡаты ауырып китеп, ғафат булып ҡалған, һәм уны аты менән бергә йәйләү зыяратына ерләгәндәр. Аҙаҡ был урында Шәғәле Шаһмандың 10-сы быуын вариҫы *Ҡаһарман Ҡаҙаҡкол улы* ауылға нигеҙ һалған.

Белорет районының Шығай ауылынан Э. Сәйәхова «Урал» гәзитендә донъя күргән «Шығай ауылының барлыҡҡа килеүе» тигән мәҡәләһендә Шәғәленең атаһы Шаһмандың ***Абдрахман, Шығай*** исемле бер туғандары булыуы хаҡында яҙа һәм шуға бәйле хеҙмәт ветераны Фатима Исламованың ғаилә шәжәрәһен миҫалға килтерә (34, 48-се һан).

XVI быуат баштарында Шәғәленең атаһы Шаһман бер туғандары менән Башҡортостандың көньяғынан был төбәккә күсенеп килә. Был хаҡта профессор Әнүәр Әсфәндиәров та «Башҡорт тархандары» тигән китабында яҙып үтә: «Чуть отступая от темы, заодно отметим, что сведения реестра 1730 г. как будто раскрывают тайну заселения башкирами Тамьянской волости бассейна р. Большой и Малый Кизил, территории нынешнего Абзелиловского района Республики Башкортостан. Большинство тамьянцев проживало в то время на своих землях по р. Ик Казанской дороги и в бассейне р. Белой и Нугуша Ногайской дороги. Выходит, что в районе двух Кизилов их почти не было. Значит, переселение тамьянцев в этот регион произошло до и после 1730 г. Это началось с Нугуша и Белой, где сегодня известно всего лишь 10-12 населенных пунктов, распо-

ложенных в нынешних Мелеузовском и Куюргазинском районах Республики Башкортостан, в то время как на территории Абзелиловского района и поныне находятся 40-45 их деревень» (35, 16-17).

Шаһмандың бер туғаны **Шығайҙы** хәҙерге Белорет районындағы шул исемдәге ауылға нигеҙ һалыусы тип иҫәпләйҙәр. Тимәк, был ауылдағы тамъяндар Шәғәле Шаһманға һәм уның варистарына нәҫелдәш булып сыға. Китаптың ошо бүлеге өҫтөндә эшләгәндә беҙ көтөлмәгән бер ҡыуанысллы фактҡа тап булдыҡ: Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, филология фәндәре докторы Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы Хисаметдинова беҙгә Шәғәле Шаһмандың Шығай ауылында бөгөн дә иҫәнһау йәшәп ятыусы нәҫеле вәкилдәренең, Мөхтәровтарҙың, шәжәрәһе күсермәһен бүләк итте. Әгәр әле үрҙә телгә алынған ике шәжәрәне берләштереп ҡараһаҡ, башҡорт кенәзенең, беренсенән, үҙенең нәҫел тамырҙарына бәйле ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәргә тап булырбыҙ, икенсенән, уның нәҫеленең быға саҡлы киң йәмәғәтселеккә билдәле булмаған өр-яңы бер тармағын осратырбыҙ.

Э. Сәйәхова тарафынан килтерелгән мәғлүмәттәрҙә хаҡлыҡ барҙыр, тип уйлайбыҙ, сөнки **Шығай** исеме Фатима Исламованың ғаилә шәжәрәһендә лә (Бер туғандар: *Шаһман, Абдрахман, Шығай*), Мөхтәровтарҙың шәжәрәһендә лә (*Шәғәле Шаһман - Сыуаҡ бей - Шығай бей - Алас бей - Күсмән бей - Шығай тархан*), Усман Әбүбәкеров *төҙөгән шәжәрәлә лә (Шәғәле Шаһман - Сеүә - Тежәмәргән - Ша(ы)ғай)* бер нисә быуын аша яңынан ҡабатлана. Һуңғы исем шул уҡ Шығай булыуы бик тә ихтимал. Бәлки, шәжәрәләрҙе ҡат-ҡат күсергән ваҡытта хата ебәрелеп, шулай Шығайҙан Шағайға үҙгәргәндер? Былай тип уйларға урын бар, сөнки Шәғәле Шаһман нәҫеленә бәйле шәжәрәләрҙә лә, рәүиз ҡағыҙҙарында ла, информаторҙарҙан яҙып алынған мәғлүмәттәрҙә лә 3-4 йә 4-5 быуын аша ҡайһы бер исемдәр



ҡабатлана. Был яңы тыуған ир балаға нәҫелендәге мәрхүм ир-уҙамандарҙың иҫтәлеген һаҡлау, хөрмәт итеү йөҙөнән уларҙың исемен ҡайтанан ҡушыу йолаһына бәйле.

IX рәүиз ҡағыҙҙарында Шығай ауылында йәшәүсе 60 йәшлек Сәғит Шығаев теркәлгән.

Э. Сәйәхова яҙып алған информаторҙарҙың мәғлүмәттәре буйынса Шығайҙың **Хөсәйен, Үткәл** исемле улдары булған. Улар - аҙаҡ шул исемдәрҙәге тамъян ауылдарын нигеҙләүселәр.

Шәғәле Шаһмандың Абдрахман исемле туғанының ике улы: **Көтөр, Таһир** булған. Таһирҙан **Сермән** тыуған. Ул хәҙерге Белорет районындағы шул исемдәге ауылға нигеҙ һалған. Аҙаҡ ул ауыл Сермәндең улдарының исеме менән **Таһир, Аҡкөсөк, Көсөк** тип тә йөрөтөлгән. Шулай ҙа һуңынан Сермән ойконимы нығынған. Фатима Исламованың ғаилә шәжәрәһендәге исемдәртеҙмәһенең уйҙырма түгел икәнлеген тарихи документтар ҙа раҫлай. Мәҫәлән, Абдрахмандың уландарының береһе Таһир 1740 йылда Ҡатай олоҫонда старшина булып торған. 1795 йылдағы бер документтан күренеүенсә, был вазифаны артабан уның улы Аҡкөсөк Таһиров башҡарған. Ул 1773–1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында үҙ отряды менән Өфөгә һөжүм итеүҙә ҡатнаша, әммә Ҡарауыл (Чесноковка) тауы эргәһендә, Өршәк буйында, полковник Якубович ғәскәре тарафынан ҡыйратыла. Был хаҡта есаул Әбүзәр Әбделғәйеровтың Кинйә Арыҫлановҡа биргән рапортында әйтелгән. Старшинаның **Хоҙайбирҙе Аҡкөсөков** исемле улы булғанлығы ла билдәле.

Ошо уҡ нәҫелдән рядовой **Ғәйнулла Таһиров**, 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашып, «1812 йылғы һуғыш иҫтәлегенә», «1814 йылдың 14 мартында Парижды алған өсөн» миҙалдары менән бүләкләнә.

IX рәүиз ҡағыҙҙарында 28-се йорт урядниғы итеп **Тажетдин Сермәнов** исеме теркәлгән.

Ә хәҙер Фатима Исламованың шәжәрәһен үҙе яҙғанса күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ: *Шаһмандың бер туғаны Абдрахман - Таһир - Сермән - Аҡкөсөк - Әбүбәкер - Тажетдин - Ислам - Илһам - Фатима.* Күреүебеҙсә, бында байтаҡ ҡына быуындар төшөп ҡалған булырға тейеш. Шулай ҙа әлеге исемдәр теҙмәһе реаль ысынбарлыҡҡа тура килә.

Шул уҡ Э. Сәйәхова үрҙә телгә алынған мәҡәләһендә: «**Шәғәле 1519 йылда Шаһмандың 3-сө ҡатынынан тыуған**», - тип яҙа (34, 48-се һан). Әгәр уның был фаразына ышанһаҡ, Шәғәле Шаһман ил эштәре буйынса Ҡазанға, Мәскәүгә барған сағында 35–38 йәштәр тирәһендәге ир уҙаманы булған. Легенда буйынса, ул Иван Грозныйға барыр алдынан оло йәштәге ағаһы Шығайға килеп, уның менән кәңәшләшкән.

Был тарихи һәм легендар шәхес тураһында фольклор әҫәрҙәрендә, шәжәрәләрҙә байтаҡ ҡына ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр һаҡланған. Шуларҙан иң тәүҙә легендаларға туҡталайыҡ. 1985 йылда Белорет районының Ҡаһарман ауылында академик Ғайса Хөсәйенов яҙып алған «Тамъян ырыуы» легендаһында түбәндәге юлдар бар: «Ҡазанды урыҫ батшаһы алғас, шул аҡ бей батшаға барып, ерҙәрҙе ялғатып ҡайтыу эшен Шәғәли Шаҡманға ҡушҡандар аҡһаҡалдар. Шәғәли Шаҡман - Шәйғәле аҡһаҡал улы.

Ололар һөйләүенән, Мәскәүгә Үҫәргәндән Бикбау кенәз, Ҡыпсаҡтан Ҡара Ҡужаҡ, Бөрйәндән Иҫке бей, Тамъяндан Шәғәли Шаҡман барған. Шәғәли Шаҡман ҡәбере зыяратыбыҙҙа әле лә ҡәҙерләп һаҡлана. Ҡәбере үтә дәү, уның яҡшы атын да күмгәндәр, тиҙәр» (7, 121).

Ә хәҙер шулай уҡ академик Ғ. Хөсәйенов тарафынан 1981 йылда Әбйәлил районы Байым ауылында Х. Ғабдуллиндан (1896 йылғы) яҙып алынған «Күбәләк-Теләү ырыуы» легендаһына иғтибар итәйек. Унда Шәғәле Шаһман Күбәләк-Теләү ырыуының аҡһаҡалы тигән хата мәғлүмәт бирелә. Шәжәрәләрҙән күренеүенсә, Шәғәле Шаһмандың Тамъян ырыуы бейе икәнлеге яҡшы



билдәле (7; 71, 121). Шулай ҙа был легенданан түбәндәге өҙөктө килтереп китеү уҡыусылар өсөн ҡыҙыҡлы булыр, һәм ул Тамъян ырыуы башлығының шәхесен күҙ алдына баҫтырыушыға ярҙам итер, тип уйлайбыҙ: «...Иван Грозный батша Ҡазанды алғас, Күбәләк-Теләү ырыуы башҡорттары батшаның үҙен барып күрмәк булғандар. Был яҡтан - Шәғәли Шаҡман аҡһаҡал, Юрматы ырыуынан - Аҙнай, бөрйәндәрҙән - Иҫке бей. Былар берғәләшеп Ҡазан ҡалаһына барғандар. Бүләк итеп иң яҡшы, шәп йәнлек тиреләрен, башҡорт балын алғандар. Еткәндәр Ҡазанға, тапҡандар батшаны.

Урал тауҙарынан башҡорт илселәре, оло аҡһаҡалдар килгән, тип батшаға әйткәндәр. Ҡиммәтле йәнлек тиреләре, башҡорт балы бүләк иткәс, батшаның күңеле булған. Был илселәр үҙҙәренең хәлен, аҡ батшаға тоғро булырға, хеҙмәт итергә теләктәрен әйткәндәр. Батша быға тағы ныҡыраҡ ҡыуанған. Шунан батша: «Һеҙҙе ни менән бүләкләйем?» - тип һораған.

Илселәр: «Беҙгә ата-бабаларыбыҙ биләгән, ғүмер һөргән ерҙәрҙе ырыуҙарыбыҙға беркетегеҙ. Ер-һыуҙарыбыҙға яттар теймәһен ине», - тигәндәр.

Батша уйлап-уйлап торған да: «Ярар, хуш, һеҙҙең теләктәрҙе ҡабул иттем. Шартым шул: мин, аҡ батша, һеҙҙе үҙемдең ирекле ҡолдарым итеп ҡабул итәм, ата-бабаларығыҙ биләгән ерҙәрҙе ырыуҙарығыҙға беркетәм. Ә һеҙ миңә тоғро хеҙмәт итегеҙ, илем бүләге тип, йыл да әлегеләй йәнлек тиреләре, башҡорт балы килтереп тороғоҙ», - тигән. Илсе ҡарттар шатланып риза булғандар. Батша фарман сығарып, ергә грамоталар биргән. Шәғәли Шаҡман һорағанса, Күбәләк-Теләү ырыуына Яйыҡ башы Ялпаҡтауҙан алып Тораташҡаса ерҙәр тейгән. Аҙнай Ашҡаҙар, Стәрле буйҙарын үҙ ырыуына яҙҙыртҡан. Батша Шәғәли Шаҡманға кенәзлек, Аҙнайға старосталыҡ биргән. Башҡорттоң ерҙәре шунан нығынып ҡалған, ере-һыуы күп, иркен булған» (7, 122).

Икенсе бер легенда буйынса башҡорт илселәре Мәскәүгә - Иван Грозныйға үҙ ирке менән Рус дәүләтенә

ҡушылыу тураһында ике яҡлы һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн барғанда, шул хәтле лә оло буй-һыны, көүҙәһе менән батшаның күңеленә шик-хәүеф һалмаһын өсөн Шәғәле Шаһманға, уның күҙенә салынмай, арттараҡ торорға ҡушҡандар, имеш.

Шәғәле Шаһман шәхесе халыҡ хәтерендә бына шулай һаҡланған. Уның образы бөгөн дә сәнғәт эшмәкәрҙәрен яңы әҫәрҙәр ижад итеүгә илһамландыра. Мәҫәлән, Тамъян ырыуы вәкиле, һәүәҫкәр рәссам Ринат Атауллин «Бөйөк Шәғәле Шаһман» исемле картинаһында тантаналы мәлдең - башҡорт ырыуҙары башлыҡтарының Мәскәүгә ике яҡлы килешеү төҙөү өсөн барыуының бер күренешен сағылдырырға һәм легендар шәхестең тарихи образын тыуҙырырға ынтылған. Ҡылкәләмдәше А. Королевский һүҙҙәре менән әйткәндә: «*Ул* (Шәғәле Шаһман - Т. Ш.) *Мәскәүҙә Василий Блаженный храмы эргәһендә ҡалҡыулыҡҡа баҫҡан да, Иван Грозныйға Башҡортостан халыҡтарының мөрәжәғәт хатын уҡып тора. Ҡараштары көсөргәнешле, ирендәре ҡымтылған. Күрәһең, урыҫ батшаһына баш эйеп барыуы бик ауыр уға*» (36, 79).

Юғарыла яҙылғандарҙан күренеүенсә, Рус дәүләтенә ҡушылыуҙы тормошҡа ашырыуҙа төп урынды бейҙәр тота. Шәғәле Шаһман да - шулар ҡатарында. Ул үҙе лә - сығышы менән феодаль-патриархаль юғары ҡатлам вәкиле. Быны Усман Әбүбәкеровта һаҡланған шәжәрәләрҙең түбәге быуындары асыҡ иҫбатлай: *Таман бей - Балун бей - Тамъян бей - Уразай бей - Мотай бей - Ҡырай бей - Шәғәле Шаһман*; Сәғҙи Әсфәндиәровта: *Туман бей - Киндар бей - Нахмәт бей - Басман хан - Айҡын бей - Айларали бей - Шәғәле Шаһман*; Мөхтәровтарҙа: *Тамъян бей - Ҡара Манғыт бей - Ҡалдар бей - Манғытай бей - Балуан бей - Ҡара бей - Шаһман бей - Шәғәле Шаһман бей.* Тик, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, башҡорт кенәзенең ата-бабалары исемдәре тамъяндарҙың хәтерендә теүәл һәм аныҡ ҡына килеш һаҡланмаған. Үрҙәге быуындар теҙмәһе шул хаҡта һөйләй.



* * *

Рәсәйгә ҡушылғас, бер төркөм башҡорт бейҙәренә Иван Грозный тарафынан кенәз титулы бирелә. Тик уларҙың күбеһенең был биләгән вазифаларын дәлилләп тороусы грамоталары булмай. Уңдай хоҡуҡҡа Рәсәйгә ҡушылыу алдынан Ҡазанға, батша наместнигына, һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн йөрөгәндәре генә, шул иҫәптән Тамъян ырыуы бейе Шәғәле Шаһман да, эйә була. Әммә бында шуны иҫтән сығарырға ярамай: башҡорт феодаль-патриархаль юғары ҡатламын «кенәздәр» йәки «князецтар» тип атағанда, рус сығанаҡтары уларҙы күп ерҙәре һәм крәҫтиәндәре булған урыҫ кенәздәренә тиңләмәй, ә яҡынса ғына ҡара халыҡтан айырып күрһәтеү өсөн ҡуллана.

Ғүмеренең аҙағынаса Шәғәле Шаһман үҙе лә, уның улдары, ейән-бүләләре лә, уларҙан һуң килер быуындары ла XVI быуаттың икенсе яртыһынан алып XVII быуаттың икенсе яртыһына тиклем башҡорт феодаль-патриархаль йәмғиәтендә өҫтөнлөклө шарттарҙа йәшәй. «Улар яһаҡ түләмәй, ләкин дәүләт хеҙмәтен, күберәк хәрби хеҙмәтте үтәйҙәр. Өфө властары юҡҡа ғына башҡорт кенәздәрен башҡорт тархандары менән бер китапҡа индермәй» (37, 39).

Башҡорт фольклорында Шәғәле Шаһман кенәз шәхесенә бәйле тағы ла бер ҡыҙыҡлы әҫәр һаҡланған. Ул - академик Ғайса Хөсәйенов тарафынан яҙып алынған «Шәғәле Шаһманға һыҡтау»:

Беҙҙе һинә ташлап киттең,
Аҡ, шоңҡарым, атабыҙ?
Һинән башҡа көнөбөҙ ҡара,
Төнөбөҙ һалҡын беҙҙең.
Һин күктәге ҡояш инең,
Һин төндәге ай инең...
Әй! Әй! Әй! Әй-й!
Аҡ шоңҡарыбыҙ Шаһманыбыҙ,
Онотма беҙҙе, ҡайта йөр!

Әй! Әй! Әй! Әй-й!
Беҙ иламай кем илар,
Йорт башыбыҙ һин инең.
Ил иламай кем илар,
Ил эсендә бер инең.
Һин бит батыр ир инең,
Ил ҡашында бер инең.
Күктә шоңҡар һин инең,
Ерҙә толпар һин инең!
Ил-йортобоҙ ҡорҙоң һин,
Яу ҡайтарып йөрөнөң һин,
Ил дошманын ҡырҙың һин,
Бөтәбеҙгә баш булдың,
Күҙ өҫтөндә ҡаш булдың...
Ауыр тупрағың еңел булһын,
Ил ағаһы Шәғәле!..
Әй. Әй! Әй! Әй-й! (8, 1-се һан).

Һыҡтауҙан күренеүенсә, халыҡ Шәғәле Шаһмандың вафатын бик ауыр кисергән, ин данлыҡлы улдарының береһе булараҡ, уның хаҡында һыҡтау ижад иткән.

Шәғәле Шаһман шәхесе хәҙер ҙә күп милләттәштәребеҙҙә ҡыҙыҡһыныу уята. Мәҫәлән, шағирә Зөлфиә Ханнанова күрәҙәсе Мөғлифә Үтәшева менән әңгәмәһендә уға: «...Башҡортостандың киләсәген күҙаллайһы килгәйне ...Илебеҙгә хәүеф-хәтәр янаған урындар юҡмы?» - тигән һорау бирә һәм шундай яуап ала: «Элек-электән илдә белемле, ышаныслы кешеләрҙе туплаған ҡанбабалар мәктәбе булған. Быны ни өсөн һөйләүем? Бер тапҡыр тамъяндарҙың һорауы буйынса миңә Шәғәле Шаһмандың һүрәтен төшөрөргә тура килгәйне. Уның рухы мине күреп, бик аптыраны: «Һин нишләп яңғыҙ? Һин нишләп аттаһың (һыбай) ул? Ил хужалары ни ҡарай?» Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, илағылар килде.

«Ҡайҙа һеҙҙә ирмен тигән кешеләр? Минең заманда һинең ишеләр - ил хазинаһы ине. Һинең ишеләр атта йөрөмәне, ат башында ир-егеттәр булды», - тине ул» (38, 39).

Бөгөнгө йәш быуын өсөн, ысынлап та, был тарихи шәхестең тормошо һәм эшмәкәрлеге илгә бирелгәнлектең, батырлыҡтың үҙенсәлекле бер өлгөһө булып тора. Уның менән нәҫелдәштәре генә түгел, һәр башҡорт ғорурлана ала.

## 5. БАШҠОРТ КЕНӘЗЕ УЛАНДАРЫ

Шәжәрәләрҙә Шәғәле Шаһмандың дүрт улы теркәлгән. Улар - **Сыуаҡ** (*Сеуә*), **Бураш**, **Буралы** һәм **Йәтсә**. Ошо дүрт улынан таралған артабанғы быуындар халҡыбыҙ тарихының төрлө осорҙарындағы төрлө хәл-ваҡиғаларҙа әүҙем ҡатнашҡан. XVI быуаттың икенсе яртыһынан алып XVII быуаттың икенсе яртыһына тиклем Шәғәле Шаһман кенәздең ул, ейән һәм бүләләре башҡорт феодаль-патриархаль йәмғиәтендә өҫтөнлөклө шарттарҙа йәшәй. Кенәзлек, тархандыҡ хоҡуғы уларҙа быуындан-быуынға күсеп килә. Мәҫәлән, шәжәрәләрҙең береһендә Бураштың улы Яңыбирҙе **кенәз** булараҡ теркәлгән. Был фактты Муса Лут улы Мортазин да «Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре граждандар һуғышында» тигән хеҙмәтендә түбәндәгесә яҙып үтә: «Башҡорттарҙың тормошон һәм мәҙәниәтен өйрәнеү йәмғиәте ҡарамағында өс ырыу тамғаһы бар, икеһе Мең башҡорттарына һәм өсөнсөһө Тамъян төбәгенән булған Шәғәле Шаһман кенәз иҫтәлектәренә ҡарай. Шәғәле Шаһмандың улы *Джангабирзе*, тип әйтелә ул шәжәрәлә, Солтан һәм Мәскәү батшаһында булған» (39, 21). Шуны асыҡлап әйтеп китеү урынлы булыр: бында һүҙ, беренсенән, кенәздең улы түгел, ейәне тураһында бара, икенсенән, уның исеменең башҡортса дөрөҫ әйтелеше - **Яңыбирҙе**. Шәғәле Шаһман кенәз нәҫеленә ҡағылышлы ҡайһы бер шәжәрәләрҙә Яңыбирҙе кенәздең ейән-бүләләренең шу,

лай үк тархан икәнлеге айырып күрһәтелә: *Шәғәле Шаһман кенәз - Бураш - Яңыбирҙе кенәз Бураш улы - Ҡужымбирҙе Яңыбирҙе улы - Сыуашай тархан Ҡужымбирҙе улы - Һөйәр тархан Сыуашай улы.*

Башҡа башҡорт кенәҙҙәренеке кеүек үк Шәғәле Шаһмандың ейән-бүләләре лә башҡорт тархандарының рәсми исемлегендә ныҡлы һәм даими урын ала. Уларҙың, бейҙәрҙән айырмалы рәүештә, жалованный грамоталары була. Шәғәле Шаһман уландары байлыҡтары менән генә айырылып тормай, өҫтөнлөктәре юридик яҡтан да нығытыла, улар шулай уҡ төрлө һалымдарҙан азат ителә. Иң ҙур өҫтөнлөктәре, әлбиттә, ергә хужа булыу алыуҙарына ҡайтып ҡала. Тарихсы В. В. Вельяминов-Зернов яҙғанса: «Яһаҡсыларҙан айырмалы рәүештә, тархандарҙың төрлө ireклектәре бар, улар теләгән ерҙәренә хужа була, бесән саба, балыҡ тота ала, яһаҡсылар быға ҡаршы килә алмай, тик солоҡлоҡтарға һәм ҡондоҙло урындарға ғына теймәһендәр» (37, 40).

* * *

Шәғәле Шаһман нәҫеле бөгөн 14-16 быуынғаса етә. Уларҙы яҡшы белеү өсөн иң тәүҙә халҡыбыҙҙың түбәндәге туғанлыҡ терминдарын хәтерҙә ныҡлы тотоу зарур: 0. **атай, әсәй**; 1. **ул, ҡыҙ**; 2. **ейән, ейәнсәр**; 3. **бүлә, бүләсәр**; 4. **тыуа, тыуасар**; 5. **тыуаят**; 6. **һаратан**; 7. **етеят**; 8. **туңаяҡ**. Был туғанлыҡ атамалары хаҡында халыҡ тарафынан түбәндәге мәҡәл дә ижад ителгән: *Уландан тыуыр ейән, ейәндән тыуыр бүлә, бүләнән тыуыр тыуа, тыуанан тыуыр тыуаят, тыуаяттан тыуыр һаратан, һаратандан тыуыр етеят, етеяттан тыуыр туңаяҡ.* Беҙ ҙә, ошо терминдарға таянып, был нәҫелдең 7-8 быуынлыҡ шәхестәренә ентекләп туҡталмаҡсыбыҙ. Әгәр артабанғы быуындары менән ҡыҙыҡһыныусылар булһа, уларҙы китапта бирелгән шәжәрәләрҙән эҙләп таба, шуларҙы ҡулланып, үҙҙәренең шәжәрәләрен төҙөй һәм уларҙы артабан уңышлы дауам иттерә аласаҡтар.



Тыуған яҡты өйрәнеүселәр менән тарихсылар Шәғәле Шаһмандың иң өлкән улы итеп **Сыуаҡты** күрһәтә. Ҡайһы бер шәжәрәләрҙә уның исеме *«Сеүә»*, хатта *«Чүвә»* тип бирелә.

Белорет районы Шығай ауылы тамъяндарынан Мөхтәровтарҙа һаҡланған шәжәрә менән Көйөргәҙе районы Йомағужа ауылынан Усман Әбүбәкеров яңыртып төҙөгән шәжәрәне сағыштырып ҡарағанда улар араһында байтаҡ ҡына тап килеүҙәрҙе лә, ҡайһы бер айырмалыҡтарҙы ла табырға мөмкин.

Тәүҙә Мөхтәровтарҙың шәжәрәһенә күҙ һалайыҡ: *Шәғәле Шаһман - Сыуаҡ бей - Шығай бей - Алас бей - Күсмән бей - Сыуаҡай бей (тоҡомо Ағиҙел буйында).* Ә хәҙер У. Әбүбәкеров төҙөгәненә иғтибар итәйек: *Шәғәле Шаһман - Сеүә - Тежәмәргән - Шағай - Алас - Ҡасай - Аҡманай...*

Сыуаҡтан һуңғы ике быуынды ике шәжәрәлә лә тап килә, хатта беҙ уларҙан Алас бейҙең **Күсмән**, **Ҡасай** исемле ике улы булғанлығын да белә алабыҙ. Күсмән бейҙең улы **Сыуаҡайҙы** Шәғәле Шаһмандың улы, беренсе быуынды - *Сыуаҡ* (Сеүә, Чүвә) менән бутарға ярамай, ул - башҡорт кенәзенең 5-се быуын варисы, йәғни тыуаяты. Тик, үкенескә ҡаршы, Мозафаровтарҙың шәжәрәһендә һаҡланған был шәхестең Ағиҙел буйында, йәғни Мәләүез районының Иҫке Муса ауылында йәшәүе-йәшәмәүе тураһында әлегә бер мәғлүмәт тә таба алманыҡ. Был исемдең шәжәрәгә яңғылышлыҡ менән яҙылыуы ихтимал. Уңдай хәлдәр ҙә булғылай.

Белорет районы Шығай ауылында тыуып үҫкән һәм йәшәгән Күсмәндең икенсе улы **Шығай** (1630 йылғы), өсөнсөһө - **Күгәс бей**. Шәжәрәнән күренеүенсә, Шығай «тархан» титулына эйә булған. Күгәс иһә бей буларак теркәлгән, ул Ыҡ буйы тамъяндары араһында йәшәгән. Күгәстең тоҡомо бармы, булһа, кемдәр улар - был һорауҙарға әлегә яуап табылмаған. Шулай ҙа Күгәстән таралған нәҫелдең бөгөн дә иҫән-һау йәшәп ятыуына шик

юҡ. Ә Шығай тархан вариҫтары Белорет районының Шығай ауылында таралған.

Шығай тархандан **Инсеғол** (1651 йылғы) тыуған, һәм уға тарханлыҡ титулы атаһынан нәҫел буйынса күскән. Инсеғолдың улы **Ҡарабаш** (1677 йылғы) шәжәрәлә батыр булараҡ теркәлгән. Ул - Шәғәле Шаһмандың 7-се быуын вариҫы йәғни етеяты. Ҡарабаш батырҙан башҡорт кенәзенең 8-се быуын вариҫтары йәғни туңаяҡтары **Ҡарабай** батыр (1710 йылғы) менән **Байҡара** бай (1717 йылғы) тыуған.

Усман Әбүбәкеров төҙөгән шәжәрәнән күренеүенсә, Шәғәле Шаһмандың оло улы Сыуаҡтан (*Сеүәнән*) **Тежәмәргән** исемле улы бар. Был исем Мөхтәровтарҙың шәжәрәһендә теркәлмәгән. Сәйфулла Әмиров уның тураһында китабында: «Тарихта билдәле шәхес», - тип яҙа (40, 42). Көйөргәҙе районы Бәләкәй Муса (Бәләкәй Илкәнәй) ауылынан информатор Тәлғәт Фәсхетдин улы Кәримов беҙгә Сыуаҡтың **Тижадәүләт** исемле тағы бер улы булғанлығы хаҡында хәбәр итте һәм унан киләүсе быуындарҙы әйтеп яҙҙырҙы. Тижадәүләттең улы **Айғүрәмәмбәт** - Шәғәле Шаһмандың бүләһе. Унан һуң килгән быуындар тәртибе түбәндәгесә: *Айғүрәмәмбәт* - **Ибраһим** - **Әбелхәйер** - **Ғәбделкәрим** - **Шәмсетдин** - **Фәсхетдин** - **Тәлғәт** - **Илгиз** - **Өлфәт**.

Тежәмәргәндең улы **Шағайҙан** (*Шығайҙан*) **Туҡһары**, **Алас**, **Йомағол** исемле уландар тыуған. Улар - башҡорт кенәзенең 4-се быуыны йәғни тыуалары. Туҡһарынан нәҫел ҡалғаны-ҡалмағаны билдәле түгел. Аластың **Ҡасай** исемле улы шәжәрәләрҙә теркәлгән. Ул - Шәғәле Шаһмандың 5-се быуыны йәғни тыуаяты.

Ҡасайҙан башҡорт кенәзенең **Аҡманай** исемле һаратаны тыуған. Унан таралған нәҫел вәкилдәренең ҡайһы берҙәре бөгөн *Аҡманаев* фамилияһын йөрөтә. Аҡманайҙан ике ул: **Солтанғол** менән **Ҡорманғол** ҡалған (һаратандар). Солтанғолдың улы **Сорағол**, Ҡорманғолдоҡо - **Мөхәмәт**, **Боҫтобай** һәм **Сәңкебай**. Былары - Шәғәле Шаһмандың етеяттары. Ҡасайҙың күпселек вариҫтары



Мәләүез районының Иҫке Муса ауылында йәшәгән. Башҡорт кенәзенең был аранан таралған туңаяҡтарына килгәндә, Сорағолдоң улы - **Ишкенә**; Боҫтобайҙыҡы - **Килсенбай**, **Ҡотлогилде**; Сәңкебайҙыҡы - **Ниғмәтулла**, **Муллаҡ**, **Таулыҡай**, **Абдулваһап** (1831), **Мөхәммәтхажи** (1837) һәм **Ғабдулнафиҡ** (1841).

Тарихсылар менән тыуған яҡты өйрәнеүселәр, шәжәрәләрҙә осрамаһа ла, Ҡасайҙың тағы бер **Смаҡ** исемле улы булғанлығын билдәләй. *Смаҡ Ҡасай улы Ҡасаев* - Тамъян ырыуының билдәле шәхесе, XVIII быуаттың 40-сы йылдарында Нуғай юлының Тамъян олоҫонда Смаҡ ауылын нигеҙләүсе. Уның исем-шәрифе тарихи документтарҙа йыш осрай. 1754 йылда заводсы Твердышев менән Мясниковҡа Яйыҡ, Һаҡмар, Ағиҙел, Туғыҙтимер, Ҡарғалы, Ҡарамалы, Һайылмыш, Юшатыр, Ыҡ буйҙарындағы мәғдән сыҡҡан 482 ерҙе Ноғай юлы биш олоҫ аҫабалары 185 һумға һата. Шул килешеүгә ҡул ҡуйыусылар араһында Тамъян олоҫонан Смаҡ Ҡасаев та бар. 1756 йылда Тамъян олоҫо Воскресенск заводына уның тирәһендәге Тор йылғаһынан Ағиҙел һәм Нөгөшкә, йәғни Ҡыпсаҡ, Юрматы олоҫтары сигенә тиклемге араны, 55 һумға һата. Килешеүгә олоҫтоң ышаныслы кешеһе тип һайланып ҡуйылған Смаҡ Ҡасаев ҡул ҡуйған. Ул шулай уҡ 1757 йылда аҫаба ерҙәрен Могутовҡа һатыуҙа ҡатнаша. 1763 йылда Ноғай юлының аҫабалары менән бергә башҡорттарҙың ер эшкәртеүсе киңәйтеү мәсьәләһе тураһындағы хат менән Ырымбур губернаторы Д. В. Волковҡа мөрәжәғәт итә.

Смаҡтың улдарыңың береһе - **Әзибай**. Ул 1773-1839 йылдарҙа йәшәгән, зауряд-хорунжий булып хеҙмәт иткән. Унан өс ул ҡалған: **Әйүп**, **Абдулманнан**, **Абдулвахит**. Әйүптең улы - **Ҡотлоюл**.

Шығайҙың, Туҡһары менән Аластан тыш, өсөнсө улы - **Йомағол**. Ул шулай уҡ Шәғәле Шаһмандың күпселек вариҫтары кеүек башҡорт йәмғиәтенең бай ҡатлам вәкилдәре иҫәбенә ингән. Уның улы **Йомағужа Йомағолов** - хатта 1735 йылдың 4 ғинуарында тархан титу-

ған: йөҙ башы булып та торған, аҙаҡ старшина ярҙамсыһы булып та киткән. 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында Пугачев яғына сыҡҡан.

Муса Һөйәров дүрт ул тәрбиәләп үҫтергән: **Ғосман, Ғүмәр, Исмаҡ** һәм **Ғайса**. Былары - Шәғәле Шаһмандың 7-се быуын вариҫтары йәғни етеяттары.

Икенсе улы Ғүмәр Мусин шулай уҡ йөҙ башы булған, тамъяндарҙың Бөгөлсән янындағы ерҙәрен татарҙарға һатыуҙа ҡатнашҡан.

*Сәфәр тарханлан* **Теләүембәт** менән **Икмәмбәт** исемле ике ул ҡалған (6-сы быуын вариҫтары). Һәүәҫкәр тарихсы Сәйфулла Әмиров яҙғанса, «...бөгөнгө Йомағужала Бурасовтар, Саубановтар уның вариҫы булһа, муниципаль берәмек урынлашҡан Илкәнәй ауылы тарихы ла тап бына уның ейәндәренең заты менән бәйле» (40, 43).

Теләүембәттең ир балалары: **Илкәнәй, Бурас, Илебай, Юлдаш, Юлан**. Тәүге улы - *Илкәнәй Теләүембәтов* - хәҙерге Көйөргәҙе районының Илкәнәй ауылына нигеҙ һалыусы. Икмәмбәттән нәҫел ҡалмаған. Былары - Тамъян ырыуы кенәзенең етеяттары.

Шәғәле Шаһмандың *Бикәй* исемле ейәненән таралған ара Ырымбур өлкәһенең Әсекәй районы Мөъмин (*Көсөк*) ауылында йәшәй. *Бикәйҙең* **Килмәт** (Шәғәле Шаһмандың бүләһе) исемле улы булған. Унан **Дусмөхәмәт** (4-се быуын вариҫы) тыуған. Дусмөхәмәттең улы - **Ҡолшәриф** (5-се быуыны). Уның ир балалары: **Мөъмин, Мөхсин** һәм **Мостафа** (6-сы быуын). Ырымбур өлкәһе Әсекәй районындағы Көсөк ауылының рәсми исеме - Мөъмин. Был исем ауылға тап бына Шәғәле Шаһмандың һаратаны Мөъмин Ҡолшәриф улы исеменән сығып ҡушылған да инде.

Мөъминдән дүрт ул донъяға тыуған: **Ғабдрахман, Ҡорбанғәли, Хисаметдин, Вәлит**. Мөхсиндең улдары икәү: **Моратбаҡый, Мөслим**. Мостафаныҡы шулай уҡ икәү: **Шәмсетдин, Ниғмәтулла**. Былар - Шәғәле Шаһмандың 7-се быуыны вариҫтары йәғни етеяттары.



Шәғәле Шаһмандың Көрәк исемле ейәненән таралған ара Әбйәлил районы Ишкилде ауылында йәшәй.

* * *

Шәғәле Шаһмандың кесе улы *Буралы* өс ир бала тәрбиәләп үҫтергән. Улар - **Илсекәй, Туҡмайрыҡ** һәм **Тоҡомбәт**.

Буралының исеме, Тамъян ырыуы шәжәрәләренән тыш, ғалим һәм яҙыусы Ризаитдин бин Фәхретдинов тарафынан яҙып алынған «Һыуын-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһендә» лә осрай: «Учин тигән һыу буйында Жанибәк хан урынына хан булыр өсөн талашып Жиянғол, үҙенең атаһы менән бер туған ағаһы булған Бирдебәктең улын үлтереп, Абаның аҡмачыҡ бейҙең ауылына ҡасып килде. Ул ваҡытта Аҡмачыҡ бейҙең ауылында туй-йыйын бара ине. Жиянғол йыйынды күреп, шунда килергә ҡурҡып торғанда, йыйындағы кешеләр Жиянғолды күрҙе һәм дә: «Ул йыйынға килмәйенсә бағи һун кеүек ситтә тороусы кеше ниндәй әҙәм?» - тип әйттеләр. Йыйын барып һун кейек кеүек йөрөүсе Жиянғолды оло кешеләр алдына килтерҙе лә: «Һин ҡайҙан килеүсе кешеһең? Атың, ырыуың нисек?» - тип һораны.

Жиянғол: «Мин ҡасҡынмын. Хан булыр өсөн талашып, ағам Бирдебәк улын үлтереп ҡастым. Атым – Жиянғол, ырыуым – Ҡыпсаҡ», - тип яуап бирҙе.

Шунан һун: «Атың Жиянғол икән. Һин һун кейек кеүек йөрөнөң. Шуның өсөн бынан һуң атың һун Жиянғол булһын», - тиҙеләр.

Шунан һуң Жиянғол Аҡмачыҡ бейҙә торҙо. Ҡаҫмарттан сыҡҡан йылғала ултырған заманда улының дауы алыр өсөн тип Бирдебәк Һун Жиянғолдо ҡыуа килде.

Шул ваҡытта Аҡмачыҡ бей, Жиянғолдо үлтертмәйем, тип ике туҡыз мал бирҙе. Тамъяндың Буралы бейе бер туҡыз мал бирҙе.

Шулай итеп, дүрт туҡыз мал бирҙеләр. Жиянғолдың йәнен алып ҡалдылар» (41, 74-75).

Буралының улы **Илсекәй** исемен, уның холоҡ-фиғеленә ҡағылышлы ҡайһы бер һыҙаттарҙы Усман Әбүбәкеров яҙып алған «Илсекәй ваҡиғаһы» легендаһында асыҡ күрәбеҙ: «Илсекәй Буралы улы Шаһмановҡа бер ваҡыт яуға барған башҡорттар менән бергә яланда ҡунырға тура килә. Шул уҡ ваҡытта йыйылышып ултырғанда һөйләшәләр: «Бөгөн аттарҙы кем көтә, кемгә сирут?» - тиҙәр. Араларынан Һунаҡ тигән бер кеше уйнатып: «Илсекәй ағайыма сирут», - ти. Илсекәй уларҙың хандары була, башлыҡтары. Һунаҡтың ошо һүҙен ишетеү менән Илсекәй: «Ярар, мин сығырмын», - ти ҙә, уҡ-һаҙағын алып, ат көтөргә китә. «Минә алмашҡа ярты төндән Һунаҡты ебәрерһегеҙ», - тигән ул. Башҡалар был эшкә ғәжәпләнеп ҡалып, Һунаҡты орошалар һәм ярты төндә уны уяталар: «Бар, мал көтөргә», - тиҙәр. Һунаҡ йоҡонан тороп китеп, мал яғына барып етә лә тауыш бирә: «Илсекәй, һин ҡайҙа?» - ти. Илсекәй: «Мин бында, Һунаҡ, һинме, килдеңме?» - ти. «Мин килдем», - тигән була Һунаҡ. Илсекәй уҡ-янын алып, Һунаҡтың күкрәгенә төҙәп атып ебәрә. Уҡ уның күкрәген ярып сығып та китә. Һунаҡ аунап ҡала. Илсекәй иптәштәре янына ҡайта. «Бар, ана, малды ҡарағыҙ», - тип әмер бирә. Уйнатып һүҙ һөйләгән өсөн Һунаҡ меҫкен донъянан күсә» (7, 185-186).

Профессор Ә. З. Әсфәндиәров был легендалағы хәлгә ҡарата шундай баһа бирҙе: «Социаль тигеҙһеҙлектең юл яра барыуы бында бик асыҡ күренә» (32, 72). Легендалағы образдың – *Илсекәй Буралы улының* – реаль шәхес булыуы шик тыуҙырмай, сөнки Шәғәле Шаһман нәҫеленең артабанғы бер быуын тармағы замanында Илсекәев фамилияһын йөрөткән.

* * *

Шәғәле Шаһмандың ейәне Илсекәйҙең, шәжәрәләрҙән билдәле булыуынса, **Теләүкәй** исемле бер генә ир



балаһы бар. Уның исем-атын тарихи документтарҙа әлегә осратырға яҙманы. Уның ҡарауы улдары **Моҡас Теләүкәев** менән **Әтекәй Теләүкәевтың** исем-шәрифтәре тарихи документтарҙа бер нисә мәртәбә осрауы уларҙың атаһы Теләүкәйҙең ысынлап та реаль шәхес икәнлеген кире ҡаҡмаҫлыҡ итеп дәлилләй. Теләүкәйҙең бынан тыш тағы ла **Йомағужа** атлы улы булған. Көйөргәҙе районындағы Йомағужа ауылына нигеҙ һалыусы шәхес Йомағужа Теләүкәев булыуы ла ихтимал. Икенсе төрлө әйткәндә ике бер туған: *Моҡас Теләүкәев* менән *Йомағужа Теләүкәев* - икеһе ике ауылға нигеҙ һалыусы.

Шәғәле Шаһмандың дүртенсе быуын вариҫтарынан *Әтекәй Теләүкәев*, тарихи документтарҙан күренеүенсә, XVIII быуат урталарында башҡорт йәмғиәтенең бай ҡатлам вәкилдәре иҫәбендә булған. Уның исеме 1759 йылдың 25 июлендә Ноғай юлы Тамъян олоҫо башҡорто Смаҡ Ҡасаевтың үҙ иптәштәре менән заводсылар И.Б. Твердышевҡа һәм И. С. Мясниковҡа Тор йылғаһы буйында ер һатыу буйынса төҙәлгән купчий ҡағыҙында осрай (тик уның фамилияһы «Клеев» тип бирелгән): «...Лета 1756-го году июля 25-го дня Уфимского уезду, Ногайской дороги, Тамъянской волости, команды старшины Асана Досаева башкирцы Тюкан Балтачев, Смак Касаев, Атекей Клеев, Аит Бирюков, Кулшерип Косаев... Исимбеть Куканов з братьями, з детьми и племянниками и со всем своим родом с общаго согласия чрез поверенного своего вышеписанного товарыща башкирца Смака Касаева от Уфимских крепостных дел дали сию купчую...» (40, 16.)

*Моҡас Теләүкәй улы Теләүкәев* - XVIII быуаттағы Ноғай юлы Тамъян олоҫонон билдәле шәхесе, Шәғәле Шаһмандың тыуаһы, 5-се быуын вариҫы. Моҡастың исемен Шәғәле Шаһман нәҫеленә бәйле Тамъян ҡәбиләһе шәжәрәләрендә, тарихи документтарҙа йыш осратырға мөмкин.

Моҡас Теләүкәев XVIII быуаттың 40-сы йылдарында Ағиҙел буйындағы Оло Моҡас ауылына нигеҙ һала.

1757 йылда Тамъян олоҫоноң башҡа аҫабалары менән бергә заводсылар И. Б. Твердышев менән И. С. Мясниковҡа төрлө йылғалар бассейндарындағы 482 рудалы урындарҙы 55 һумдан һатыуҙа ул да ҡатнаша. Моҡас Теләүкәевтың биш улы булған: **Һатлыҡ, Ҡасҡын, Уразбай, Уйылдан, Ҡотлоғужа**.

*Һатлыҡ Моҡас улы Моҡасов* - иң өлкән ул. Уның исем-аты шәжәрәләрҙә лә, тарихи документтарҙа ла осрамай, бары тик 1816 йылғы рәүиз ҡағыҙҙарындағы улдарының исем-шәрифтәренә бәйле генә беҙ уның исемен осрата алдыҡ. Һатлыҡтың **Ҡанбулат** исемле улы, Ҡанбулаттан тыуған **Шәрип, Ихсан, Исхаҡ, Йосоп** атлы ейәндәре булған.

*Ҡасҡын Моҡас улы Моҡасов* - XVIII быуаттағы башҡорт йәмғиәтендәге бай ҡатлам вәкилдәренең береһе, Шәғәле Шаһмандың тыуаяты, йәғни 6-сы быуын варисы.

Ҡасҡын Моҡасовтың һәм уның ул-ейәндәренең исем-шәрифтәрен шәжәрәләрҙә, тарихи документтарҙа даими осрата алабыҙ.

1763 йыл Нуғай юлы башҡорттары старшиналарына, олоҫтан һайланып ҡуйылған ышаныслы кешеләргә Ырымбур губернаторына игенселекте кинерәк йәйелдереү өсөн крепостной крәҫтиәндәр тоторға рөхсәт һорап яҙған хаттың тексын Ҡасҡын Моҡасов төҙөгән һәм ҡулын ҡуйған. Шул уҡ хатҡа үрҙә телгә алынған Смаҡ Ҡасаев, Моҡас Теләүкәев (документта Макач Тилкәев), йәғни Ҡасҡындың атаһы ла ҡул ҡуйған.

Был Тамъян олоҫо аҫабаһының, **Ноғман** исемле улы булған.

*Ноғман Ҡасҡын улы* – Шәғәле Шаһмандың 7-се быуын варисы, йәғни етеяты. Шәжәрәләрҙә уның исемен осрата һәм **Фәтхулла** исемле улы барлығын белә алабыҙ.

Фәтхулла Ноғман улы – Шәғәле Шаһмандың 8-се быуын варисы, йәғни туняғы.



Фәтхулланың **Фәйзулла, Сөләймән, Ниғмәтулла, Ғәйнулла, Кәлимулла** исемле улдары рәүиз ҡағыҙҙарында теркәлгән.

*Уразбай Моҡас улы Моҡасов* - XVIII быуаттағы Ноғай юлы Тамъян олоҫондағы социаль яҡтан бай ҡатлам аҫаба вәкилдәренең береһе, йөҙ башы, Шәғәле Шаһмандың һаратаны, йәғни 6-сы быуын варисы. Уның исемен «Сытырман һәм Моҡас ауылдары шәжәрәһе»ндә лә осратабыҙ (3, 48).

Уразбай Моҡасов Ағиҙелдең Бөгөлсән эргәһендәге ерҙәрен татар мырҙаһы Чанышевҡа һатыуҙа ҡатнаша. Уразбай Моҡас улының 1816 йылғы рәүиз ҡағыҙҙарынан **Ишбай, Мәхмүт** һәм **Хисаметдин** исемле улдары барлығын белә алабыҙ.

*Ишбай Уразбаев* башҡорт кенәзенең 7-се быуын варисы, йәғни етеяты. Ул 1812 йылғы Ватан һуғышында күп моҡастар менән бергә Парижғаса барып еткән. Тыуған ерен һаҡлап батырҙарса һуғышҡаны өсөн «1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн» һәм «1812 йылғы һуғыш иҫтәлегенә» тигән көмөш миҙалдар менән бүләкләнгән. Тик 1836-1839 йылдарҙа иҫән булған һуғыш яугирҙәрен теркәгән документта уның фамилияһы яңғылыш Орошбаев тип боҙоп яҙылған (42, 51). Ишбай Уразбаевтан нәҫел ҡалмаған.

**Мәхмүт** - Уразбай Моҡасовтың икенсе улы, 1818 йылғы, Шәғәле Шаһмандың 7-се быуыны, йәғни етеяты.

**Хисаметдин** – Уразбай Моҡасовтың өсөнсө улы, Шәғәле Шаһмандың шулай уҡ 7-се быуыны. Унан **Шәрәфетдин, Ғәйнетдин, Төхвәтулла, Әсәҙулла, Ғибаҙулла** исемле улдар ҡалған.

Уйылдан Моҡасов шулай уҡ дин әһеле булған. Мәккәгә хаж ҡылған. Тик унан нәҫел ҡалмаған.

* * *

Ә хәҙер заманында бөгөн Көйөргәҙе районына инеүсе Йомағужа ауылында йәшәгән Әтекәйҙән таралған нәҫел-араға күҙ һалайыҡ.

Унын **Ҡунаҡхужа**, **Дәүләтхужа**, **Аҫылғужа** исемле улдары булған.

*Ҡунаҡхужаның* йәшәгән йылдары билдәһеҙ, сөнки 1816 йылғы халыҡ иҫәбен алыу ҡағыҙҙарында исем-шәрифе осрамай. Унын **Буранбай**, **Сыуаҡбай**, **Хәлит**, **Сәғит**, **Ҡолгилде** исемле улдары булған. Был аранан Илсекәев, Ғәббәсов, Ҡолоев, Әмиров, Хәбилов, Йәмилев, Исмәғилев, Әбүбәкеров, Сәғитов, Әхмәтов, Мәхмүтов, Әхтәмов, Ҡолгилдин фамилияларын йөрөткән һәм йөрөтөүсе Шәғәле Шаһман нәҫеле вәкилдәре таралған.

Шулай уҡ Әтекәйҙең икенсе улы *Дәүләтхужа* (1749 - 1831) хаҡында ла 1834 йылғы рәүиздә **Ғәлимхужа**, **Сәләймән** исемле улдары булыуы аша ғына белә алабыҙ. Дәүләтхужаның журналист һәм тыуған яҡты өйрәнеүсе Сәйфулла Әмировтың «Йомағужам - минең ғорурлығым» тигән китабына инмәй ҡалған тағы бер улы бар: **Әлимғужа**. Был исемде ғалимдарыбыҙ Р. М. Булгаков, М. Х. Надергулов әҙерләп баҫтырып сығарған «Башкирские родословные» («Китап», 2002 й., 133-сө бит) тигән шәжәрәләр йыйынтығында осрата алабыҙ. 1809 йылдың 23 ноябрендә яҙылған «Стәрлетамаҡ өйәҙенең 9-сы кантонындағы Тамъян олоҫо башҡорттары менән Боғорослан өйәҙенен Мөъмин ауылы башҡорттарының ҡанҡәрҙәшлеге тураһында Дәүләтхужа улы Әлимғужа тарафынан яҙылған, имам Ғабдулҡадирҙың улы Ғабдулхаҡ тарафынан күсереп алынған хат» тигән ҡулъяҙманың исемендә үк унын исем-шәрифе асыҡ бирелгән. (3, 129). Был ваҡытта Әлимғужа Оло Моҡаста мөҙәррис булып торған. Йәшәгән ваҡытынан сығып фекер йөрөткәндә, унын Дәүләтхужаның өлкән улы икәнлеген төшөнөргә мөмкин. 1928 йылда Оло Моҡас ауылы халҡынын бер өлөшө йәрәбә буйынса бүленеп сығып, күрше Яҡтыкүл ауылын нигеҙләгәндә Сәйет ауылынан ҡайһы бер ырыуҙаштарын, шул иҫәптән Әлимғужиндарҙы ла яңы ауылда үҙҙәре менән бергә төпләнергә саҡыра. Улар быны ерле юҡтан ғына эшләмәгәндәрҙер, моғайын, үҙҙәренен нәҫелдәштәре булғанға саҡырғандарҙыр, тигән фекергә килмәй ҡалмайһың. Тик был фаразды киләсәктә ныҡлап тикшереп, документтар ярҙамында иҫбатлау фарыз.



Дәүләтхужа Әтекәевтән таралып, Йомағужала тыуып үҫкән, унда йәшәгән, башҡа тарафтарҙа көн күргән Фәисханов, Ағзамов, Хафизов, Илсекәев, Сабиров, Сөләймәнов фамилияларын йөрөтөүселәр үҙҙәренең Шәғәле Шаһман нәҫеленән икәнлеген яҡшы беләләр.

Өсөнсө улы *Аҫылғужа* 1759-1839 йылдарҙа йәшәп, донъя ҡуйған, унын **Оморҙаҡ**, **Мөхәмәтғәли**, **Хәсән** исемле улдары ҡалған.

Быларҙан тыш беҙ үрҙә телгә алған шәжәрәнән һәм 1816 йылғы рәүиз ҡағыҙҙарынан Әтекәй Теләүкәевтың Оло Моҡаста тағы ла бер улы йәшәгәнлеген белә алабыҙ. Шәжәрәлә Әтекәйҙең исеме боҙоп «Алькей» тип яҙылған, ә рәүиз ҡағыҙҙарында «Альктей» тип бирелгән.

Әтекәйҙең Оло Моҡаста йәшәгән улының исеме - **Сәйфулла**. Унан **Һатыбалды**, **Тимерабыҙ** исемле улдар тыуған.

Тимерабыҙҙан нәҫел ҡалмаған. Ә Һатыбалдының улдары: **Әбделҡасим**, **Абыҙгилде**, **Мөхәмәтшәриф**, **Мөхәмәтзариф**. Шәғәле Шаһман нәҫеленең был араһы вәкилдәре бөгөн, башлыса, Һатыбалдин фамилияһын йөрөтә.

* * *

Шәғәле Шаһмандың *Туҡмайрыҡ* исемле ейәненән таралған ара бөгөн Көйөргәҙе районынын Түкән, Свобода ауылдарында, район үҙәге Ермолаевола, Күмертауҙа, шулай уҡ Миәкә районының Тамъян-Таймаҫ ауылында һәм башҡа ауыл-ҡалаларҙа йәшәй.

Шәжәрәләрҙән Туҡмайрыҡтың **Аҡһары** исемле улы булғанлығы яҡшы билдәле. Унан дүрт улан донъяға тыуған: **Жилкәй**, **Йыйынбай**, **Ноғай**, **Бикүшәй**. Былар - Шәғәле Шаһмандың тыуаяттары (5-се быуын вариҫтары).

Жилкәй исемле улынан таралған нәҫел араһы хәҙер Миәкә районының Тамъян-Таймаҫ ауылында йәшәй. Жилкәйҙән 6-сы быуын вәкилдәре **Аҡтым** менән **Шыугәрәй** тыуған. Аҡтымдың улдары: **Иҫәркәп, Күсей;** Шыугәрәйҙекеләр: **Бикшауай** менән **Ярлыҡап**.

Йыйынбайҙан бер ул тыуған: **Тенли**. Уның улы - **Ишкыуат**. Унан нәҫел ҡалмаған.

Артабан Ноғайҙың улы - **Балтас**. Унан тыуған **Түкән** (Шағәле Шаһмандың 7-се быуын вариҫы - етеяты) хәҙерге Көйөргәҙе районына ҡараусы шул исемдәге ауылды нигеҙләгән. Түкәнден **Аманбай, Амангилде, Юлай** һәм **Ҡаҙаҡбай** исемле улдары барлығы шәжәрәләр аша ла, тарихи документтарҙан да яҡшы билдәле. Уның улдарынан аҙаҡ Шағәле Шаһман нәҫелен тәшкил итешеүсе Ҡаҙаҡбаев, Ишмөхәмәтов, Сәйетбатталов һәм Колмөхәмәтов фамилияларын йөрөтөүсе милләттәштәребеҙ таралған.

«Шағәле Шаһмандан Ғәлигә тиклем» тигән шәжәрәлә яҙылғанса, Бикүшәйҙән **Үләкәй** тыуған (3, 126). Тарихсылар, тыуған яҡты өйрәнеүселәр быны 1681-1682 йылдарҙағы башҡорт яуында әүҙем ҡатнашҡан һәм үҙе кеүек үк халҡы азатлығы өсөн көрәшеүсе ул-ейәндәр үҫтергән **Түләкәй батыр** тип иҫәпләй. Ул - Шағәле Шаһмандың 6-сы быуыны йәғни һаратаны булып сыға. Шәжәрәлә артабан яҙылғанса Үләкәйҙән **Күсемхан** тыуған. Ул - 1704-1711 йылдарҙағы башҡорт яуын етәкләүселәрҙең береһе, тарихи шәхес **Күсем Теләүкәев** булыр. Уны башҡорт кенәзенең 7-се быуын вариҫы, йәғни етеяты тип беләбеҙ.

Шул уҡ шәжәрәлә Күсемхандың улы **Аҡайхан** тип бирелә. Ул да - билдәле тарихи шәхес, 1734-1737 йылдарҙағы башҡорт яуы етәкселәренең береһе, Шағәле Шаһмандың 8-се быуын вариҫы йәғни туңаяғы **Аҡай Күсемов**. Уның **Абдрахман, Бикташ** исемле улдары булғанлығы тарихи документтарҙан яҡшы билдәле. Бикүшәйҙән таралған ара тәүҙә Ноғай юлы Тамъян олоҫонда йәшәһә, аҙаҡ көнбайыш башҡорттарынан ер алып, ата-



бабаларының боронғо төбәгендә нығынырға ынтылған. Үрҙә телгә алынған «Шағәле Шаһмандан Ғәлигә тиклем» тигән шәжәрәлә иң һуңғы итеп яҙылған **Ғәли** ҙә (13-сө быуын вариҫы) - шул уҡ яусыл аранан. Уның нәҫел тармағы түбәндәгесә: *Шағәле Шаһман - Буралы-Туҡмайрыҡ - Аҡһары - Жилкәй - Шыугәрәй - Ярлыҡап - Текәй - Булат - Ишдәүләт - Баймorат - Рамаҙан - Ҡотлозаман - Ғәли.*

Шағәле Шаһмандың *Тоҡомбәт* исемле улынан таралған нәҫел араһы бөгөн Миәкә районының Тамъян-Таймаҫ, Ырымбур өлкәһе Әсекәй районы Көсөк (Мөъмин) ауылдарында йәшәй.

Буралының өсөнсө улы *Тоҡомбәттән* дүрт ул донъяға тыуған: **Ҡаҙан** тархан, **Кинйә, Күскен** һәм **Ҡулай**. Күреүебеҙсә, шәжәрәлә, Шағәле Шаһмандың Ҡаҙан тигән бүләһенең исеме менән бер рәттән, **тархан** икәнлеге лә һыҙыҡ өҫтөнә алып яҙылған. Тимәк, был - тарханлыҡ титулының һәм институтының быуындан-быуынға күсә килеүенә тағы бер ныҡлы дәлил.

Ҡаҙан тархандан **Үрәкәй** (4-се быуын) исемле ул ҡалған. Үрәкәйҙеке - Ишбулат (5-се быуын). Унан Муса исемле ул тыуған (6-сы быуын). Мусанан нәҫел ҡалмаған.

Кинйәнән **Ялсы, Ишкенә** исемле улдары тыуған (5-се быуын). Ялсының улы - **Ҡыҙырильс**, Ишкенәнеке - **Йософ** (6-сы быуын). Ҡыҙырильястан бер ул - **Иҫәнбәт** ҡалған. Йософтоң нәҫелен шулай уҡ бер генә улы - **Бикташ** дауам иткән. Былар - Шағәле Шаһмандың 7-се быуын вариҫтары.

Шағәле Шаһмандың *Йәтсә* исемле дүртенсе улынан нәҫел-нәсәп ҡалғаны-ҡалмағаны билдәле түгел.

## 6. БАШҠОРТ КЕНӘЗЕ НӘҪЕЛЕНЕҢ БӨГӨНГӨ ВАРИҪТАРЫ

Шағәле Шаһман нәҫеле вариҫтары бөгөн дә иҫәнһау, улар 14-16 быуынғаса етеп, Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә йәшәй һәм республикабыҙ үҫешенә һәр яҡлап үҙ өлөшөн индерә.

Тамъяндар составында Шәғәле Шаһман нәҫеле вәкилдәре лә Рус дәүләте алдында үҙҙәренә йөкмәтелгән бурысты теүәл үтәй. Улар дәүләттең сик буйҙарын һаҡлауҙа хәрби хеҙмәттә була, Петр I Азов походында, Польша кампанияһында, ҡалмыҡтарҙы ҡыуыуҙа, 1812 - 1814 йылдарҙағы Ватан һуғышында ҡатнаша. Мәҫәлән, хәҙерге Мәләүез, Көйөргәҙе районы биләмәләренә инеүсе элекке Тамъян олоҫонан Йомағужа Йомағоловҡа һәм унын улдарына Азов, Ҡырым походтарында, шведтарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнашҡандары өсөн 1734 йылда батша хөкүмәте тарафынан тарханлыҡ титулы бирелә (35, 130). 1812-1814 йылдарҙағы Ватан һуғышында был нәҫелдән Иҙел Мусаһынан Әлибай Ғүмәров, Килсенбай Боҫтобаев, Оло Моҡастан Ишбай Уразбаев, Мөхәмәтхәсән Изгин, Һатыбалды Сәйфуллин, Йомағужанан Сынғыҙ Кейекбаев, Йәнгилде Шаһманов, һуңынан Илкәнәйҙә йәшәгән Юлдаш Теләүембәтов, Юлан Теләүембәтовтарҙың ҡатнашҡанлығы билдәле (42, 50-51).

Бөйөк Ватан һуғышында оло ҡаһарманлыҡ күрһәткән Шәғәле Шаһман нәҫеле вариҫтары ла байтаҡ. Мәҫәлән, Әбйәлил районы Юлдаш ауылынан Ҡаһарман Сәйетғәлин Башҡорт атлы дивизияһында яу юлы үтеп, Бөйөк Еңеүҙе түшенә байтаҡ орден-миҙалдар тағып ҡаршылай.

Шәғәле Шаһман кенәз нәҫеле вәкилдәре араһынан байтаҡ күренекле кешеләр сыҡты. Мәҫәлән, Тимер Нигмәтшин, Марс Нуриев, Фәнис Янышев - башҡорт әҙәбиәтендә ныҡлы үҙ урындарын тапҡан яҙыусылар. Рөстәм Һабил улы Ҡаҙаҡбаев (1973 йылғы) - социология фәндәре докторы. Түкән ауылы ир уҙаманы Әмир Ғайса улы Ҡаҙаҡбаев медицина фәненең офтальмология өлкәһендә кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланы. Яҙыусы Марс Нуриевтың улы Азамат Нуриев та - филология фәндәре кандидаты. Миәкә районында йәшәүсе Шәғәле Шаһман нәҫеленән Сәмиғулла Зиннәт улы Кәримов менән Зәбир Әҙеһәм улы Фәтхетдиновтар «техник фәндәр кандидаты» тигән ғилми дәрәжәгә эйә. Нәҫел-сығышы



менән Ерекле-Күл ауылынан булған йырсы Рөстәм Хәниф улы Ғиззәтуллиндың исеме йыр-моң һөйөүселәргә яҡшы таныш. Шул уҡ ауылдан уҡытыусы Зәлифә Фәтих ҡыҙы Янышева – РФ Мәғариф министрлығының мәғариф отличнигы, балалар өсөн «Йәнле хәрефтәр» тигән китап авторы.

Смаҡ ауылынан оҫта гармунсы һәм һәүәҫкәр композитор Муса Рәшит улы Смаҡов - Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре.

Оло Моҡас ауылынан Ралин Шаһимырҙан улы Шаһманов - Башҡортостандың атҡаҙанған механизаторы. Ул ағаһы Раһип менән бер рәттән күп йылдар дауамында заманында исеме бөтә республикаға гөрләп торған Мәләүез районының «Нөгөш» колхозы баҫыуҙарында, хеҙмәт батырлығы күрһәтеп, фиҙакәр эшләне. Разин Солтанов менән Камил Камаловты ла яҡташтары шундай уҡ уңған механизаторҙар булараҡ ихтирам итә. Шул уҡ нәҫел араһынан Ғабдулхай Сәлимгәрәй улы Шаһманов «Башҡортостандың атҡаҙанған малсыһы» тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды. Ул тиҫтәләрсә йылдар буйына «Нөгөш» колхозында йылҡысылыҡ менән ҡымыҙсылыҡты һаҡлау һәм уңышлы үҫтереү эшенә үҙ өлөшөн индерҙе. Ауылдаштары, яҡташтары уның хаҡында бөгөн дә күңелендә йылы хәтирәләр һаҡлай.

Түкәндән Ленин, Октябрь революцияһы, Ватан һуғышы ордендарына һәм тиҫтәгә яҡын миҙалға лайыҡ булған Мирхәким Мирхәйҙәр улы Ишмөхәмәтовты Көйөргәҙе районында белмәгән кеше юҡ, уның исеме республикабыҙҙа ла күптәргә яҡшы таныш. Уның хаҡында хатта заманында яҡташы - күренекле башҡорт яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Рәшит Солтангәрәев «Азат итеүсе» тигән үҙенсәлекле очерк яҙып, уны «Яҙмыш» тигән китабында баҫтырып сығарҙы. Иле, халҡы алдындағы күп йыллыҡ фиҙакәр хеҙмәтен юғары баһалап, уға «Көйөргәҙе районының маҡтаулы гражданины» тигән исем бирелде.

Исем-аты үрҙә телгә алынған Ҡаһарман Сәйетгәлиндың улы Тимербулат Ҡаһарман улы Сәйетгәлин Юлдаш ауылында халҡыбыҙҙың боронғо ла, изге лә бер йолаһын тергеҙеп, халыҡҡа етәкселек итеү, ауылда тәрбиәүи эш алып барыу маҡсатында ауыл старостаһы итеп һайлап ҡуйылды.

Шәғәле Шаһман нәҫеле вәкилдәре араһынан сыҡҡан мосолман дине әһелдәре бик күп. Шуларҙан беҙ үрҙә, мәҫәлән, Ҡасҡын мулла, Уразбай мулла һәм Уйылдан хажи Моҡасовтар тураһында һүҙ алып барғайныҡ инде.

Иҙел Мусаһынан **Ҡотлогилде Боҫтобай улы Аҡманаевтың** эшмәкәрлеге хәҙерге Күгәрсен районы Хоҙайбирҙин (Бесәнсе) ауылының элекке мәсете менән тығыҙ бәйле булған, уның халҡын иманлы, тәртипле итеүгә был дин әһеле ҙур өлөш индергән. Уның нәҫел тармағы түбәндәгесә: *Шәғәле Шаһман - Сыуаҡай (Сеүә) - Тежәмәргән - Шығай - Алас - Ҡасай - Аҡманай - Солтанғол - Боҫтобай - Ҡотлогилде.*

Ҡотлогилде Бесәнсе ауылына мулла булып 1852 йылда килә. Был саҡта уның улына йәш ярым була. Ҙурайғас, ул мәҙрәсәлә тырышып уҡый, Ҡөрьән кәримдең күп сүрәләрен яттан белә. Атаҡлы башҡорт ишаны Зәйнулла Рәсүлев менән бик ныҡ дуҫлаша. Бесәнсе мәсетендә башҡа дин әһелдәре менән бергә тығыҙ бәйләнештә эшләй һәм тирә-яҡта абруй ҡаҙана. Уның улы Абдулла ла олатаһы менән атаһының юлынан китә. Бесәнсе ауылы мәҙрәсәһендә уҡығандан һуң, Ҡарғалыға барып, 11 йыл рәттән Хәйрулла хәҙрәттә белем ала. Ағзам мулла үлгәс, Абдулланы мулла итәләр. Ул кәләште Түләбай ауылынан, Шәһит Хоҙайбирҙиндең әсәһе Йәмиләгә туғаныраҡ булған Фатима тигән ҡыҙҙы ала. Мәҙрәсәлә үҙе малайҙарҙы, ә ҡатыны ҡыҙҙарҙы уҡыта.

Мулла булып, Абдулла ҡоро хәйер аҡсаһына ғына көн итмәгән, ә мал-мөлкәтте үҙенең халәл көсө менән эшләп тапҡан. Иген сәскән, ҡураһында йылҡы, һыйыр малдары, ҡош-ҡорт аҫыраған.



Уның хаҡында Фәтих Азаматов менән Юнир Аҙнағоловтың «Һаумыһығыҙ, ауылдаштарым!» китабында түбәндәге юлдар бар: «Абдулла мулла йәй көндәрендә, өйлә намаҙынан сыҡҡас (һәр көн тиерлек), йыйылған кешеләргә вәғәз һөйләгән. Татыу булып йәшәргә, бер-беренә ихтирамлы, саф күңелле булырға өйрәткән, нимә яҡшы, нимә яман икәне, халыҡ-ара хәлдәр тураһында һөйләгән. Мулланың өгөт-нәсихәте кешеләргә нык йоғонто яһаған.

Абдулла мулла XX быуаттың 30-сы йылдарына тиклем халыҡты диндән яҙҙырмай. Раскулачить ителгәс, ғаиләһе менән Һамар өлкәһенә һөргөнгә ебәреләе» (45, 70). 1951 йылда вафат була.

Абдулла мулла бөтәһе алты бала тәрбиәләп үҫтерә: Зәйнулла, Факиһа, Рәбиғә, Ғөбәйҙулла, Хәйрулла, Ғәлиә.

Илкәнәй ауылынан Ғиләжетдин ишандың исемен бөгөн дә күптәр яҡшы хәтерләй. Уның тураһында нәҫел -нәсәптәше Менәүәрә апай Аҙнабаеванан да матурыраҡ, ҡыҙыҡлыраҡ итеп яҙыусы юҡтыр, моғайын: «Тарихсы Әнүәр Әсфәндиәров яҙмаһы буйынса 1859 йылда 23 йәштә булған. Тимәк, тыуған йылы - 1836 йыл. Боронғолар һөйләүе буйынса, ул бик ғилемле, изге, әүлиәлек һәләтенә лә эйә булған. Граждандар һуғышы йылдарында Илкәнәй ауылына аҡтар ҙа, ҡыҙылдар ҙа керә алмаған. Үҙе үлһә лә, рухы керетмәгән, тип һөйләйҙәр. Йә томан, йә һыу, йә үтеп сыҡҡыһыҙ урман булып күренгән, тиҙәр. Кергән хәлдә лә урамдан матур ғына үтеп китҡәндәр, берәүгә лә зыян итмәгәндәр, күрәһең, бында изге кешенең рухы барлығын һиҙгәндәрҙер инде.

Ғиләжетдин бабай шул заманда уҡ, кешеләр бер ваҡыт тимер сыбыҡ аша һөйләшерҙәр, һәр өйҙөң мөйөшөндә йәшник булыр, шунан ҡарап бөтөн донъяла ниҙәр барғанын белеп ултырырҙар, тигән.

Ул йома намаҙын ауылда уҡымаған, ҡырға сығып китер булған икән, хатта ҡанатлы аты менән хажға ба-

ра икән, тип тә һөйләгәндәр. Ысын булғандыр ул, тип уйлайым, мин үҙем Хоҙайҙың ҡөҙрәтенә ышанам. Ҡыҙғаныс, ошоларҙы элегерәк, ҡарттар иҫән саҡта, яҙып алмағанмын. Уның зыяраттағы ҡәбере лә кешеләрҙе дауалаған, ауырыуҙар шуны өс тапҡыр урап сыҡһалар, һауығыр булғандар икән.

Бер йылы ауыл эргәһендә генә газ трассаһында торба шартланы. Янғын шул тиклем көслө булды, өйҙәр дер һелкенеп торҙо, күп кешеләр өйҙәрен ташлап, йылы арьяғына сыҡты. Ә ауылға бит бер ниндәй ҙә зыян килмәне. Бында ла ишан бабайҙың рухы һаҡлағандыр инде, тейешләр.

Ишан бабайҙың зыяраты ҡараулы, унда мөһабәт ҡайын үҫеп ултыра.

Быларҙы минә ауылдың аҡһаҡалы, 80 йәшлек абзыйым Ғәбделхаҡ Әхтәмов һөйләне. Ул - ауылда мулла. Намаҙҙарында һәр ваҡыт Ғиләжетдин ишан бабай рухына аяттар уҡый» (46, 31-се һан).

Ғайса Һибәт улы Ҡаҙаҡбаев (Түкән ауылы), Һабил Сәхиулла улы Ҡаҙаҡбаев (Түкән ауылы), Сәйетгәрәй Солтангәрәй улы Шаһманов (Яҡтыкүл ауылы), Әхтәм Тимерғәле улы Хисаметдинов (Яҡтыкүл ауылы), Тимербай Тимербулат улы Шәйәхмәтов (Иҫке Муса ауылы), Ғәбделәхәт Хәбибрахман улы Шаһманов (Смаҡ ауылы), Рәйес Ғәлимйән улы Һатыбалдин (Оло Моҡас ауылы) үткән быуаттың 70-90-сы йылдарында үҙҙәрен булдыҡлы ауыл хужалығы етәкселәре итеп танытты.

Үрҙә һүҙ алып барылған Абдулла мулланың улы Ғөбәйҙулла Аҡманаев Мәләүездә партияның район комитеты инструкторы, сельпо рәйесе булып эшләне. Уға «Совет потребителдәр кооперацияһының отличнигы» тигән почетлы исем бирелде, «Почет билдәһе» ордены, «Хеҙмәт батырлығы өсөн» миҙалы менән наградаланды.

Илкәнәй ауылының ир азаматы Фәнир Саҙретдин улы Малбаев, эске эштәр органдарында оҙаҡ йылдар намыҫлы эшләп, милиция подполковнигы дәрәжәһенәсә үрләне. Ул - әлеге көндә Көйөргәҙе районы Көйөргәҙе



муниципаль район Хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге начальнигы.

Яҡтыкүл ауылы егете Хәйҙәр Әхтәм улы Хисаметдинов шулай уҡ эске эштәр органдарында эшләп, милиция подполковнигы дәрәжәһенәсә етте.

Йомағужа ауылынан Рәсүл Маннаф улы Мәхмүтов республика кимәлендә үҙен һәләтле етәксе һәм ойоштороусы итеп танытты. Ул төрлө йылдарҙа БР граждандар оборонаһы һәм ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының беренсе урынбаҫары, Янғынға ҡаршы дәүләт хеҙмәте начальнигы, «Башспирт» йәмғиәтенең генераль директоры урынбаҫары булып эшләне. Ил алдындағы хеҙмәттәре өсөн дәүләт наградаларына лайыҡ булды.

Йомағужа ауылы ҡыҙы Мөнирә Ҡәйүм ҡыҙы Хәбибуллина (Ағзамова) Башҡорт дәүләт медицина институтын тамамлағаны бирле һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә уңышлы эшләй. Тәжрибәле табип Башҡортостан Республикаһы һаулыҡ һаҡлау отличнигы, РФ һәм БР Һаулыҡ һаҡлау министрлыҡтарының Маҡтау грамоталары менән бүләкләнде.

Шул уҡ ауылдан Флүрә Хәйҙәр ҡыҙы Бакирова төрлө йылдарҙа төрлө һөнәрҙәр буйынса уҡый һәм эшләй. 1992 йылдан алып Күмертау тау колледжында уҡыта. Бындағы фиҙакәр хеҙмәте өсөн БР Мәғариф министрлығының «III дәрәжә Хеҙмәт даны» түш билдәһе менән бүләкләнде.

Шәғәлә Шаһман нәҫеленән сыҡҡан бик күп өлгөлө ғаиләләр бар. Мәҫәлән, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Ленира Сафуан ҡыҙы Шәйәхмәтова менән Тимербай Тимербулат улы Шәйәхмәтовтарҙың ҡыҙҙары Фирҙәүес, Әминә һәм улдары Айрат әсәләренең һөнәрен һайланы, улар барыһы ла - юғары белемле педагогтар, ә кинйә улдары Тимур Башҡорт дәүләт аграр университетында белем ала.

Айрат Тимербай улы үҙен бер нисә йыл эсендә һәләтле мәктәп директоры итеп танытты. Уның мәктәп

директорҙары конкурсында еңеп, төҫлө телевизор менән бүләкләнеүе – шуға асыҡ миҫал.

Был ғаилә ағзаларының шулай рухлы, ғәмле, аңлы булыуында олаталары Тимербулат Фазләхмәт улынан ҡалған ҡулъяҙма ҡомартҡы - шәжәрә лә ярҙам иткән.

Һуңғы йылдарҙа Шәғәле Шаһман нәҫеленең йәш быуын вәкилдәре үҙҙәренең шәжәрәһен, ырыу тарихын өйрәнеүгә ихлас тотондо. Был хаҡта «Йәшлек» гәзитендә журналист Зәйтүнә Ханова «Туймазы гимназияһында - Шәғәле Шаһман нәҫеле!» тигән мәҡәләһендә яҙып та сыҡҡайны. Ҡыҙыҡ өсөн уның менән китап уҡыусыларҙы ла таныштырып үтәбеҙ:

«Үҙем барып күрмәһәм, был бер буш хәбәр, тип уйлар инем.

Туймазы ҡалаһының 1-се гимназияһында шәжәрә темаһы 5-се синыфта үтелә. Күҙ алдына килтерегеҙ, «Башҡортостан мәҙәниәте тарихы» уҡытыусыһы Асия Шәйәхмәтова дәрес алып бара һәм Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы тураһында һөйләй. «1556 йыл аҙағында көньяҡ-көнсығыш Башҡортостандың Үҫәргән, Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Тамъян ҡәбиләләренән абруйлы, сәйәси эштәрҙә ҙур тәжрибәле етәкселәр, Рус дәүләтенә ҡабул итеүҙе һорап, Иван Грозныйҙың Ҡаҙандағы наместнигына килә. Илселәр булып Үҫәргәндән - Бикбау бей, Ҡыпсаҡтан - Ҡараҡужаҡ бей, Бөрйәндән - Иҫке бей, Тамъяндан Шәғәле Шаһман бей бара һәм берләшеү шарттары хаҡында һөйләшәләр...»,- тип әйтеүе була, бер уҡыусы ҡулын күтәрә. Ул Эмиль Диникеев була.

- Һеҙ беләһегеҙме, Шәғәле Шаһман - минең 14-се быуын олатайым! - тип, барыһын шаҡ ҡатыра.

- Ә һин быны иҫбатлай алаһыңмы? - тип һорай уҡытыусы.

Һәм эҙләнеү эштәре башлана... Эмилгә Шәғәле Шаһмандың Бураш исемле улынан таралған нәҫел икәнлектәрен атаһы Урал, ә Уралға Миәкә районының



Боҙҙан ауылында йәшәүсе атаһы Ғәбдулла Диникеев әйткән була. Диникеев фамилияһы Ғәбдулла ағайҙың олатаһы Динимөхәмәттән (1846-1934) ҡыҫҡартылып ҡалған. Иван Грозныйға илсе булып барған Шәғәле Шаһманға кенәз титулы бирелгәнгә тиклем үк был нәҫел башҡорт йәмғиәтенең юғары ҡатламы - тархандарға ҡараған булған. Олаталары Айҙарали бей, Айҡын бей, Басман хан, Нахмәт бей, Кинли бей, Таман бей икәнлеге билдәле. Бөтәһе лә - тарихи шәхестәр...

Эмиль бөгөн 8-се синыфта уҡый. Башҡорт, татар, урыҫ телдәрен яҡшы белә. Һәйбәт уҡый, биш йыл дзюдо менән шөғөлләнгән. Хәҙер йөҙөүгә йөрөй башлаған. Шахмат уйнарға ярата - IV разряд алған. Ул шәжәрәһен өйрәнеүҙе бөгөн дә дауам итә. Туймазыла һәм Өфөлә республика буйынса «Шәжәрә» конкурстарында еңеп сыҡҡан. Ул үҙенең шәжәрәһе тарихын Мәскәүҙең «Мемориал» фондына ла ебәргән» (47, 43-сө һан).

Мәләүез ҡалаһы уҡыусыһы Илдус Смаҡов шулай уҡ «Ауылым Смаҡ һәм минең фамилиям - бер үк тамырҙан» тигән ғилми-тикшеренеү эше башҡарып, Стәрлетамаҡтағы Ломоносов уҡыуҙарында доклад менән сығыш яһап беренсе дәрәжә дипломға лайыҡ була.

Үҙ нәҫел шәжәрәләре менән балалар ғына түгел, ололар ҙа ҡыҙыҡһына. Мәҫәлән, Белорет районы Шығай ауылынан Мөхтәровтар үҙ шәжәрәһен РФ Фәндәр академияһы ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт инстиуты аша Мәскәүҙә һәйбәт сифатлы ялтыр ҡағыҙға эшләтеп, рамға ҡуйҙыртып алған.

Күңелгә май булып ятырлыҡ бындай ыңғай миҫалдарҙы артабан да дауам итергә булыр ине, ләкин китаптың күләме сикле булыу сәбәпле, әлегә ошо миҫалдар менән сикләнергә тура килә.

# 7. ШӘҒӘЛЕ ШАҺМАН НӘҪЕЛЕ ВӘКИЛДӘРЕ XVII-XVIII БЫУАТТАРҘАҒЫ БАШҠОРТ ЯУҘАРЫНДА

XVII быуатта Рәсәй, Башҡортостан менән Килешеү шарттарын боҙоп, башҡорт ерҙәрен тартып алып, уның төп халҡын суҡындырып, булмышын юҡҡа сығарырға маташа. Ерҙәрен һәм халыҡ булараҡ үҙҙәрен һаҡлап ҡалыу өсөн XVII быуаттың икенсе яртыһында башҡорттар бер-бер артлы яуҙарға күтәреләләр. Уларҙың нигеҙендә милли һәм феодаль иҙеүгә ҡаршы көрәш ята. Бындай милли-азатлыҡ яуҙарында ҡатнашыусылар араһында 1557 йылда Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә инеүен Мәскәүҙә ике яҡлы Килешеүҙә рәсмиләштереүҙә күп тырышлыҡ һалыусы Тамъян ырыуы башлығы Шәғәле Шаһман нәҫеле вариҫтары ла бар, хатта уның бер тармағынан сыҡҡан өс быуын: **Түләкәй, Күсем** һәм **Аҡай** батырҙар башҡорт яуҙарының етәкселәренә әүерелә.

1681-1683 йылдарҙағы башҡорт яуының төп сәбәбе булып хөкүмәттең үҙ вәғәҙәләрен үтәмәүе тора. 1681 йылда Иҙел һәм Урал буйының урыҫ булмаған халыҡтарын көсләп христиан диненә күсерә башлау башҡорттарҙың баш күтәреүенә килтерә. Уға Сәйет батыр Садуров етәкселек итә. Был яуҙы етәкләүселәрҙең, батша хөкүмәтенә ҡаршы баш күтәреүҙәрҙә әүҙем ҡатнашыусыларҙың береһе **Түләкәй** (*Түләк*) **батыр** була. Ул Минзәлә тирәһендә һәм Ыҡ, Кама буйҙарында күтәрелгән ихтилалда ҡатнаша, аҙаҡ карателдәр тарафынан ҡулға алынып, Өфө өйәҙендә аҫып үлтерелә. «Шәғәле Шаһмадан алып Ғәлигә тиклем»ге шәжәрәлә уның һәм ул-ейәндәренең нәҫел тармағы түбәндәгеcә бирелә: *Шәғәле Шаһман - Буралы - Туҡмайрыҡ - Аҡһары - Жилкәй - Шыуғәрәй - Бикшауай - Уләкәй (Түләкәй) - Күсемхан - Акайхан* (3, 124-127).

Башҡорт халҡының бөйөк улы һәм мәшһүр ғалимы Әхмәтзәки Вәлиди Туған Түләкәй хаҡында шулай яҙы: «...Түләкәй - Тамъян башҡорттары әшрәфенән. Уны «Улағай» тип тә атайҙар. Был «Оло ағай» тигәнде аңлата булһа кәрәк» (22, 99).

Түләкәй батырҙың улы Күсем, ейәне Аҡай, бүләһе Абдрахман да, уға оҡшап, яугир була һәм XVIII быуаттағы башҡорт яуҙарын етәкләүселәргә әйләнә. Был тарихи шәхестәрҙең тормошо, башҡорт яуҙарына бәйле эшмәкәрлеге хаҡында байтаҡ тарихи материалдар һаҡланған.

Шул уҡ Ә. В. Туған Түләкәйҙең улы тураһында түбәндәгесә яҙҙы: «Улы Күсемдең исеме башҡорт һөйләштәрендә «Күсим» тип әйтелә, фарсыса яҙылған «Аҡай хикәйәте»ндә «Күсмәмәт» тип яҙыла, рус ҡағыҙҙарында «Кучмет» тип тә алына. Асыл исеме «Күсмөхәммәт» булһа кәрәк...» (22, 99).

Түләкәй менән уның улы Күсем - сығыштары менән Ноғай юлының Тамъян олоҫо башҡорттары. Икенсе төрлө әйткәндә, Иҙел-Нөгөш тамъяндары, Ҡыр тамъяндары тип тә йөрөткәндәр уларҙы. Биләмәләре хәҙерге Мәләүез, Көйөргәҙе райондары ерҙәрендә урынлашҡан булған. Тарихи документтарҙан күренеүенсә, Түләкәйҙең улы **Күсем** был яҡтарҙа ошо исемдәге ауылды нигеҙләүсе лә. (Әммә, үкенескә ҡаршы, бөгөн был ауыл юҡ, һәм уның ни сәбәпле бөтөүе әлегә билдәле түгел).

* * *

Күсем аҙаҡ - 1704-1711 йылдарҙағы башҡорт яуының төп етәкселәренең береһенә әйләнә. Ул, тарханлыҡ титулына эйә булмаһа ла, башҡорттар араһында эре феодалдар иҫәбендә һаналған. Урыҫ тарихсыһы П. Рычков уның хаҡында шулай тип яҙған: «Башҡорттарҙы бик ҡаты тотҡан, улар өҫтөнән үҙ властары булған, кем уның ихтыярына ҡаршы бара, уларҙы аҫҡан, мәкеләргә ташлап һыуға батырған, һәм шул арҡала хәҙер башҡорттар араһында ҙур дан тота икән» (37, 174). Күсем

шулай уҡ башҡаларҙан шәхси сифаттары менән дә айырылып торған һәм батыр булып һаналған.

Күтәрелеш башланған мәлдә баш күтәреүселәрҙең етәкселәре булып ваҡ феодалдар менән ябай башҡорттар тора. Баш күтәреүҙе аҙағыраҡ етәкләйәсәк Күсем Түләкәев, Алдар Иҫәкәевтар властарға буйһонмай, әлегә бер яҡ ситтә тора.

Башҡортостандың көнбайышында, Кама буйында, хәлгәләр түҙәтмәйбеҙ тип, Минзәлә яҡтарындағы башҡорттар көрәшкә күтәрелә. Азатлыҡ яуына Алдар Иҫәкәев 3 меңлек, Күсем Түләкәев 5 меңлек кешеһе менән етәкселек итә. Улар 1300 кешелек Өфө полкын ҡыйрата.

1709 йылдың башында башҡорт феодалдарының ҡайһы берәүҙәре, мәҫәлән, Алдар Иҫәкәев, баш күтәреүҙе дауам итеү яғында булһа, Күсем Түләкәев етәкселегендәге башҡорттар ни булырын көтөү яғындалар.

1709 йылдың башында Ҡаҙанға килгән П. М. Апраксин вәғәҙәләр, һөйләшеүҙәр юлы менән башҡорттарҙың көстәрен тарҡатырға, уларҙы көсһеҙләндерергә тырыша. Шул маҡсатта ул өгөтләү эштәренә тотона. Күсем менән Алдарға һәм башҡаларға Ҡаҙанға килергә тәҡдим итә. Әгәр баш тартһалар, уларға ҡаршы батша ғәскәрҙәрен ебәреү менән янай.

Көрәш барышында башҡорт феодалдары араһында һиҙелә башлаған икеләнеү Апраксинға аҙмы-күпме уңышҡа өлгәшергә мөмкинлек бирә. Күсем батыр бер төркөм көрәштәштәре менән Апраксиндың мөрәжәғәтенән ҡәнәғәтләнеүҙәрен белдереп, унан бер нисә һорауҙы хәл итеүен үтенә. Бынан уның батша властары менән килешеүгә барғанын аңлауы ҡыйын түгел. Апраксин инде хәҙер Алдар батырҙы үҙ яғына ауҙарыу маҡсатында уға хат яҙа. Был хатты Күсемдең кешеләре Иҫәкәевтың ҡулына илтеп тапшыра. Улар шулай уҡ Күсемдең Алдарға яҙған хатын да алып бара. Унда түбәндәге юлдар бар: «... һин бөйөк батша алдында ғәйебенде таны, үҙең Ҡаҙанға баяр Петр Матвеевич Опраксинға килеп,



ғаризаңды үҙ ҡулың менән бир, ә ул, бөйөк батшабыҙ, мәрхәмәтле, бәлки, ғәйебенде ғафү итер» (37, 222).

Алдар батыр ике хаттағы тәҡдим-өгөттәрҙән дә баш тарта. Апраксин иһә 1709 йылдың март аҙағында башҡорт феодалдары, шулай уҡ Күсем Теләүкәев менән осраша. Йыйылған башҡорттар губернаторға яңы баш күтәреүҙә ҡатнашмаҫҡа һүҙ биреп кенә ҡалмай, ә ябай башҡорттарҙы батша хөкүмәтенә буйһондороп торорға, хатта уларҙы баш күтәреүселәргә ҡаршы көрәшкә күтәрергә вәғәҙә итә.

Шулай итеп, Күсем Теләүкәев 1709 йылда яйлап ихтилалдан ситләшә, батша хакимиәте менән һөйләшеүҙәрҙә ҡатнашып, башҡорттар мәнфәғәтен тыныс юл менән хәл итеүҙе яҡлауын дауам итә.

1704-1711 йылдарҙағы Күсем һәм Алдар батырҙар етәкселегендәге башҡорт яуы һөҙөмтәһендә Рәсәй башҡорттарҙың ер биләмәләренә хоҡуғын рәсми раҫлай, яңы һалымдарҙы, халыҡты иҫәпкә алыуҙы бөтөрә, христианлаштырыуҙы йәғни башҡорттарҙы суҡындырыуҙы туҡтата.

Күсем батыр, күрәһең, батша хөкүмәте тарафынан ҡулға алынмағандыр. «Аҡай хикәйәте»нән уның вафаты 1735 йылдар тирәһендә икәнлеген аңларға була.

Борон Тамъян ырыуы башҡорттарының күпселеге Иҙел-Кама йылғалары буйында йәшәгән. Тамъян ырыуынан Түләкәй батырҙың да йорт-ере Шәғәле Шаһман нәҫеленең башҡа вәкилдәренән айырмалы Минзәлә өйәҙе еренда була, һуңыраҡ уларҙың бер өлөшө, шул иҫәптән Күсемдәр ил-йорто, Ыҡ буйына күсә һәм уның урта ағымын биләй. Төньяҡ, төньяҡ-көнсығыш тарафтарҙағы күршеләре Йәнәй, Ҡырғыҙ ырыуҙары башҡорттары булған. Тамъяндар был яҡтарҙа килмешәк хәлендә йәшәгән. Ул 1706 йылдың 1 февралендә Ҡаҙан юлының Йәнәй олоҫо башҡорттары тарафынан төҙөлгән тамъяндарҙы үҙ ерҙәренә индереү тураһындағы түбәндәге документта ла асыҡ сағыла: *«Уфинского уезду, Казанской дороги, Енейской волости башкирцы Сюбеляк Абдул-*

*лин с товарыщи, дали мы сию на себя Ногайской дороги Тамъянской волости башкирцам Акаю Кучюмову, Сюндюку Сяпукову и з детьми их в том: припустили мы, Сюбеляк с товарыщи их, Акая и Сюндюка и з детьми вообще в вотчину свою, как мы сами владели, так и им владеть и водами, так как и наперед сего они, Акай и Сюндюк, владели с нами тою вотчиною вообще по данной записи отцов наших отцу ево, Акаеву, Кучюму Тулекееву, которая писана татарским письмом. А ныне помогать им, Акаю и Сюндюку, из детьми своими со оной вотчины в ясак с нами со двора по паям, почему достанется, также и нам, Акаю, и Сюндюку, и з детьми, ежели во оной вотчине от кого какие обиды учиняться, то нам с ними, с Сюбеляком с товарыщи, стоять и всякие убытки платить вопче попалам безо всякой отговорки»* (43, 56.)

Ә. В. Туған яҙғанса, «Аҡай яуы ла Мәскәүҙең көнбайыш Башҡортостанды Көнгөр, Сарапул, Минзәлә кеүек ҡала һәм нығытмалар менән төрлө яҡтан ҡамауы, башҡорттарҙың күрше ҡәүемдәр менән бәйләнешен киҫеү маҡсатында бик етди сараларҙың тормошҡа ашырыла башланыуы арҡаһында килеп сыҡҡан» (22, 95). «Аҡай хикәйәте»нән килтерелгән түбәндәге өҙөктән беҙ Күсем Түләкәев, уның улы Аҡай Күсемов һәм улар етәкселегендәге башҡорт яуҙарының сәбәптәре тураһында күп нәмәләр белә алабыҙ: «Дим йылғаһы тамағына табан Бәрһеүән йылғаһы буйында дүрт юлдан килгән башҡорт халҡы вәкилдәре йыйынға йыйылды. Ул йыйында абруйлы аҡһаҡалдар, һыналған ир-азаматтар кәңәшләшеп, шундай берҙәм фекергә килде: урыҫтарҙың башҡорттарға ҡарата уй-ниәттәрен, әҙерләнеүҙәрен белеү өсөн, алғаҫҡы ойошторорға. Төп етәкселек эше Түләкәй улы Күсемгә тапшырылды. Күсем дәүерендә башҡорттарҙың бәлә-ҡазаларға һәм ҡыҫым-йәберҙәргә тарығаны юҡ ине. Уның заманында урыҫтар үҙ ур-ҡәлғәләренән арыға үтеп инергә ҡыймай торайны. Күсем батыр



бөтә дүрт юл башҡорттарының хөрмәт һәм абруй ҡаҙанған заттарынан ине.

Ҡаҙан сыуаштары, сирмештәр, мордва һәм уржум халыҡтары, урыҫтар иҙеүенә түҙә алмайынса, башҡорттарға килеп һыйыныр һәм ҡотолор булды. Кеңәгәгә улар башҡорт булып яҙылды, һәм береһе лә урыҫтарға кире әйләнеп ҡайтманы. Башҡорттар араһында улар хәҙер бик күп, үҙҙәрен башҡорт тип күрһәткәнлектән, уларҙы ерле халыҡтан әллә ни айырып та булмай.

Түләкәй улы Күсемдең йорт-ере Минзәлә ҡалаһынан 50-60 саҡырымдар самаһы ғына. Уның заманында дүрт юл халҡы бер фекерҙә булды, башҡа фекер юҡ ине. Бөтәһе үҙ старшинаһын тыңланы, ни өсөн тигәндә, башҡорттар ул дәүерҙә бик иркен йәшәне. Урыҫтар һүҙенә ҡолаҡ һалманылар, хәҡиҡәт өҫтән йөрөнө, алдашыу булманы. Аллаһы Тәғәлә бөтөн бәлә-афәттәрҙән һаҡланы.

Түләкәй улы Күсембәттең өс улы бар ине: береһе - Ахта, ул уҫал бер иҙеүсе ине; икенсеһе - Аҡай, урыҫ ҡулына тотҡон булып әләкте; өсөнсөһө - Сыуаш. Һуңғыһы күҙгә салыныр кеше булманы. Сыуаш бисәһенән тыуғанлыҡтан үҙен Сыуаш тип атанылар.

Бер һүҙ менән әйткәндә, эш шунда - Күсембәт үлгәндән һуң бик йылғыр ҡараҡтар Аҡайҙың аттарын урлай. Уғрылар Ҡаҙан сыуаштары була. Ирнә йылғаһы буйындағы Ураҙ ауылы янында Аҡай уларҙы ҡыуып етә, былар, Аҡай ҡулына эләкмәҫ өсөн, ҡылыс һәм уҡтары менән ҡаршы тора. Аҡайҙың бойороғо менән уғрыларҙың барыһы ла ҡырып бөтөрөлә. Ләкин нисектер ҡотолоп ҡалған береһе Минзәләгә барып, Аҡай өҫтөнән шикәйәт бирә. Унда, Аҡай ҙур отряд менән килеп, ауылдың тыныс халҡын ҡырҙы, талап, бөтә әйберҙәрен алып китте, тип яҙылған була. Был хәбәрҙе урыҫ кенәзенә еткерәләр. Кенәз сиреү туплап, Аҡайға ҡаршы сыға. Сиреү башлығы итеп Румянцев ҡуйыла. Эште аҙағынаса еткереү өсөн, Аҡай ауылын ҡамап ала һәм үҙен ҡулға төшөрә. Бынан һуң Аҡайҙы бер кемгә күрһәтмәй-

ҙәр. Бераүҙәр, уны аҫҡандар икән, икенселәр, ҡамсы менән туҡмап үлтергәндәр имеш, ти» (44, 62-63). Хикәйәттә Аҡай Күсемовтың яҙмышы бер ваҡиғаға бәйле бына шулай һүрәтләнә. Ә ысынбарлыҡта, 1735-1736 йылдарҙағы башҡорт яуы башлыҡтарының береһе булараҡ, уның эшмәкәрлеге бик киң.

* * *

1735 йылда Рәсәй батша самодержавиеһы тарафынан Ур йылғаһы тамағына ҡала-ҡәлғә төҙөү өсөн Өфөнән Башҡортостандың көньяғына юл тотҡан Ырымбур экспедицияһын туҡтатыу өсөн азатлыҡ яуына күтәрелгән башҡорттарҙы **Аҡай Күсемов** етәкләй.

1735 йылдың июнендә Өфө ҡалаһы янында Бөтөн башҡорт ҡоролтайы үткәрелә. Аҡай батыр унда Ҡаҙан юлы башҡорттарының вәкилдәрен етәкләй. Ҡоролтай Ырымбур хәрби экспедицияһына ҡаршы ҡораллы баш күтәрергә тигән ҡарар сығара.

Ҡаҙан юлындағы ихтилалды Аҡай батыр етәкләй. Бөйөк тарихсыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди Туған «Башҡорттарҙың тарихы» китабында яҙғанса: «Аҡай үҙе көнсығыш Башҡортостандың Тамъян ырыуының бейе була тороп, Минзәлә тыңда йәшәгән Йәнәй башҡорттарынан ер биләмәһе алып, был ҡаланан 50 саҡырымда үҙ хужалығын ҡорған. Уның бындай биләмәләре (улар иһә мотлаҡ стратегик рәүештә ҡоролған булырға тейеш) Ноғай һәм Уса юлдарында ла булған. Рустар уға ҡаршы «Ҡазан сыуашы» тип йөрөтөлгән бер төркөм сыуаштарҙы файҙаланған. 1735 йылда Аҡайҙың атаһы Күсмәт (бында Күсембәк яҙылған) үлгәндән һуң, был сыуаштар аҙған, Аҡайҙың хужалығына килеп, аттарын урлар булғандар» (22, 95-96).

Ноғай юлының Тамъян олоҫонда йәшәгән Шәғәле Шаһман нәҫеленең аҫаба вәкилдәре була тороп та, Түләкәй, Күсем, Аҡайҙарҙың ни өсөн Ҡаҙан юлында килмешәк хәлендә йәшәүҙәре хаҡында Баһауетдин Зәйнетдиновтың түбәндәге фекере менән килешмәү мөмкин



түгел: «...беҙҙең ерҙәребеҙҙе тартып алып, унда ҡәлғәләр, сиркәүҙәр төҙөүселәр, беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙы көсләп христиан диненә күсерергә теләүселәр, йәғни беҙҙе халыҡ булараҡ юҡҡа сығарырға тырышыусылар, беҙгә башлап 1552 йылда Ҡаҙанды баҫып алғандан һуң бына ошо ерҙәр аша килгән. Башҡорт еренең башында - Минзәләлә 1640 йылдарҙа уҡ инде ҡәлғә төҙөгән булғандар. Бына шуның өсөн батырҙарыбыҙ, аҡыл эйәләре лә булараҡ, беҙҙе юҡҡа сығарырға теләүселәрҙе башҡорт еренең башында уҡ туҡтатырға тырышҡан, ә инде Аҡай шул урындан тороп көрәшеү өсөн ғүмеренең күп өлөшөн, махсус рәүештә Минзәлә тирәһендә йәшәп үткәргән» (17, 151-се һан).

Санкт-Петербургта ихтилалдың башланыуы тураһында июль аҙағында ғына хәбәрҙар булалар. 13 августа хөкүмәт баш күтәреүселәргә ҡаршы ҙур хәрби түрә генерал-лейтенант А. М. Румянцевты ебәрергә ҡарар итә. Уның ҡарамағына 3 регуляр полк, 500 яйыҡ казағы, 3000 ҡалмыҡ бирелә. Бөтә хәрби һәм вазифалы кешеләр, шул иҫәптән Экспедиция начальнигы Кириллов, Өфө һәм Ҡаҙан властары уға буйһонған. 15 сентябрҙә Румянцев Минзәләгә килеп етә, баш күтәреүселәргә, һөйләшеүҙәрҙе башларға саҡырып, мөрәжәғә итә. Уның менән тыныс рәүештә һөйләшеп килешеү өсөн Аҡай Күсемов Минзәләгә саҡыртыла һәм, Килмәк абыз, Йосоп Арыҡов менән бергә мәкерле рәүештә ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Бер аҙҙан уларҙы Мәскәүгә ебәрәләр, артабан Килмәк Нурышев һәм Йосоп Арыҡовты Өфөгә, тағы аҙыраҡ торғас, Минзәлә төрмәһенә күсерәләр, унан Мәскәү һәм Петербургка алып китәләр. Уларҙың тотконлоғо шулай тамамлана: Йосоп Арыҡовты баш күтәреүселәрҙе өгөтләү өсөн ирекка сығарып торалар, Килмәк Нурышевты аҫалар. Ә бына 1738 йылда Санкт-Петербург төрмәһенә оҙатылған Аҡай Күсемовтың артабанғы яҙмышы беҙгә билдәһеҙ.

Аҡай Күсемов хаҡында башҡорт яҙыусыһы Йософ Гәрәй Башҡортостандың көнбайыш төбәгендә, Шаран

районы Баҙғыя ауылында йәшәүсе атаһы Ибраһимдан яҙып алған бер легенда бар. Ундағы хәл-ваҡиғаларҙың күбеһе реаль ысынбарлыҡҡа тура килмәй, шулай ҙа ҡыҙыҡ өсөн был халыҡ ауыҙ-тел ижады әҫәрен килтереп китеү урынлы булыр тип уйлайбыҙ: «*Аҡай яу башлығы булған. Беҙҙең яҡтарға Минзәлә тирәһенән килгән. Мин бәләкәй саҡта уның тураһында йыраусылар думбыра сиртеп, гөслә уйнап бирәләр ине. Хәҙер ундай йыраусылар бөткән инде. Наурузсылар ҙа күптән юҡ.*

*Был Аҡай тигән кеше бик батыр булған, ти. Уны уҡ та алмаған, ҡылыс та киҫмәгән. Мылтыҡтан атһалар, пуля теймәгән, һыуға төшһә, һыуға батмаған, тәрән упҡын аша атлап сыға ла китә, ти, был. Дошман ғәскәрҙәре менән һуғышҡандан һуң ҡағынһа, тимер көпөһөнән пуль ергә шыбыр-шыбыр ҡойола, ти. Батшаның әфисәрҙәре, түрәләре менән оҙаҡ ҡыйышҡан ул. Ҡандраҡүл тирәһендә лә ҡаты орош-һуғыштар була. Өфө яғында ла, унан ары Иҙел буйында тоҙло инештәр аҡҡан ерҙә батша ҡорғандарын алыр өсөн ҡаты һуғышалар. Мәгәр ҡорғандарҙы халыҡ ала алмай. Яу еңелә, иң аҙаҡтан Аҡай бер үҙе ҡалып, күл буйында оҙаҡ ҡына алыша. Бик арығас, һыуға атлап керә лә китә. Артынан инергә тиеп ынтылып ҡарайҙар - булмай. Һалдаттар бата, ә Аҡай батыр баҫып тик тора, ти. Аталар, аталар - тимәй. Шунан батша ғәскәрҙәре башлығы Тәфтиләү мундир төймәләрен өҙөп ташлай, асыуланып мылтыҡ ҡора ла атып ебәрә. Аҡай һыуға йығыла.*

*Иллә-мәгәр Аҡай аяҡтан йығылһа ла, күл уны йотмай. Әкрен генә тирбәткәндәй итеп, тулҡындар уны икенсе яҡ ярға алып сыға. Күлдең икенсе яғында уны аты көтөп тора икән. Шул ат хужаһының һушына килгәнен көтөп тора ла урманға алып ҡаса.*

*Тик Аҡай батыр рәхәт күрә алмай, яраһын дарыулайбыҙ тигән булып, тилбәрән биреп, аҡылдан яҙҙыралар уны. Шунан ул йорт-илде хәүефкә төшөрөп, еңләнеп йөрөй. Аҙаҡтан аҡылға килеп, ни эшләгәндәрен тө-*



*шөнгәс, арҡандың бер башына атын, икенсе башына үҙен аҫып үлә. Ана шул күлде Аҡайкүл ти икән халыҡ.*

*Яуҙар элек күп булған ул. Һиммәт түрәләр, батырҙар ҙа күп булған халыҡта. Халыҡ берҙәм булып «бер бүреккә керәп» бөтәлмәгән. Ҡорал да таҡы-тоҡо. Уҡ, ҡылыс та һөңгө, айбалта. Ә батша яҫсыларында мылтыҡ та буйтым, ат мылтығы - туп та бар»* (7, 186).

* * *

Шәғәле Шаһмандың Сыуаҡ (Сеүә) исемле улынан таралған 5-се, 6-сы быуын вариҫтары: **Аҡманай,** уның улдары **Ҡорманғол** менән **Солтанғол** шулай уҡ нәҫелдәштәре Аҡай Күсемов етәкселек иткән яуҙа бик әүҙем ҡатнаша, ирек, азатлыҡ өсөн изге көрәш юлында баштарын һала. Шул уҡ «Аҡай яуы» тарихи хикәйәтендә улар хаҡында фәһемле мәғлүмәттәр таба алабыҙ. «Яу тиһәң, тамъяндарҙан һора, дау тиһәң, һарайлынан һора», - тигән әйтем юҡҡа ғына шул осорҙан ҡалмағандыр, күрәһең. Был тапҡыр һүҙҙәргә бөйөк шәхесебеҙ Әхмәтзәки Вәлиди Туған да «Башҡорттарҙың тарихы» тигән хеҙмәтендә иғтибар иткән (22, 97).

Ә хәҙер «Аҡай яуы» хикәйәтенең руссанан әҙип Йыһат Солтанов тәржемәһендәге түбәндәге өҙөгенә иғтибар итәйек: «*Ҡыпсаҡтар, үҙҙәренең урыҫтар яҡлы булыуынан маһайып, Хоҙай уларға тыныслыҡ һәм бәхет килтерҙе, тип һананы һәм тамъяндарға ҡаршы көрәште. Тамъяндарҙан үс алырға теләп, Һаҡмарға барып еткән урыҫтар менән берләшеп, тамъяндарға ябырылды. Һуңғылары үҙҙәренә ҡотолор урын таба алманы...*

*Улар (тамъяндар), күсенергә теләп, ҡыпсаҡтарҙың тарафына килгәйне, ләкин көтмәгәндә ҡыпсаҡтарҙан булған һатлыҡ йәндәр Һаҡмарға килеүсе урыҫтарға хәбәр иткән улар хаҡында. Урыҫтар уларҙың мал-тыуарын ҡыуалап алып китте, ҡатын-ҡыҙҙарын ҡол итте, әшкәрәҡһыҙ ҡарттарҙың бөтәһен ҡырҙы. Тамъян аҡһаҡалдарынан Аҡманай, Йәнғол ҡасҡын, Кинжәғол, Солтанғол - бөтәһе шунда һәләк булды. Ҡатындар, урыҫтарҙан*

*ҡоттары осоп, үҙ балаларын һыуға атты: бәгелеренен сабый балалары тирәк ботаҡтарына эленгән сәңгелдәктәрҙә ҡалды - бөтәһе лә шунда һәләк булды, сөнки әсәләре уларҙы үҙҙәре менән алырға өлгөрмәне. Күксә тархандың ҡатынын - Сураҡайҙың әсәһен - әлһерәп бөткән ҡарсыҡты, урталай яра сабып, юлдың ике яғына быраҡтырҙылар. Тамъяндан Ҡорманғолдо, Аҡманайҙың улын, был фетнәле көндә урыҫтар ҡамап алған; үҙенең һөйләүенсә, ул, ике янды ҡармап алып, керешен бөтөрә тартып, шуларҙан уң яҡлап - урыҫтарға, һул яҡлап мишәрҙәргә атып, үҙенә юл ярған. Бер мишәр унын артынан: «Ах, ни эшләнең һин, яуыз башҡорт?! Һеҙҙе аҫып бөтөрөргә тирәктәр ҙә етмәй бит!» - тип ҡысҡырып ҡалған»* (13, 157-158).

Әхмәтзәки Вәлиди Туған үрҙә телгә алынған ғилми хеҙмәтендә: «Тамъяндар был һуғыштарҙа башҡорттарҙың иң ҡыйыу һәм иң ныҡышмалы ғәскәре сифатында танылған», - тип юҡҡа ғына яҙмаған (22, 97).

* * *

Беҙ китаптың «Шәғәле Шаһман нәҫеленә ҡағылышлы сығанаҡтар һәм историография» тигән бүлегендә Аҡай Күсемовтың ҡайһы ырыу-нәҫелдән һәм ҡайһы яҡтан булыуына бәйле арналған бәхәсле мәҡәләсығыштар хаҡында ентекле һүҙ алып барғайныҡ. Был дискуссияға тарих фәндәре докторы Ирек Ғайса улы Аҡмановтың мәҡәләһе, «Материалы по истории Башкортостана» (т.6. Уфа, «Китап», 2002 г.) тигән күп томлыҡта донъя күргән тарихи документ һуңғы нөктәне ҡуя һәм артабанғы бәхәстәргә урын ҡалдырмай. Түбәндәге өҙөктә был айырыуса асыҡ күренә: «*1737 году февраля 17 дня. Допрашиван вор и известный бунтовщик.*

*Акаем его зовут Кусюмов, Уфинского уезду, Нагайской дороги, Тамьянской волости, деревни Кусюмовой. У него жена Артык, 2 сына, Абдул 33-х, Бикташ 3-х лет, дочери: Карасис 17-ти, Каланшик 15-ти, Бика осьми, Назла осьми ж лет. И оная дочь ево Карасис засватана за башкирца Табынской волости, деревни Кунуровой за Бекбова Тюшеева. И слышал де он, будучи в Казани на базаре, а от кого имянно, сказать не знает, что жена ево Артык Сюющевва и с вышеписанными детьми из деревни своей ушли к Кильмяку-абызу.*

*Дед ево и отец, Кусюм Тюлекеев, старинные башкирцы Уфинского уезду. И в прошлых годех дед ево в бунт Сеитовской был согласником и за то в Уфинском уезде по Казанской дороге повешен, а отец ево Кусюм, в бунте был Алдаровском и после того бунту умре в доме своем»* (43, 65-66).



Шулай итеп, XVII–XVIII быуаттарҙағы башҡорт йәмғиәтенең бай ҡатламын тәшкил итешеүсе Шәғәле Шаһман нәҫеле вәкилдәре батша хөкүмәтенең 1557 йылғы Килешеү шарттарын боҙоп, Башҡортостан ерҙәрен баҫып алыу, башҡорт халҡын көсләп суҡындырыу, социаль-иҡтисади яҡтан иҙеүенә ҡаршы баш күтәреүҙәрҙе ойоштороуҙа әүҙем ҡатнаша. Улар етәкләшкән яуҙар Рәсәй батшалығының феодаль-колониаль сәйәсәтенә ҡаршы милли-азатлыҡ көрәше булып тора. Шул арҡала батша хөкүмәте башҡорттарҙың ер биләмәләренә хоҡуғын рәсми раҫлай, көсләп суҡындырыуға бармай. Иң мөһиме ата-бабаларыбыҙ шәхси ирекен һаҡлап алып ҡала.

## 8. ШӘҒӘЛЕ ШАҺМАН НӘҪЕЛЕ ВӘКИЛДӘРЕ НИГЕҘЛӘГӘН АУЫЛДАР

### ҠАҺАРМАН АУЫЛЫ

Йәйләү зыяратында Тамъян ырыуы бейе, кенәз һәм башҡорт халҡының XVI быуаттағы күренекле шәхесе, сәйәси эшмәкәре Шәғәле Шаһман ерләнгән был ауылды 1834 йылда быға тиклем Юлдаш ауылында йәшәгән унын 10-сы быуын вариҫы **Ҡаһарман Ҡаҙаҡкол улы**

**Ҡаҙаҡколов** (1786 йылғы) нигеҙләгән. Был ваҡытта ул Тамъян олоҫонда урядник вазифаһын башҡарған. Ҡаһарман Ҡаҙаҡколов етәкселегендә хәҙерге Әбйәлил районына ҡараусы Амангилде, Ишкилде ауылдарынан 8 ғаилә яңы урынға күсеп сыға. Төп кәсептәре - малсылыҡ, игенселек, урмансылыҡ, балыҡсылыҡ, тире иләү һәм башҡа шөғөлдәр була.

Ауыл аҡһаҡалдары һөйләүенсә, был яҡтарҙағы ерҙәр элек ошо ырыуҙыҡы, ә хәҙерге Ҡаһарман ауылы ултырған ер Шәғәле Шаһман йәйләүе, ауыл зыяраты уның йәйләү зыяраты булған.

Ҡаһарман Ҡаҙаҡколовтың атаһы Ҡаҙаҡколдың *Сөләймән, Әбделвәли, Әбделмәжит* исемле улдары йәғни ике туғандары уның менән берлектә тәүҙә Саҡынды тигән бик матур ерҙә утарҙарына нигеҙ һала. Тик заводсылар уларҙы бынан ҡыуып ебәрә. Шунан Ҡаҙаҡкол ҡарт уландары Ағиҙел буйындағы хәҙерге Иҫке ҡышлау (исеме лә шул заманға ҡарата әйтелгән) тип аталған ергә килеп ултыра. Тик баяғы урыҫ заводсылары төнөн уларҙың утарҙарын үртәй. Шулай булһа ла, ҡайһы бер Ҡаҙаҡкол улындарының ата-баба ерен ташлап киткеләре килмәй. Улар ошо тирәлә, Ағиҙел буйында, «Сватма», «Авраль» (был исемдәр һуңғараҡ барлыҡҡа килгән) тигән урындарҙа төпләнеп йәшәй башлай. Быларға һаман да көн күрһәтмәйҙәр: йыш ҡына һөжүм итәләр, йәберләйҙәр, төрлө бәлә-ҡаза килтерәләр. Артабан башҡорттар, яңы урын эҙләй торғас, иң матур, иң уңайлы, һыуҙан хәүефһеҙ булған хәҙерге Ҡаһарман ауылы урынында ныҡлап нигеҙләнергә тигән берҙәм һәм төплө фекергә килә. «Ҡаһармандың хәҙерге урынына тәү башлап килеп ултырған аралар *дүмәй, сартанбай, көршәк, аҡһуйылдар, ҡарабалтыр, суҡ төйгөстәр, төлкөләр, ҡырғыҙҙар, ҡараҡалпаҡтар, ҡуҡты»* (48, 482).

Ул саҡта ауылдың исеме **Ҡотҡор** тип атала. Рәсми документтарҙа ҡулланылмаһа ла, һөйләш телендә ул әле лә ошо исем менән йөрөтөлә.



Халыҡ араһында Ҡаһарман Ҡаҙаҡколовты «Ҡаһарман батыр» тип тә йөрөтөр булғандар. Уның нәҫел тармағы түбәндәгесә: *Шәғәле Шаһман - Бураш - Тәңребирҙе - Тебкәй - Жаушай - Ҡырсай - Ҡарасман - Юнысбай (Юнысай) - Юнай - Ҡаҙаҡкол - Ҡаһарман.* Ул Шәғәле Шаһман бабаһынан ҡалған ер-һыуына хужа булырға тырышҡан. Шуның өсөн суд һәм башҡа органдар алдында был ерҙәр Тамъян ырыуы биләмәһе тип иҫбатлап «креп» алған. («Креп» - кешегә ерҙе биләү, беркетеү өсөн бирелгән законлы ҡағыҙ).

Ҡаһарман Ҡаҙаҡкол улының аҫаба ерҙәре өсөн нисек көрәшеүе тураһында Әбйәлил районынан сыҡҡан арҙаҡлы журналист Ғәли Ишбулатов шулай тип яҙҙы: «Башҡорттар менән заводчиктар араһындағы ер дәғүәләренә ҡағылған документтарҙы уҡыйым. Бына Верхнеурал өйәҙ суды 1826 йылдың августында хәҙерге Әбйәлил районының Рысҡужа ауылына килә. Ул бында Әүжән-Петрау заводы хужалары менән Тамъян, Түңгәүер башҡорттары араһындағы ер мәсьәләһенә ҡағылған эште ҡарарға тейеш. Өйәҙ суды: «...послать за поверенным деревни Журнаевой из тархан урядником Кагарманом Казаккуловым Шикмановым нарочного, дабы он в поспешнейшем времени представил его в сей суд», - тип яҙа. Бындағы «Шикманов» беҙ эҙләгән Шағәле Шаҡман түгелме? Журнаево ауылы ҡайҙа? Ошондай һорауҙар тыуҙы. Уларға яуаптар эҙләгәндә, төрлө йылдар документтарында: «имеется показание поверенного Кагармана Казаккуловым Шикманова...», «сам Кагарман Казаккулов Шаҡманов», «поверенный Казаккулов Шигалы Шахманов» тигән исем-фамилиялар осраны.

Рәсәй императоры указының 6-сы кантон начальниғы Ласынов тарафынан раҫланған күсермәһендә: «...поверенный от башкир Тамъянской волости Верхнеуральского уезда команды старшины Мухаметкарима Юлдашева из деревни Юнаевой из тархан урядник Кагарман Казаккулов сын Шагалы Шакманова жалуется на неправильное будто бы постановление Оренбургской па-

латы гражданского суда, учиненного по делу их башкирцев с заводчиками Губиными о земле», - тинелә. Ошонда уҡ Тамъян башҡорттарының хазинаға сикһеҙ бай булған 89 мең 985 дисәтинә еренең заводчиктар ҡулына күскәнлеге күрһәтелә.

Ошо уҡ документ Ҡаһарман Ҡаҙаҡколовтың Шәғәле Шаһман тоҡомонан булыуын, ә ҡайһы бер документтарҙа Журнаево йәки Жунаево тип яҙылған ауылдың дөрөҫ исеме Юнай булыуын асыҡланы» (16, 143).

Академик Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов 1985 йылда Белорет районының Ҡаһарман ауылында Ҡ. F. Ғиниәтуллиндан яҙып алған «Тамъян ырыуы» легендаһында ла Ҡаһарман Ҡаҙаҡколовҡа ҡағылышлы ҡайһы бер ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар: «Шәғәле Шаһмандан ете быуын килә. Тәүгеһе - Ҡаһарман батыр. Ул ошо ауылыбыҙҙы нигеҙләгән. Ауылдың исеме шул батырҙан ҡалған. Беҙҙекеләр элек тау эсендәге Иҫке ҡышлауҙа йәшәгән. «Тыранса ҡыуыш» тигән ерҙәребеҙ йәйләү ерҙәре булған. Ҡаһарман батыр ошо урынға ултырғас, ил йомошо менәнме, нисек, Мәскәүгә барған икән. Нишләптер, унан Ҡаһармандың ярты сәсен алып ҡайтарғандар» (7, 121).

Бөгөн Ҡаһарман ауылында 500-гә яҡын кеше йәшәй. Шул иҫәптән - йөҙҙән ашыу бала. Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғансы халыҡ «Россия» колхозында, леспромхозда эшләгән. Яңы тормош шарттарында колхоз да, леспромхоз да тарҡала. Шулай ҙа ҡаһармандар ҡырағай баҙар шарттарында ла юғалып ҡалмай, шәхси хужалыҡ иҫәбенә йәшәргә тырышып ята. Күпләп мал-тыуар тоталар.

## ЮЛДАШ

Был ауылға XVIII быуат аҙағында Шәғәле Шаһмандың 7-се быуын вариҫы **Юлдаш Ҡарасман улы** нигеҙ һала. Уның нәҫел тармағы түбәндәгесә: *Шәғәле Шаһман - Бураш - Тәнребирҙе - Тебкәй - Жаушай - Ҡырсай - Ҡарасман - Юлдаш.*



Ауылдың икенсе төрлө исеме - **Күҙәсә**.

Ауылға нигеҙ һалыусының улдары - урядник Мөхәмәткәрим һәм Нарынғаҙы Юлдашевтар.

## ЮНАЙ

Был ауылға Шәғәле Шаһмандың шул уҡ икенсе улы Бураштан таралған нәҫел-нәсәптән **Юнай тархан Юнысбаев** (*Юнысаев*) нигеҙ һалған. Ул - башҡорт кенәзенең 8-се быуыны: *Шәғәле Шаһман - Бураш - Тәнребирҙе - Тебкәй - Жаушай - Ҡырсай - Ҡарасман - Юнысбай - Юнай.* Тимәк, уға тиклемге ата-бабаһының барыһы ла тархан исемен лайыҡлы йөрөткән.

Юнай Юнысбаев 1757 йылда заводсы Шуваловҡа Әүжән йылғаһы буйындағы ерҙәрҙе оброкка биреүҙә ҡатнаша.

Юнайҙың улы - Ҡаҙаҡкол (1758-1830), ейәне - Ҡаһарман, беҙ үрҙә һүҙ алып барған шул исемдәге ауылға нигеҙ һалыусы аҫаба.

## ИШКИЛДЕ

Ишкилде ауылына 1834 йылда Юнай ауылы халҡы нигеҙ һала. Ул Ҡыраҡа шишмәһе буйында барлыҡҡа килә. Ауыл **Ишкилде Дәүләткол улы Йосопов** исемен йөрөтә. Уның улдары - Йәнмырҙа һәм Ханмырҙа.

## ТАҠҺЫР

Ауылға Тамъян волосы старшинаһы **Теләнсе Исәшев** нигеҙ һала. Ауылдың икенсе исеме Теләнсенең улы **Таҡһырға** килеп тоташа. Уның Хөсәйен, Мөхәмәтшәриф исемле ағалары була. Таҡһырҙың балалары: Динислам, Яйыҡбай, Айытбай, Фазулла. Малсылыҡ менән шөғөлләнгәндәр.

## ӘБДЕЛҒӘЗЕ

Әбделғәзе ауылының барлыҡҡа килеүе Таҡһыр (Теләнсе) ауылыныҡы менән тығыҙ бәйле. Бөтә ғүмерен ошо ауылда балаларға аң-белем биреүгә бағышлаған

мәрхүм *Зиннур Исмәғилев* яҙып ҡалдырған тарих биттәренән билдәле булыуынса, уға Шәғәле Шаһмандың бишенсе быуын вәкилдәре **Әбделғәзе** менән **Әкембәт** нигеҙ һалған.

1834 йылда Таҡһырҙан 120 кеше Тулаҡ йылғаһы буйында Әбделғәзе ауылына нигеҙ һала. Иң беренсе булып 30 йәшлек Әбделғәзе Иҫәнғолов күсеп килә. Уның улы Килдейәр була. Ағаһы - Әбделфәйез.

## ИҪКЕ МУСА

Башҡортостандың көньяғында, Ағиҙел буйында, хәҙерге Мәләүез районында, урынлашҡан был ауылға Шәғәле Шаһмандың тархан нәҫеленән иҫәпләнгән 7-се быуын вариҫы Муса Һөйәров нигеҙ һалған, тип иҫәпләй ҡайһы бер тарихсылар. Беҙҙенсә, ауыл күпкә алдараҡ барлыҡҡа килгән булырға тейеш, шуға күрә был йәһәттән ныҡлы тикшеренеү-эҙләнеүҙәр көтә ғалимдарыбыҙҙы.

Әле исеме үрҙә телгә алынған Муса Һөйәров йөҙ башы хеҙмәтен үтәгән. Уның нәҫел тармағы түбәндәгесә: *Шәғәле Шаһман кенәз - Бураш - Яңыбирҙе - Ҡужымбирҙе - Сыуашай - Һөйәр - Муса.*

Муса Һөйәровтың ата-бабаһы кенәз-тархан нәҫеленән булған кеүек ул үҙе лә заманында башҡорт йәмғиәтенең бай ҡатлам вәкилдәре иҫәбенә ингән. 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында ла милли-азатлыҡ яулаусылар яғында булған. Уның улы Ғүмәр Мусин шулай уҡ олоҫтоң йәмәғәт тормошонда әүҙем ҡатнаша. Ә ейәне Әлибай Ғүмәров, 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашып, ике көмөш миҙал менән наградалана.

V ревизия буйынса (1795 йыл) ауылда 42 йорт булған, һәм уларҙа 331 кеше йәшәгән. Ә X ревизия (1859 йыл) 323 кеше күрһәтә. «60 йылдан ашыу ваҡыт эсендә ни өсөн ауыл халҡы ныҡлап артмаған?» - тигән һорау тыуырға мөмкин. Был Иҫке Мусанан яңы ауылдарҙың бүленеп сығыуына бәйле. Башлыса, Шәғәле Шаһман нәҫеле вәкилдәренән торған ауыл йәмғиәте тирә-яҡ биләмәләрҙә тамъяндарҙың яңы ауылдарын нигеҙләү менән әүҙем шөғөлләнгән. Алты тиҫтә йыл арауығында Иҫке Мусанан Смаҡ, Йомағужа, Илкәнәй, Яңы Муса ауылдары бүленеп сыҡҡан.



Иҫке Муса ауылы башта хәҙерге «Арыҫлан» совхозының Үҙәк усадьбаһы урынында ултырған. Заманында унда дүрт мәсет һәм мәҙрәсә эшләгән. Өс зыяраттың береһендә ошо яҡтарҙағы күренекле дин әһелдәре менән дәүләт эшмәкәрҙәрен ерләр булғандар.

Бөгөн Иҫке Мусаны бөтөүгә табан йөҙ тотоусы ауылдар исемлегенә индерергә мөмкин. Ауылда йәштәр ҡалмай, уларҙың күбеһе совхоз үҙәгендә, Мәләүез, Күмертау һ.б. ҡалаларҙа төпләнеп йәшәүҙе хуп күрә. Шундай тарихҡа бай ауылдың ер йөҙөнән юҡҡа сығыуға дусар ителеүе үтә лә ҡыҙғаныс, әлбиттә.

Иҫке Мусала Шәғәле Шаһман нәҫеленә ҡараусылар Һөйәров, Кейекбаев, Боҫтобаев, Вахитов, Монасипов, Ғөбәйҙуллин, Шәйәхмәтов һ.б. фамилияларҙы йөрөткән һәм йөрөтә.

## ЯҢЫ МУСА

Иҫке Муса ауылында йәшәүсе Шәғәле Шаһман нәҫеле вәкилдәре Иҙел-Нөгөш тамъяндарының биләмәләрен киңәйтеү һәм уңышлы файҙаланыу маҡсатында үҙ нәҫелдәштәрен олоҫтан ситтәге ерҙәргә күсереп ултыртып, яңы ауылдар барлыҡҡа килтерә. Шуларҙың береһе - 1843 йылда барлыҡҡа килгән Яңы Муса ауылы. Ағиҙел буйынан күсеп килгән 18 ғаилә бында, яңы урында, аҫаба булып иҫәпләнә. 1859 йылғы халыҡ иҫәбен алыу ҡағыҙҙарында улар шулай теркәлгән дә. Ә инде бер йылдан һуң шул аҫабалар Ҡарағош, Хәлекәй ауылдарының мишәр, типтәрҙәренә Яңы Мусаға килеп ултырырға рөхсәт итә.

## ТАШЛЫКҮЛ

Иҫке Муса ауылының Шәғәле Шаһман нәҫеле вәкилдәре Совет дәүләте осоронда ла яңы ауылдар бар-

лыҡҡа килтереү йолаһын уңышлы дауам иттерҙе. Шуның һөҙөмтәһе булараҡ, XX быуаттың 30-сы йылдарында, коллективлашыу осоронда, Иҫке Мусаға ҡаршы - Ағиҙелдең һул яҡ ярында - Ташлыкүл ауылы барлыҡҡа килә.

## ТАМЪЯН

Шул уҡ күмәк хужалыҡ төҙөү осоронда Ташлыкүл ауылы янында Шәғәле Шаһман нәҫеле вәкилдәре нигеҙләгән тағы бер ауыл - Тамъян барлыҡҡа килә. Уны Иҙел Тамъяны тип тә йөрөтәләр.

## ЙОМАҒУЖА

Йомағужа ауылы XVIII быуат аҙағында - XIX быуат башында барлыҡҡа килгән, тигән фараз бар. Уны нигеҙләүсе шәхес итеп тарих фәндәре докторы Әнүәр Әсфәндиәров Иҫке Муса ауылының Шәғәле Шаһман нәҫеленән булған **Йомағужа Аҡкужинды**, ә журналист һәм тыуған яҡты өйрәнеүсе Сәйфулла Һаҙи улы Әмиров шул уҡ нәҫелгә ҡараусы **Йомағужа Йомағоловты** күрһәтә.

## ИЛКӘНӘЙ

Илкәнәй ауылы Ырымбур ҡаҙна палатаһының 1837 йылғы указы буйынса Йомағужа ауылынан бүленеп сыға. Яңы урынға - XVIII быуаттан уҡ билдәле булған утарға 15 ғаилә күсеп килә. Улар араһынан яңы урынға иң беренсе булып Шәғәле Шаһмандың етенсе быуын вариҫы (етеяты) **Илкәнәй Теләүембәтов** килеп ултыра. Уның нәҫел тармағы түбәндәгесә: *Шәғәле Шаһман кенәз - Бураш - Яныбирҙе кенәз - Ҡужабирҙе - Сыуашай - Сәфәр - Теләүембәт - Илкәнәй.* Ауылға тәү башлап нигеҙ һалыусы менән бер үк ваҡытта тиерлек уның Ҡотлогилде, Мәүлекәй, Сәлим, Салауат, Сәлих исемле улдары ла килеп төпләнә. Яңы ауылға нигеҙ һалышыуҙа Илкәнәй Теләүембәтовтың ир туғандарынан Бурас Теләүембәтов менән уның улы Әхтәм, икенсе улы Әб-



делғәзе һәм уның ҡустылары Илебай, Юлдаш, Юлай Теләүембәтовтар күсенә.

Илкәнәйгә күсеп килеүселәр араһында Иҫке Мусанан Вәлит Ишҡолов, Бикмөхәмәт Ҡотлошин, Ҡаҙырбай Боҫтобаев, Ишморат Түләбаев, Мөхәмәтәмин Думанов, Яппар Дәүләтсуриндар ҙа бар. Ауыл халҡының яртыһы тиерлек сығышы менән тархан тоҡомонан. Шуға күрә улар Башҡорт-мишәр ғәскәрендә хәрби хеҙмәт атҡарған.

Ауыл халҡы ярым күсмә тормош менән көн итеп, нигеҙҙә, малсылыҡ менән шөғөлләнгән. 1842 йылда кеше башына берәр боттан ужым ашлығы, 3,7 һабан ашлығы сәскәндәр. 1920 йылда ауыл янында, Мәләүез йылғаһы буйында, өс тирмән торған. Уларҙың хужалары – Кутузов, Степанов һәм Спиридоновтар. Улар Мәләүез олоҫо үҙәгенән 13-15 саҡырымда урынлашҡан була. XIX быуатта Илкәнәй ауылы кешеләре төрлө кәсеп, мәҫәлән, ылау йөрөтөү менән шөғөлләнгән. Ҡышын баҡыр ҡойоу заводтарына руда ташығандар. Воскресенск заводына (120 саҡырым) руда илткән өсөн 13 тин, Верхоторск (135 саҡырым) - 14 тин, Богоявлинск (250 саҡырым) - 18 тин хеҙмәт хаҡы алғандар.

Илкәнәй ауылы иң башта 25 йорттан торһа, унынсы ревизия ваҡытында (1859) 36 йортта 252 кеше йәшәгән. Ә 1920 йылда 75 өй күренә.

Совет дәүләте осоронда Илкәнәй ауылында тәүҙә колхоз төҙөлә. Үткән быуаттың 70-се йылдарында ауыл «Таймаҫ» совхозы составына индерелә. XX быуат аҙағында илдә башланған үҙгәртеп ҡороуҙар һөҙөмтәһендә хужалыҡ тарҡала, һәм бөгөн Илкәнәйҙә бер генә күмәк хужалыҡ предприятиеһы ла юҡ. Бер нисә фермер хужалығы эшләй.

Йәштәрҙең күбеһе Күмертау, Мәләүез ҡалаларына, Көйөргәҙе районы үҙәге Ермолаевоға йәшәргә һәм эшләргә китеп, шунда нигеҙләнә. Ауылда йәшәүселәрҙең байтағы Ҡансыра ер аҫты газ һаҡлау станцияһына йөрөп эшләй.

Тымышы менән Илкәнәй ауылынан булған Шәғәле Шаһман нәҫеле вариҫтары Әхтәмов, Малбаев, Сәфәров, Ишколов, Ниәтшин, Нуриев, Юланов, Иҙрисов, Ғәйфуллин, Әлибаев һ. б. фамилияларҙы йөрөтә.

## БӘЛӘКӘЙ ИЛКӘНӘЙ

Был ауыл Илкәнәйҙән бүленеп сыға. (Рәсми рәүештә уға Бәләкәй Муса исеме бирелә.) Информатор Тәлғәт Кәримовтың һөйләүенсә, ҡасандыр хәҙерге Ямаш (Ҡуян) ауылы биләмәләрендә йәшәгән Шәғәле Шаһмандың Сеүә исемле оло улынан таралған бер тармағы, ҡыпсаҡтар менән һыйыша алмайынса, ошо ауылға килеп төпләнергә мәжбүр булған. Ауылға һуныраҡ типтәрҙәр, башҡа ырыу башҡорттары ла килеп ултырған.

Тәлғәт Кәримовтың үҙенең нәҫел тармағы түбәндәгесә: *Шәғәле Шаһман - Сеүә - Тижадәүләт - Айгүрәмәмбәт - Ибраһим - Әбелхәйер - Ғәбделкәрим - Шәмсетдин - Фәсхетдин - Тәлғәт.*

1920 йылда Бәләкәй Илкәнәйҙә 38 йорт булып, уларҙа 179 кеше йәшәгән.

## ОЛО МОҠАС

Мәләүез районындағы элекке Оло Моҡас ауылына Тамъян ҡәбиләһе кенәзе Шәғәле Шаһмандың 5-се быуын уланы йәғни тыуаһы **Моҡас Теләүкәев** XVIII быуаттың 40-сы йылдарында нигеҙ һалған. Моҡастың нәҫел-нәсәп быуындары түбәндәгесә: *Шәғәле Шаһман кенәз - Буралы - Илсекәй - Теләүкәй - Моҡас.*

Ауыл Ағиҙел йылғаһының уң ярында, хәҙерге Мәләүез ҡалаһынан 8-9 саҡырым төньяҡ-көнсығышта, урынлашҡан була. Үкенескә ҡаршы, Оло Моҡас ауылы XX быуаттың 80-се йылдары аҙағы - 90-сы йылдар башында «Мәләүез минераль ашламалар» асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең ғәйебе: тирә-яҡ мөхиткә экологик хәүефлелек тыуҙырыуы арҡаһында йәшәүҙән туҡтаны, унын халҡының бер өлөшө хәүефһеҙерәк урындарға - күрше ауылдарға күсенде, бер өлөшө Мәләүез ҡалаһына күсерелде, эш булмау арҡаһында күп йәштәр башҡа ҡалаларҙа төпләнде.



Ауылды нигеҙләүсе Моҡас Теләүкәевтың исем-аты Тамъян ҡәбиләһе башлығы, кенәз Шәғәле Шаһман нәҫел-нәсәбенә ҡағылышлы ҡайһы бер шәжәрәләрҙә, тарихи документтарҙа телгә алына. Ул, Тамъян олоҫонон ышаныслы кешеһе булараҡ, башҡа аҫабалар менән бергә 1754 йылда заводсылар Твердышев менән Мясниковҡа Йайыҡ, Һаҡмар, Ағиҙел, Туғыҙтимер, Ҡарғалы, Һайылмыш, Юшатыр, Ыҡ буйҙарындағы мәғдән сыҡҡан 482 ерҙе 185 һумға һатышҡан: килешеүгә ҡул ҡуйыусылар араһында Моҡас Теләүкәевтың да ҡултамғаһы бар (32, 71).

Ул тағы ла 1757 йылда шул уҡ заводсыларға мәғдәнле 482 ерҙе 55 тинҙән һатыуҙа ҡатнаша (49, 173).

Өсөнсө тапҡыр Моҡас Теләүкәевтың ҡултамғаһы (документта Маҡач Тилкәев) 1764 йылда Тамъян олоҫо аҫабаларының 24 суҡынған һәм суҡынмаған татарҙарға Бөгөлсән менән Ҡыҙыл яр тигән урында - элек тоҙ келәттәре булған пристань ерендә йәшәүгә рөхсәт биргән килешеүгә ҡул ҡуйыусылар араһында ла бар (32, 71).

Моҡас Теләүкәевтың өс улы (*Уразбай, Ҡаскын* һәм *Уйылдан*) булғанлығы хаҡында академик Р. Г. Кузеев тарафынан төҙөлөп, баҫтырып сығарылған башҡорт шәжәрәләренең тәүге баҫмаһындағы «Сытырман һәм Моҡас ауылдары шәжәрәһе»нән беләбеҙ (2, 36-42). Был ҡулъяҙма ҡомартҡының йөкмәткеһенән аңлашылыуынса, Юрматы ырыуына килен булып төшкән Арыубикә — Моҡас Теләүкәевтың бер туған һеңлеһе. Тик ни сәбәптәндер шәжәрәлә уларҙың атаһы Аҡъяр бей тип яңылыш яҙылған. Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғилми хеҙмәткәре Ш. Н. Иҫәнғолов «Иҫке Сытырман» (Өфө, 2001 й.) исемле китабында бының сәбәбен түбәндәгесә аңлата: «Автор путается в генеалогии своих предков, появляются легендарные элементы. Если на самом деле отцом Мукача был Тлявкай, то по шежере

им является Акъяр бий. А дальним предком Мукача - представителя тамъянского племени почему-то оказывается Юрматы бий. Тут автор явно допустил грубую ошибку. Но ведь генеалогия тамъянцев была хорошо известна. Известны все предки Мукача Тлявкаева, он является прямым потомком, праправнуком знаменитого тамъянского бия Шагали Шагмана. Генеалогия Мукача приводится в книге А. З. Асфандиярова.

А. З. Асфандияров проверил шежере, привлекая документы, особенно ту его часть, которая касается XVIII - первой половины XIX в. и пришел к выводу, что она необыкновенно точна.

А автор «Шежере деревень Четырман и Мукач» был, наверное, не тамъянцем, а юрматынцем, точнее жителем деревни Четырман. В противном случае он наверняка должен был бы отлично знать генеалогию своих предков.

Деревня Мукач однако упоминается в обоих списках шежере. Почему же авторы обращают столь пристальное внимание на эту деревню и ее основателей? Не следует забывать, что Мукач - потомок славного тамъянского бия, человек, принадлежавший к высшим слоям башкирского общества, феодал. Зятья Мукача - Якуп и Байдагул - надо думать, тоже были знатными людьми юрматынского племени. Их потомки уже в XIX в., когда башкирский народ значительно обеднел (феодалы в том числе), пытаются обосновать свои претензии на знатность, аристократичность рода. Для этого они стремятся увековечить свою генеалогию, ее связь с другими знаменитыми фамилиями» (50, 26).

1960 йылда (2, 145-149) һәм 2002 йылда (3, 121 - 128) донъя күргән баҫмаларҙағы Тамъян ҡәбиләһе кенәзе Шәғәле Шаһман нәҫеле шәжәрәһендә («Шәғәле Шаһмандан Ғәлигә тиклемге шәжәрә») Моҡастың атаһы Беткәй исеме менән бирелгән (3, 124). Был тарихи дөрөҫлөккә тура килмәй. Усман Әбүбәкеров яңыртып төҙөгән шәжәрәлә Оло Моҡас ауылына нигеҙ һалыусы-



нын атаһы Теләүкәй икәнлеген һәм унын 10 быуынын белә алабыҙ: *Таман бей - Балун бей - Тамъян бей - Уразай бей - Мотай бей - Ҡырай бей - Шәғәле Шаһман кенәз - Буралы - Илсекәй - Теләүкәй - Моҡас.* Оло Моҡас ауылын нигеҙләүсе шәхестең исем-аты, шулай итеп, тарихи документтарҙа ла, У. Әбүбәкеров төҙөгән шәжәрәлә лә бер үк төрлө булыуы унын реаль дөрөҫлөккә тап килеүен асыҡ сағылдыра.

Шулай ҙа «Сытырман һәм Моҡас ауылдары шәжәрәһе»нең беҙҙең өсөн бер ҡиммәте шунда: унда Моҡастың улдарының - Ҡасҡын мулланың, Уразбай мулланың, Уйылдан хажиҙың исемдәрен осратабыҙ. Был исемдәр шәжәрәнән тыш ҡайһы бер тарихи документтарҙа ла осрай. Мәҫәлән, 1763 йылда Ноғай юлы башҡорт старшиналары һәм с[illegible]оҫтан һайланып ҡуйылған ышаныслы кешеләр Ырымбур губернаторына игенселеккә кинерәк йәйелдереү өсөн крепостной крәҫтиәндәр торға рөхсәт һорап хат ебәрә, уны мулла Ҡасҡын Моҡасов яҙған һәм, нәҫелдәше - күрше Смаҡ ауылын нигеҙләүсе Смаҡ Ҡасаев менән бер рәттән, ҡулын ҡуйған. Моҡастың икенсе бер улы - йөҙ башы һәм мулла Уразбай Моҡасовтың исем-аты шулай уҡ Ағиҙел йылғаһы буйындағы Бөгөлсән ерҙәрен Чанышевтарға һатыу тураһындағы документтарға ҡул ҡуйыусылар араһында осрай (32, 71).

Шул уҡ У. Әбүбәкеров төҙөгән шәжәрәлә Моҡастың тағы ла ике улы - **Иҙәге** менән **Ҡотлогужа** теркәлгән. Шәжәрәне күсереп һәм яңыртып төҙөүсе тәүге исемдә яңғылышҡан; информаторҙарҙан алынған мәғлүмәттәрҙән (Әхтәм Хисаметдинов) һәм рәүиз ҡағыҙҙарынан сығып фекер йөрөткәндә, Моҡас Теләүкәевтың 5-се улы - **Һатлыҡ**. Һатлыҡтың улы - **Ҡанбулат**. Ә 1816 йылғы рәүиз ҡағыҙҙарынан *Ҡанбулат Һатлыҡовтың* 1813 йылда мәрхүм булғанлығын белә алабыҙ. Уның улдары: **Шәрип** (56 йәш), **Иҙәге** (52 йәш), **Көсөкбай** (48 йәш).

Шулай итеп, XVIII быуат уртаһында йәшәгән Моҡас Теләүкәев һәм уның улдары бай ҡатлам вәкилдәре

иҫәбенә инеүсе аҫаба башҡорттар, дин әһелдәре буларaҡ күҙ алдына баҫа.

«Моҡас ҡасаныраҡ тыуған?» - тигән һорауға яуап-фаразды филология фәндәре докторы А. Ә. Камалов менән Ф. Ү. Камалованың «Атайсал» китабынан табырға мөмкин: «Ҡасҡын Моҡасов иһә 1764 йылғы документтарҙа осрай. Әгәр ҙә был йылдарҙа донъяуи эштәр менән шөғөлләнгән Ҡасҡын Моҡасовты 30-ҙар тирәһендәге кеше булғандыр тип фараз иткәндә, уның тыуған йылы яҡынса 1734 йылдарға тура килә. Ҡасҡындың атаһы Моҡас, тимәк, 1705-1710 йылдарҙа тыуған кеше булып сыға» (48, 40).

Үрҙә телгә алынған «Атайсал» китабында Оло Моҡас ауылында йәшәгән Иҙел-Нөгөш тамъяндары аралары (аймаҡтары) исемдәре лә килтерелә. Улар түбәндәгеләр: *моҡас, тимәс, ҡаҙаҡ, шағыман* (48, 267).

Юғарыла бик ентекле һүҙ алып барылған Моҡас Теләүкәевтың вариҫтары хәҙерге ваҡытта, Оло Моҡас ауылы бөтөрөлөүгә ҡарамаҫтан, күрше Яҡтыкүл, Яңауыл, Смаҡ, Бәләкәй Моҡас ауылдарында; Мәләүез, Салауат, Күмертау һ.б. ҡалаларҙа имен-аман йәшәп ята.

Моҡастың тәүге улы Ҡасҡындан Ғәйнуллин, Сөләймәнов, Ниғмәтуллин; икенсе улы Уразбайҙан - Уразбаев, Хисаметдинов, Шаһманов; өсөнсө улы Һатлыҡтан - Шаһманов, Камалов, Солтанов, Ихсанов, Ҡамбулатов; дүртенсе улы Ҡотлоғужанан Көсәпколов фамилияларын йөрөтөүсе Шәғәле Шаһман нәҫеле тармаҡтары барлыҡҡа килеп, таралған.

## БӘЛӘКӘЙ МОҠАС

Был ауыл Ағиҙелдең һул яғында, Оло Моҡас ауылына ҡаршы ярҙа, Ырымбур ҡаҙна палатаһының 1853 йылғы 3126-сы ҡарары нигеҙендә барлыҡҡа килә. 1920 йылда Бәләкәй Моҡаста 45 йортта 207 кеше йәшәгән.

Үкенескә ҡаршы, был ауылдың шәжәрәһе әлегә бөтөнләй тиерлек өйрәнелмәгән.



Бәләкәй Моҡас ауылында СССР Дәүләт премияһы лауреаты, III дәрәжә Хеҙмәт Даны ордены кавалеры Нәжметдин Сәләхетдин улы Аҡбирҙин, журналист, балалар яҙыусыһы һәм сатирик шағир Хөснулла Әхмәҙулла улы Түләкәев тыуып үҫкән.

## ЯҠТЫКҮЛ

1927 йылда Ағиҙел менән Нөгөш араһындағы ерҙәрҙе ят бауырҙарға бирмәҫ өсөн Оло Моҡас ауылы халҡы, йыйылып, йәрәбә һала, һәм шуның һөҙөмтәһендә 8 ғаилә, күсеп сығып, Яҡтыкүл ауылын нигеҙләй. Улар түбәндәге ғаиләләр: 1. Солтангәрәй Зәйнетдин улы Шаһманов; 2. Зөлҡәрнәй Зәйнетдин улы Шаһманов; 3. Сәлимгәрәй Зөлҡәрнәй улы Шаһманов; 4. Сәғиҙулла Сәхи улы Ихсанов; 5. Тимерғәле Ғибаҙулла улы Хисаметдинов; 6. Рәжәп Әхтәм улы Уразбаев; 7. Ғиниәт Ғиззәт улы Ишмөхәмәтов; 8. Аллабирҙе Дәүләтбирҙе улы Имамов.

Аҡһаҡалдар кәңәш ҡороп, яңы ауылға Тамъян ҡәбиләһенә ҡараусы Сәйет ауылынан да айырым ғаиләләрҙе саҡыра. Сәйеттән Сәйфулла Татлыбаев, Мырҙа Әлимгужин, Кәрим Ҡотлобаев, Ғүмәр Ҡотлобаевтар күсеп килә. Шәрип ауылынан Ғиниәт Ибраһимов та ошо ауылда төпләнә.

Бөгөн Яҡтыкүлдә Уразбаев, Шаһманов, Хисаметдинов, Солтанов, Ихсанов фамилияларын йөрөтөүсе Шәғәле Шаһман нәҫеле вәкилдәре йәшәй.

## ЯҢАУЫЛ

Был ауыл үткән быуаттың 20-се йылдары аҙағында Нөгөш тамъяндары башҡорттарының элекке аҫаба ерҙәрендә мишәрҙәр тарафынан нигеҙләнә. Аҙаҡ унда шул ырыуға һәм Шәғәле Шаһман нәҫеленә ҡараусы башҡорттар күсеп ултыра. Бөгөн күпселекте һуңғылары тәшкил итә. Беҙ һүҙ алып барған нәҫел вәкилдәре Шаһманов, Камалов, Солтанов, Хисаметдинов фамилияларын йөрөтә-бында.

# СМАҠ

Смаҡ (*Аллмы Тамъян*) ауылы XVIII быуаттың 40-сы йылдарында Нөгөш йылғаһы буйында барлыҡҡа килә. Тарихсылар менән тыуған яҡты өйрәнеүселәр уны Шағәле Шаһмандың оло улы Сеүәнән таралған 6-сы быуын вәкиле **Смаҡ Ҡасаев** нигеҙләгән тип һанай.

Смаҡ Ҡасаев әрҙәкле аҫабанан иҫәпләнгән һәм Тамъян олоҫо тормошонда әүҙем ҡатнашҡан. Смаҡ Ҡасаев 1757 йылда Мотуповка аҫаба ерҙәрен һатыуҙа ҡатнаша. Ә 1763 йылда Ноғай юлының башҡа аҫабалары менән бергә Ырымбур губернаторы Дмитрий Васильевич Волковҡа башҡорттарҙа игенселекте киңәйтеү шарттары тураһындағы хат менән мөрәжәғәт итә (49, 172).

Смаҡ Ҡасаевтың улдарынан береһе **Әзибай** (1773 - 1839) кантон идаралығы осоронда зауряд-сотник булып хеҙмәт иткән. Уның **Әйүп**, **Абдулманнан**, **Абдулвахит** исемле улдары булғанлығы билдәле.

Үкенескә ҡаршы, Башҡортостан Республикаһы Үҙәк дәүләт архивына юлдар ябыҡ булыу сәбәпле, беҙ ауылға исем биреүсе Смаҡовтарҙың шәжәрәһендәге быуындарҙы бер-береһенә теүәл һәм дөрөҫ итеп тоташтыра алманыҡ. Шулай ҙа булғанынса уны күҙ алдына баҫтырып ҡарайыҡ: *Тамъян бей - Баҙғи бей - Тамъян бей - Уразай бей - Мотай бей - Ҡырай бей - Шағәле Шаһман кенәз - Сеүә - Төжмәргән - Шығай - Алас - Ҡасай - Смаҡ - Әзибай - Әйүп - Ҡотлокил.* Смаҡ ауылы информаторҙарынан яҙып алынған мәғлүмәттәрҙән Смаҡовтарҙың бөгөнгө 6 быуынының бер тармағы, мәҫәлән, түбәндәгесә күҙ алдына баҫа: *Ғәтиәтулла - Мөхәммәтсафа - Шәрифйән - Әнүәр - Сәлим - Айнур.*

Шағәле Шаһман нәҫеленең был араһы вәкилдәре бөгөн Смаҡов, Бикбаев фамилияларын йөрөтә. Улар араһынан 1917-1922 йылдарҙағы Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең төп етәкселәренең береһе **Муса Ғәтиәтулла улы Смаҡов** үҫеп сыҡҡан. Шулай уҡ талантлы гармунсы, һәүәҫкәр композитор һәм Арыҫлан ауыл Мәҙәниәт йортоноң художество етәксеһе **Муса Рәшит улы**



**Смаҡов** 1995 йылда «Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре» тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды.

Смаҡтағы Шаһманов фамилияһын йөрөтөүсе өс төркөмгә килгәндә, уларҙың Шағәле Шаһмандың Бураш исемле улы нәҫеле икәнлеген ололарҙан ишетеп белеүе хаҡында Әхтәм Тимерғәле улы Хисаметдинов әйтеп яҙҙырғайны. Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары Рәмил Бүләков менән Миңлеғәли Нәҙерголов төҙөп, баҫтырып сығарған «Башҡорт шәжәрәләре» («Китап», Өфө, 2002 й., 129-134-се биттәр) тигән баҫмалағы «Стәрлетамаҡ өйәҙенең 9-сы кантонындағы Тамъян олоҫо башҡорттары менән Богоруслан өйәҙенең Мөъмин ауылы башҡорттарының ҡан-ҡәрҙәшлеге тураһында Дәүләтхужа улы Әлимғужа тарафынан яҙылған, имам Ғабдулҡадирҙың улы Ғабдулхаҡ тарафынан күсереп алынған хат» тигән ҡулъяҙма ҡомартҡынан, 1859 йылғы рәүиз ҡағыҙҙарынан сығып хәҙерге Ырымбур өлкәһе Әсәкәй районы Мөъмин (Көсәк) ауылында йәшәүсе Шағәле Шаһман нәҫеле вәкилдәре менән Смаҡ ауылында йәшәүсе Шаһмановтар бер-береһенә яҡын ҡан-ҡәрҙәш булып сыға. Быны күҙ алдына асығыраҡ баҫтырыу өсөн тәүҙә юғарыла телгә алынған шәжәрәләге Бураш нәҫеленең бер тармағы быуындарын килтерәйек: *Шағәле Шаһман кенәз - Бураш - Бикәй - Килмәт - Дусмөхәмәт - Ҡолшариф - Мостафа - Шәмсетдин - Мифтахетдин* (3, 130-132).

Шағәле Шаһмандың 5-се быуыны йәғни тыуаты Ҡолшарифтең шәжәрәнән күренеүенсә, **Мостафа** тигән улынан тыш тағы ла **Мөъмин**, **Мөхсин** исемле улдары булған. Мөъмин ауылы тап бына уларҙың береһенең исемен йөрөтә лә инде. Ә Смаҡ ауылының 1859 йылғы рәүиз ҡағыҙҙарынан Ҡолшарифтең **Тойғон**, **Таймаҫ** исемле улдары барлығын белә алабыҙ. Тойғондоң улы - **Ниғмәтулла**, 1859 йылда 70 йәшендә вафат булған. Ике ҡатыны барлығы теркәлгән. Беренсе ҡатынынан улы -

**Фәйзулла** (53 йәштә), икенсе улы **Ғәйнулла** (50 йәштә), өсөнсө улы **Фәтҡулла**, унан **Әхмәтйән** исемле улан ҡалған. Ғәйнулланың ҡатыны - Зәлифә Көсөкбаева. 1859 йылғы халыҡ һанын иҫәпкә алыу ҡағыҙҙарында *Ғәйнулла Ҡолшәриф улы Ниғмәтуллиндың* ике улы теркәлгән: **Заһиҙулла** (15 йәш), **Фазулла** (1 йәш тә ике айлыҡ, йәғни 1858 йылғы.). Ә хәҙер информаторҙарҙан ошо Фазулланан башлап яҙып алынған быуындар теҙмәһен үрҙәгеләренә ҡушып ҡарайыҡ: *Таман бей - Балун бей - Тамъян бей - Уразай бей - Мотай бей - Ҡырай бей - Шәғәле Шаһман кенәз - Бураш - Бикәй - Килмәт - Дусмөхәмәт - Ҡолшәриф - Тойғон - Ниғмәтулла - Ғәйнулла - Фазулла - Сафиулла - Ҡорбанғәле - Рәфҡәт - Ринат - Илгиз.* Бөтәһе 21 быуын. Шәғәле Шаһман нәҫеленең төрлө тармаҡтарын ошондай тәртиптә яҙғанда, ысынлап та, 21-22 быуын сыға. Тимәк, әлеге нәҫел тармағында, беҙҙеңсә, бөтә быуындар ҙа дөрөҫ һәм теүәл яҙылған. Бөгөн был ара Шаһманов һәм Фәйзуллин фамилияларын йөрөтә. *(Был әлегә фараз ғына, шуға күрә уны, документтарға таянып, ныҡлы раҫлау кәрәк.)*

Фазулла Ғәйнулла улы Ниғмәтуллин (*Шаһманов*) XIX быуат аҙағында Стәрлетамаҡ өйәҙенең Тамъян олоҫонда старшина вазифаһын атҡарған. Бөгөнгө оло быуын кешеләре үҙҙәренән алдағыололарҙан ишетеүҙәренсә, ул бик бай һәм хәлле йәшәгән. Күпләп мал аҫыраған. Һыйыр, йылҡыларын көтөүселәр яланға алып сыҡҡанда, көтөүҙең башы ауылдың бер осонда, аҙағы икенсе осонда була торғайны, тип хәтерләрҙәр ине, тиҙәр.

Тағы ла бер нәмәгә иғтибар итәһе килә: ата-бабаларыбыҙ үҙҙәренең нәҫелен бик яҡшы белгән, шәжәрәләрҙе ентекле алып барырға тырышҡан. Октябрь революцияһынан һуң, дөрөҫөрәге, үткән быуат башында ырыу аҡһаҡалдары, үҙ-ара кәңәшләшеп, Смаҡ ауылындағы ошо Бураштан, оло Моҡастағы Буралынан килеүсе бер нисә нәҫел араларын бөйөк бабалары Шәғәле Шаһман кенәз иҫтәлеген мәңгеләштереү хөрмәтенә үҙҙәренең ул, ейән һәм бүләләренең фамилияларын Шаһманов тип



яҙҙырған. Тик, үкенескә ҡаршы, уларҙың хәҙерге вариҫтары был турала бер нәмә лә белмәй тиерлек. Ҡыҙғаныс хәл, әлбиттә.

Һуңғы 30-40 йыл эсендә Шәғәле Шаһман нәҫеленән Смаҡҡа Яҡтыҡүлдән Сәйетгәрәй Шаһманов, Әхтәм Хисаметдинов; Иҙел Мусаһынан Тимербай Шәйәхмәтов; Оло Моҡастан Сәғитйән Ғәйнуллин, Радиҡ Шаһманов, Сөләймән Һатыбалдиндар күсеп сыҡты, һәм был ауылда уларҙың балалары йорт һалып, башлы-күҙле булып ныҒынды.

## ТҮКӘН

Түкән ауылына Шәғәле Шаһмандың 6-сы быуын вариҫы, волость старшинаһы Түкән Балтасов нигеҙ һала. Был ауылды ҡайһы берҙә Эткол тип тә йөрөткәндәр. Күрәһең, был исем ауылға әлегерәк бирелгәндер.

Түкән Балтасов - XVIII быуаттағы башҡорт йәмғиәтендәге күренекле шәхестәр ҡатарынан. Ул 1751-1763 йылдарҙа заводсыларға, капитан И. Л. Тимашевҡа ер һатыуҙа ҡатнаша. Быны тарих фәндәре кандидаты Айтуған Ирек улы Аҡмановтың түбәндәге һүҙҙәре һәм уның тарафынан миҫалға килтерелеүсе тарихи документ асыҡ раҫлай: «...на Ногайской дороге земли покупали преимущественно офицеры, чиновники. Купчие грамоты не указывали размеры проданной земельной площади в десятинах, поэтому невозможно определить, сколько земли оказалось у уфимских дворян. *Например,* купчая грамота башкир Тамъянской волости Тюкана Балтасова «с товарыщи» капитану И. Л. Тимашеву от 5 ноября 1751 г. сообщает, что они продали «...ему, Тимашеву, жене его, детям и наследникам в вечное владение без выкупу и бесповоротно... свою вотчинную землю... по той речке Ялышанке от устья и по вершин по обе стороны... в степь на 10 верст, где и грань поставить, а от той грани вниз и вверх по 5 верст, а от устья вверх по реке Сакмаре на 3, а вниз на 4 версты, где по всем тем местам поставить же грани; с лесом, сенными по-

косами, и всякими имеющимися в той окружности угодьями. А взяли оне, Тюкан с товарыщи, у него, Тимашева, за тое проданную землю с угодьи денег 70 руб». Как видно, размеры проданной земельной площади в десятинах не указываются. Здесь можно менее 7 тысяч десятин. Таким образом, Тимашев покупал каждую десятину на 1 копейку, когда казна в это время продавала дворянам землю на льготных условиях 1 десятину за 1 рубль» (51, 34-35).

Яңыраҡ тарих фәндәре кандидаты Салауат Усман улы Таймаҫов башҡорт азатлыҡ яуҙары етәкселәренең береһе - Ҡараһаҡал тураһында яңы тарихи документтарға бәйле мәҡәлә яҙып баҫтырғайны. Ундағы түбәндәге оҙон өҙөктән Ҡараһаҡал менән Түкән Балтасовтың мөнәсәбәттәренә бәйле ҡыҙыҡлы факт-мәғлүмәттәр табырға, был ике тарихи шәхестең биографияларындағы яңы, быға тиклем билдәһеҙ биттәрҙе асырға мөмкин: «В середине октября 1744 г. из Петербурга вернулся посланник Барака, участвовавший в торжествах по случаю объявления царевича Петра Федоровича наследником престола. Он привез своему повелителю императорскую грамоту, именную золотую саблю и другие подарки. Сопровождавший посланника из Оренбурга в Казахстан башкир Тюкан Болтачев впоследствии рассказывал, что царские подарки вызвали великую радость Барака и зависть других. Несколько представителей знати, в том числе «находившийся к российской стороне прежде сего во всегдашнем непокорении знатной старшина Кабанбай батырь», будто бы заявили о своем желании принять присягу на верность российской императрице. По свидетельству Тюкана, Карасакал пригласил его в свой улус и спросил, каим образом он, бежавший с ним в 1740 году, не только получил прощение, «а сверх того и милостию Е И В награжден и пожалован и в Оренбург ездит?» На что Тюкан ответил, что «ежели Е И В в вине своей повинною чистую совестию принесет, то и он прощение и высочайшую Е И В ми-



лость получить может». После чего Карасакал, Кабанбай, Казбек-бий и другие знатные люди «имели собрание и совет... чтоб и ему, Карасакалу, со всем тем родом, где он родился, то есть найманским, у присяги еще не бывшем... быть в совершенном подданстве Е И В» и выразили готовность действовать против неприятеля России Галдан-Церена. Тюкан сообщил, что отношения Карасакала с Бараком ухудшились после того, как последний согласился с предложением контайши обменять своего сына на Карасакала. Чтобы поймать его, султан обещал ему в жены свою сестру, но Карасакал не поддался на эту уловку и откочевал с Кабанбаем к Казбек-бию. Зимой 1744-1745 гг. они напали на каракалпаков, которые по внушению Барака хотели принять российское подданство. 25 июня 1745 г. сакмарский казак ногаец Кубек докладывал оренбургскому начальству, что «Бараксалтан напред сего Карасакала признавал за прямого зюнгорского владельцев контайши сына Шуну. Чего ради с ним и согласен был и заговорил за него сестру свою в жены. Но ныне де признавает, что он, Карасакал, не Шуна, но самозванец, а что он, Карасакал, владеет найманским родом Средней орды его Баракова владения, оное ему, Бараку, противно. Чего ради приезжающим зюнгорским калмыкам приказывает, чтоб, на него наехав, взяли и увезли к Галдан Чирину, понеже киргисцы за него стоять не будут, ибо они, киргисцы, Галдан Чирина опасны и сестру свою он, Барак, за него, Карасакала, отдать не намерен...». 13 июня 1745 г. Тюкан привез из Средней орды семь писем, в том числе два от Карасакала. Эти документы обнаружены автором настоящей статьи в архиве Оренбургской области. Они написаны арабским шрифтом, тут же приводятся переводы на русский язык. Процитируем с некоторыми сокращениями оба послания Карасакала. Первое письмо: «Всепресветлейшей державнейшей великой государыне контайшинской сын тюря, то есть владелец, учиня присягу с вернос-

тию моею в подданство пришел... понеже Тюкан батырь прихал к нам со всемилостивейшим объявлением, также и от господина генерала с благопристойнейшим обнадеживанием, которого мы за благо приняв, и в подданство всемилостивейшей государыне пришли...».

Второе письмо: «От дальнего расстояния доброрачительным сердцем я, Шуна батыр, высокопревосходному господину генералу Ивану Ивановичу Неплюеву желаю всякого блага и поклонения отдаю, да обретающему в Оренбурге господину полковнику поклон. Чрез пребывшего к нам со всемилостивейшем объявлением Тамъянской волости Тюкан батыря Болтачева со всеми знатными киргискайсацкими людьми о здравии вашему уведомились и о всем оной Тюкан Болтачев нас обнадежил и по его Тюканеву обнадеживанию я, Шуна батырь, в подданство Ея императорского величества пришел и Ваше высокопревосходительство причитаю за милостивого приятеля. Всему тому поверил. Ежели со страны всемилостивейшей государыни на меня еще гнев будет, то злосчастливым себя признавать буду... На подлинном татарском письме ево, Шуны батыря, тамга приложена такова».

Неплюев ответил так: «Карасакалу, называющемуся Шунюю. Почтенный батырь. Два ваших письма мною здесь получены, ис которых ваши намерение и прозьбу я видел и о вашем состоянии от поддатия того слышал... ежели вы желаете верноподанного Ея императорского величества себе получить высочайшее Ея императорского величества милости удостоиться, то должны сами в Орской крепости побывать и тут присягу формально учинить...».

Однако 3 июля в Оренбург прибыл посланник Абулмамбета Ходжамберды-батыр и сообщил, что в действительности Карасакал написал совсем другое письмо, где называя себя владельцем джунгар, казахов и акзеловского народа (жители Ферганской долины), требовал, чтоб «ево и в российском государстве признавали за почтенного человека, а ежели де ево тако признавать не будут, то он поступать будет инако». Это письмо было изъято у Тюкана людьми Абулмамбета, которые заявили ему: «Ты де и сам был наш пленной, так, как, протчие воры башкирцы и мы де тебя от того высвобождая и всю твою семью тебе отдали, а ты ныне нам ищешь гибели и раззорения». По словам Ходжамберды, Тюкана хотели убить, но затем заставили переделать послание. Так ли это было на самом деле, установить на основе архивных материалов нам не удалось. В августе 1745 г. в Оренбурге стало известно, что Карасакал намерен, в случае от Галдан-Церена, уйти к своему союзнику, правителю Андижана и Намангана Абдулкаримбеку» (52, 49-51).

Түкәнден Юлай тигән улы булған. Тарихи документтарҙан күренеүенсә, ул 1772-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында ихтилалсылар яғында ҡатнашҡан: «Вблизи Стерлитамакской пристани уже разъезжали пугачевские агитаторы. 24 сентября 1773 года Красноуфимская воеводская канцелярия получила известие из Уфимской провинциальной канцелярии о том, что «по Ногайской дороге ездят посланныя от известной злодейской изменнической толпы старшины Кинзи Арсланова сын Слявчин да сотника Тюкана Балтасова сын Юлай и писарь, а как зовут и чей сын, не знают, да брат Кинзин Кутлугильда Абдрахманов и протчия той изменнической толпы согласники кинзиной команды башкирцы с объявительными от изменнической толпы письмами соглашая народ в согласии оной, которая ездя около пристани недавно проехали в команду старшины Кедряся Муллакаева и в протчие лежащие по Деме реке волости. И хотя для поиску сих шпионов он, господин Богданов, от себя нарочного послал, однако ж в Уфимской провинциальной канцлярии рассуждено на тое Ногайцкую дорогу для поиску и поимки оных разглашающих от злодейской толпы шпионов отправить...».

XIX быуат аҙағында Түкәндә 16 өй, ә тағы 64 йылдан 32 өй күренә. Түкән халҡы игенселек менән бик мауыҡмаған, күберәген ярым малсылыҡ менән шөғөлләнгән.

Түкән ауылының Шәғәле Шаһман нәҫелен, башлыса, уның Тоҡомбәт атлы ейәненән таралған Ҡаҙаҡбаев, Ишмөхәмәтов, Сәйетбатталов, Ҡолмөхәмәтов фамилияларын йөрөтөүселәр тәшкил итә.

## ТАМЪЯН-ТАЙМАҪ

Был ауыл хәҙерге Миәкә районына ҡарай. 1762 йылдың йәйендә Ырымбур губернаһы Верхнеурал өйәҙенән бер төркөм тамъяндар, дөрөҫөрәге, Шәғәле Шаһман нәҫеленең бер төркөм вәкилдәре, Бәләбәй өйәҙенең Илекәй-Мең олоҫо аҫабалары менән килешеү ерлегендә уларҙан ҡортомға ер ала. Был ер биләмәләре хәҙерге «Тамъян» кооперативыныҡы менән тура килә. Яңы урында старшина Таймаҫ Ҡотлин тарафынан Тамъян-Таймаҫ ауылына нигеҙ һалына. Күскенселәр тәүҙә тирмәләрен Оло күл менән Ҡорған кисеүе буйына ҡуйып, шунда бер нисә йыл йәшәй. Ауыл зыяратының урынлашыу тәртибе быны асыҡ иҫбатлай. Яңы ерҙә тамъяндар ярым күсмә тормош менән йәшәй һәм, башлыса, малсылыҡ менән шөғөлләнә.

Бер аҙ һуңыраҡ тамъяндарға Минзәлә өйәҙенең Тәкермән ауылынан күсеп килгән бер төркөм типтәрҙәр ҡушыла. Ауылдың нисек үҫеүен түбәндәге һандар асыҡ күрһәтә: 1795 йылда Тамъян-Таймаҫта 150 кеше йәшәгән, ә 1859 йылда - 522, 1917 йылда - 827. Бөгөн был ауылда 638 тирәһе кеше йәшәй.

Тамъян-таймаҫтар ҙа башҡорт халҡының азатлыҡ яуҙарынан ситтә ҡалмай. Ауылға нигеҙ һалыусы старшина Таймаҫ Ҡотлин 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнаша. Яу баҫтырылғас, ул 1774 йылдың көҙөндә ҡулға алынып, Ҡаҙанға оҙатыла. Шул уҡ йылдың 10 декабрендә Таймаҫ Ҡотлин 13 башҡорт старшиналары менән бер рәттән һөргөнгә ебәрелә.



## ЕРЕКЛЕКҮЛ

Миәкә районындағы был ауыл Тамъян-Таймаҫтан бүленеп сыға. Унда ла, башлыса, Шәғәле Шаһман нәҫеле вәкилдәре йәшәй.

Ауыл хәҙерге көндә «Тамъян» кооперативына ҡарай.

## ҠОЛТАЙ-ҠАРАН

Был ауыл шулай уҡ Миәкә районына ҡарай һәм Тамъян-Таймаҫ ауылынан бүленеп сыға.

Ауыл хәҙерге көндә «Тамъян» кооперативына ҡарай.

Был ауылда журналист һәм балалар яҙыусыһы Фәнис Фәтих улы Янышев тыуып үҫкән.

## МӨЪМИН

Был ауыл хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Әсекәй районына инә. Ауылға нигеҙ һалыусы - Таймаҫ Ҡотлиндың улы Көсөк. Шуға күрә ауылдың Көсөк тигән рәсми булмаған исеме лә бар. Тамъян ауылы тип тә йөрөтәләр. 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы баҫтырылғас, батша хөкүмәте тарафынан әҙәрлекләнеүҙәргә юл ҡуймаҫ өсөн **Көсөк Таймаҫов** һәм тағы ла 13 ғаилә Ырымбур губернаһы Бызаулыҡ өйәҙенә, Кинәле йылғаһы буйына, күсеп ултыра.

Ауылдың Иҫке Мөъмин тип үҙгәртелеүенең үҙенә күрә тарихы бар. Шәғәле Шаһман нәҫеле вәкилдәре, төрлө яҡтарҙа йәшәһәләр ҙә, үҙ-ара бәйләнеш тотҡан, туғанлыҡ ептәрен өҙмәгән. 1809 йылда яҙылған «Стәрлетамаҡ өйәҙенең 9-сы кантоны Тамъян олоҫо башҡорттары менән Боғорослан өйәҙе Мөъмин ауылы башҡорто Вәлит Мөъмин улының ҡан-ҡәрҙәшлеге тураһында Дәүләтхужаның улы Әлимғужа тарафынан яҙылған һәм имам Ғәбделҡадир әл Мәжити тарафынан күсереп яҙылған хат» тигән шәжәрә быны асыҡ иҫбатлай. Яңы ауыл барлыҡҡа килгәндә Шәғәле Шаһман нәҫеленең был тармағы булмағандыр, улар бында, ҡан-ҡәрҙәштәре янына, Ырымбур өйәҙенең 9-сы кантоны Стәрлетамаҡ өйәҙе Тамъян олоҫонан һуңыраҡ күсеп килгәндәрҙер, тип фа-

разларға мөмкин. Сөнки Әсфәндиәр Янышевта һаҡланған шәжәрәлә уларҙың исем-аттарын осрата алманыҡ. Таймаҫ Ҡотлиндың улы Көсөк тарафынан нигеҙләнгән ауылға үҙ исемен биргән Мөъминдең нәҫел тармағы түбәндәгесә: *Шәғәле Шаһман - Бураш - Бикәй - Килмәт - Дусмөхәмәт - Ҡолшәриф - Мөъмин - уның улдары: Ғабдрахман, Ҡорбанғәли, Хисаметдин, Вәлит - Вәлиттең улдары: Исхаҡ, Ғәбделмәжит һәм Ғәбделваһап* (3, 130-132).



## ФАЙҘАЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ ИСЕМЛЕГЕ

1. Бейешев Ә. Ғ. Эйек бөрйәндәре һәм Түйәмбәт менән Ҡотломбәт. - Өфө: «Башҡортостан энциклопедияһы» ғилми нәшриәте, 2003. - 88 б.
2. Башкирские шежере / Сост. Р. Г. Кузеев. - Уфа: Башкнигоиздат, 1960. - 304 с.
3. Башкирские родословные / Сост. Р. М. Булгаков, М. Х. Надергулов. - Уфа: «Китап», 2002. - 480 с.
4. Асфандияров А. З. Башкирские источники XVI-XIX вв. о добровольном присоединении края к Русскому государству. //Историческое значение добровольного присоединения Башкирии к Русскому государству. Уфа, 1982, 134 с.
5. Сәғитов М. М. Ғүмерлеккә ҡалған яра. - Өфө: «Китап», 1993. - 127 б.
6. Шәкүров Р. З. Сыңрау торналар иле. - Өфө: «Китап», 1996. - 416 б.
7. Башҡорт халыҡ ижады: Риүәйәттәр, легендалар. 2-се том. / Төҙ. Ф. А. Нәҙершина; Яуаплы мөхәр-р К. Мәргән менән Ә. Сөләймәнов. - Өфө: «Китап», 1997. - 440 б.
8. Шағәле Шаҡманға һыҡтау. // Ватандаш. - 1996. - 1-се һан - 164 б.
9. Хөсәйенов Ғ. Б. Башҡорт халҡының рухи донъяһы. - Өфө: «Китап», 2003. - 480 б.
10. Хөсәйенов Ғ. Б. Иҙеүкәй әмир. // Ватандаш. - 2006. - 6-сы һан. - 42-63 б-р.
11. Хөсәйенов Ғ. Б. Илсе бейҙәр. // Ағиҙел. - 2006. - 5-се һан. - 131-137 б-р.
12. Хөсәйенов Ғ. Б. «Аҡай яуы» тарихи хикәйәте тураһында. // Ватандаш. - 2004, 12-се һан. - 69-73 б-р.
13. Солтанов Й. Ә. Ауылым. Ырыуым. Шәжәрәм. // Ағиҙел. - 2004. - 11-се һан. - 138-163 б-р.
14. Бикбаев Р. Т. Уҙған йылдың һуңғы айында. // Башҡортостан. - 2003. - 28-се һан.
15. Мусина Р. Байрамға әҙерлек баш ҡала менән генә сикләнмәһен ине йәки данлы Шәғәле Шаһман бей ерләнгән ауыл ниндәй хәлдә? // Йәшлек. - 2006. - 14-се һан.
16. Шәрипов С. Н. «Аҡ шоңҡарҙай ир инен...» // Ағиҙел. - 2006. 5-се һан. - 138-152 б-р.
17. Зәйнетдинов Ғ. Ф. Йүрүҙән һәм Әй буйҙары - батырҙар төйәге. // Башҡортостан. - 1996. 151-се һан.
18. Мәрйенголова С. Тарихи дөрөҫлөккә нигеҙләнәйек.

// Башҡортостан. - 2002. 217-се һан.
19. Вахитов Р. Иләк йондоҙ ни әйтер. // Ағиҙел. - 2000 й. 6-сы һан — 110—122-се биттәр.
20. Асфандияров А. З. История сел и деревень Башкортстана. Книга девятая. - Уфа: «Китап», 2001 г. - 298 б.
21. Хәмиҙуллина М. Ғ. Баязит Бикбай ижады. Өфө: 1987 й. 192 б.
22. Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы. Өфө: «Китап», 1994 й. - 350 б.
23. Янғужин Р. З. Башҡорт ҡәбиләләре тарихынан. Өфө: «Китап», 1995 й. - 94 б.
24. Зарипов Ә. Б. Эй Яйыҡ йорт, Яйыҡ йорт. Өфө: «Китап», 1998 й. - 262 б.
25. Әхмәров Р. Б. Башҡортостан тарихында «Янъ-Ян» легендаһы. // Башҡортостан уҡытыусыһы. - 1985 й. 3-сө һан.
26. Әхмәткужина Г. Ф. Ил ағаларының аҡ батшаға сәфәре. // Башҡортостан ҡыҙы. - 2006 й. 6-сы һан.
27. Башҡорт халыҡ ижады: Тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр. 5-се том. / Төҙ. Н. Зарипов; яуаплы мөхәррире З. Уразксин. - Өфө: «Китап», 2000 й. - 392 б.
28. Шафиҡов Ғ. Ғ. Рәсәйгә нигә ҡушылғанбыҙ? // Киске Өфө. 2006 й. - 16-сы һан.
29. Ҡорбанғәлиев Р. Ҡәнзәфәр бей тоҡомо. // Башҡортостан. 2005 й. - 189-сы һан.
30. Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. Өсөнсө китап. / Төҙ. Н. Зарипов; Яуаплы мөхәррире Ғ. Б. Хөсәйенов. - Өфө: 1982 й. 342 б.
31. Усманов А. Н. Добровольное присоединение Башкирии к Русскому государству. Уфа: 1982 г. - 335 с.
32. Әсфәндиәров Ә. З. Олатайҙарҙың бар тарихы. - Өфө: «Китап», 1996 й. - 224 б.
33. Мозафарова М. «Һинең яҙмыш - күптән минең яҙмыш...». // Башҡортостан. 2006 й. 158-се һан.
34. Сәйәхова Э. Шығай ауылының барлыҡҡа килеү тарихы. // Урал. (*Белорет районы-ҡалаһы гәзите*) - 2006 й. 48-се һан.
35. Асфандияров А. З. Башкирские тарханы. - Уфа: «Китап», 2006 г. - 159 с.
36. Королевский А. Шәжәрә ағасының бер олоно. // Тамаша. 2002 й. 1-се һан.
37. Аҡманов И. Ғ. XVII быуатта - XVIII быуат башында башҡорт күтәрелештәре. - Өфө: «Китап», 1998 й. - 256 б.



38. Ханнанова З. М. Рух - иң ҙур ҡиммәт. // Шоңҡар. 2002 й. 2-се һан.
39. Мортазин М. Л. Әҫәрҙәр. - Өфө: «Китап», 1994 й. - 320 б.
40. Әмиров С. Һ. Йомағужам - минең ғорурлығым. - Мәләүез, 2004 й. - 114 б.
41. Хөсәйенов Ғ. Б. Һыуын-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһенән. // Башкирские шежере: Филологические исследования и публикации. Уфа, 1985 г.
42. «Любезные вы мои...» (Составитель - А. З. Асфандияров) - Уфа: «Китап», 1992 г. - 240 с.
43. Акманов И. Г. Вожди восстаний 17-18 вв. из башкир Казанской дороги. // Ватандаш. 2006 й. 5-се һан.
44. Аҡай яуы. Тарихи хикәйәт. // Ватандаш. 2004 й. 12-се һан.
45. Азаматов Ф. Х., Аҙнағолов Ю. Ғ. Һаумыһығыҙ, ауылдаштарым! - Өфө, 2000 й. - 224 б.
46. Аҙнабаева М. Ф. Изгеләребеҙҙе белеп йәшәйек. // Юшатыр (*Күмертау ҡалаһы һәм Көйөргәҙе районы гәзите*) 2006 й. 31-се һан.
47. Ханова З. Ҡ. Туймазы гимназияһында - Шәғәле Шаһман нәҫеле. // Йәшлек. 2000 й. 43-сө һан.
48. Камалов А. Ә., Камалова Ф. Ү. Атайсал. - Өфө: «Китап», 2001 й. - 543 б.
49. Асфандияров А. З. История башкирских сел и деревень. Книга первая. - Уфа: «Китап», 1997 г. - 224 с.
50. Исянгулов Ш. Н. Старый Четырман. - Уфа: 2001 г. - 200 с.
51. Акманов А. И. Земельная политика царского правительства в Башкирии (вторая половина XVI начало XX вв.) - Уфа: «Китап», 2000 г. - 208 с.
52. Таймасов С. У. Карасакал в Казахстане. // Ватандаш. 2006 й. 1-се һан.

## II бүлек. ШӘҒӘЛЕ ШАҺМАН НӘҪЕЛЕ ИР-АЗАМАТТАРЫ

### КӨНГӘККӘ СЫҒЫУ

#### Тарихи-документаль очерк

Аяғы һыҙлап: йоҡо алмағас, таңға тиклем яҙышып ултырҙы Усман һуҡыр шәм яҡтыһында. Ырымбур баҙарынан һатып алып ҡайтҡан ҡара һауыты менән ҡаурыйын ҡәҙерләп кенә өҫтәлдән ситкә, тәҙрә төбөнә, алып ҡуйҙы ла мөйөштә торған һандыҡ янына килде. Унын ҡапҡасын иҫләп кенә асты. Билдәле бер урынға, китап, ҡулъяҙмалар араһына, йәшереп тигәндәй һалып ҡуйған бер ҡағыҙҙы ҡулына алды. Боронғо бабаһы - Тамъян ырыуы бейе Шәғәле Шаһмандың Урыҫ дәүләте батшаһы Иван Грозный йәғни аҡ батша биргән «Жалованная грамота» ул. Икенсе төрлө уны башҡорттар ярлыҡаш тип тә йөрөткән. Был үтә ҡиммәтле лә, ҡәҙерле лә ҡулъяҙма ҡомартҡыны Усман Мөхәмәтғариф улы күрше Мәмбәтҡол ауылындағы туғандарынын береһенән, Ғабиҙулла Мәмбәтҡоловтан, алып ҡайтҡайны. XVI быуат уртаһында яҙылған әлеге документ нисәмә йылдар, дәүер-быуаттар аша бөгөнгәсә һаҡланып килеп еткән бит, бер уйлаһаң. Заманында кемдәр ҡулы аша ғына үтмәгән дә, ҡайҙарҙа ғына булмаған ул «Жлованная грамота». Ни мөғжизә менәндер Усмандың ҡулына килеп эләкте хәҙер бына. Уҙаман тағы ла бер ҡағыҙҙы алып, уны оҙаҡ ҡына һәм ҡат-ҡат уҡып сыҡты. Быныһы - үҙе яңыртып төҙөгән Шәғәле Шаһман нәҫеленең шәжәрәһе. Үҙенең нәҫел ебен тағы бер тапҡыр күҙ уңынан кисерҙе: *Таман бей - Балун бей - Тамъян бей - Уразай бей - Мотай бей - Ҡырай бей - Шәғәле Шаһман - Бураллы - Илсекәй - Теләүкәй - Әтекәй - Ҡунаҡҡужа - Хәлит - Әбүбәкер - Мөхәмәтғариф - Усман.* Ул Шәғәле Шаһмандың 9-сы быуын варисы икән.



Усман шәжәрәне һандыҡтың билдәле бер урынына һалып ҡуйҙы ла өҫтә генә ятҡан китап араһынан ҡулына бер фоторәсемде алды. Сәсән һәм драматург Мөхәммәтша Буранғолов менән Мәләүездә иҫтәлеккә фотоға төшкәйнеләр. Уға ла хәҙер байтаҡ ғүмер үтеп киткән икән. Мөхәммәтшаны Усман 1917-1922 йылдарҙағы Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенән бирле белә. Икеһе лә уға үҙ өлөшөн индереште.

Аҙаҡ сәсән Усмандың тыуған яҡтарына йәшәргә килер ҙә элекке дуҫлыҡтары яңы ерҙә, яңы шарттарҙа яңыса дауам итер тип кем уйлаған инде.

1924 йылдың көҙөндә Усман Әбүбәкеров Мәләүез баҙарына барғайны. Шунда көтмәгәндә-уйламағанда Мөхәммәтшаны осратты. Улар ҡуш ҡуллап күрешеп, ҡосаҡлашып, иҫәнлек-һаулыҡ һорашты:

- Әссаләмәғәләйкүм!
- Вәғәләйкүмәссәләм!
- Һин бында ниндәй яҙмыш елдәре менән?
- Сәй артында яйлап һөйләшербеҙ ул турала. Әйҙә Түләккә - беҙгә, - тине сәсән.
- Бәй, һин Түләктә йәшәйһеңме ни?
- Эйе, - тип баш ҡаҡты теғеһе.

Усмандың арбаһына ярышлап ултырып, ике дуҫ Түләк ауылына йүнәлде.

* * *

1921 йылғы аслыҡтың дәһшәте Туҡ буйындағы Үргә Ильяс ауылына ла бихисап ҡаза килтерҙе: кешеләр генә түгел, мал-тыуар ҙа ҡырылды. Ауылдағы туҡһан йортҡа ни бары ун ике һыйыр, һигеҙ ат ҡына тороп ҡалды. Бөлгөнлөктән сығыу юлын күп эҙләне Мөхәммәтша. Баш вата торғас, Үргә Ильястан ун һигеҙ саҡырымдағы Бүләк тигән утарҙа күмәк хужалыҡҡа тартым артель ойоштороп ебәрҙе. Оҙаҡламай ун ике ғаилә ошонда күсеп килеп ултырҙы ла яңыса тормош башланы.

Йәйге көндәрҙең береһендә күрше Абдулла ауылы уҡытыусыһы, Мөхәммәтшаның баҗаһы Ғәббәс Дәүләтшин Өфөнән ялға килгән ҡәҙерле ҡунаҡтарҙы, ирлеҡатынлы Ғөбәй менән Һәҙиә Дәүләтшиндарҙы алып килде. Хужалар, был ике яҙыусыны яҡты сырай, һыйхөрмәт менән ҡаршы алып, ҡунаҡ итте.

Йәмле иртәләрҙең береһендә Ғөбәй былай тип һүҙ башланы:

- Мөхәммәтша ағай, йәшәгән урынығыҙ ожмах, шулай ҙа һеҙгә Башҡортостанға күсергә кәрәктер, сөнки бында әҫәрҙәрегеҙҙе донъяға сығарыу өсөн берниндәй ҙә шарттар юҡ бит!

- Был хаҡта уйланманым түгел, күп уйландым, тик ишле ғаилә менән ҡайҙа барып морон төртөрмөн икән? Мәҙрәсәлә бергә уҡыған дуҫым Нурулла Вахитов әллә ҡасандан бирле үҙенең тыуған ауылы Түләккә саҡыра ла ул, - тип яуапланы хужа. Өфөгә лә ат менән ни бары ике-өс көнлөк юл икән, унан һуң Нурулланың Мөхәммәтша дуҫының бер улына килен булырға тейешле ҡыҙы Мәстүрә лә үҫеп, буй еткергән.

Сәсән бер нисә йыл уйланды-уйланды ла Башҡортостанға күсергә тигән ҡәтғи ҡарарға килде.

1924 йылдың йәйендә Бурановтар һәм улар менән бергә тағы ла биш хужалыҡ Туҡ буйҙарының икһеҙ-сикһеҙ далаларын ҡалдырып, Көньяҡ Уралдың гүзәл тәбиғәт ҡосағына - Ағиҙел буйындағы Түләк ауылына килеп урынлашты. Уларға яңы ауыл, яңы ерҙәр бик тә оҡшаны, сөнки урман да яҡын, ерҙәр ҙә иркен, ә мул һыулы Ағиҙел - эргәлә генә.

Кем уйлаған инде Мөхәммәтшаға ижадының ин емешле йылдарын хозур тәбиғәтле Ағиҙел буйҙарында, Көнгәк тауы итәген төйәк иткән Түләк һәм Мәләүез ауылдарында йәшәп үткәрергә, «Башҡорт туйы», «Ялан Йәркәй», «Ҡара юрға», «Шәүрәкәй», «Мөфти ҡыҙы Фатима» тигән сәхнә әҫәрҙәрен ижад итергә яҙыр тип.

Бурановтар яңы урында тиҙ арала үҙ кеше булып китте. Мөхәммәтша күсеп килеү менән Түләктә мәктәп



булдырыуҙы хәстәрлегән күрҙе, уны астырғас, балаларҙы үҙе уҡыта башланы, ололарҙы ла онотманы, улар өсөн ликбез ойошторҙо.

Мәләүез олоҫонда Мөхәммәтша күптәрҙең хәтеренә яғымлы, алсаҡ мөләйем, нурлы күҙле бер зат булараҡ инеп урынлашты. Хатта уның атлап йөрөшө үк күптәрҙең иғтибарын үҙенә йәлеп итә ине.

Ҡатыны Зәйнәб тә яңы ерҙә, яңы ауылда үҙен уңған хужабикә итеп танытты, етмәһә, килеп тороп бешереңеүгә-төшөрөнөүгә оҫта: ул әҙерләгән аш-һыуҙары телеңде йоторлоҡ, ул ҡабарып бешкән ап-аҡ икмәктәрененең хуш еҫлелеге, тәмлелеге. Уңды Мөхәммәтша хәләл ефетенән, икеләтә-өсләтә уңды! Ярты ауыл һәр иртә һайын Бурановтарҙың сепараторына һөт айыртырға йөрөй, ошоноң өсөн улар ауылдаштарынан ярты ҡалаҡ та гәрнис алмай.

* * *

Ике дуҫ донъя, ил, йорт хәлдәре хаҡында ашыҡмай ғына әңгәмәләшә-әңгәмәләшә Ағиҙел буйына килеп еткәндәрен һиҙмәй ҙә ҡалды. Ана арьяҡтағы Түләктен өйҙәре лә күҙгә салына. Улар ярты саҡырым түбәндәрәк урынлашҡан кисеүҙән аша сыҡты ла йылға яры буйлап тигәндәй көньяҡҡа - ауыл яғына ыңғайланы.

Йорт алдына үтеп, хужабикә, бала-саға менән иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, атты туғарып, малайҙарҙың береһенә уны һуғарырға ҡушһылар ҙа өйгә инделәр. Тиҙ арала түр яҡтағы өҫтәлгә йыуан ҡорһаҡлы еҙ самауыр килеп ҡунаҡланы, төрлө һый-нигмәттәр ҡуйылды... Был көндө бик оҙаҡ һәп һуҡты Мөхәммәтша менән Усман. Бигерәк тә бер-ике йыл элек кенә һүрелеп ҡалған Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте, унда ҡатнашҡан арҡаҙаштары, Зәки Вәлиди шәхесе, башҡорт халҡының бөгөнгө хәле, киләсәктә уны ни көтөрө хаҡында оҙаҡ һүҙ алып барҙы, төрлө фараздар ҡорҙо улар. Ваҡыт-ваҡыт оҙайлы иҫтәлек-хәтирәләргә лә төшөп киткеләнеләр.

Усман һуң ғына атын егеп, Йомағужаға ҡайтырға сыҡты. Мөхәммәтша уны:

- Иҫәнлектә күрешергә яҙһын! - тип ҡапҡа тышына сығып, оҙатып ҡалды.

Аты ашыҡмай ғына бара, уның аҙымдарына яйлашҡандай Усмандың хәтеренән бер-бер артлы ғүмеренең ҡайһы бер ваҡиғалары үтә.

Герман Рәсәйгә һуғыш башлау менән, уны батша армияһына алдылар. Күп тә тормай бер көслә һөжүм ваҡытында аяғы һынды. Госпиталдә оҙаҡ ҡына дауаланғас, артабанғы хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ тип, уны ҡайтарып ебәрҙеләр.

1917 йылдың Февраль-буржуаз демократик революцияһы булғас, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте барлыҡҡа килде. Усман Мөхәмәтғариф улы уға бәйле ваҡиғаларҙан ситтә ятып ҡала алманы, йөрәге, намыҫы ҡушыуы буйынса, бик күп яҡташтары менән бер рәттән, халҡына ирек яулашыусылар сафына баҫты. Бигерәк тә, 1918-1919 йылдарҙа Зәки Вәлиди менән бергәләп Темәстә Башҡорт хөкүмәтенең эшен ойоштороуҙа, яйға һалышыу эштәрендә ең һыҙғанып ҡатнашты. 1919 йылда Башҡорт хөкүмәте Совет Рәсәйе менән ике яҡлы килешеү төҙөп, үҙ дәүләтселеген рәсми таныуыға өлгәшкәс, Усман Мөхәмәтғариф улы тыуған ауылына әйләнеп ҡайтты.

Большевиктар Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтен ауыҙлыҡлауға өлгәшкәс тә, Усман уның етәксеһе Әхмәтзәки Вәлидов менән бәйләнеште өҙмәне. Бер көндө йәғни сит илгә сығып китер алдынан, баштан аяҡ тиерлек ҡоралланған алты һыбайлы эйәртеп, Әхмәтзәки Йомағужа ауылына - Усман Әбүбәкеров йәшәгән йортҡа килеп төштө.

- Усман, әйҙә ситкә сығып китәйек, беҙгә барыбер ҙә көн булмаҫ бында, - тине.

- Тыуған ауылымды, тыуған яғымды ташлап сит тарафтарға китәһем юҡ, ни яҙһа, шуны күрермен, - тип был тәҡдимдән ҡырҡа баш тартты ул.



* * *

Усман менән Мөхәммәтша араһындағы дуҫлыҡ йылдан-йыл нығый ғына барҙы. Һыу үткеһеҙ булып ҡатышып, аралаштылар. Тирә-яҡ ауылдарға ла халыҡ ауыҙтел ижады әҫәрҙәрен яҙып алырға бергә йөрөр булдылар. Мөхәммәтша ул яҡтан бигерәк ҡомарлы ине. Халыҡ ижады тиһәң, йәнен бирергә әҙер. Бер ниндәй ауырлыҡтарға ҡарамайынса, шул эшен дауам иттерҙе. Хатта бер ваҡыт, кеҫә яғы ҡойто булыуға ҡарамаҫтан, танаһын һуйып-һатып, шуның аҡсаһына оҙон юлға сығырға булды. Быға ризалашмаған ҡатыны Зәйнәб ире менән һүҙгә килеште. Аҙаҡ көндә - ҡайҙа барһын инде: ире изге юлда йөрөй бит.

Мәләүезгә бер барғанында Мөхәммәтша Усман дуҫына «Көнгәккә сығыу» байрамын ойоштороп, үткәрешеүҙә ҡатнашырға саҡырҙы. Был йола хаҡында Усман электән дә ишеткәне бар ине. Әле сәсән дуҫына Көнгәккә бәйле әллә күпме легенда, йыр-риүәйәт, ҡобайыр һәм тәүарихтар һөйләне.

* * *

Көнгәк тауы Мәләүездән алыҫ түгел, Ағиҙелдең көнбайыш бөгөлөндә, йылғаның уң яҡ ярында урынлашҡан. Көн битенә ҡарап ятҡанға исемен шулай тигәндәр. Бейеклеге - 500 метр. Уның иҫ киткес күркәм, ғүзәл тәбиғәте һәр кемде лә арбарлыҡ.

Ағиҙел Көнгәккә етер алдынан Урал тауҙары ҡуйынынан сабып килеп сыҡҡан аҫау айғырҙы хәтерләтә. Тап бына күкрәк кереп ултырған баһадирҙай ошо тау янында ул ағышын аҡрынайта төшә, әйтерһең дә, Көнгәк уны тотоп туҡтатып, йүгән кейҙереп, ауыҙлыҡлап алған да, шунан һуң Ағиҙел бөтөнләй йыуашланып ҡалған...

Көнгәк үҙендә бик күп тарих һаҡлаған серле, ымһындырғыс тау ҙа ул.

Мөхәммәтша дуҫы:

- Мин 1920 йылда Стәрлетамаҡта үткәрелгән ҡурайсылар бәйгеһендә остазым Ғәбит Арғынбаевтан «Байыҡ

Айҙар сәсән» тигән ҡобайыр яҙып алғайным. Бына шунда Көнгәккә бәйле бер ваҡиғаны ла әйтеп-көйләп яҙҙырғайны ул минә, - тип ҡулъяҙмалары араһынан береһен эҙләп табып уны Усманға уҡырға бирҙе. Ҡобайырҙа башҡорттарҙың нисек итеп 1812 йылда Наполеонға ҡаршы яуға ҡуҙғалыуы хаҡында түбәндәге юлдар ҙа бар ине:

«Йөҙ йәшәр Байыҡ сәсәндең һүҙен ишеткәс, кантон башлыҡтары ат-хат еткән ергә сабарҙар саптырып, сер алышып, Иҙел терһәге Көнгәккә йыйылырға булып һүҙ ҡуйышҡандар, ти. Һәр ерҙә йәштәр, ат һайлап, нуҡта һуғылмаған аҫауҙарҙы тотоп өйрәткән. Урманда уҡ юнып, аласыҡта ҡыҙатар һаҙаҡ һуғып, тана-турпы һуйып, ит ҡаҡлап, эркет ҡайнатып, ҡорот йәйеп, ҡаймаҡ яҙып, май тасҡып, тире ыҫлап, турһыҡ тегеп, көн-төн ағытмай бейә һауып, ҡымыҙ йыйып, кейем-һалым тайярлап, яуға әҙерләнгәндәр. Байыҡ та, үҙенең атын эйәрләп, ҡулына ҡылысын тоттороп, улы Әхмәтте яуға кейендергән.

Кантон башлыҡтарын - ҡор башы, ҡош семәрен тоттороп, батырҙарын - мең башы, ырыу ағасы семәрен тоттороп, ырыу уҙаманын - йөҙ башы, яу япрағы менән бәрәүҙе алдан сабар итеп, яуға ат менгәндәр. Бөтә ҡартҡоро, бисә-сәсә, әбей-һәбей, ҡыҙ-ҡырҡын, бишектән төшкән, түшләп шыуған, аяҡҡа баҫҡан бала-сағаның бере ҡалмай, оҙатырға килгәндәр.

Әбей-һәбейҙәр, яуға китеүселәрҙең юлы ҡыҫҡа булһын тип, тегәр еп биргәндәр. Бисә-сәсәләр, күкрәктәрегеҙгә уҡ-һөңгө теймәһен тип, ирҙәренең түштәренә тәңкә теккәндәр. Ҡыҙ-ҡырҡындар, сер һаҡлаусы булығыҙ, тип, егеттәргә нағышлы янсыҡтар биргәндәр».

- Ошонда, Көнгәктә, 9 полк тупланған, - тип һүҙен дауам итте Мөхәммәтша, Усман ҡулъяҙманы уға биргәс. - Башҡорт яугирҙәре тап бына Көнгәк тауы итәгендә яуға китергә фатиха ала. Ҡаһым түрә етәкселегендәге ир-егеттәребеҙ яуҙа һынатмай, изге тау фатихаһына тап төшөрмәй.





«Бөйөк Шәғәле Шаһман». Рәссам Ринат Атауллин.




Башҡорт шәжәрәләре. Башҡортостан китап нәшриәте, Өфө – 1960 й.




Башҡорт шәжәрәләре. «КИТАП», Өфө – 2002 й.



Усман Әбүбәкеров ғаиләһе менән. 1927 й.



Ноғман Әбүбәкеров (өҫтәге фотоһүрәттә әсәһенең ҡулында)

# ШӘҒӘЛЕ ШАҺМАН ТОҠОМДАРЫ ШӘЖӘРӘҺЕ

## Усман Әбүбәкеров төҙөнө. 1929 йыл.





Профессор Әнүәр Закир улы Әсфәндиәров



Академик Ғайса Батырғәрәй улы Хөсәйенов



Шәғәле Шаһман нәҫеленең иң йәш вәрестары Айтуған һәм Айсылыу Шаһмановтар әсәләре Зөләйха менән Шәжәрә байрамында. 2007 йыл.

Башҡорт яугирҙәре французДарҙы еңеп ҡайтҡас, барса халыҡ янынан Көнгәккә йыйылып, Наполеонды еңеүҙе тантаналы байрам итә, һуғышта һәләк булып ҡалған, иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡан батырҙар алдында баш эйә.

Шул ваҡиғаларҙан һуң был яҡтарҙа йәшәгән башҡорттар араһында Көнгәккә сығыу йолаһы барлыҡҡа килгән. Ул дәүерҙән бирле йөкмәткеһе лә ныҡ ҡына үҙгәргән. Инде хәҙер Ағиҙел, Нөгөш, Ашҡаҙар, Һуҡайлы, Эйек, Наҡаҫ, Мәләүез, Керәүле, Көйөргәҙе, Юшатыр яҡтарынан килгән йәш-елкенсәк төрлө бәйге, ярыштарҙа көс һынашып, оҫталығын күрһәтә. Еткән ҡыҙҙар менән егеттәргә танышыу, һөйөшөү, аҙаҡ башлы-күҙле булыу өсөн дә бик ҡулай был байрам. Йыл да май аҙаҡтарында, бөтә тирә-яҡ йәшеллеккә, төрлө-төрлө төҫтәге һәм хуш еҫле сәскәләргә күмелгән бер мәлдә үткәрелә ул.

* * *

Быйыл Усман да Көнгәккә сығыу йолаһынан ситтә ҡалманы. Йомағужа, Илкәнәй, Ялсыҡай, Таймаҫ кеүек ауылдарҙың йәштәрен Көнгәк тауына сығыу йолаһына йәлеп итеште.

Иртәгәһенә байрам тигән көндө йәнә лә атын егеп Түләккә - дуҫы янына китте.

Улар, иртәнге сәйҙе эскәс, Көнгәккә барырға сыҡты. Тауға яйлап күтәрелә барған һайын тирә-яҡта иҫ киткес матурлыҡ асыла бара. Көнгәктең иң бейек түбәһенә яҡынлашҡан һайын Бағра менән Нәтәҙе тауҙары, Ағиҙел, Нөгөш йылғалары бығаса булмағанса бер гүзәллек менән балҡый.

- Беҙҙең ата-бабаларҙың, тамъяндарҙың, әлмисаҡтан бирле килгән ерҙәре, - тип ҡуйҙы Усман.

- Әй, ҡара әле, дуҫ, һин үҙ ырыуыңдың, нәҫелеңдең тарихы менән ҡыҙыҡһынғаның бармы? - тип һораны унан Мөхәммәтша.

- Бар, күп нәмәләр беләм.

– Һин, Усман, ана шул белгәндәреңде киләсәк быуындар өсөн яҙып та ҡалдырһаң ине. Минән һиңә бына шундай кәңәш.

Улар ҡараштарын Көнгәккә ағылыусы кешеләргә төбәп, байтаҡ ҡына өндәшмәй-тындашмай барҙы. Тауға тирә-яҡ ауылдарҙан кемдәрҙер йәйәү йә һыбай, ҡайһылары арбала килә ята. Йәштәре лә, ололары ла яһаныпбиҙәнеп, һыланып-һыйпанып, ашамлыҡ-ниғмәттәр һалынған төйөнсөктәр тотоп алған. Тауҙың байрам үтәсәк урынына тиклем байтаҡ ара бараһы бар әле. Көнгәккә сығыусы халыҡтың иҫәбе-һаны, осо-ҡырыйы юҡ кеүек.

Ә байрам барышы - үҙе бер оло тамаша, театр. Ул ҡурайсы, тальянсылары, ул бейеүсе, йырсылары ян тиргә төшөп тигәндәй үҙ-ара ярыша, һәр ҡайһыһы үҙ оҫталығын күрһәтергә, үҙ ауылының данын яҡларға, күтәрергә тырыша. Йәштәрҙең шат тауыштарынан бар тирә-яҡ яңғырап тора. Байрамды ойоштороусылар, Мөхәммәтша менән Усман да бер тиреләрәк булды.

* * *

Сәсәндең кәңәшен тотоп, байрамдан Йомағужаға ҡайтҡас Усман Мөхәмәтғариф улы ауылының тарихын яҙырға ултырҙы. Был уның өсөн әллә ни ауырға тура килмәне, сөнки кәрәкле ваҡиға-факттарҙы күп белә, уларҙы хәтерендә яҡшы һаҡлай ине. Был эшен тамамлағас, Шәғәле Шаһман нәҫеле шәжәрәһен төҙөргә тотондо, уның өсөн Иҙел-Нөгөш тамъяндары йәшәгән ауылдарҙы йөрөп, аҡһаҡал-уҙамандар менән әңгәмәләшеп, уларҙан нәҫел быуындарын яҙып алды, аҙаҡ уларҙы ағас формаһына тура килтереп берләштерҙе.

Бер аҙҙан күмәк хужалыҡтар төҙөү эштәре башланды. Усман да тыуған ауылында колхоз ойоштороуға ең һыҙғанып тотондо. Аҙаҡ үҙен колхоз рәйесе итеп һайланы ауылдаштары.

Күрәһең, уның етәксе булып китеүе кемдәргәләр оҡшап етмәне: 1917 йылғы революциялар осорондағы эшмәкәрлеген соҡоп сығарҙылар, милләтселектә ғәйепләргә тотондолар. 1932 йылда 5 йылға хөкөм итеп, төрмәгә ултыртып ҡуйҙылар уны. Ике йыл ярым ултырып ҡайтты уҙаман. Шул саҡтар һаулығын да ныҡ ҡаҡшатты уның. Герман һуғышында алған яраһы ҡаты һыҙлап, төн йоҡоларын алыр булды. Был яҡты донъя менән хушлашырын белгән һымаҡ Усман хәләл ефетенә һандығындағы ҡулъяҙмаларҙы ныҡлы һаҡларға, балалары үҫә төшкәс, уларҙың ҡулына тапшырырға ҡушты.

Илкәнәй ауыл Советы секретары вазифаһын башҡарып йөрөгән ерҙән бер көндө, ауырып, түшәккә ятты ла, шунан һуң аяғына баҫа алмай вафат булып ҡалды.

Ә ул төҙөгән шәжәрә менән ауыл тарихы һандыҡ төбөндә оҙаҡ йылдар ятҡандан һуң ғына Әнүәр Әсфәндиәров атлы тарихсы ғалимға бер туған ҡустыһы Ғәли Әбүбәкеров аша барып ирешеп, донъя күрҙе.

## ЫРЫУ АҒАСЫ

Мирхәким һуңғы йылдарҙа, юл төшкән һайын, тыуған ауылы урынындағы аҡ тирәк янына туҡталып китмәй ҡалмай. Етенсе быуын бабаһы Түкән Балтасов нигеҙләгән ауыл урынында, изге йоланы үтәп, ауылдаштары ҡасандыр үҙ ырыу ағасын ултыртҡан. Унан бирле күпме һыуҙар аҡҡанын, был тирәктең йәшен күрһәтеүсе балдаҡтары күпме икәнен дә асыҡ ҡына белеүсе юҡ хәҙер. Уның теүәл генә йәшен белһә, шул аҡ тирәкте яры буйына һыйындырған Көйөргәҙе йылғаһы ғына беләләр.

Нимә тип шыбырлай Мирхәкимгә ырыу ағасы япраҡтары?

- Тағы ла мине, тыуған ауылыңды, нәҫел-нәсәптәштәреңде һағынып килдеңме? Ауылыңды бөтөргәндәренә йөрәгең әрней, йәнең әсейме? Мәрхүмдәрҙең, Түкән ҡарт вариҫтарының, рухтары рәнйемәй тип беләһеңме әллә? Ә мин Түкәндең берәй заман тергеҙелеренә, һаман да өмөтөмдө өҙмәйем әле, йылдың йылы йәмле йәй көндәрендә тирә-яҡҡа ап-аҡ мамығым менән бергә орлоҡтарымды мул итеп осорам: ул шатлыҡлы көндәрҙә

- ауылдың янынан тергеҙелерен үҙемә күрергә яҙмаһа, бәрәкәтле тупраҡҡа яткан орлоҡтарым шытып сығып, уларҙан күкрәп үҫәсәк йәш аҡ тирәктәр күрер, моғайын. Барыһы ла мине ултырткан кешеләрҙең улан-ҡыҙҙарынан тора. Уларҙың намыҫында, - тип өндәшә кеүек ул аҡһаҡалға.

Ҡасандыр бында Мирхәким Мирхәйҙәр улы Ишмөхәмәтовтың тыуған ауылы булғанлығын иҫкә төшөрөп ел-дауылдарға бирешмәй, бына шулай һаман да үҫеп ултыра бирә бер нисә кешенең дә ҡоласы етмәҫлек аҡ тирәк.

Йәш кенә көйөнә Бөйөк Ватан һуғышының утын, һыуын кисеп, күп ерҙәрҙе үтеп, тыуған яғына ҡайтып, бөтә хеҙмәт юлы шунда үткән яугир һәм хеҙмәт ветераны форсат тейгәндә бына шулай ырыу ағасы янында уның ҡатлы-ҡатлы балдаҡтары кеүек теҙелгән үҙ ғүмер йылдарын, уларға бәйле төрлө хәтирәләрҙе ҡат-ҡат иҫенә төшөрөргә ярата.

* * *

1943 йылда армияға алынғанында Мирхәкимгә 18 йәш тә тулмағайны. Ырымбур өлкәһенен Тоцк лагерында алты ай буйы пулеметсы һөнәренә өйрәттеләр.

Аҙаҡ Орел яғына, Дядьково ҡалаһына, 273-сө дивизияның 971-се уҡсылар полкына йәғни фронт һыҙығына оҙаттылар.

Тәүге һуғыш сәғәттәрендә орудиеларҙың ҡайһы яҡтан атҡанын да аңлай алманы Мирхәким. Дарҫ та дорҫ шартлаған йәҙрә ярсыҡтарынан һаҡланыу өсөн башын ҡайҙа ҡуйырға, ҡайҙа йәшерергә белмәне ул. Шул уҡ ваҡытта уға бер кемден дә иғтибар итмәүенә аптыраны. Әммә кеше тигәнен барыһына ла күнегә икән. Мирхәким дә ошондай мәхшәрҙә барыһын абайлап, тәүәккәл эш итергә өйрәнде. Тәбиғәт тарафынан һәр кемгә бирелгән ҡурҡыу хисен ауыҙлыҡлап, егет йыйнаҡ, әммә



сая булырға, иң ҡатмарлы осраҡтарҙа ла ҡаушап ҡалмаҫҡа өйрәнде.

Һуғыш юлдарынан ул Белоруссияға тиклем барып етте, шунан Рязань ҡалаһында пехота училищеһына эләкте, әммә имтихандарҙы тапшыра алманы, сөнки ни бары 6 класс ҡына белеме бар ине. Ә офицер булыу өсөн был ғына бик аҙ икән.

...Мирхәким-яңынан фронтта. Инде хәҙер Көнбайыш Белоруссияның Гродно ҡалаһында. Матур ҡала тулыһынса тиерлек фашистар тарафынан ҡыйратылған. Емерек өйҙәрҙен тәҙрәләренән сыҡҡан ялҡынлы төтөн күҙҙәргә тула, һулыш юлдарын быуа. Усың менән күҙҙәрҙе ышҡып асҡан арала йөҙҙәренә ҡурҡыу тойғоһо сыҡҡан кешеләрҙең һинән яҡлау эҙләгәнен күрәһен.

Артиллерия сафында Кенигсбергҡа барып еткәндә, 20 йәше тулған Мирхәким ысын яугир ине инде. Был ҡалалағы кеүек башҡа бер ерҙә лә уның шул хәтлем күп немецтарҙы күргәне булманы. Еңә алмаҫтарын тамам аңлаған, әммә тере ҡалырға теләгән «еңелмәҫ рейх һалдаттары» әсирлеккә төшөргә мәжбүр булған. Киң урамды тултырып атлаусы немецтарға текләгән Мирхәкимдең күңелен шундай бер уй-тойғо телгеләй: кемгә кәрәк булды икән был ҡәһәрле һуғыш, йәшәү тәмен дә татып өлгөрмәгән йәп-йәш егеттәр нинә шулай иртә үлергә тейеш һуң?

Көндәрҙән бер көндө командование һуғыш тамамланыуы хаҡында иғлан иткәс, Мирхәким ҡыуанды ла, юғалып ҡалғандай ҙа булды - тыуған еренән ҡайһылай ҙа алыҫҡа, ер аяғы, ер башы яҡҡа барып сыҡҡан бит ул.

Мирхәкимдең ҡыуанысы оҙаҡҡа барманы: һалдат бурысын үтәү өсөн уны Финляндияға ебәрҙеләр. Өс йыл ғүмерҙең шунда үткәне һиҙелмәй ҙә ҡалды.

1948 йылдың 20 мартында аҡ тирәкле тыуған ауылы Түкәнгә - ғәзиз төйәгенә аяҡ баҫты ул.

Оҙаҡ ял итеү бәхете тәтемәне уға, сөнки ҙур ғаиләһенә ярҙам итергә кәрәк ине. Бәхетенә күрә «Морапталь»

совхозында 3 айлыҡ тракторсы-машинистар курсы асылды. Мирхәким шунда уҡып сыҡты ла, ҡорос атына ултырып, тыуған яғы баҫыуҙарында эш башланы. Шунда ғына ул ни саҡлы тыныс хеҙмәтте һағынғанын, эш тәмен, был донъяла йәшәүҙең ҡәҙерен аңланы, шикелле. Шуға күрә фронтовик яратҡан эшенә бөтә күнелен, ваҡытын, хатта ғүмерен бирҙе. Мауығып эшләне ул. Тыуған ауылында сөм-ҡара тупраҡлы баҫыуҙарҙы һөрҙә, йөк ташыны, сәсеүҙә лә һөжүм ваҡытында алдан барған яугирҙәй тос орлоҡтарҙы буразналарға һалыуҙа башҡаларға һыр бирмәне. Тырыш, ойоштороу һәләте булған тракторсыны 1949 йылдың баштарында «Мораптал» совхозының Марьевка бүлексәһенә трактор бригадаһына бригадир итеп тәғәйенләнеләр. Бында ике йыл уңышлы ғына эшләгәс, ул ғаилә хәленә бәйле кире тыуған ауылына ҡайтып, яратҡан тракторсы эшен дауам итте.

Элекке яугир сәмләнеп эшләне, бирелгән пландарҙы һәр саҡ арттырып үтәне, эште юғары сифатлы итеп башҡарҙы. Шуға ла совхозға яңы ҡайтҡан тракторҙарҙы уға ышанып тапшырҙылар, сөнки техниканы йәне-тәне менән тигәндәй яратҡан, уны бала тәрбиәләгәндәй ҡарап ҡына йөрөткән егеттең үҙенә күрһәтелгән ышанысты аҡларына бер ҙә шикләнмәне хужалыҡ, бүлексә етәкселәре.

1949 йылдан башлап Мирхәким комбайнда эшләй башланы. Иген сабыуҙа ла, һуғыуҙа ла яҡшы хеҙмәт күрһәткестәренә өлгәште. Шундай өлгөлө эше менән башҡаларҙы ла үҙ артынан эйәртә, әйҙәй алды ул. Көҙ, иген һуҡҡанда, комбайнсыларҙы төнгө ыҫыҡ төшкәнсе баҫыуҙан ҡайтмаҫҡа өндәп эшләне, һәм яҡташтарының береһе лә уның һүҙен йыҡманы.

Гел генә эштә, дөрөҫөрәге, баҫыуҙа, булған Мирхәким бына шулай бер-бер артлы теҙелешеп тиҫтәләрсә йылдар үткәнен дә һиҙмәне. Был ваҡыт эсендә Көйөргәҙе йылғаһы яры башындағы теге аҡ тирәк нисәмә тапҡыр япраҡ ярғандыр ҙа, нисәмә тапҡыр мамыҡ бурандарын уйнатҡандыр - быны ырыу ағасы үҙе генә белә...



1976 йылда Мирхәким Ишмөхәмәтовтың тормошонда ҙур ваҡиға булды: ул комбайнда бер сезонда 20 мең центнер иген һуҡҡаны өсөн элекке Союзда иң абруйлы булған Ленин ордены менән бүләкләнде.

- Орденды миңә ул ваҡыттағы республикабыҙҙың Юғары Советы Президиумы рәйесе Фәйзулла Солтанов үҙе тапшырҙы, - тип хәтерләй Мирхәким Ишмөхәмәтов. - Бик йылы һүҙҙәр әйтте, тырыш хеҙмәтем өсөн рәхмәт белдерҙе. Быларҙы онотоп буламы ни? Беҙ ысынлап та бөтә көсөбөҙҙө биреп эшләй инек. Мин ул саҡтағы аҙ ҡеүәтле комбайнда сезонына 10-12 мең центнер иген һуға инем, ә ҡайһы саҡта унан да арттырып ебәрә торғайным. Ҡайһы бер көндәрҙә тәүлегенә бункерҙан 600 центнерға тиклем иген бушатҡаным әле лә хәтеремдә, - тип хәҙер иҫенә төшөрә һуғыш һәм хеҙмәт ветераны.

1992 йылда Мирхәким Мирхәйҙәр улы юғары хеҙмәт күрһәткестәре өсөн Октябрь Революцияһы ордены менән бүләкләнде. Тыуған яғының киң баҫыуҙарында артабан да эшләргә дәрт итһә лә, элеккеләй дарманы булмау, көс-кәре кәмеү сәбәпле, ул бары тик 90-сы йылдарҙың аҙағында ғына хеҙмәт эстафетаһын уңдырышлы тупраҡҡа төшөп, гөрләп үҫеп киткән йәш аҡ тирәктәрҙәй үҙенә алмашҡа үҫеп килеүсе йәш механизаторҙарға тапшырҙы. Бына хәҙер ун йылдан ашыу инде ысын-ысындан хаҡлы ялда Шәғәле Шаһман вариҫы.

* * *

Мирхәким бөгөн дә оҙаҡ яманһыулап торҙо Көйөргәҙе йылғаһы аша һалынған күпер эргәһендәге тамъяндарҙың ағасы иҫәпләнгән аҡ тирәк янында. Киләсәге булмаған ауыл тигән һылтау менән Түкәндең бөтөрөлөүенә лә 40 йылға яҡын ваҡыт үтеп бара; ҡәҙерле ҡатынының, Фәрзәнәһенең, был яҡты донъянан китеүенә лә тиҫтә йылдан ашыу. Шулай ҙа Мирхәким үҙен яңғыҙ тип иҫәпләмәй. Ул йәшәгән Фәрит улының өйөнә бала-

лары ҡайтып тора. Форсат тейгәндә үҙе лә уларға хәл-әхүәл йә йомош-фәлән менән барып сыҡҡылай.

Ә бына тыуған ауылының ер йөҙөнән юҡ ителеүенә барыбер ҙә әсенә ул. Бер уйлаһаң, Шәғәле Шаһман кенәз нәҫеленән булған нисәмә быуын ҡан-ҡәрҙәштәре ошонда тыуып үҫеп, ошонда йәшәп, баҡыйлыҡтан фанилыҡҡа күскән бит. Улар үҙҙәренең шундай бик данлыҡлы нәҫелдән булыуҙары менән хаҡлы ғорурланғандыр, моғайын. Шулай булмаһа, бөгөнгәсә шәжәрәләрен ҡәҙерләп һаҡларҙар инеме ни улар?

## НӘҪЕЛДӘШ

Бирәм тигән ҡолона сығарып ҡуйыр юлына, ти. Бер ынғай тура килһә килә бит ул: мин уның менән осрашып, танышырға тип күптән уйлап йөрөй инем. Был аҡһаҡалды тәү башлап Ермолаевоның Үҙәк туҡталышында осраттым.

Күмертауға ҡайтырға Маяҡ автобусын көтөп торам. Уның килеренә байтаҡ ваҡыт бар әле. Ҡасандыр Шотт баяры төҙәткән Юшатыр быуаһы май айының аяҙ яҡты көнөндәге матурлығы менән һине һоҡландырмай, сихырламай ҡалмай. Яр буйындағы оҙон ҡамыштарҙан, һыу өҫтөндәге ваҡ тулҡындарҙа рәхәтләнеп бәүелеүсе ҡыр өйрәктәре тубынан, резина кәмәләрҙәге балыҡсыларҙан күҙҙе алаһы ла килмәй. Тәбиғәткә шулай һоҡланып бағып торғанда эргәмә оло йәштәге бер бабай килеп баҫты.

- Автобус көтәһеңме, улым?
- Эйе?
- Ҡайһы яҡ егете булаһың?
- Мәләүез районы Оло Моҡас ауылынан.
- Бәй, һин Оло Моҡастыҡымы ни? Мин ул яҡтарҙы бик тә яҡшы беләм, кешеләрен дә, - тине ул. - Таныш булайыҡ: мин Мирғәлим Ишмөхәмәтов бабайың булам. Түкәндән. Былай булғас, һинең менән нәҫелдәш булып сығабыҙ ҙабаһа, улым. Беҙ - Шәғәле Шаһман нәҫеле



бит. Хәҙерге йәштәрҙән: «Нисә быуыныңды беләһең?» - тип һораһаң, хатта ҡайһы берҙәре олаталарының исемен дә әйтә алмай. Ә һин ата-бабаң тарихы, нәҫел-нәсәбең менән ҡыҙыҡһынғаның бармы, балаҡайым? - тип һораны. Мин уға 20 быуынымды сатнатып әйтеп бирҙем. Мирғәлим бабай, ҡыуанысын йәшермәйенсә, минең яуабыма аптырап та, һоҡланып та башын сайҡап ҡуйҙы.

- Афарин, улым! Афарин! - тине ул арҡамдан ҡағып. - Тарих менән ҡыҙыҡһына торған егет икәнһең. Мин дә, улайһа, һинә үҙемдең нәҫел-нәсәбем тураһында күп нәмә һөйләй алам...

Шунда беҙҙең һүҙ өҙөлдө: автобус килде.

- Улым, ҡайҙа эшләйһең?
- Район гәзитендә.
- Ярар, улай булғас, бигерәк һәйбәт, мин һинә берәй көн килеп сығырмын әле. Һау булып тор.
- Ярар, бабай, хушығыҙ! Осрашҡанға тиклем!

Беҙ Күмертауға күсеп, «Юшатыр» исемле гәзит сығара башлағас, Мирғәлим бабай яңы редакцияға килеп инде. Күренеп тора: кәйефе бик шәп. Бер ҡулында - ҡыу талдан үҙе яһап алған таяҡ, икенсеһендә - пакет. Хәл-әхүәл һорашҡас, өҫтәл артына ултырыштыҡ.

- Бергәнгө һүҙебеҙҙе дауам итәйек әле, күңелдә көйөк булып ҡалмаһын, тием. Бына атайым Мирхәйҙәр яғынан үҙемдең шәжәрәмде алып килдем. Бәлкем, кәрәге тейер һинә - журналист кешегә. Ксерокүсермәһен эшләтеп алып, төп нөсхәһен миңә кире ҡайтарып бир. - Ул пакетынан сығарып өҫтәлгә ҙур бер ҡағыҙ бите һалды. - Һин күп уҡыған, гәзиттә эшләгән кеше беләһеңдер инде: беҙҙең Түкән ауылын Шәғәле Шаһмандың 6-сы быуын вариҫы Түкән карт Балтасов нигеҙләгән бит. Заманына күрә уҡымышлы, белемле кеше булған ул. Старшина вазифаһын да башҡарған. Башҡорт ерҙәрен ҡуртымға биреүсе, Тимаш баярына ер һатыусы документтарға ҡул ҡуйыусылар араһында уның да ҡултамғаһы бар, тиҙәр. Шулайҙыр. Бының өсөн уны ғәйепләп

тә булмай. Заманында, Бүгәс батша етәкселегендәге Крәстиәндәр һуғышында, уның Юлай исемле бер улы халҡыбыҙға азатлыҡ яулашып та йөрөгән. Яҡташыбыҙ Киньә Арыҫлановтың улы Һеләүһен мулла менән һәр саҡ тиерлек бергә булғандар.

Аҙаҡ башҡорт ерҙәренә төрлө яҡтарҙан төрлө халыҡ килеп тула башлаған. Улар уңдырышлы, ҡаҙылма байлыҡлы, бигерәк тә, мәғдәнле ерҙәрҙе буштан-бушҡа баҫып алмаһын өсөн, ата-бабаларыбыҙ ерҙәрҙе мөмкин ҡәҙәр һатып бирергә тырышҡан. Яу ваҡытында карательдәрҙең аяуһыҙ талауы арҡаһында бөлгөнлөккә төшкән, аслыҡтан яфаланған бауырҙаштарын ҡотҡарырға тырышыу ниәтенән дә эшләнгән эш булған ул. Шуға күрә бында Түкән ҡартты ер һатыуҙа гәйепләү урынһыҙ. Аҡыллы, башлы кеше булған инде. Үлгәс, уны ауылыбыҙ зыяратына бик зурлап күмгәндәр. Беҙ бәләкәй саҡта ла уның ҡәберен белеүсе ҡарттар бар ине әле, тиҙәр. Йәл, хәҙер ауыл бөттө. Түкән бабабыҙҙың ҡәберен белеүсе лә юҡ. Ахырызаман тигәндәре шул булалыр инде.

Түкәндең Аманбай, Амангилде, Юлай, Ҡаҙаҡбай исемле дүрт улы була. Шуларҙан Ишмөхәмәтов, Ҡаҙаҡбаев, Сәйетбатталов, Ҡолмөхәмәтов фамилияларын йөрөтөүсе Шәғәле Шаһман нәҫеле таралған да инде. Хәҙер ауылыбыҙ бөттө, әлеге нәҫел-нәсәптәштәр ҙә күрше ауылдарға, ҡалаларға таралышып бөттө. Тамырҙарын белгәне белә, белмәгәне мөртәт булып йөрөй бирә.

Түкән ҡарттың 4-се быуын вариҫтарынан Исмәғил минең олатайым була инде. Бик фажиғәле яҙмышлы кеше ул. 1879 йылда батша хөкүмәте тәртиптәренә ҡаршы ризаһыҙлыҡ белдергәнгә күрә уны Сәйетбатталовтарҙың береһе менән, аяҡ-ҡулдарын быуаулап, Әбей батша юлынан Яҡутстанға һөргөнгә ебәргәндәр. Туң ерле һалҡын төбәктә 21 йыл хөкөм ваҡытын үткәреп, 1900 йылда ғына тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтҡан олатайым. Әтәйым Мирхәйҙәр Яҡутстанда 1895 йылда донъяға тыуған. Ауылыбыҙға ҡайтҡандарында уға һигеҙ йәш булған.



Олатайымды, ҡайтҡас та, күрә алмаған кешеләре битәрләүҙәрен дауам иткән. Һәр ваҡыт «ристан», «кәтержник» тигән һүҙҙәр артынан эйәреп йөрөгән. Ғорур, һыр бирмәҫ Мирхәйҙәр, ғаиләһен алып, Иманғолға сығып киткән, байтаҡ йылдар шунда тимерсе булып эшләгән. Атайым тимерселеккә бына унан, олатайымдан, өйрәнгән. Уның шул һөнәренә бәйле беҙҙең ғаилә һеҙҙең Мәләүез яҡтарында ла йәшәп алды бит үткән быуаттың 30-сы йылдарында. Шул осор тормошобоҙҙағы бер ваҡиға тураһында иҫталек тә яҙып килтерҙем әле бына һеҙгә. Оҡшатһағыҙ, шунда үҙегеҙ матурлап яҙып, баҫтырып сығарырһығыҙ. Яҡташыбыҙ Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа бәйле ул, - Мирғәлим бабай йәнә лә пакетынан бер дәфтәр сығарып өҫтәлгә һалды. - Унда тағы беҙҙең Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы тормошобоҙҙо сағылдырған бер ваҡиға тураһында яҙҙым. Үҙегеҙ уҡырһығыҙ, - тине ул. - Мин ғүмерем буйы оҙон йырҙар, халҡыбыҙҙың классик йырҙарын йырларға яраттым, тағы ла Ғәзиз Әлмөхәмәтов йырлаған «Эшсе» операһындағы «Ниғмәт арияһы»на ғашиҡмын. Һеҙгә лә йырлап ишеттерәйем әле, - тине лә уны һуҙып ебәрҙе.

Оҙаҡ әңгәмәләшеп ултырҙыҡ был көндө беҙ Мирғәлим бабай менән.

- Беҙҙең нәҫел, бер уйлаһаң, бик данлыҡлы нәҫел инде ул, - тип ҡуйҙы аҡһаҡал. - XVIII быуаттағы башҡорт яуҙарының башында ла Шәғәле Шаһман нәҫеленән сыҡҡан Түләкәй батыр, уның улы Күсем Түләкәев, ейәне Аҡай Күсемовтар торған бит. Уларҙың исем-аты беҙҙең нәҫел шәжәрәһендә аҡҡа ҡара менән яҙылған. Бына кемдәр менән ғорурланырға тейешбеҙ беҙ тағы ла...

Мирғәлим Мирхәйҙәр улы беҙҙең менән булған осрашыуҙан бик тә ҡәнәғәт ҡайтып китте ул көндө. Ҡыуанысынан хатта таяғын онотоп ҡалдырған. Иртәгәһенә мин:

- Бабай, таяғың беҙҙә, килеп ал, - тип шылтыраттым.

- Минә хәҙер таяҡ кәрәкмәй, һеҙҙе, нәҫелдәшемде, күреп, эс-серҙәремде бүлешкәне бирле шәбәйҙем дә киттем бит, - тип мәрәкәләне ул.

Мирғәлим Ишмөхәмәтовтың иҫтәлектәрен һуңынан «Юшатыр» гәзитендә баҫтырып сығарҙыҡ. Уларҙың ғаиләһенең тормошон күҙ алдына асығыраҡ килтереү өсөн китап уҡыусыларға ла тәҡдим итәбеҙ уны. «Грампластинка артынан» тип атала ул хәтирә.

* * *

Был хәл 1937 йылдың йәйендә булды (беҙҙең ғаилә ул саҡта Мәләүез районының Исламғол ауылында йәшәй ине). Беҙ, бер тиҫтер малайҙар, урамда уйнап йөрөйбөҙ. Ауыл осонда бер һыбайлының юртып килгәне күренде. Уға табан йүгерешеп барһаҡ, милиционер икәнен таныныҡ. Беҙгә яҡынлашҡас, атын атлата башланы.

- Ишмухаметов Мирхайдар где живет? - тип һораны ул. Васька Клиеменков тигән урыҫ малайы, минең дуҫ, беҙҙең өйҙө төртөп күрһәтте.

Милиционер атын бәйләне лә өйгә керҙе. Атайым күрше Яңауыл ауылында тимерлектә эштә ине. Әсәйем:

- Бар, улым, атайыңды алып ҡайт. Милиционер килде, һине ҡайтырға ҡушты, тип әйт, - тине.

Яңауылға йүгереп тигәндәй барып еттем. Атайым эшкә велосипед менән йөрөй торғайны. Мин уның алдына менеп ултырҙым да, тиҙ генә ҡайтып та еттек.

Милиционер атайым менән байтаҡ ҡына һөйләште. Ул ваҡытта беҙҙең граммафон бар ине, кис ҡырын, тәҙрәне асып ҡуйып, шуны уйната торғайныҡ. Грампластинкалар араһында йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтов йырҙарынан тоҙөлгәне лә бар ине. Бигерәк тә уның «Нигмәт арияһы»н йырлағанын ауылдаштарыбыҙ беҙҙең тапҡырға йыйылып, ололар хатта ултырғыстар алып килеп ултырып тыңлай торғайны:

*Тауҙар ватып, таштар аҡтарғанда,*
*Һеҙ булырһығыҙ минең күңелемдә,*



*Эштән арып ялдар иткән саҡта,*
*Булырһығыҙ минең телемдә.*
*Ай, диңгеҙгә барып төшә икән*
*Боролоп-боролоп аҡҡан ағым һыу,*
*Рәхәт ине бергә торған саҡтар,*
*Айырылышыу бигерәк яманһыу.*

Һөйләшкәндәрен тыңлап ултыра торғас, шуны аңланым: Ғәзиз Әлмөхәмәтов йырҙары яҙылған грампластинканы таптыра икән был милиционер. Бер аҙҙан ул тәмәке тартырға сыҡты.

- Атайыңды ни эшләтә ул? - тип һорай әсәйем, тәрән көрһөнөп.

- Ғәзиз Әлмөхәмәтов - враг народа, ти. Уны ҡулға алып, төрмәгә ултыртҡандар, ти. Атайымдан уның йырҙары яҙҙырылған пластинканы таптыра.

- Эҙләп алып бир шуны, - тине әсәйем.

Мин эҙләй башланым. Эргәмдә бәләкәй ҡустым Миҙхәт тә уралып-суралып йөрөй.

Милиционер менән атайым, тәмәке тартып бөтөп, кире өйгә инде. Сәй эсеп алдылар. Шунан атайым:

- Был кеше Әлмөхәмәтовтың пластинкаһын алырға килгән. Мирғәлим, ҡарап алып бир шуны, - тине.

Әсәйем, тәүҙә минә пластинканы эҙләргә ҡушһа ла, нимәлер уйлап, уны мендәр аҫтына йәшерергә өлгөргәйне инде. Бәлки, шулай үтеп китер, милиционер артыҡ бәйләнмәҫ, тип уйлағандыр. Быны Миҙхәт ҡустым менән күреп торҙоҡ.

Ә ҡыҙыл йондоҙ таҡҡан фуражкалы саҡырылмаған ҡунаҡ уғата ла ныҡыҡлы бәндә булып сыҡты: үҙенә кәрәкле нәмәне таптыра ла таптыра, өҙмәй ҙә ҡуймай. Беҙ иһә башҡа пластинкалар араһынан уны эҙләгән кеше булабыҙ... Эй, эҙләйбеҙ, эй, эҙләйбеҙ, йәнәһе... Таба ғына алмайбыҙ. Ә милиционер таптырып таптыра. Башым ауырта, тигән булып әсәйем, түҙмәй, өйҙән сығып китте. Мин дә аптыраған кеше булам:

- Бая ғына ошонда ине, - тием. Милиционер беҙгә бөгөн кемдәр килгәнен һораша башланы.

- Үҙендә Мәләүезгә алып китәм, - тип атайыма кейенергә ҡушты. Атайым эштең ниҙә икәнен белгән һымаҡ Миҙхәткә:

- Һинә пластинка ҡәҙерләме, әллә минме?! - тине, төҫө боҙолоп. Ҡустым мендәр аҫтын барып ҡараған булды - пластинка юҡ. Мин аптырап киттем: әсәйем бая шунда алып тыҡҡайны бит. Ә милиционер атайымдың өҫтөнә менеп бара:

- Табып бир Әлмөхәмәтовтың грампластинкаһын, юғиһә, хәҙер үҙенде Мәләүез төрмәһенә алып барып ябам! - ти. Атайым мине ҡыҙырта башланы. Өс йәшлек ҡустым мине бик тә ярата, әйткәнемде тыңлай торғайны.

- Аҡыллым, ҡайҙа ҡуйҙың, алып бир инде шуны, - тип инәлдем мин уға. Миҙхәт минә ҡарап торҙо-торҙо ла ҡысҡырып илап ебәрҙе, ике күҙенән йәше субырҙап аға. Ул йәшерер тип кем уйлаған инде: беҙ тегеләй-былай йөрөгән арала, ул пластинканы мендәр араһынан алып, урындыҡтың балаҫ аҫтына йәшергән икән. Шунан барып алып бирҙе.

Милиционер пластинканы ҡулына алып, иғибар менән ҡараны ла, урындыҡтың йөҙләгәнә ҡуйып, уны ватҡыланы. Шунан унын ярсыҡтарын бер бәләкәй тоҡсайға йыйып һалып, ауыҙын бәйләне лә өйҙән сығырға ашыҡты. Ҡустым уға бармаҡ менән янап алырға ла онотманы. Ә атайым ултырған урынынан ҡымшанманы, өндәшмәй-тындашмай ултыра бирҙе, тик ике күҙендә йәш бөртөктәре генә ялтырап күренә ине.

## ҺАНАМАҠ ҺӘМ ҺЫНАМАҠҠА БИРЕЛГӘН ЙЫЛДАР

«Йылдар һанамаҡҡа бирелһә, ғүмер һынамаҡҡа бирелә», - тип яҙғайны шағир Тимер Ниәтшин «Әрем тәме» тигән шиғырҙар йыйынтығына баш һүҙендә. Ул алты тиҫтәнән ашыу ғүмере эсендә тормош имтихандарын уңышлы үтте һәм үтә. Был шәхесте хәҙер күптәр баш-



ҡорт шиғриәтендәге үҙ урыны, үҙ һүҙе булған үҙенсәлекле шағир тип белә.

Тимер Ниәтшин (Тимерйән Әбдрәхим улы Ниәтшин) 1946 йылдың 10 июнендә Көйөргәҙе районы Илкәнәй ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуа. Атаһы оҙаҡ йылдар хужалыҡта ат ҡараусы, әсәһе һауынсы булып эшләй. Бәләкәйҙән ғилемгә ынтылған, сәмсел үҫмерҙең яҙмышында Өфөнөң 1-се башҡорт мәктәп-интернатында белем алыуы ифрат ҙур роль уйнай. 1963 йылда интернатты көмөш миҙал менән тамамлағас, юғары белемде Куйбышев политехник институтында ала. Хеҙмәт юлын Ҡарман ГРЭС-ында электрослесарь булып башлай, төрлө йылдарҙа мастер вазифаларын башҡара. Өфө дәүләт нефть институтында өлкән уҡытыусы ла булып эшләй. Ун өс йыл ғүмере Күмертауҙағы «Искра» заводы менән бәйле. Тимерйән Әбдрәхим улы электр ҡорамалдарын көйләү бүлеге начальнигынан алып предприятиеның конструкторҙар бюроһы етәксеһе вазифаһына тиклем юл үтә. Һуңғы биш йылда - Рәсәй дәүләт хеҙмәт инспекцияһының Башҡортостан бүлексәһендә төбәк-ара хеҙмәт инспекторы.

Күптәр Тимер Ниәтшинды әүҙем йәмәғәт эшмәкәре, Күмертау, Мәләүез ҡалаларында әҙәби-ижади берекмәләр, ижтимағи ойошмалар ойоштороуҙы башлап йөрөүселәрҙең береһе булараҡ та яҡшы белә.

Тимер Ниәтшиндың Совет Космонавтикаһына арналған тәүге шиғыры 1957 йылда Көйөргәҙе район гәзитендә баҫыла. Интернатта уҡыған йылдарҙа әҙәби түңәрәккә йөрөй, шиғырҙар яҙа. Техник белем алыу Тимерҙе егерме йылдар тирәһенә әҙәби мөхиттән ситләтә, әммә күңелендәге шиғриәт ҡуҙы уға тынғы бирмәй, һәм 80-се йылдар уртаһында ул ныҡлап шиғырҙар яҙа башлай.

- Бер яҡтан, әҙәбиәтте яратыу, шиғри мөхиткә ылығыу, мөкиббәнлек, икенсе яҡтан, техник белем, һөнәр алыу, көндәлек эшемдең шуның менән бәйләнгәнлеге, ҡап уртаға ҡырҡылған алмалай, яҙмышымды, тормошомдо гел генә икегә бүлеп торҙо. Ҡайһы яҡҡа нығыраҡ

һыйынырға, өстөнлөк бирергә белмәй йөҙәнем, - ти ул. - Тик күнелдә яралған хис-тойғоларҙы, ижади көстө көсләп-мәжбүрләп тотоп булмай, ул барыбер ҙә үҙенә юлын таба икән... 80-се йылдар урталары мине яңынан ижад донъяһына алып ҡайтты, яңы ҡанат ҡуйҙы, дәрт-илһам бирҙе.

Әҫәрҙәре «Ағиҙел», «Башҡортостан ҡыҙы» журналдарында, «Йәш көстәр» альманахында донъя күрә. 1989 йылда «Һүҙ һорайым» исемле тәүге йыйынтығы баҫыла, ә 1993 йылда «Уянған өмөт» исемле икенсе китабы сыға. Үҙнәшер юлы менән Күмертау ҡала типографияһында донъя күргән «Әрем тәме» исемле өсөнсө йыйынтығы шағирҙың һуңғы 15 йыл эсендә яҙылған шиғырҙарын туплаған. Был поэтик әҫәрҙәрендә ауыр, ҡатмарлы осорҙа йәшәгән замандаштарыбыҙҙың кисерештәре, шәхес булып үҫеүе, тыуған еренә, туған теленә булған мөнәсәбәте асыҡ сағыла. Уның шиғриәтендәге лирик геройҙың төп һыҙаты - үҙ-үҙен эҙләүе һәм табыуы.

Бынан тыш Т. Ниәтшин матбуғатта ижтимағи-сәйәси, фәлсәфәүи темаларға һәм көнүҙәк мәсьәләләр буйынса уҡымлы мәҡәләләр менән дә сығыш яһай.

1994 йылда Тимер Ниәтшин РФ, БР Яҙыусылар берлегенә ағза итеп алына. Тимерҙең ижадында этәргес көс булып бөгөнгө һалҡын һәм ҡараңғы заманда халҡы, шулай уҡ ябай кеше яҙмышы, был донъяла уның үҙ урынын эҙләүе тора.

## АУЫЛ ХӘБӘРСЕҺЕ

Әхтәм Тимерғәле улы Хисаметдинов 1932 йылдың 15 декабрендә Мәләүез районы Яҡтыкүл ауылында тыуа. Бөйөк Ватан һуғышы башланған йылды беренсе класҡа уҡырға инә. 1944 йылда Яҡтыкүлдәге 4-се класты тамамлағас, Әхтәм 6 саҡырым алыҫлыҡтағы Смаҡ ауылындағы Арыҫлан ете йыллыҡ мәктәбенә уҡырға йөрөй башлай.



1948 йылда Арыҫлан ете йыллыҡ мәктәбен тамамлап, көҙөн Көйөргәҙе районы үҙәгендә, бер йыллыҡ ауыл хужалығы мәктәбендә уҡығандан һуң, Мәләүез районының «Яңы юл» колхозында 1949-1950 йылдарҙа бригадир булып эшләй. 1950 йылдың октябренән 1952 йылдың июленә тиклем Ырымбур ҡалаһының 4-се тимер юл училищеһында белем ала. 1952 йылдан, 30 йыл буйы, «Нөгөш» колхозында өлкән бухгалтер вазифаһын башҡара, аҙаҡ профсоюз комитеты рәйесе итеп һайлана. Был эш менән 1990 йылға тиклем шөғөлләнә һәм 1992 йыл аҙағында хаҡлы ялға китә. Пенсияла булһа ла, халыҡ контроле һәм ревизия комиссияһы рәйесе эштәрен бергә атҡарҙы, ғүмеренең аҙаҡҡы көнөнә тиклем инвалидтар советын етәкләне ул.

Әхтәм Тимерғәле улын күптәр республика, район гәзиттәренә әүҙем яҙышыусы ауыл хәбәрсеһе булараҡ та яҡшы белә ине. Уның тәү башлап ҡулына ҡәләм алыуына «Совет Башҡортостаны» гәзите хәбәрсеһе Хәмит Рәхмәтулла улы Дәүләтшин менән осрашыуы сәбәпсе була. Журналист йәш егеттең матбуғат баҫмаларын уҡыуы менән ҡыҙыҡһына.

- Эйе, уҡыйым, - тип яуап бирә Әхтәм. – Шунһыҙ илдәге, донъялағы хәлдәрҙе белеп барыу мөмкин түгел. Райондағы, республикалағы бөтә хәлдәрҙе гәзит аша уҡып беләм. Минә, бигерәк тә, арҙаҡлы яҡташтарыбыҙ тураһындағы материалдар оҡшай.

- Ә үҙегеҙ колхозығыҙҙың алдынғы кешеләре тураһында гәзиткә яҙып ҡарағанығыҙ юҡмы?

- Яҙып ҡарағаным юҡ. Ә ҡайһы саҡта ундай теләк тыуып ҡуя.

Журналист Әхтәмгә булған теләген һүндермәҫкә, ә уны тормошҡа нисек ашырырға кәрәклеге тураһында урынлы кәңәштәр бирә.

Дәртләнеп ҡулына ҡәләм алған Әхтәмдең оҙаҡламай гәзит биттәрендә мәҡәләләре донъя күрә башлай. Үҙ исем-фамилияһының, яҙғандарының ташҡа баҫылып сығыуы уға яңы илһам, көс-дәрт өҫтәй. Ауылдаштары

менән яҡташтарының да үҙенә ҡарата ихтирамы артҡанын һиҙә ул. Һуңғы көндәренә тиклем ҡәләмен ҡулынан төшөрмәне Әхтәм Тимерғәле улы. Ғүмеренең һуңғы йылдарында ул нәҫеленең шәжәрәһен өйрәнеү менән ныҡлап шөғөлләнде, уларҙы йәштәргә өйрәтеп, тапшырып ҡалдырыуҙы үҙ бурысы тип иҫәпләне.

Әхтәм Тимерғәле улының бик күп мәҡәләләре ваҡытында республика, Мәләүез районы гәзиттәре биттәрендә донъя күрҙе. Бында уның һуғыш осорондағы бала сағын күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итешеүсе «Тынғылыҡ бирмәй хәтирәләр» тигән мәҡәләһе менән китап уҡыусыларҙы таныштырып китеүҙе урынлылыр тип иҫәпләйбеҙ:

«1941 йылдың 22 июнь көнө беҙ, Ноғман ағай, Рауил ҡустым менән өсәүләшеп - ҡуян тубығы, көпшәһе, ҡымыҙлыҡ, ҡаҡы, ҡуҙғалаҡ, күл йыуаһы һәм башҡа ашарға яраҡлы үләндәр йыйырға тип туғай буйҙарын ҡыҙырырға киттек. Бәләкәй һәм Ҙур Туҡмас буйҙарын әйләнеп сығыуға, йыйған үләндәр тосланды. Беҙ ауыл яғына ыңғайланыҡ. Кинәт бригадир һуғып колхозсылар-ҙы эшкә йыя торған һабан төрәненә һуҡҡан саң янғыраны. Уның ваҡытһыҙ яңғырауы шомландырып ебәрҙе.

Ауылға ингәндә ат һарайы эргәһенә бөтә ауыл халҡы йыйылғайны, барыһының да йөҙҙәрен ҡара болот ҡаплағандай. Бер урында ҡатын-ҡыҙҙар илаша, икенсе урында ир-егеттәр әкрен генә һөйләшә. Тәүгеләре әле армияла хеҙмәт иткән ирҙәре, улдары һуғыш афәтенән иҫән-һау әйләнеп ҡайтһын тип илаһа, икенселәре Тыуған илде фашистарҙан ҡурсалау уларҙың иңдәренә төшәсәген аңлап фекер алыша ине. Беҙҙе күргәс, әсәйем менән Нәжиә, Көнһылыу, Вазифа еңгәләр йүгерешеп килеп, ҡайнар йәштәрен биттәргә тамыҙа-тамыҙа, беҙҙе ҡосаҡлап иларға тотондо. Уларға беҙ ҙә ҡушылдыҡ. Ҡояшлы аяҙ көн булһа ла, ҡараңғы кеүек ине. Бәлки, күҙ йәше аша шулай тойолғандыр...

Һуғыштың тәүге йылында аслыҡ бик беленмәне. Әлбиттә, халыҡтың әҙме-күпме запасы бар ине. Беҙҙең дә



бәләкәй ларҙа әҙерәк һолобоҙ булды. Һыйыр - үҙе бер байлыҡ. Әсәйем һолоно иң тәүҙә ҡаҙанда бешекләп ҡайната, аҙаҡ мейестә киптерә, кипкәс, инде килегә һалып төйә, һелкеүестә һелкетеп алғас, ялтлап торған еме ҡала. Уны ҡул тирмәненәдә тартыу минең бурысҡа инә. Тартҡанды иләһәң, иләктә һоло ярмаһы, уның аҫтында оно ҡала. Бынан тыш, һөт-ҡатыҡ, картуф бар. Ағайым менән әсәйем эш көнө өсөн көн һайын бәрәр стакан он алып ҡайта.

1943 йылда аслыҡ ныҡлап ишек шаҡыны. Мартта ғына ла бер ғаиләлә иң тәүҙә әсәһе, шунан һуң бер-бер артлы улы, ҡыҙы аслыҡтан донъя ҡуйҙы. Асығыуҙан, ауырыуҙан бигерәк тә 2-3 йәшлек балалар күп үлде. Һәр ҡәбергә 2-шәр мәйет һалһалар ҙа, көн һайын 2-3 ҡәбер ҡаҙырға тура килде.

Беҙҙең дә һоло бөттө, картуф та аҙайҙы. Мәүлем ағайҙы Ырымбурға мәрхүм атайымдың тунын игенгә алмаштырып алып ҡайтырға ебәргәйнек тә, ул да ни бары 20 ҡаҙаҡ бесәй ҡойроғо орлоғо алып ҡайтып бирҙе. Апрель аҙағында ашау яғы наҡыҫланды. Һөткә ҡушып ашарға бирелә торған картуф тәүҙә дүртәү булһа, был норма икәүгә төштө. Бөтәһе кеүек үк беҙ ҙә яҙ етеүен көттөк. Әсәйебеҙ, ҡара ергә баҫһаҡ, бирешмәбеҙ, тип әүрәтә торғайны. Ысынлап та, ерҙә ҡалған картуф, балтырған, ат ҡолағы, ҡаҡы, ҡуҙғалаҡ, ҡуян тубығы, ҡымыҙлыҡ, ике төрлө йыуа сыға. Сәүкә лә йомортҡа һала башлай, йылғала балыҡ ҡармаҡларға була. Июлдә ер еләге, ҡарағат, бөрлөгән, унан һуң иген дә өлгәрә башлай. Ул саҡта яланда эшләүселәр өсөн ашарға бешерәләр, беҙҙең кеүек балалар ҙа унда барып бәрәр сеүәтә өйрә ашап ҡайта - эшләүселәргә бәрәр стакан булһа ла он бирәләр.

Һуғыш йылдарындағы аслыҡ михнәттәре иҫкә төшһә, әле лә тәндәр эҫеле-һыуыҡлы булып китә. Беҙҙең балалар, уларҙың балалары, тыуасаҡ быуындар аслыҡты, һуғышты күрмәһен ине.

Беҙҙең йылғылар беренсе класҡа 1941 йылда барҙы. Әсәйем дә мине мәктәпкә әҙерләй башланы. Мәләүеҙҙән ҙур ирҙәр күлдәге, бер карта алып ҡайтты. Уныһының йәбештерелгән марляһын һыҙырып алып, минә эстән кейеү өсөн күлдәк тә, салбар ҙа сыға тип шатландырҙы. Уны һүтеп, матурлап урап Сәмиға апайға теккерергә ебәрҙе. Шулай итеп, ике көн эсендә күлдәкле лә, салбарлы ла булдым. Етмәһә, салбарҙың кеҫәһе лә булғас, башым күккә тейҙе. Киндерҙән тегелгән аҫмалы сумка ла әҙер булды.

Мәктәпкә тәү барған көндә уҡытыусыларыбыҙ, беҙҙең менән танышҡас, класҡа индереп ултыртты. Бөтәбеҙ ҙә беренсе тапҡыр ҡулыбыҙға китап, дәфтәр алыуыбыҙға ҡыуанышып, үҙебеҙҙе ҙур кешеләр итеп тойҙоҡ.

1944–1945 йылдарҙа 4-се класты тамамлағандан һуң ауылыбыҙҙан 6 саҡырым алыҫлыҡтағы Смаҡ ауылындағы Арыҫлан ете йыллыҡ мәктәбенә йөрөй башланыҡ. Йөрөп уҡыу арыттырһа ла, асыҡтырһа ла, ошоттороһа ла түҙҙек. Иң ҡыйыны яҙғыһын Моҡас тауынан ағып төшкән Ҡаруйҙы кисеп сығыу булғандыр. Күпселегебеҙҙең аяҡтарында сабата булыу сәбәпле, бөтә ауырлыҡ Әнүәр менән Миниҙиранын итектәренә төшә ине. Сөнки ул итектәрҙе алмашлап кейеп, бер-беребеҙҙе йылға аша ташый торғайныҡ.

Һуғыш ваҡытында колхоздағы бөтә эш ҡарт-ҡоролар, ҡатын-ҡыҙҙар, беҙҙең тиҫтер бала-сағалар иңенә төштө. Һуғышҡа алынмай ҡалған барлы-юҡлы техника, аттар, үгеҙҙәр, хужалыҡтарҙағы һыйырҙарҙы ла егеп, һөрөнтө ерҙәрҙе кәметмәҫкә тырыштылар. Ауыл хужалығы продукттары етештереүҙе арттырыу өсөн ҡулдарынан килгәндең барыһын да эшләнеләр. Улар яҙын сәстеләр, йәйен бесән әҙерләнеләр, көҙөн игеҙ саптылар, урҙылар, көлтә бәйләнеләр. Көлтәләр киппәндән һуң, уларҙы эҫкерттәргә өйҙөләр. Көҙҙән алып ҡышҡы һыуыҡтарҙа ла, аттар ярҙамында әйләндерелеп эшләгән молотилкаларҙа һуғып, ҡул елгәргестәрендә елгәреп иген әҙерләү пункттарына (заготзерно) үгеҙҙәрҙә иген ташы-



ылар. Ҡыш көндәрендә ҡул көсө менән ҡар тоттолар, ерҙәрҙе ашлау өсөн көл, ҡош тиҙәге йыйҙылар.

Тамаҡтары ашҡа туймаған, өҫтәре кейемгә йәлсемәгән, аяҡтары сабатанан башҡа аяҡ кейеме күрмәгән, саң-туҙанда тештәре генә йылтырап күренгән кесе йәштәге балалар иҫкә төшһә, ул ваҡыттағы сабыйҙарҙың көнкүреше ниндәй ҡыҙғаныс булғанлығын тояһың. Беҙҙең тиҫтерҙәрҙең Гитлерҙы әрләй-әрләй, илай-илай ер тырматыуы әле лә иҫтәренән сыҡмайҙыр...»

## АРҘАҠЛЫ ИР УҘАМАНЫ

*Был ир уҙаманы тураһында Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге БР Журналистар союзы премияһы лауреаты, арҙаҡлы өлкән журналисыбыҙ* ***Мостафа Солтановтың*** *«Арҙаҡлы ир уҙаманы» тигән мәҡәләһенән күп фәһемле нәмәләр белә алырһығыҙ.*

* * *

*Бейек кенә тауҙың һай башында*
*Атлунаған тоҡло ерҙәр бар,*
*Ирҙәр менән ирҙәр бер иш түгел,*
*Береһе бишкә торған ирҙәр бар.*

*(Башҡорт халыҡ йыры.)*

Үҙен һәм үҙ халҡын хөрмәтләй белгән мосолман кешеһе үҙенең ете быуын ата-бабаларын исем-шәрифтәре менән белергә тейеш, тиҙәр. Ә бына Свобода ҡасабаһынан хеҙмәт ветераны Ғайса Ҡаҙаҡбаев үҙенең ун биш быуын кешеләренең исем-фамилияларын яттан белә. Ошоноң өсөн генә лә ул, үҙ халҡына хөрмәт менән ҡараусы булараҡ, оло иғтибарға лайыҡ. Ғайса Ҡаҙаҡбаевтың фиҙакәрлеге менән уның ауылдаштары - Түкән ауылы кешеләре үҙ ауылдарының тыуған көнөн ике тапҡыр үткәрә, Тамъян ырыуы башҡорттарының тарихы менән ҡыҙыҡһына, Түкән ауылына тәүге нигеҙ ташын һалыусыны асыҡлай. Әммә Ғайса Һибәтулла улын бер

Беҙҙең йылғылар беренсе класҡа 1941 йылда барҙы. Әсәйем дә мине мәктәпкә әҙерләй башланы. Мәләүездән ҙур ирҙәр күлдәге, бер карта алып ҡайтты. Уныһының йәбештерелгән марляһын һыҙырып алып, минә эстән кейеү өсөн күлдәк тә, салбар ҙа сыға тип шатландырҙы. Уны һүтеп, матурлап урап Сәмиға апайға тектерергә ебәрҙе. Шулай итеп, ике көн эсендә күлдәкле лә, салбарлы ла булдым. Етмәһә, салбарҙың кеҫәһе лә булғас, башым күккә тейҙе. Киндерҙән тегелгән аҫмалы сумка ла әҙер булды.

Мәктәпкә тәү барған көндә уҡытыусыларыбыҙ, беҙҙең менән танышҡас, класҡа индереп ултыртты. Бөтәбеҙ ҙә беренсе тапҡыр ҡулыбыҙға китап, дәфтәр алыуыбыҙға ҡыуанышып, үҙебеҙҙе ҙур кешеләр итеп тойҙоҡ.

1944–1945 йылдарҙа 4-се класты тамамлағандан һуң ауылыбыҙҙан 6 саҡырым алыҫлыҡтағы Смаҡ ауылындағы Арыҫлан ете йыллыҡ мәктәбенә йөрөй башланыҡ. Йөрөп уҡыу арыттырһа ла, асыҡтырһа ла, өшөттөрһә лә түҙҙек. Иң ҡыйыны яҙғыһын Моҡас тауынан ағып төшкән Ҡаруйҙы кисеп сығыу булғандыр. Күпселегебеҙҙең аяҡтарында сабата булыу сәбәпле, бөтә ауырлыҡ Әнүәр менән Минниранның итектәренә төшә ине. Сөнки ул итектәрҙе алмашлап кейеп, бер-беребеҙҙе йылға аша ташый торғайныҡ.

Һуғыш ваҡытында колхоздағы бөтә эш ҡарт-ҡоролар, ҡатын-ҡыҙҙар, беҙҙең тиҫтер бала-сағалар иненә төштө. Һуғышҡа алынмай ҡалған барлы-юҡлы техника, аттар, үгеҙҙәр, хужалыҡтарҙағы һыйырҙарҙы ла егеп, һөрөнтө ерҙәрҙе кәметмәҫкә тырыштылар. Ауыл хужалығы продукттары етештереүҙе арттырыу өсөн ҡулдарынан килгәнден барыһын да эшләнеләр. Улар яҙын сәстеләр, йәйен бесән әҙерләнеләр, көҙөн иген саптылар, урҙылар, көлтә бәйләнеләр. Көлтәләр кипкәндән һуң, уларҙы эҫкерттәргә өйҙөләр. Көҙҙән алып ҡышҡы һыуыҡтарҙа ла, аттар ярҙамында әйләндерелеп эшләгән молотилкаларҙа һуғып, ҡул елгәргестәрендә елгәреп иген әҙерләү пункттарына (заготзерно) үгеҙҙәрҙә иген ташы-



нылар. Ҡыш көндәрендә ҡул көсө менән ҡар тоттолар, ерҙәрҙе ашлау өсөн көл, ҡош тиҙәге йыйҙылар.

Тамаҡтары ашҡа туймаған, өҫтәре кейемгә йәлсемәгән, аяҡтары сабатанан башҡа аяҡ кейеме күрмәгән, сан-туҙанда тештәре генә йылтырап күренгән кесе йәштәге балалар иҫкә төшһә, ул ваҡыттағы сабыйҙарҙың көнкүреше ниндәй ҡыҙғаныс булғанлығын тояһың. Беҙҙең тиҫтерҙәрҙең Гитлерҙы әрләй-әрләй, илай-илай ер тырматыуы әле лә иҫтәренән сыҡмайҙыр...»

## АРҘАҠЛЫ ИР УҘАМАНЫ

*Был ир уҙаманы тураһында Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге БР Журналистар союзы премияһы лауреаты, арҙаҡлы өлкән журналисыбыҙ* ***Мостафа Солтановтың*** *«Арҙаҡлы ир уҙаманы» тигән мәҡәләһенән күп фәһемле нәмәләр белә алырһығыҙ.*

* * *

*Бейек кенә тауҙың һай башында*
*Ат ауынаған төклө ерҙәр бар,*
*Ирҙәр менән ирҙәр бер иш түгел,*
*Береһе бишкә торған ирҙәр бар.*

*(Башҡорт халыҡ йыры.)*

Үҙен һәм үҙ халҡын хөрмәтләй белгән мосолман кешеһе үҙенең ете быуын ата-бабаларын исем-шәрифтәре менән белергә тейеш, тиҙәр. Ә бына Свобода ҡасабаһынан хеҙмәт ветераны Ғайса Ҡаҙаҡбаев үҙенең ун биш быуын кешеләренең исем-фамилияларын яттан белә. Ошонон өсөн генә лә ул, үҙ халҡына хөрмәт менән ҡараусы булараҡ, оло иғтибарға лайыҡ. Ғайса Ҡаҙаҡбаевтың фиҙакәрлеге менән уның ауылдаштары - Түкән ауылы кешеләре үҙ ауылдарының тыуған көнөн ике тапҡыр үткәрә, Тамъян ырыуы башҡорттарының тарихы менән ҡыҙыҡһына, Түкән ауылына тәүге нигеҙ ташын һалыусыны асыҡлай. Әммә Ғайса Һибәтулла улын бер

бының өсөн генә хөрмәтләмәйҙәр. Ул тиҫтәләрсә йылдар буйы совхоздың профсоюз комитеты рәйесе булып эшләп, бөтә был йылдарҙа ябай эшсәндәрҙең мәнфәғәттәре һағында торҙо.

* * *

Ҡәһәрле һуғыш башланған йылда Ғайса атаһының ҡул араһына ингән, эшсән, зирәк малай ине. Түкән ауылында һуғышҡа оҙатыу ҡайғы-хәсрәттәрен, ата-әсәләрҙең, бала-сағаның үҙ туғандарын һуғышҡа ер-һыу илап оҙатыу минуттарын ныҡ хәтерләй. Атаһы Һибәтулла Ҡаҙаҡбаев ғаиләһе менән һаубуллашҡанда ҡатынына:

- Хәлимә, улдарымды нисек тә һаҡлап, үҫтерергә тырыш, улар тиҙ арала һиңә ярҙамсы булыр, донъя хәлен белеп булмай. Дошманды тар-мар итеп, иҫән булһаҡ, ҡайтырбыҙ, - ти.

1942 йылдың ғинуар көндәрендә Ғайса, санаға ат егеп, атаһы менән хушлашып, әсәйемә ярҙамлашырмын, хужалыҡты алып барырбыҙ, тип һүҙ бирә, үҙендә ышаныс тоя, балалыҡ иркәлегән онотҡандай була.

Бәләкәй генә Түкән ауылынан һуғышҡа 37 кеше китә, шуларҙың 18-е яу ҡырында Ватан өсөн ғүмерҙәрен фиҙа ҡыла.

Ярайһы оҙон буйлы, киң яурынлы Һибәтулла Ҡаҙаҡбаевты артиллерияла хеҙмәт итергә ебәрәләр. Совет илһөйәрлеге рухы менән тәрбиәләнгән Ҡаҙаҡбаев хәрби бойороҡтарҙы тиҙ, теүәл үтәүе, тәртипте ныҡлы тотоуы менән айырылып тора. 1943 йылдың башында хәрби частан Ҡаҙаҡбаевтарға хат килә. «Һеҙҙең улығыҙ ҡыйыу һуғышсы. Бер көндә 18 яугирҙы дошман ҡамауынан алып сыҡты. Шуға ул «Батырлыҡ өсөн» миҙалы менән бүләкләнде. Батыр ул үҫтергәнегеҙ өсөн һеҙгә оло рәхмәт», - тип әйтелә хатта. Ә шул йылдың көҙөндә Һибәтулла Ҡаҙаҡбаев ҡаты һуғыштарҙың береһендә батырҙарса һәләк була.

Колхозда тырышып эшләп ударница булған Хәлимә көн дә колхоз эшенә лә йүгерә, балаларын ҡарарға ла



өлгөрә. Һуғыш йылдарында ике тапҡыр ауыл Советы депутаты итеп һайлана. 14 йәшлек Ғайса колхоздың төп эшсе көсөнә әүерелә. Аттар егеп, һабан һөрә, иген сәсә, ураҡта ла эшләй.

Уҡыуға зирәк, һәр эштә өлгөр Ғайса ваҡытын бушҡа үткәрмәй: уҡырға, белем алырға тырыша. Күрше Васильевка ауылына йөрөп уҡып, 7 синыф тамамлай. 1943 йылдың ҡышында Таймаҫ МТС-ына комбайнсылар курсына уҡырға бара. Элек ат менән эшләгән үҫмергә, хәҙер техникаға ултырыу ғәжәп бәхет, рәхәт тойола, шуға ла, техниканы яратып, механизатор һөнәрен яҡшы үҙләштерә, 6 ай уҡып комбайнсы таныҡлығы алып ҡайта, үҙҙәренең колхозында «Коммунар» менән иген урып йыя. Армия сафына хеҙмәткә саҡырылғансы комбайнсы булып эшләй.

1947 йылда ауыл егете Ғайсаның тормошонда яуаплы яңы осор башлана: уны хәрби хеҙмәткә саҡыралар. Ул заманда армияла хеҙмәт итеү егеттәр өсөн почет, сынығыу мәктәбе ине. Мотор геүләүҙәрен яратҡан Ғайса армияла танкист булырмын, тип хыял итә. Ләкин һалдат яҙмышы улай булып сыҡмай.

– Өфөлә, йыйылыу пунктында, 6 көн булғас, – тип хәтерләй Ғайса, - беҙгә СССР Оборона министры бойороғон уҡынылар. Унда, илебеҙҙең ауыр сәнәғәтен күтәреү маҡсатында хәрби хеҙмәткә алынған йәштәрҙе Кемерово шахталарына эшкә ебәрергә, тип әйтелгәйне. Шулай итеп, ауыл егете шахтер булып китә, забойҙа күмер сығара, күмер сығарыу комбайндарында эшләй, шахталарҙың электр механигы вазифаһын башҡара. Ниндәй генә эш ҡушһалар ҙа, ул теүәл, еренә еткереп үтәй, намыҫлы хеҙмәте өсөн бүләкләнә. Өс йыл шахтер булып эшләп, тормош, йәшәү өсөн һәйбәт сынығыу ала. Бер үк ваҡытта әсәһе һәм ҡустылары тураһында хәстәрлек күрә. 1932 йылда тыуған ҡустыһы Ғәфүрҙе үҙ янына алып ФЗО-ла уҡытып, белемле итә.

1951 йылда Ғ. Ҡаҙаҡбаев армиянан тыуған ауылына һалдат кейемендә түгел, шахтерҙар костюмында ҡайта.

Был форма уның бәҫен кәметеү түгел, ә намыҫлы батыр хеҙмәте өсөн юғары баһа ине. Ҡайтҡас та Йомағужа ауылының унған ҡыҙы Факиһа менән тормош ҡора, «Мораптал» совхозында комбайнсы булып эшләй. Тыуған яғының киң баҫыуҙарында иген караптарын йөрөтөүҙә ул ҙур бәхеткә һанай. Ике йыл эшләгәс, Ғайсаны малсылыҡ буйынса бригадир итеп ҡуялар, унан трактор бригадаһында хисапсы, дүрт йыл иген склады мөдире булып эшләй.

Уҡыуға, белемгә әүәҫ Ғайса Ҡаҙаҡбаевты Һарытау ҡалаһының бухгалтерҙар әҙерләү курсына уҡырға ебәрәләр. 6 ай уҡып курсты тик «биш» билдәләренә генә тамамлап ҡайтҡас, Ғайса «Түкән» бүлексәһе бухгалтеры булып эшләй.

Ғайса Һибәт улы Ҡаҙаҡбаевтың ғүмер юлында профсоюзда эшләүе иң оло хеҙмәт, тиһәк, тә хата булмаҫ. Хеҙмәт кешеһенә иғтибарлы, төплө кәңәш биреүсе, ярҙамсыл Ҡаҙаҡбаевты 1961 йылда «Мораптал» совхозының эшселәр комитеты рәйесе итеп һайлап ҡуялар. Ошо вазифаны ул өҙлөкһөҙ 20 йыл намыҫ менән башҡара. Етмешенсе йылдарҙа партком (секретары мәрхүм Ғәзизйән Хәлилов) менән профсоюз комитеты совхозда малсылыҡты үҫтереү, күп һөт етештереү буйынса социалистик ярышҡа әүҙем етәкселек итә. Һауынсыларҙың ярыш һөҙөмтәләре буйынса ай һайын бюллетендәр сығарылып, һәр фермаға еткерелә. Шул йылдарҙа «Мораптал» совхозы һауынсылары, һәр һыйырҙан 3000 килограмм һөт һауып, районда ғына түгел, республикала дан ҡаҙанды.

Кеше күңеле - дарья, уның яҡшы яғын асыу өсөн кешегә йылы һүҙ, дәрт-дарман биреү кәрәк. Дарман тигәне - кешегә эш шарты, хеҙмәтенә тулыһынса түләү булырға тейеш. Һис шикһеҙ ул йылдарҙа был тәңгәлдә профсоюз комитеты, уның етәксеһе Ғ. Һ. Ҡаҙаҡбаев күп көс һалған. СССР профсоюздарының XVI съезында делегат булып ҡатнашыуы Ғайса Һибәт улының



әүҙем эшенә оло баһа, ғүмерендә онотолмаҫлыҡ бәхетле ваҡиға булып ҡала.

Үҙенең эшмәкәрлегендә ойоштора белеүсе, тынғыһыҙ, ваҡытты бушҡа үткәрмәүсе кеше, тигәйнек Ҡаҙаҡбаев тураһында. Шуға тағы ла дәлил: ул ситтән тороп уҡып, Стәрлетамаҡ зоотехникумында ҡыҙыл диплом ала.

Профсоюзда 20 йыл эшләгәндән һуң да Ғайса Ҡаҙаҡбаев йәмәғәт эштәренән ситләшмәй, дүрт йыл ауыл советы рәйесе булып халыҡҡа хеҙмәт итә.

Хәҙерге заманда һәр бер предприятиела, ойошмала юристар вазифаһы булдырылған, уларҙың бурысы кеше хоҡуғын һаҡлауҙан, закондарҙы дөрөҫ ғәмәлгә ашырыуҙан тора. Һәйбәт белемле, ҙур тормош тәжрибәле ғәҙел Ҡаҙаҡбаев һуңғы өс йыл совхоз юрисы булып хеҙмәт итә. Бәхәсле мәсьәләләрҙе хәл итергә, дөрөҫлөк табырға ярҙамлаша. Күрәһең, Ғайсаның был һөнәре уның өсөн мәңгелек - ғүмерлек булып ҡалған.

- Хәҙерге көндә лә кешеләр күп юридик һорауҙар менән миңә килә, - ти Ғайса Һиҙиәт улы. - Мин уларға ҡәнәғәтлек менән яуап бирәм, закондарҙы аңлатырға, ярҙам итергә тырышам.

Ғайса Ҡаҙаҡбаевтың кешеләргә тағы бер изгелекле эше тураһында әйтмәһәк, яҙыҡ булыр ине. Ул үҙ аллы уҡып Ҡөрьән шәриф сүрәләрен уңышлы үҙләштерә, ике мәртәбә Өфөгә барып, Башҡортостан мөфтөйө Нурмөхәммәт хәҙрәткә имтихан тапшырып, имамлыҡ вазифаһына танытма алып ҡайта, мосолмансылыҡҡа әүҙем эш алып бара. Никах уҡый, исем ҡуша, мәрхүмдәрҙе йыназа уҡып, һуңғы юлға оҙата. Изге эштәре өсөн кешеләрҙән мең-мең рәхмәттәр ала.

Алма ағасынан алыҫ төшмәй, тиҙәр бит. Ғайса йәштән һөйгән Факиһаһы менән татыу ғүмер итеп өс ул үҫтерә. Өлкәндәре инженер-механик - нефтсы, икенсеһе Әкрәм - врач-невропатолог, Стәрлетамаҡта йәшәй. Кинйә улы Әмир ағаларынан уҙҙырып ебәрә: Өфөлә медин-

ститут тамамлай, күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтында эшләй, медицина фәндәре кандидаты тигән ғилми дәрәжә яклай. Бөгөн ул күҙ ауырыуҙарын лазер менән дауалау буйынса үҙ клиникаһын асҡан. Әмир Ғайса улы сит илдәрҙә фәнни симпозиумдарҙа ҡатнаша. Әйтәйек, бер ваҡыт Италияла булған ошондай йыйылышта инглиз телендә доклад менән сығыш яһай. Әмирҙең хәләл ефете Рәхимә лә врач-офтальмолог.

- Ейән, ейәнсәрҙәребеҙ өсөн ҡыуанабыҙ, улар ҙа вуздарҙа белем ала, - ти Ҡаҙаҡбаевтар.

## КЕНӘЗ НӘҪЕЛЕНӘН СЫҠҠАН АҠҺАҠАЛ

Йома һайын Күмертау мәсетенә ашығыусы оло йәштәге мосолмандар араһында бер бабайҙы йыш осратам. Форсат сығып, уның менән яҡындан танышҡас, Ноғман Усман улы Әбүбәкеров икәнен белдем уның.

Иң баштан уҡ оҙон, мыҡты кәүҙәһен тура тотоп, ғорур ҙа, ышаныслы ла баҫып йөрөүе менән иғтибарҙы йәлеп итә был хеҙмәт ветераны. Мөләйем, итәғәтле ҡарашы, иппе һөйләшеүе менән һине тиҙ арала үҙенә арбап ала, йәнле, кинәйәле әңгәмә-һөйләшеүҙәре менән күнелдә бөтмәҫ-төкәнмәҫ йылы тойғолар ҡалдыра.

Аҙаҡ белеүемсә, Ноғман бабай минә нәҫел-нәсәптәш тә икән әле. Атаһы Усман Әбүбәкеров 1928 йылда яңыртып төҙөгән нәҫел тармағы түбәндәгесә бирелгән: *Таман бей - Балун бей - Мотай бей - Ҡырай бей - Шәғәле Шаһман кенәз - Буралы - Илсекәй - Теләүкәй - Әтекәй - Ҡунаҡҡужа - Хәлит - Әбүбәкер - Мөхәмәтғариф - Усман - Ноғман.*

Ноғман Әбүбәкеров 1929 йылда хәҙерге Көйөргәҙе районына инеүсе Йомағужа ауылында тыуа. Атаһы Усман заманына күрә уҡымышлы, аң-белемле башҡорт уҙамандарының береһе була. 1917 йылда Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте башланғас, уға иң тәүгеләрҙән булып ҡушыла.



- Беренсе Герман һуғышынан атайым, аяғы һынып, ҡаты яраланып ҡайтҡан. Шунан 1918-1919 йылдарҙа Зәки Вәлиди менән Темәстә Башҡорт хөкүмәте эшен ойоштороуҙа, юлға һалышыуҙа ҡатнашып йөрөгән. Ленин автономияға ризалыҡ биргәс, тыуған ауылына әйләнеп ҡайтҡан, - тип һөйләй Ноғман бабай. - Большевиктар милли-азатлыҡ хәрәкәтен ауыҙлыҡлауға ирешкәс тә, Зәки Вәлиди атайымды онотмаған. Ул бер көндө, алты һыбайлы эйәртеп, беҙҙең ауылға, атайым йортона, килеп төшкән. «Усман, әйҙә ситкә сығып китәйек, беҙгә барыбер ҙә көн булмаҫ бында», - тигән. «Ауылымды ташлап китмәйем, ни күрһәм дә тыуған еремдә халҡым менән бергә күрермен», - тип яуап биргән уға атайым. Аҙаҡ ауылыбыҙҙа беренсе колхоз рәйесе булып киткән. Шуға ҡарамаҫтан революция осорондағы эшмәкәрлеген соҡоп сығарып, милләтселектә ғәйепләп, 1932 йылда атайымды 5 йылға һис ерле юҡҡа төрмәгә ултыртып ҡуялар. Ул саҡта минә бары өс кенә йәш була. Түгелеп илаған әсәйемә: «Рабиға, ни булһа ла, балаларҙы ҡара, мин оҙаҡ йөрөмәм, ҡайтырмын», – тигән ул ҡулға алып киткән саҡтарында. Нахаҡҡа хөкөм ителеп, ике йыл ярым ултырып ҡайта. Ауылда бригадир булып эшләй, аҙаҡ Илкәнәй ауыл Советы секретары вазифаһын башҡара атайым.

1937 йылда, йәше еткәс, Ноғман башланғыс мәктәпкә уҡырға бара (шул уҡ йылда, аяғы ҡаты һыҙлап, атаһы мәрхүм булып ҡала). 4 синыфты тамамлаған малай, үгеҙ егеп, колхоз баҫыуын һөрөргә сыға. Уның хеҙмәт юлы ана шулай бик иртә, әле ныҡлап быуынға ултырмаған, үҫмер сағынан уҡ башлана.

Күп тә тормай немец фашистары илебеҙгә һуғыш аса. Еңеү көнөнә тиклем күмәк хужалыҡтың бөтә ауыр эштәрен алып барыу Ноғман менән уның йәштәш-ҡорҙаштарының сибек иңдәренә төшә. Хөкүмәт йәш егеттең тылдағы хеҙмәт батырлығын юғары баһалай, һәм ул 1946 йылда, 17 генә йәшендә, «Бөйөк Ватан һуғышында фиҙакәр хеҙмәте өсөн» миҙалы менән бүләкләнә.

1949 йылда Совет Армияһына хеҙмәткә саҡырыла. Көйөргәҙе районынан егерме өс яҡташы менән Төркиә сигендәге Ахалкалак ҡалаһында хеҙмәт итергә тура килә уға. Күп мажаралы ла, ауыр ҙа ваҡиғалар шаһиты булырға яҙа Ноғманға һалдатта сағында.

Шулай бер ваҡыт хәрби задание буйынса Кура йылғаһын аша кисеп сығырға тейеш булалар. Билдәләнгән урынға барып етәләр. Йылға шул хәтле лә шәп ағымлы: ағым һыу шаулап, үкереп аға.

- Йә, ҡайһығыҙ башлап сыға! - тип ҡысҡыра командир. Утыҙ биш кешенән береһенең дә ҡыйыулығы етмәй. Ноғман Әбүбәкеров:

- Мин сығам, - ти ҙә, оҙон арҡанды алып, биленә бәйләп, таяҡты ҡулына тотоп. - Минең арттан барығыҙ, - ти ҙә һыуға төшөп китә. Ул һыуҙың тымыҡ, тәрән яғына китә. Ә арттан командир:

- Тәрәнгә барма, батаһың! - тип ҡысҡыра.

Ноғман иһә:

- Минең арттан ҡалмағыҙ, һайға тартмағыҙ, юғиһә ағын һыуға ағып китерһегеҙ, – ти.

Бына шулай, арҡан-бауға тотоноп, барыһы ла Кура йылғаһын имен-аман кисеп сыға. Хеҙмәттәштәре башҡорт егетен уратып ала ла:

- Ниндәй ғәжәп кешеһең һин! - тип аптыраша.

- Йылғаны нисек кисергә икәнен ҡайҙан беләһең? Кем өйрәтте һине? Ҡайҙа тыуып үҫтең? - тип һораша командир.

- Башҡортостанда тыуып үҫтем. Беҙҙә Ағиҙел йылғаһы бар. Шул йылғала йәйҙәрен һал ҡыуыуҙа ҡатнашып, һалда Ағиҙел буйлап күп йөрөргә тура килде, шунда өйрәндем, - ти Әбүбәкеров.

Ноғман Әбүбәкеров хеҙмәт иткән гвардия дивизияһының миномётсылары аттар менән эш итә. Миномёттарҙы аттарға тейәп, тауҙарға менергә тура килә. Ошондай ҡатмарлы, тиҙлек, оҫталыҡ талап иткән эштәрҙә лә рядовой Әбүбәкеров үҙен таһыллы, унған яугир итеп күрһәтә.



Миномётсылар Кавказ аръяғы хәрби округы ғәскәрҙәренең ҙур манёврҙарында ҡатнаша. Ноғман Әбүбәкеров, манёвр көндәре бик ҡыҙыҡлы үтте, унда Совет Армияһының күренекле полководецтары Антонов, Конев, Казаковтар ҡатнашты, тип хәтергә ала. Полк командирынан алған рәхмәт открыткаһын әле лә ҡәҙерләп һаҡлай. Унда гвардеец Әбүбәкеровтың манёвр занятиеларында юғары оҫталыҡ, саялыҡ күрһәтеүе хаҡында яҙылған.

1952 йылдың көҙөндә Ноғман Йомағужаға ҡайтып төшә. Ул саҡтағы Бабай ҡасабаһына, хәрби комиссариатҡа, килеп, хәрби хеҙмәт ваҡытын тултырып, иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуы хаҡында хәбәр итә. Хәрби комиссар һалдаттың ғәмәл дәфтәре иҫәпләнгән шәхси карточкаһын алып ҡарай ҙа 37 тапҡыр рәхмәт белдереүҙе күреп, ғәжәпләнеүен йәшерә алмайынса, телен шартлатырға мәжбүр була, иҫе китеп башын сайҡай:

- Минең әлегәсә бындай һалдатты күргәнем юҡ, - ти ул һәм Ноғман Әбүбәкеровты йәш шахтерҙар ҡалаһына эшкә килергә саҡыра.

- Мине колхоздан ебәрмәйҙәр бит, - тип күңелһеҙ генә яуап ҡайтара тегеһе.

- Үҙем паспорт алырға ярҙам итешермен, - ти хәрби комиссар.

Шул көндән алып Н. Әбүбәкеров хаҡлы ялға сыҡҡансы разрезда эшләй. Ғүмеренең иң матур йылдарын шахтер һөнәренә арнай. Ул бында ла тырышып хеҙмәт итә һәм 1961 йылда Күмертау шахтерҙары араһынан иң беренсе булып I дәрәжә «Шахтер даны» түш билдәһе менән, унан һуңғы йылдарҙа бөтәһе 9 миҙал менән бүләкләнә.

Ноғман Усман улы, башлы-күҙле булып, өс ир-егет тәрбиәләп үҫтерҙе. Ул-ейәндәренә үҙ нәҫел-нәсәбе тураһында, атаһы яҙып ҡалдырған ҡулъяҙма китапҡа, шәжәрәгә, тарих буйынса китаптарға таянып, тәфсирләп һөйләп биреүҙе үҙ бурысы тип иҫәпләй. Осрашҡан һайын:

- Шәғәле Шаһман кенәз нәҫеленән сыҡҡан ир-атта, ҡатын-ҡыҙ ҙа башҡа милләттәштәребеҙ өсөн бар йәһәттән дә өлгө булырға тейеш. Сөнки беҙ - милләтебеҙҙен ысын йөҙөн тәшкил итешеүсе ырыу-нәҫелдәрҙең береһе бит, - тип һүҙен тамамлай Ноғман Усман улы. Уның үҙенең ғүмер һәм хеҙмәт юлы быға иң сағыу миҫал.



# III бүлек. ШӘҒӘЛЕ ШАҺМАН НӘҪЕЛЕ ШӘЖӘРӘЛӘРЕ

## ИНЕШ

**Ағас тамырынан әҙәм тамыры күп.**
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*

Шәжәрә - билдәле бер нәҫел-ырыуҙың килеп сығышын, таралышын күрһәткән генеалогик яҙма, нәҫел-ырыуҙың тармаҡланып китеүен күрһәткән һыҙма. Уға ир яғынан ырыу, ара, нәҫел, аймаҡ ағзаларының исемдәре, тарихи ваҡиғалар, ырыу тормошондағы мөһим факт-мәғлүмәттәр теркәлеп барған.

Һәр ағастың тамыры, олоно, япраҡтары булған кеүек, ата-бабаларыбыҙҙың да тамырҙары бар. Үҙе олон булһа, балалары - ботаҡ, ейән-бүләләре - япраҡ.

Шәжәрә һүҙе киң мәғәнәне лә аңлата. Ул легендалар менән бергә һәр быуындың ниндәй социаль ҡатламдарҙан тороуын, уларҙың тормошондағы мөһим ваҡиғаларҙы үҙ эсенә ала.

Боронғораҡҡы Шәғәле Шаһман нәҫеле шәжәрәләре, башлыса, XVI-XIX быуаттарҙағы ырыу башлыҡтары, кенәз-тархандар, дин әһелдәре йәғни башҡорт йәмғиәтенең бай ҡатлам вәкилдәре исемдәренән генә торған. Беҙ, төрлө тарихи сығанаҡтарға, информаторҙарҙан алынған мәғлүмәттәргә таянып, был нәҫелдең 20-22 быуынын эсенә алған шәжәрәләрен яңыртып төҙөргә тырыштыҡ. Айһы бер ауылдарҙа йәшәүсе был нәҫел вәкилдәренең шәжәрәләре әлегә тулы түгел. Киләсәктә улар тулыландырылыр, яңы быуындар өҫтәлеп, тағы ла яңыртылыр тигән изге теләктә ҡалабыҙ.

Ҡайһы берәүҙәр уйлағанса, шәжәрәләр - тарих төпкөлөндә тороп ҡалған ҡулъяҙма ҡомартҡыларҙың бер төрө, тип кенә фекер йөрөтөү дөрөҫ түгел. Бөгөн килеп кимммәтле был сығанаҡҡа иғтибар арта, ул хәтерҙә генә биләмәй, ә ғәмәлгә, тормошҡа йәйләп ҡайта бара. Был хаҡта яҙыусы Зөфәр Толомғужин шулай тип яҙып сыҡты: «Ҡыҫҡаһы, атай-олатайҙарыбыҙ йолаларына, тәр-

биәүи алымдарға патриархаль тип ҡарамай, улар нигеҙендә йәш быуынды тәрбиәләүгә тотонһаҡ, цивилизациялы тормош шауҡымында барлыҡҡа килгән эскелек, наркомания, тәмәке тартыу кеүегерәк насар ғәҙәттәрҙән милләтебеҙҙе арындырырбыҙ, унын сафлығын һаҡлап ҡалып, демографик үҫешенә лә өлгәшербеҙ».

Әгәр йәш быуын үҙенең данлыҡлы башҡорт кенәзе Шәғәле Шаһман нәҫеленән икәнлеген белеп, шул нәҫелдән сыҡҡан арҙаҡлы кешеләр менән аралашып, уларҙың кәңәшенә ныҡлы ҡолаҡ һалып үҫһә, бер ваҡытта ла эскесе йә наркоман булмаясаҡ, был эштең оят, кешелек дәрәжәһен кәмһетеүсе икәнлеген аңлаясаҡ. Шуға күрә һәр ҡайһыбыҙға үҙ нәҫелебеҙҙең шәжәрәһен белеү һәм уларҙы балаларыбыҙға өйрәтеү фарыз. Шәғәле Шаһман нәҫеленән булған һәр ата-әсә балаларына, ауылдың оло быуын кешеләре: аҡһаҡалдар менән ил инәләре ауылдаштарына, нәҫелдәштәренә, беҙҙең затта төрмәгә ултырыусылар, эсеп, ялҡауланып, донъя көтә алмаусылар, утыҙға еткәнсе өйләнмәй йөрөүселәр, айырылышыусылар, ҡатнаш никахҡа инеүселәр, балаларына сит халыҡ исемдәрен ҡушыусылар булырға тейеш түгел, тип аңлатыу һәм тәрбиә эше алып барырға бурыслы. Бына шунда ғына түбәндә килтерелеүсе шәжәрәләр үҙ бурысын тулыһынса үтәй алыр. Беҙ ҙә, алдыбыҙға ҡуйған бурысыбыҙға ирештек, тип иҫәпләрбеҙ.

Һәр кеше үҙ нәҫел ағасындағы яҡшы сифаттарҙы һаҡлап, уны тағы ла яҡшыртырға тырышырға тейеш. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Румиль Талғат улы Аҙнабаев һүҙҙәре менән әйткәндә: «Тарих төпкөлөнән килгән абруйлыҡты белеү кеше психикаһын үҙгәртә, ул тәртипкә килә, үҙен бөтөнләй икенсе, дәрәжәле итеп тота, шәхес итеп һиҙә башлай».

Беҙ ҙә тиндәр араһында тиң булыу, үҙ урыныбыҙҙы билдәләү, асылыбыҙҙы белергә тырышыу маҡсатында түбәндә килтерелеүсе шәжәрәләрҙе ентекләп өйрәнәйек, балаларыбыҙға өйрәтәйек, киләсәк быуындарыбыҙға мираҫ итеп ҡалдырайыҡ, ҡәҙерле ҡан-ҡәрҙәштәр!



1-се ҡушымта

# ШӘҒӘЛЕ ШАҺМАНДАН ҒӘЛИГӘ ТИКЛЕМГЕ ШӘЖӘРӘ*

1. Шәғәле Шаһман

I дәрәжә

2:1 Бураш
3:1 Буралы

II дәрәжә

4:2 Илсекәй Бураш улы
5:2 Ҡужымбирҙе Бураш улы
6:2 Тәнребирҙе Бураш улы
7:2 Кенәз Яңыбирҙе Бураш улы
8:3 Туҡмайрыҡ Буралы улы
9:3 Тоҡомбәт Буралы улы

III дәрәжә

10:4 Беткәй Илсекәй улы
11:5 Һөйәр тархан Ҡужымбирҙе улы
12:6 Жуашай Тәнребирҙе улы
13:8 Аҡһары Туҡмайрыҡ улы
14:9 Юлай Тоҡомбәт улы
15:9 Кинйә Тоҡомбәт улы
16:9 Күскен Тоҡомбәт улы
17:9 Ҡулай Тоҡомбәт улы
18:9 Ҡазан-тархан Тоҡомбәт улы

IV дәрәжә

19:10 Моҡас Беткәй улы
20:11 Муса Һөйәр-улы
21:12 Ҡурсай Жуашай улы

** Шәжәрә башҡорт ғалимдары Р. М. Булгаков менән М. Х. Нәҙерголов төҙөп, баҫтырып сығарған «Башкирские родословные» (Уфа, «Китап», 2002 г., 124-128-се биттәр.) китабынан алынды.*

22:13 Жилкәй Аҡһары улы
23:13 Йыйынбай Аҡһары улы
24:13 Ноғай Аҡһары улы
25:14 Баныҡ Юлай улы
26:15 Ялсы Кинйә улы
27:16 Бикмәт Күскен улы
28:17 Ураз Ҡулай улы
29:18 Үрәкәй Ҡазан-тархан улы

V дәрәжә

30:19 Ҡасҡын Моҡас улы
31:20 Ғүмәр Муса улы
32:21 Ҡарасман Ҡурсай улы
33:21 Йәүай Ҡурсай улы
34:21 Кинйәгол Ҡурсай улы
35:22 Шыугәрәй Жилкәй улы
36:22 Аҡтым Жилкәй улы
37:23 Тенли Йыйынбай улы
38:24 Балтас Ноғай улы
39:25 Бозоҡ Баныҡ улы
40:26 Ҡызырильяс Ялсы улы
41:27 Русембәт Бикмәт улы
42:28 Ҡыйҡыуат Ураз улы
43:29 Ишбулат Үрәкәй улы

VI дәрәжә

44:30 Ноғман Ҡасҡын улы
45:31 Хоҙайбирҙе Ғүмәр улы
46:33 Йомай Йәүай улы
47:33 Мораҙым Йәүай улы
48:34 Муллағол Кинйәгол улы
49:35 Бикшауай Шыугәрәй улы
50:35 Сибек Шыугәрәй улы
51:35 Ярлыҡап Шыугәрәй улы
52:36 Күсей Аҡтым улы
53:36 Иҫәркәп Аҡтым улы
54:37 Ишҡыуат Тенли улы



55:38 Түкән Балтас улы
56:39 Ҡасбулат Бозоҡ улы
57:41 Хөсәйен Русембәт улы
58:42 Ҡотло Ҡыйҡыуат улы
59:43 Муса Ишбулат улы

VII дәрәжә

60:44 Фәтхулла Ноғман улы
61:46 Ишбулат Йомай улы
62:48 Мәүлит Муллағол улы
63:48 Яхъя Муллағол улы
64:48 Йәнебәк Муллағол улы
65:48 Йәғәфәр Муллағол улы
66:48 Ҡыҙбәк Муллағол улы
67:48 Үзбәк Муллағол улы
68:48 Ҡотош Муллағол улы
69:49 Үләкәй Бикшауай улы
70:50 Торсонбай Сибек улы
71:51 Текәй Ярлыҡап улы
72:52 Ишәй Күсей улы
73:53 Ирмеш Иҫәркәп улы
74:54 Солтанморат Ишҡыуат улы
75:55 Ғәбделкәрим Түкән улы
76:55 Сәйетбаттал Түкән улы
77:55 Ҡаҙаҡбай Түкән улы
78:55 Юлай Түкән улы
79:55 Ишбулат Түкән улы
80:56 Айтуған Ҡасбулат улы
81:58 Таймаҫ Ҡотло улы
82:58 Әхмәр Ҡотло улы

VIII дәрәжә

83:62 Мөхәмәтхәсән Мәүлит улы
84:62 Йәнеш Мәүлит улы
85:62 Хөсәйен Мәүлит улы
86:62 Хоҙайбирҙе Мәүлит улы

87:63 Буранғол Яхъя улы
88:64 Йәһүҙә Йәнебәк улы
89:64 Әсфәндиәр Йәнебәк улы
90:65 Хәбибулла Йәғәфәр улы
91:66 Хоҙайбирҙе Ҡыҙбәк улы
92:67 Кинйәбай Үзбәк улы
93:69 Күсемхан Үләкәй улы
94:71 Булат Текәй улы
95:73 Теләүбай Ирмеш улы
96:73 Теләүембәт Ирмеш улы
97:74 Әмир Солтанморат улы
98:74 Әшир Солтанморат улы
99:77 Йософ Ҡаҙаҡбай улы
100:78 Әминбай Юлай улы
101:80 Ғәбделкәрим Айтуған улы

IX дәрәжә

102:89 Кинйәбай Әсфәндиәр улы
103:89 Сөләймән Әсфәндиәр улы
104:89 Дауыт Әсфәндиәр улы
105:93 Аҡайхан Күсемхан улы
106:94 Ишдәүләт Булат улы
107:95 Сәйфелмөлөк Теләүбай улы
108:96 Байтеләү Теләүембәт улы
109:96 Байгилде Теләүембәт улы
110:100 Йәрмөхәмәт Әминбай улы

X дәрәжә

111:106 Байморат Ишдәүләт улы
112:106 Ишмөхәмәт Ишдәүләт улы
113:107 Сәйфетдин Сәйфелмөлөк улы
114:108 Ибәтулла Байтеләү улы
115:108 Сәфәрғәли Байтеләү улы
116:108 Фәйзулла Байтеләү улы
117:108 Фәтхулла Байтеләү улы



XI дәрәжә

118:111 Рамаҙан Байморат улы
119:113 Хәйретдин Сәйфетдин улы
120:113 Фәтхетдин Сәйфетдин улы
121:114 Ниғмәтулла Ибәтулла улы
122:116 Ғәйзулла Фәйзулла улы

XII дәрәжә

123:118 Ҡотлоғәлләм Рамаҙан улы
124:118 Ҡотлозаман Рамаҙан улы
125:119 Сәлих Хәйретдин улы
126:119 Хәйҙәр Хәйретдин улы
127:119 Ғәлләметдин Хәйретдин улы
128:120 Мифтахетдин Фәтхетдин улы
129:120 Хәйбитдин Фәтхетдин улы
130:121 Сәйфулла Ниғмәтулла улы
131:121 Ғәйнетдин Ниғмәтулла улы
132:121 Ғиззәтулла Ниғмәтулла улы
133:122 Хәбибулла Ғәйзулла улы
134:122 Миңлезакир Ғәйзулла улы
135:122 Заһизулла Ғәйзулла улы
136:122 Ғарифулла Ғәйзулла улы

XIII дәрәжә

137:123 Ҡотләхмәт Ҡотлоғәлләм улы
138:123 Шәйәхмәт Ҡотлоғәлләм улы
139:124 Миңлеяр Ҡотлозаман улы
140:124 Ғәли Ҡотлозаман улы

2-се ҡушымта

# УСМАН ӘБҮБӘКЕРОВ ЯҢЫРТЫП ТӨҘӨГӘН ШӘҒӘЛЕ ШАҺМАН НӘҪЕЛЕ ШӘЖӘРӘҺЕ

1 Таман бей

I дәрәжә

2:1 Балун бей

II дәрәжә

3:2 Тамъян бей

III дәрәжә

4:3 Уразай бей

IV дәрәжә

5:4 Мотай бей

V дәрәжә

6:5 Ҡырай бей

VI дәрәжә

7:6 Шағәле Шаһман кенәз

VII дәрәжә

8:7 Сеүә
9:7 Буралы
10:7 Бураш

VIII дәрәжә

11:8 Тежәмәргән Сеүә улы
12:9 Илсекәй Буралы улы
13:9 Туҡмайрыҡ Буралы улы
14:10 Тәңребирҙе Бураш улы
15:10 Яңыбирҙе Бураш улы



IX дәрәжә

16:11 Шағай Тежәмәргән улы
17:12 Теләүкәй Илсекәй улы
18:13 Аҡһары Туҡмайрыҡ улы
19:15 Ҡужабирҙе Яңыбирҙе улы

X дәрәжә

20:16 Туҡһары Шағай улы
21:16 Алась Шағай улы
22:17 Йомағужа Теләүкәй улы
23:17 Әтекәй Теләүкәй улы
24:17 Моҡас Теләүкәй улы
25:18 Ноғай Аҡһары улы
26:19 Сыуашай Ҡужабирҙе улы

XI дәрәжә

27:21 Ҡасай Алась улы
28:22 Йомағол Йомағужа улы
29:23 Дәүләтхужа Әтекәй улы
30:23 Ҡунаҡҡужа Әтекәй улы
31:23 Ғәлимхужа Әтекәй улы
32:24 Ҡасҡын Моҡас улы
33:24 Ҡотлоғужа Моҡас улы
34:24 Уразбай Моҡас улы
35:24 Иҙәге Моҡас улы
36:25 Түкән Ноғай улы
37:25 Балтас Ноғай улы
38:26 Сафәр Сыуашай улы
39:26 Һөйәр Сыуашай улы

XII дәрәжә

40:27 Аҡманай Ҡасай улы
41:28 Сафа Йомағол улы
42:28 Шәрип Йомағол улы
43:29 Ғәлимхужа Дәүләтхужа улы
44:30 Хәлит Ҡунаҡҡужа улы
45:30 Сыуаҡбай Ҡунаҡҡужа улы
46:30 Буранбай Ҡунаҡҡужа улы

47:31 Ғәбделсабир Ғәлимхужа улы
48:31 Мөхәмәтхафиз Ғәлимхужа улы
49:33 Көсәпкол Ҡотлоғужа улы
50:34 Хәбибулла Уразбай улы
51:35 Сәйфетдин Иҙәге улы
52:38 Теләүембәт Сәфәр улы
53:38 Аҡмәмбәт Сәфәр улы
54:39 Муса Һөйәр улы

XIII дәрәжә

55:40 Солтанғол Аҡманай улы
56:40 Ҡорманғол Аҡманай улы
57:41 Ғәлләм Сафа улы
58:44 Әбүбәкер Хәлит улы
59:45 Ҡолой Сыуаҡбай улы
60:46 Сәғит Буранбай улы
61:46 Ғәбит Буранбай улы
62:47 Насретдин Ғәбделсабир улы
63:48 Сафиулла Мөхәмәтхафиз улы
64:48 Заһиҙулла Мөхәмәтхафиз улы
65:48 Сәйфулла Мөхәмәтхафиз улы
66:50 Вәлит Хәбибулла улы
67:51 Камалетдин Сәйфетдин улы
68:52 Илбай Теләүембәт улы
69:52 Бурас Теләүембәт улы
70:54 Ғосман Муса улы
71:54 Ғүмәр Муса улы
72:54 Исмаҡ Муса улы
73:54 Ғайса Муса улы

XIV дәрәжә

74:55 Сорағол Солтанғол улы
75:56 Сәңкебай Ҡорманғол улы
76:56 Мөхәммәт Ҡорманғол улы
77:56 Бустыбай Ҡорманғол улы
78:56 Ҡотлогилде Ҡорманғол улы
79:57 Сабит Ғәлләм улы
80:57 Сәғит Ғәлләм улы



81:58 Мөхәмәтғариф Әбүбәкер улы
83:58 Мөхәмәтғәлим Әбүбәкер улы
84:60 Мәхмүт Сәғит улы
85:60 Әхмәт Сәғит улы
86:60 Әхтәм Сәғит улы
87:61 Ғәббәс Ғәбит улы
88:62 Зиннәтулла Насретдин улы
89:63 Сәхиулла Сафиулла улы
90:63 Һибәтулла Сафиулла улы
91:64 Фәткулла Заһиҙулла улы
92:65 Хәлиулла Сәйфулла улы
93:65 Нурулла Сәйфулла улы
94:67 Мөхәммәтйән Камалетдин улы
95:68 Илкәнәй Илбай улы
96:69 Аҡмәмбәт Бурас улы
97:69 Әхтәм Бурас улы
98:72 Аллабирҙе Исмаҡ улы
99:72 Дауыт Исмаҡ улы
100:72 Исламғол Исмаҡ улы
101:73 Ишҡол Ғайса улы

XV дәрәжә

102:74 Ишкенә Сорағол улы
103:75 Ниғмәтулла Сәңкебай улы
104:81 Үсман Мөхәмәтғариф улы
105:81 Ғүмәр Мөхәмәтғариф улы
106:81 Ғәли Мөхәмәтғариф улы
107:89 Ғиниәтулла Сәхиулла улы
108:89 Һиҙиәтулла Сәхиулла улы
109:94 Миңлеғужа Мөхәмәтйән улы
110:101 Вәлит Ишҡол улы

XVI дәрәжә

111:102 Ильяс Ишкенә улы
112:102 Кейекбай Ишкенә улы
113:103 Мөхәммәтша Ниғмәтулла улы

3-сө ҡушымта

# МИӘКӘ РАЙОНЫ ҠОЛТАЙ-ҠАРАН АУЫЛЫНДА СӘҒӘҘИ ӘСФӘНДИӘР УЛЫ ЯНЫШЕВТА ҺАҠЛАНҒАН ШӘҒӘЛЕ ШАҺМАН НӘҪЕЛЕ ШӘЖӘРӘҺЕ

## Тоҡомбәт нәҫеле

1. Туман бей

I дәрәжә

2.1 Киндар бей

II дәрәжә

3:2 Нахмәт бей

III дәрәжә

4:3 Басман хан

IV дәрәжә

5:4 Айҡын бей

V дәрәжә

6:5 Айҙарали бей

VI дәрәжә

7:6 Шәғәле Шаһман кенәз

VII дәрәжә

8:7 Буралы

VIII дәрәжә

9:8 Тоҡомбәт Буралы улы

IX дәрәжә

10:9 Ҡаҙан тархан Тоҡомбәт улы



11:9 Кинйә Тоҡомбәт улы
12:9 Көсөк Тоҡомбәт улы
13:9 Ҡулай Тоҡомбәт улы
14:9 Юлай Тоҡомбәт улы

X дәрәжә

15:10 Үрәкәй Ҡаҙан тархан улы
16:11 Ялсы Кинйә улы
17:11 Ишкенә Кинйә улы
18:12 * Көсөк улы
19:12 Бикмәт Көсөк улы
20:13 Ураҙ Ҡулай улы
21:14 Януҡ Юлай улы

XI дәрәжә

22:15 Ишбулат Үрәкәй улы
23:16 Ҡыҙырильяс Ялсы улы
24:17 Йософ Ишкенә улы
25:19 Ҡанмырҙа Бикмәт улы
26:19 Русембәт Бикмәт улы
27:20 Ҡыйҡыуат Ураҙ улы
28:21 Баныҡ Януҡ улы

XII дәрәжә

29:22 Муса Ишбулат улы
30:23 Иҫәнбәт Ҡыҙырильяс улы
31:24 Бикташ Йософ улы
32:25 Илсеғол Ҡанмырҙа улы
33:26 Хөсәйен Русембәт улы
34:27 Ҡотло Ҡыйҡыуат улы
35:28 Ҡасбулат Баныҡ улы

XIII дәрәжә

36:31 * Бикташ улы
37:31 Күсәрбай Бикташ улы
38:32 Монасип Илсеғол улы
39:34 Таймаҫ Ҡотло улы

40:35 Айтуған Ҡасбулат улы

XIV дәрәжә

41:37 * Күсәрбай улы
42:39 Көсөк Таймаҫ улы
43:40 Ғәбделкәрим Айтуған улы

XV дәрәжә

44:42 Бәшир Көсөк улы
45:42 Әбүбәкер Көсөк улы

XVI дәрәжә

46:45 Ғәбделвәхит Әбүбәкер улы

XVII дәрәжә

47:46 Хәмитйән Ғәбделвәхит улы

XVIII дәрәжә

48:47 Әхмәтйән Хәмитйән улы

### Туҡмайрыҡ нәҫеле

1 Туман бей

I дәрәжә

2:1 Киндар бей

II дәрәжә

3:2 Нахмәт бей

III дәрәжә

4:3 Басман бей

IV дәрәжә

5:4 Айҡын бей

V дәрәжә

6:5 Айҙарали бей



VI дәрәжә

7:6 Шәғәле Шаһман кенәз

VII дәрәжә

8:7 Буралы

VIII дәрәжә

9:8 Туҡмайрыҡ Буралы улы

IX дәрәжә

10:9 Аҡһары Туҡмайрыҡ улы

X дәрәжә

11:10 Бикүшәй Аҡһары улы
12:10 Йыйынбай Аҡһары улы
13:10 Ноғай Аҡһары улы
14:10 Жилкәй Аҡһары улы

XI дәрәжә

15:11 Үләкәй Бикүшәй улы
16:12 Тенли Йыйынбай улы
17:13 Балтас Ноғай улы
18:14 Аҡтым Жилкәй улы
19:14 Шыугәрәй Жилкәй улы

XII дәрәжә

20:15 Күсемхан Үләкәй улы
21:16 Ишкыуат Тенли улы
22:17 Түкән Балтас улы
23:18 Ишрап Аҡтым улы
24:18 Күсәй Аҡтым улы
25:19 * Шыугәрәй улы
26:19 Ярылҡап Шыугәрәй улы

XIII дәрәжә

27:20 Жубаш Күсемхан улы
28:21 Солтанморат Ишкыуат улы

29:22 Ташбулат Түкән улы
30:22 Юлай Түкән улы
31:22 Сәйетбаттал Түкән улы
32:22 Ғәбделкәрим Түкән улы
33:22 Ҡаҙаҡбай Түкән улы
34:23 Ирмаш Ишрап улы
35:24 Ишмөхәмәт Күсәй улы
36:26 * Ярылҡап улы

XIV дәрәжә

37:27 Ғәиткужа Жубаш улы
38:28 Әшир Солтанморат улы
39:28 Әмир Солтанморат улы
40:30 Имәнбай Юлай улы
41:33 Йософ Ҡаҙаҡбай улы
42:34 Теләүембәт Ирмаш улы
43:34 Теләүбай Ирмаш улы
44:35 Муллаҡай Ишмөхәмәт улы
45:35 Йомағол Ишмөхәмәт улы
46:35 Әҙғол Ишмөхәмәт улы
47:35 Шәғбән Ишмөхәмәт улы
48:36 Булат * улы

XV дәрәжә

49:37 Барғына Ғәиткужа улы
50:40 Йәрмөхәмәт Имәнбай улы
51:40 Ишмөхәмәт Имәнбай улы
52:43 Сәйфелмөлөк Теләүбай улы

### Тәңребирҙе нәҫеле

1 Туман бей

I дәрәжә

2:1 Киндар бей



II дәрәжә

3:2 Нахмәт бей

III дәрәжә

4:3 Басман бей

IV дәрәжә

5:4 Айҡын бей

V дәрәжә

6:5 Айҙарали бей

VI дәрәжә

7:6 Шәғәле Шаһман кенәз

VII дәрәжә

8:7 Бураш

VIII дәрәжә

9:8 Тәңребирҙе Бураш улы

IX дәрәжә

10:9 Жаушай Тәңребирҙе улы

X дәрәжә

11:10 Тебкәй Жаушай улы
12:10 Ҡырсай Жаушай улы

XI дәрәжә

13:11 Ҡарасман Тебкәй улы
14:12 Яуай Ҡырсай улы
15:12 Кинйәғол Ҡырсай улы

XII дәрәжә

16:13 Ишбулат Ҡарасман улы
17:13 Илсеғол Ҡарасман улы
18:14 Жомай Яуай улы

19:14 Моразым Яуай улы
20:15 Муллағол Кинйәғол улы

XIII дәрәжә

21:16 Төрөмбәт Ишбулат улы
22:17 Хәсән Илсеғол улы
23:18 Ишбулат Жомай улы
24:19 Аҡбирҙе Моразым улы
25:19 Аҙнаш Моразым улы
26:19 * Моразым улы
27:20 Йәнебәк Муллағол улы
28:20 Йәғәфәр Муллағол улы
29:20 Ҡыҙбәк Муллағол улы
30:20 Мәүлет Муллағол улы
31:20 Үзбәк Муллағол улы
32:20 Ҡотош Муллағол улы

XIV дәрәжә

33:21 Әлмөхәмәт Төрөмбәт улы
34:21 Көсмөхәмәт Төрөмбәт улы
35:21 Ишмөхәмәт Төрөмбәт улы
36:22 Йәрмөхәмәт Хәсән улы
37:23 Ишморат Ишбулат улы
38:23 Өмөтбай Ишбулат улы
39:23 Байдәүләт Ишбулат улы
40:25 Аҡмырҙа Аҙнаш улы
41:25 Ишмырҙа Аҙнаш улы
42:27 Шәрәфетдин Йәнебәк улы
43:28 Хәбибулла Йәғәфәр улы
44:29 Хоҙайбирҙе Ҡыҙбәк улы
45:30 Мөхәмәтхәсән Мәүлет улы
46:30 Яныш Мәүлет улы
47:30 Хөсәйен Мәүлет улы
48:30 Хоҙайбирҙе Мәүлет улы
49:31 Зөлҡәрнәй Үзбәк улы
50:31 Кинйәбай Үзбәк улы
51:31 Муллабай Үзбәк улы
52:31 Аҙнабай Үзбәк улы
53:31 Байғужа Үзбәк улы



54:32 Күсәй Ҡотош улы

XV дәрәжә

55:34 Яңыбирҙе Көсмөхәмәт улы
56:35 Мөхәмәтрәхим Ишмөхәмәт улы
57:37 Хәбибитдин Ишморат улы
58:38 Нәсибулла Өмөтбай улы
59:39 Сәләхетдин Байдәүләт улы
60:39 Шиһабетдин Байдәүләт улы
61:39 Шаһимәрҙән Байдәүләт улы
62:40 * Аҡмырҙа улы
63:40 * Аҡмырҙа улы
64:41 Байбулды Ишмырҙа улы
65:43 Өмәтҡол Хәбибулла улы
66:43 Дәүләтҡол Хәбибулла улы
67:45 Хәйерлебәшәр Мөхәмәтхәсән улы
68:46 Мөхәмәтғәли Яныш улы
69:46 Мөхәмәткәрим Яныш улы
70:47 Ғәббәс Хөсәйен улы
71:47 Мөхәмәтрәхим Хөсәйен улы
72:47 Мөхәмәтйәр Хөсәйен улы
73:48 Ҡорбанғол Хоҙайбирҙе улы
74:48 Ҡорбанғәли Хоҙайбирҙе улы
75:48 Ҡунаҡҡол Хоҙайбирҙе улы
76:48 Муллағол Хоҙайбирҙе улы
77:48 Кинйәбулат Хоҙайбирҙе улы
78:50 Мөхтәрулла Кинйәбай улы
79:50 * Кинйәбай улы
80:50 Ғөбәйҙулла Кинйәбай улы
81:50 Ғабдулла Кинйәбай улы
82:50 Кәлимулла Кинйәбай улы
83:53 Ғәйнулла Байғужа улы

XVI дәрәжә

84:55 Ҡужабирҙе Яңыбирҙе улы
85:56 Мөхәмәтшәриф Мөхәмәтрәхим улы
86:56 Мөхәмәтйәр Мөхәмәтрәхим улы
87:57 Хафизитдин Хәбибитдин улы
88:58 Һиҙиәтулла Нәсибулла улы

4-се ҡушымта

# КӨЙӨРГӘҘЕ РАЙОНЫ ТҮКӘН АУЫЛЫНЫҢ ШӘҒӘЛЕ ШАҺМАН НӘҪЕЛЕ ШӘЖӘРӘҺЕ

1 Таман бей

I дәрәжә

2:1 Балун бей

II дәрәжә

3:2 Тамъян бей

III дәрәжә

4:3 Уразай бей

IV дәрәжә

5:4 Мотай бей

V дәрәжә

6:5 Ҡырай бей

VI дәрәжә

7:6 Шәғәле Шаһман кенәз

VII дәрәжә

8:7 Сеүә
9:7 Буралы
10:7 Бураш

VIII дәрәжә

11:8 Тежәмәргән Сеүә улы
12:8 Тижадәүләт Сеүә улы
13:9 Илсекәй Буралы улы
14:9 Тоҡомбәт Буралы улы
15:9 Туҡмайрыҡ Буралы улы
16:10 Яныбирҙе Бураш улы
17:10 Тәңребирҙе Бураш улы



IX дәрәжә

18:15 Аҡһары Туҡмайрыҡ улы

X дәрәжә

19:18 Жилкәй Аҡһары улы
20:18 Йыйынбай Аҡһары улы
21:18 Ноғай Аҡһары улы

XI дәрәжә

22:19 Аҡтым Жилкәй улы
23:19 Шыугәрәй Жилкәй улы
24:20 Тенли Йыйынбай улы
25:21 Балтас Ноғай улы

XII дәрәжә

26:22 Иҫәрҡәп Аҡтым улы
27:23 Ярлыҡап Шыугәрәй улы
28:23 Сибек Шыугәрәй улы
29:23 Бикшауай Шыугәрәй улы
30:24 Ишҡыуат Тенли улы
31:25 Түкән Балтас улы

XIII дәрәжә

32:26 Ирмиш Иҫәрҡәп улы
33:30 Әшир Ишҡыуат улы
34:30 Әмир Ишҡыуат улы
35:31 Аманбай Түкән улы
36:31 Амангилде Түкән улы
37:31 Юлай Түкән улы
38:31 Ҡаҙаҡбай Түкән улы

XIV дәрәжә

39:36 Ҡолмөхәмәт Амангилде улы
40:36 Ишмөхәмәт Амангилде улы
41:38 Сәйетбаттал Ҡаҙаҡбай улы
42:38 Әбделкәрим Ҡаҙаҡбай улы
43:38 Йософ Ҡаҙаҡбай улы

XV дәрәжә

44:39 Нурмөхәмәт Ҡолмөхәмәт улы
45:39 Ҡәләм Ҡолмөхәмәт улы
46:39 Килмөхәмәт Ҡолмөхәмәт улы
47:40 Иҫәнғол Ишмөхәмәт улы
48:41 Абдрахман Сәйетбаттал улы
49:42 Зөлҡәрнәй Әбделкәрим улы
50:43 Харис Йософ улы

XVI дәрәжә

51:44 Ильяс Нурмөхәмәт улы
52:45 Ҡаһарман Ҡәләм улы
53:46 Әлмөхәмәт Килмөхәмәт улы
54:47 Исмәғил Иҫәнғол улы
55:48 Суфиян Абдрахман улы
56:48 Сәхипкәрәй Абдрахман улы
57:49 Лоҡман Зөлҡәрнәй улы
58:50 Солтанмәзит Харис улы
59:50 Солтанғәзиз Харис улы
60:50 Кинйәмырҙа Харис улы

XVII дәрәжә

61:51 Миңлебулат Ильяс улы
62:51 Миңлеғәли Ильяс улы
63:52 Ғариф Ҡаһарман улы
64:52 Зариф Ҡаһарман улы
65:53 Бикмөхәмәт Әлмөхәмәт улы
66:54 Ноғман Исмәғил улы
67:54 Мирхәйҙәр Исмәғил улы
68:54 Мирсаяф Исмәғил улы
69:55 Мәхиән Суфиян улы
70:56 Фәйзрахман Сәхипкәрәй улы
71:56 Ғөбәйҙулла Сәхипкәрәй улы
72:56 Йософ Сәхипкәрәй улы
73:57 Шириядан Лоҡман улы
74:58 Сәхиулла Солтанмәзит улы



75:58 Ғәтиәтулла Солтанмәзит улы
76:58 Һиҙиәтулла Солтанмәзит улы
77:59 Тимерхан Солтанғәзиз улы
78:60 Әбдрәфиҡ Кинйәмырҙа улы

XVIII дәрәжә

79:63 Сабирйән Ғариф улы
80:63 Рәхимйән Ғариф улы
81:64 Иршат Зариф улы
82:65 Ҡотлоюл Бикмөхәмәт улы
83:67 Мирғәлим Мирхәйҙәр улы
84:67 Мирхәким Мирхәйҙәр улы
85:67 Мирсаяф Мирхәйҙәр улы
86:67 Миҙхәт Мирхәйҙәр улы
87:69 Нәкип Мәхиән улы
88:70 Фәтхрахман Фәйзрахман улы
89:70 Малик Фәйзрахман улы
90:70 Абдулла Фәйзрахман улы
91:72 Юныс Йософ улы
92:73 Сәлимгәрәй Шириядан улы
93:74 Камил Сәхиулла улы
94:74 Һабил Сәхиулла улы
95:75 Янсон Ғәтиәтулла улы
96:75 Байрон Ғәтиәтулла улы
97:76 Ғайса Һиҙиәтулла улы
98:76 Ғәфүр Һиҙиәтулла улы
99:76 Ҡотдос Һиҙиәтулла улы
100:77 Ноғман Тимерхан улы
101:77 Бәгҙәт Тимерхан улы
102:77 Хәбибулла Тимерхан улы
103:77 Тимерйән Тимерхан улы
104:78 Әбдрәшит Әбдрәфиҡ улы
105:78 Әбделхәй Әбдрәфиҡ улы

XIX дәрәжә

106:79 Хәсән Сабирйән улы
107:80 Руслан Рәхимйән улы

108:80 Әмир Рәхимйән улы
109:80 Дамир Рәхимйән улы
110:82 Йәһүҙә Ҡотлоюл улы
111:82 Байтүрә Ҡотлоюл улы
112:82 Нур Ҡотлоюл улы
113:82 Зиннур Ҡотлоюл улы
114:82 Рәхмәтулла Ҡотлоюл улы
115:83 Фәрғәт Мирғәлим улы
116:83 Рәфҡәт Мирғәлим улы
117:83 Тәлғәт Мирғәлим улы
118:84 Ринат Мирхәким улы
119:84 Фәрит Мирхәким улы
120:93 Урал Камил улы
121:94 Ринат Һабил улы
122:94 Рөстәм Һабил улы
123:97 Әксән Ғайса улы
124:97 Әкрәм Ғайса улы
125:97 Әмир Ғайса улы
126:99 Илдус Ҡотдос улы
127:101 Нурислам Бәғҙәт улы
128:105 Таһир Әбделхәй улы

XX дәрәжә

129:108 Артур Әмир улы
130:108 Альберт Әмир улы
131:116 Марат Рәфҡәт улы
132:116 Марсель Рәфҡәт улы
133:117 Наил Тәлғәт улы
134:118 Марат Ринат улы
135:119 Рәшит Фәрит улы
136:119 Ислам Фәрит улы
137:125 Артур Әмир улы
138:125 Ренат Әмир улы

XXI дәрәжә

139:129 Динар Артур улы
140:130 Вилдан Альберт улы
141:134 Руслан Марат улы



5-се ҡушымта

## МӘЛӘҮЕЗ РАЙОНЫ ОЛО МОҠАС, ЯҠТЫКҮЛ, ЯҢАУЫЛ ҺӘМ СМАҠ АУЫЛДАРЫНЫҢ ШӘҒӘЛЕ ШАҺМАН НӘҪЕЛЕ ШӘЖӘРӘҺЕ

1 Таман бей

I дәрәжә

2:1 Балун бей

II дәрәжә

3:2 Тамъян бей

III дәрәжә

4:3 Уразай бей

IV дәрәжә

5:4 Мотай бей

V дәрәжә

6:5 Ҡара бей

VI дәрәжә

7:6 Шаһман Ҡара бей улы
8:6 Абдрахман Ҡара бей улы
9:6 Шығай Ҡара бей улы

VII дәрәжә

10:7 Шәғәле кенәз Шаһман улы
11:8 Ҡотор Абдрахман улы
12:8 Таһир Абдрахман улы
13:9 Хөсәйен Шығай улы
14:9 Үткәл Шығай улы

VIII дәрәжә

15:10 Сеүә Шәғәле улы

16:10 Буралы Шәғәле улы
17:10 Бураш Шәғәле улы
18:11 Сермән Ҡотор улы
19:12 Йыһангир Таһир улы

IX дәрәжә

20:15 Тежәмәргән Сеүә улы
21:15 Тижадәүләт Сеүә улы
22:16 Туҡмайрыҡ Буралы улы
23:16 Илсекәй Буралы улы
24:16 Тоҡомбәт Буралы улы
25:17 Бикәй Бураш улы
26:17 Яңыбирҙе кенәз Бураш улы
27:17 Тәңребирҙе Бураш улы
28:18 Аҡкөсөк Сермән улы
29:18 Ҡаракөсөк Сермән улы

X дәрәжә

30:23 Теләүкәй Илсекәй улы

XI дәрәжә

31:30 Йомағужа Теләүкәй улы
32:30 Моҡас Теләүкәй улы
33:30 Әтекәй Теләүкәй улы

XII дәрәжә

34:32 Ҡасҡын Моҡас улы
